Әхәт Сәлихов

# Әхмәтзәки Вәлидиҙең Рәсәйҙәге ғилми эшмәкәрлеге



Рәсәй Фәндәр академияһы
Өфө фәнни үҙәге
Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты

Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы
Гуманитар фәндәр бүлеге

## Әхәт Сәлихов

# Әхмәтзәки Вәлидиҙең Рәсәйҙәге ғилми эшмәкәрлеге

Өфө
"Нефтегазовое дело"
2005

УДК 930:947
ББК 63.3
С 16

*Башкортостан Республикаһы Фәндәр академияһы Гуманитар Фәндәр бүлегенең карары буйынса һәм Фундаменталь фәндәр фондының матди ярҙамында баҫыла.*

Сәлихов Ә.F. Әхмәтзәки Вәлидиҙең Рәсәйҙәге ғилми эшмәкәрлеге. Өфө: Нефтегазовое дело, 2005. 170 б.

ISBN 5-98755-012-2

Монография XX быуат Башкортостан тарихының көнүҙәк мәсьәләләренең береһе – күренекле шәркиәтсе Әхмәтзәки Вәлидиҙең ғилми мираҫын өйрәнеүгә бағышлана. Тикшеренеүҙә ғалимдың революцияға тиклемге хеҙмәттәре, замандаштарының тәнкиттәре, архив материалдары кулланылған. Улар нигеҙендә Ә.Вәлидиҙең Рәсәйҙәге ғилми-тикшеренеү эшмәкәрлеге төрлө яклап һүрәтләнә.

Китап ғилми хеҙмәткәрҙәргә, студенттарға һәм Ә.Вәлидиҙең эшмәкәрлеге менән кыҙыкһыныусыларға тәғәйенләнә.

*Башкортостан Фәндәр академияһы Гуманитар Фәндәр бүлеге тарафынан баҫмаға тәкдим ителде.*

*Мөхәррире:*
Башкортостан Республикаһы Фәндәр Академияһының мөхбир ағзаһы, профессор И.F.Ғәләүетдинов

*Рецензенттары:*
тарих фәндәре докторы, профессор С.Ф.Касимов;
тарих фәндәре докторы, профессор М.М.Колшәрипов;
философия фәндәре кандидаты, доцент Ә.М.Юлдашбаев

ISBN 5-98755-012-2

© Сәлихов Ә.F., 2005
© Издательство
"Нефтегазовое дело", 2005

*Тарихсыларҙың дөрөҫ итеп
тарих яҙыу кеүек ауыр эше бар.
Ышаныслы тарих йәки хәҡиҡәт
бик күп тарихи мәғлүмәттәрҙе
үтә нескә иләк менән иләгәндән һуң
ҡалғандарҙан ғына хасил була ала.*
Әхмәтзәки Вәлиди. 1909 йыл.

# ӘХМӘТЗӘКИ ВӘЛИДИҘЕҢ РӘСӘЙҘӘГЕ ҒИЛМИ ЭШМӘКӘРЛЕГЕН ӨЙРӘНЕҮ

Әхмәтзәки Вәлиди сәйәси эшмәкәр, Башҡортостан автономияһын ойоштороусы һәм танылған шәрҡиәтсе-ғалим булараҡ бөтә донъяға билдәле. Ваҡытында Ватанын ташлап китергә мәжбүр булған мәшһүр яҡташыбыҙҙың исеме Совет хөкүмәтенең 70 йыллыҡ идара итеү дәүерендә шул осорҙа хөкөм һөргән рәсми идеология күҙлегенән телгә алынды. Бындай ҡараш 1922 йылдың ғинуарында Стәрлетамаҡ ҡалаһында үткәрелгән ВКП(б)-ның V Башҡорт конференцияһында формалаша[1]. Шул ваҡыттан алып уның тормошон һәм ғилми мираҫын өйрәнеүгә беҙҙең тарих фәнендә етерлек иғтибар бирелмәне.

XX быуаттың мәшһүр ориенталисы, күп һанлы һәм төрлө йүнәлешле хеҙмәттәр авторы Ә.Вәлидиҙең ғилми эшмәкәрлеге Рәсәйҙә революцияға тиклем үк башланғайны.

Ул 1890 йылдың 10 декабрендә Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙенең Көҙән ауылында (хәҙерге Ишембай районы)[2] тыуған.

Әхмәтзәки Вәлиди сығышы менән үҙ заманы өсөн бик уҡымышлы ғаиләнән. Уның атаһы – «Сәфәр әл-Хижаз» («Хижазға сәйәхәт»), «Һатлыҡ улының хаяты» («Һатлыҡ улының тормошо») әҫәрҙәренең авторы, атаһының ағаһы Вәли хәҙрәт шәжәрәләр һәм дастандар белгесе булараҡ билдәле, ә олатаһы Хәбибназар Үтәки – «Хикмәт әл-ғәйн» («Нәғим Әл-Ҡотайбаның физика һәм метафизика фәндәренә аңлатмалары»), «Мостафад әл-әхбәр»гә аңлатмалар», «Мифтах әт-тәуарих» («Тарих асҡыстары») әҫәрҙәре авторы, «Нәуадир» әҫәрен ғәрәпсәнән төрки теленә тәржемә итеүсе. Х.Үтәкиҙең ижады башҡорт әҙәбиәте тарихына ингән[3].

Әхмәтзәки Вәлиди ғәрәп, төрки, рус телдәренең тәүге һабаҡтарын атаһы Әхмәтшаһ хәҙрәт тотҡан мәҙрәсәлә ала. Буласаҡ ғалимдың әсәһе, Өммөлхаят абыстай, фарсы телен яҡшы белгән һәм улына ла өйрәткән.

Һуңынан Ә.Вәлиди, күренекле татар ғалимы Шиһабетдин Мәржәнизең шәкерте булып, әсәһе яғынан олатаһы Хәбибназар Үтәкизең мәҙрәсәһендә уҡыуын дауам итә.

Артабан, 1908 йылда, уҡыу теләге менән янған Әхмәтзәки Вәлиди тыуған ауылынан сығып китә. Ул Ҡазанға бара һәм «Ҡасимиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Бер йылдан «Ҡасимиә» мәҙрәсәһен тамамлағандан һуң, уны төрки халыҡтарының тарихы һәм ғәрәп әҙәбиәте мөғәллиме сифатында ошо мәҙрәсәлә ҡалдыралар.

1908 йылдан алып Ә.Вәлидизең мәҡәләләре төрлө төрки телле гәзит-журналдарҙа баҫыла башлай. 1912 йылда уның «Төрк вә татар тарихы» исемле тәүге китабы сыға.

1913–1914 йылдарҙа боронғо көнсығыш ҡульяҙмаларын өйрәнеү өсөн ике мәртәбә Урта Азияға командировкаға бара. Сәйәхәттең һөҙөмтәләре булған мәҡәләләре төрки телле журналдарҙа һәм Рәсәй фәнни баҫмаларында донъя күрә.

1916 йылдан алып Ә.Вәлиди илебеҙҙең сәйәси тормошонда әүҙем ҡатнаша башлай. 1917 йылдың февраль ваҡиғаларынан һуң ул үҙен тулыһынса сәйәси көрәшкә арнай. Шул уҡ ваҡытта ғилми эҙләнеүҙәренән дә туҡтамай, хатта 1918 йылда ҡулға алынған сағында ла эшен дауам итә[4]. 1917–1920 йылдарҙағы хәл-ваҡиғалар уны илдең иң күренекле сәйәси эшмәкәрҙәренең береһенә әүерелдерә. Совет хөкүмәте менән араларҙы өҙгәс, Ә.Вәлиди өсөн бер генә юл ҡала – тыуған илдән китеү.

1923 йылдан алып Әхмәтзәки Вәлидизең сит илдәге тормошо һәм ғилми эшмәкәрлеге башлана. Ул ныҡышмалы рәүештә фән үрҙәрен яулауын дауам итә. Тарих буйынса бихисап сығанаҡтарға юлыға, уларға таянып мәҡәләләр яҙа, китаптар сығара, Вена университетын тамамлай һәм Ибн Фаҙландың «сәйәхәт-намәһен» тикшереүгә бағышланған диссертацияһын яҡлай. Ә.Вәлиди эмиграцияла барлығы 300-ҙән ашыу хеҙмәт нәшер итә. Тормош юлында осраған ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығып, ул бөтә донъяға билдәле ғалим булып таныла.

Ә.Вәлиди, Ибн Фаҙландың «төрки халҡының бәләкәй тарихи энциклопедияһы» тип иҫәпләнгән «Сәйәхәт-намә»һен табып, баҫтырып сығара[5], «Төрки халыҡтарының дөйөм тарихына инеш», «Уғыҙ дастаны», «Тарихта ысул», «Ҡорьән һәм төркиҙәр», «Хәҙерге Төркөстан һәм уның яңы тарихы» кеүек тюркология фәне өсөн мөһим китаптар нәшер итә. Герберт Янски уның «Төрки халыҡтарының дөйөм тарихына инеш» китабын «йәш тюркологтарға юл күрһәтеүсе маяҡ»[6] тип атай.

Әхмәтзәки Вәлиди ғүмеренең һуңғы йылдарында бик ҙур уйҙар, пландар менән йәшәй. Шуларҙың береһе – «Төрки халыҡтарының мәҙәниәте буйынса белешмә» исемле күп томлы хеҙмәт әҙерләү[7]. Сөнки «төрки ха-



Ноғай юлы Юрматы волосы Тәлтем аймағы башҡорттары Буранғол Өмөрҙаҡов һәм иптәштәренең Сәйет бисҭәһенең сауҙагәрҙәре Хөсәйен Абдрахманов һәм иптәштәренең аҫаба ерҙәрен 50 йылға арендаға биреү тураһында 1757 йылда төҙөлгән килешеү. Был документҡа ҡул ҡуйған 42 бейҙәр араһында Көҙән ауылында йәшәүсе Ә.Вәлидиҙең ата-бабалары Айҙаҡ менән Сураҡтың да имзалары бар.

(1956 йылда Өфөлә донъя күргән “Башҡортостан АССР-ы тарихы буйынса материалдар” китабында баҫылған).

лыҡтарының тарихын өйрәнеүселәр һәм белгестәр араһында беренселәр рәтендә тора, бөтә булмышы менән төрки була»[8]. Шуға ла Вәлидизең ғилми хеҙмәттәренә тарихсыларҙың, әҙәбиәтселәрҙең, телселәрҙең һәм философтарҙың мөрәжәғәт итеүе ғәжәп түгел. Унын ғилми ижады бөтә яҡтан да өйрәнеүгә лайыҡлы.

Беҙҙең илдә булып үткән социаль-иҡтисади һәм сәйәси үҙгәрештәр халыҡтарҙың милли үҙаңы үҫешенә ҙур этәргес көс булды. Милли мәҙәниәттең тарихи тамырҙарына мөрәжәғәт итеү этностың тергеҙелеүенә булышлыҡ итә.



Ә.Вәлидизең ата-әсәһе һәм Ғәбдерәүеф ҡустыһы.



Ә.Вәлидизең олатаһы Хәбибназар Үтәки.

Билдәле булыуынса, халыҡтың мәҙәниәтен үҫтереүҙә уның мәшһүр шәхестәренең ижади эшмәкәрлеге мөһим роль уйнай. Милләт составында «социаль ысынбарлыҡты аңлай һәм халыҡ массаларына йоғонто яһай белгән ошондай шәхестәрҙең»[9] булыуы халыҡтың социаль әүҙемлегенең нигеҙе булып тора.

Төрки донъяһының этнокультур процестарында эшмәкәрлектәре туранан-тура төрки халҡының теле, тарихы, әҙәбиәте, мәҙәниәте менән бәйле булған билдәле ғалимдарҙың әһәмиәте ҙур. Улар тарафынан төҙөлгән төрки мәҙәниәтенең үҫеш моделдәре ошо этник йәмғиәттәр йәшәгән

төбәктәрҙә ижтимағи фекерҙең формалашыуына булышлыҡ итә. Юғары кимәлдәге белемгә эйә булыусыларҙың эшмәкәрлеге халыҡтарҙың донъяға ҡарашын билдәләй.

Сығышы менән башҡорт милләтенән булған Ә.Вәлиди – XX быуаттың билдәле Көнсығыш белгестәренең береһе. Үҙенең революцияға тиклемге китаптарында һәм мәҡәләләрендә үк, мәҫәлән, «Хәлфиндәр», «Лотфи һәм уның диуаны», «Көнсығыш хаҡында яңы хеҙмәттәр», «Бөрйән башҡорттары араһында», «Романов сөләләһе батшалыҡ иткән дәүерҙә Россия дәүләте һәм мосолмандар» кеүек әҫәрҙәрендә ул төрки халыҡтарының милли мәсьәләләренә ҡағылып үтә. Тик, үкенескә ҡаршы, беҙҙең илдә оҙаҡ йылдар уның ғилми хеҙмәттәре баҫылманы һәм өйрәнелмәне. Һуңғы йылдарҙа ғына, хәл ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе. Ғалимдың хеҙмәттәре ваҡытлы матбуғат биттәрендә йыш баҫыла башланы, уның ғилми мираҫын тулы һәм объектив өйрәнеү кәрәклеге килеп тыуҙы. Башҡортостан Республикаһы Президентының 1996 йылдың 4 сентябрендә сығарылған «Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың, Абдулҡадир Инандың, Ғәлимйән Тағандың ғилми мираҫтарын Башҡортостанға кире ҡайтарыу һәм уларҙың иҫтәлеген мәңгеләштереү буйынса саралар» тураһындағы указы ла ошо өлкәләге тикшеренеүҙәрҙең актуаллеген күрһәтә.

Әхмәтзәки Вәлиди Рәсәйҙә үк әле төрки телле халыҡтар араһында ғалим һәм шәрҡиәтсе булараҡ билдәле ине. Шул ваҡытта уҡ ул Рәсәйҙең билдәле ғалимдары В.В.Бартольд, Н.Ф.Катанов һәм башҡаларҙың иғтибарын үҙенә йәлеп итте. Уның фәнгә булған ҡыҙыҡһыныуы ла Рәсәйҙә башлана. Тыуған илендә ул бер нисә китап һәм тиҫтәләгән мәҡәлә нәшер итә. Ләкин Ә.Вәлидиҙең революцияға тиклемге ижади мираҫы махсус рәүештә өйрәнелмәгән. Ә.Вәлидиҙең тыуған илендәге мираҫын өйрәнеү уның ғалим булараҡ формалашыуын, шул осорҙағы Урал-Волга буйы регионында һәм тотош Рәсәйҙәге ғилми тикшеренеүҙәрҙең үҫешен асыҡларға ярҙам итәсәк.

Ә.Вәлидиҙең тормошон һәм эшмәкәрлеген өйрәнеүҙе беренсе булып сит ил ғалимдары башлай. 1951 йылда Истанбулда Көнсығышты өйрәнеүселәрҙең XXII халыҡ-ара конгресы булып үтә. Уның материалдары Ә.Вәлидигә бағышлап нәшер ителә. Был ҙур күләмле йыйынтыҡҡа (500 бит) Г.Янскиҙың мәшһүр яҡташыбыҙҙың тормош юлын сағылдырған мәҡәләһе ингән. Г.Янски М.Джексон менән берлектә Ә.Вәлиди хеҙмәттәренең библиографияһын төҙөй. Шул библиография һәм М.Джексон яҙмалары нигеҙендә Абдулҡадир Инан 1956–1957 йылдарҙа «Төрөк йорто» журналының 262–264 һандарында «Профессор, доктор Әхмәт Зәки Вәлидиҙең ғилми эшмәкәрлеге» исемле ҙур мәҡәлә баҫтырып сығара. Был мәҡәләлә ғалимдың революцияға тиклемге эшмәкәрлеге яҡтыртыла.

1969 йылда Истанбулда «Хикмәт газетеджилик» нәшриәтендә Ә.Вәлидиҙең «Хәтирәләр: Төркөстан мосолмандарының һәм башҡа көнсығыш төрки мосолмандарының милли йәшәйеште һәм мәҙәниәтте һаҡлау өсөн көрәше» исемле китабы донъя күрә. Үҙенең тормош һәм ижад юлын бәйән иткән был китабында күбеһенсә эмиграцияға тиклемге фәнни хеҙмәттәрен тәфсирләп һүрәтләй. Ғалимдың тормошон һәм эшмәкәрлеген, шулай уҡ XX быуат башы Рәсәй тарихын өйрәнеүселәр йыш ҡына ошо хеҙмәткә таяналар. Шуларҙың бер нисәһен атап үтәйек:

1. Esin Seyfulla Merhum Prof. Dr. Zeki Velidi Togan'ın Hatıralar adlı eseri («Мәрхүм профессор Зәки Вәлиди Туғандың «Хәтирәләр»е») // Islam Tetkikleri EnstitüsüDergisi. 1987. Cild IV. 3–4 Kısım. S. 7–17.

2. Bergdolt F. Der Geistige Hintergrund des Turkischen Historikers Ahmet Zeki Velidi Togan nach seinen Memorien (Төрөк тарихсыһы Әхмәт Зәки Вәлиди Туғандың рухи тамырҙары: үҙенең «Хәтирәләр»е буйынса). Berlin, 1981. 140 s.

3. Юлдашбаев Ә.М. Һәйкәлдәргә лайыҡ шәхес: Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың тыуыуына 100 йыл // Ағиҙел. 1991. №12. 10–12 б.

4. Касимов С.Ф. «Хәтирәләр» («Воспоминания») Ахметзаки Валиди Тугана как ценнейший источник по истории национально-государственного строительства Башкирии // Востоковедение в Башкортостане. История. Культура. Вып. 2: Международная научная конференция по проблеме «История и культура народов Евразии. Древность, средневековье и современность». Уфа, 1992. №.22–24.

Был исемлектә телгә алынған немец ғалимы Фридрих Бергдольттың тикшеренеүҙәре – Ә.Вәлидиҙең «Хәтирәләр»ен өйрәнеүгә бағышланған тәүге ҙур хеҙмәт. Ул 1981 йылда Берлинда «Клаус Шварц Ферлаг» нәшриәтендә донъя күрә. Сығанаҡ булараҡ был китапта Ә.Вәлидиҙең «Хәтирәләр»е менән бер рәттән унының ҡатыны Нәзмиә Туған менән әңгәмәһе ҡушымтала бирелгән.

Төркиәлә Вәлидиҙең фәнни эшмәкәрлеген өйрәнеүгә унының уҡыусыһы, Измир ҡалаһындағы Эгей университетының профессоры Тунжер Байҡара ҙур өлөш индерә. Ул үҙенең остазы хаҡында күп мәҡәләләр яҙа. Төрөк Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы тарафынан сығарылған «Бөйөк төрөктәр» серияһында унының 1989 йылда «Зәки Вәлиди Туған» исемле китабы сыға. Автор хеҙмәттәрендә Ә.Вәлидиҙең «Хәтирәләр»ен киң файҙалана, уны «бай сығанаҡ» тип баһалай[10].

Т.Байҡара Ә.Вәлидиҙең хеҙмәттәренең библиографияһын төҙөү буйынса ҙур эш башҡара. Мәшһүр ғалимдың мираҫын өйрәнеүҙә күрһәткән хеҙмәте өсөн Т.Байҡара Башҡортостан Республикаһының фәнни, ижтимағи һәм эшҡыуарҙар ойошмалары тарафынан булдырылған Ә.Вәлиди Туған исемендәге премияның беренсе лауреаты булды[11].



سَفَرُ الحِجَازْ

للامام احمدشاه بن احمدجان القزانی .

Әхмәтша Вәлидиҙең "Сәфәр әл-Хижаз" исемле китабының титул бите.

Төркиәлә Ә.Вәлидигә бағышланған бер нисә баҫма донъя күрә. Үрҙә әйтеп үтелгән Көнсығышты өйрәнеүселәрҙең 1951 йылда үткән XXII Халыҡ-ара конгресы материалдарының йыйынтығынан тыш, Ә.Вәлидиҙең вафат булыуына бер йыл тулыу айҡанлы, уға «Отюкен» журналының июль айының һаны бағышлана. Ә 1977 йылда Истанбулда «Ислам тикшеренеүҙәре институты журналы»ның махсус һаны сығарыла (Т.5, вып.1–4). Бындағы мәҡәләләр баҫманың булдырыусыһы, уның тәүге мөхәррире, Ислам тикшеренеүҙәре институтына нигеҙ һалыусыһы Ә.Вәлидигә арнала. 1985 йылда Эрзерум ҡалаһында «Әҙәбиәт факультеты тикшеренеүҙәре журналы»ның уға бағышланған һаны донъя күрә. 1994 йылда «Төрөк усаҡтары» ойошмаһы ғалимдың вафатына 24 йыл тулыу айҡанлы Истанбулда «Еңелмәгән байраҡ: Ә.Зәки Вәлиди Туған» исемле китап нәшер итә. Был китапҡа төрлө авторҙарҙың мәҡәләһе ингән. Улар араһында ғалимдың улы Сүбидәй Туғандың «Ә.Зәки Вәлидиҙең донъяға ҡарашының үҫеше» исемле мәҡәләһе лә бар. Ф.Бергдольттың күрһәтелгән хеҙмәтен ул сығанаҡ итеп файҙалана. Мәҡәләлә Ә.Вәлидигә йоғонто яһаған мөхиттең роле ҡарала.

Хәҙер ҙә Төркиәнең ваҡытлы матбуғат биттәрендә йыш ҡына Ә.Вәлиди хаҡында мәҡәләләр осратырға була.


V

حاجی ایدی رحمة الله علیه ایکنچی برادری ملا محمد طاهر حضرتلرنک
اورنینه ایدیشن بولب حالا حضرتلرنک قایم مقامی در ۳نچی
برادری ملا محمد ظریف طاشبولاق [illegible] ۴نچی برادری
عبد الرحمن مخدوم انکاری [illegible] قالمش [illegible] جناب حق
صبر جمیل برورسن حضرتلرنک اولکی رفیقه سی [illegible] بنت
لقمان دور آندان [illegible] وجود اولب وباشقه بالا بولمادی
۲نچی رفیقه سی میسره بنت نبی الله دور ۳نچی [illegible]
دورت بالا بولب باشقه بالاسی [illegible] یاشنده وفات بولدی
ابراهیم [illegible] یاشنده وفات [illegible] حالا اوغلی احمد
۱۸ یاشنده ۳نچی [illegible] یاشنده در حضرت
حیاتنده بایلق برله توردی هر وقت مسافرلر بولب ایشکلری هر
کمکه آچق هر کمسه محتاج لره [illegible] قیلور سان اولب اچیق
آچق یوزلی وفصیح سوزلی ایدی کوب وقت علما مجلسی
یا صاحب خوش [illegible] بولور ایدی [illegible]
مخلص مریدلری و تلمیذلری برله خصوصی [illegible] مجلس
بولور ایدی [illegible] شاکرد لرندان شعر وابیاتلر
اوقتورسان ایدی گرچه اوزی شاعر اولماسه ده ذکر
وثنانی مشتمل بولغان خصوصا مدح النبی کبی شعرلرنی
اوقتیب [illegible] وقت [illegible] کیف [illegible]

Әхмәтша Вәлидиҙең үҙ ҡулы менән яҙған
“Һатлыҡ улының хаяты” исемле әҫәренән бер өҙөк.

Әхмәтзәки Вәлидизең исеме беҙҙең илдә тик һуңғы йылдарҙа ғына ыңғай яҡтан телгә алына башланы[12]. Беҙҙең ғалимдар сит ил тикшеренеүселәре һәм «Хәтирәләр» эҙенән бара тиһәк, һис яңылышмабыҙ.

Рәсәйҙәге үҙгәртеп ҡороу йылдарынан һуң Ә.Вәлиди тураһында тәүге хеҙмәт – Ғ.Б.Хөсәйеновтың 1990 йылда «Ағиҙел» журналында сыҡҡан «Тарихсы Әхмәтзәки Вәлиди Туған» исемле мәҡәләһе[13]. Унда ғалимдың ғилми эшмәкәрлегенә дөйөм баһа бирелә һәм унын революцияға тиклемге хеҙмәттәре тикшерелә.

1990 йылдың 20–21 декабрендә Ә.Туғандың тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы Өфөлә үткән ғилми конференцияның материалдары йыйынтығында Ғ.Хөсәйеновтың «Әхмәтзәки Вәлиди Туған – күренекле ғалим, шәрҡиәтсе һәм бөйөк ижтимағи эшмәкәр» исемле русса мәҡәләһе донъя күрҙе[14]. Ошо уҡ авторҙың Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың ғилми һәм сәйәси эшмәкәрлеген яҡтыртҡан мәҡәләләре башҡортса «Әҫәрҙәр» (1998) йыйынтығының 1-се томында, русса нәшер ителгән «Әҙәбиәт һәм фән» (1998) исемле һайланма әҫәрҙәр йыйынтығында баҫылып сыҡты[15].

Артабан Ә.М.Юлдашбаевтың «Һәйкәлдәргә лайыҡ шәхес: Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың тыуыуына 100 йыл»[16] исемле мәҡәләһен билдәләп үтергә кәрәк. Был мәҡәлә шуныһы менән ҡыҙыҡлы: унда тәүге тапҡыр Вәлидизең фәнни хеҙмәттәрен һөҙөмтәле өйрәнеү өсөн уларҙы өс төркөмгә бүлергә тәҡдим ителә:

1) быуат башы башҡорт һәм татар ғалимдарының рухи үҫеше күренеше булараҡ, революцияға тиклем беҙҙең илдә баҫылып сыҡҡан әҫәрҙәр;

2) сит илдә нәшер ителгән хеҙмәттәр;

3) Рәсәйҙә төрки халыҡтарының милли хәрәкәттәре тураһындағы ғилми әҫәрҙәр[17].

1991 йылда Өфөлә Ә.М.Юлдашбаевтың «Профессор Әхмәтзәки Вәлиди Туған (сәйәси һәм фәнни эшмәкәрлеге)» исемле ҙур булмаған брошюраһы сыҡты. Бында ғалимдың ҡыҫҡаса тормош юлы һәм сәйәси эшмәкәрлеге һүрәтләгән.

Ә.Вәлидизең ижади мираҫын өйрәнеү йәһәтенән Өфөлә 1990 йылдың декабрендә үткән Ә.Вәлидизең тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған халыҡ-ара фәнни конференцияның да әһәмиәте ҙур булды[18]. Сығыштарҙа унын революцияға тиклемге ғилми эшмәкәрлегенең ҡайһы бер яҡтары урын алды. Конференцияла күренекле ғалимдың ижадын артабан өйрәнеү һәм исемен мәңгеләштереү буйынса резолюция ҡабул ителде. Хәҙерге ваҡытта Әхмәтзәки Вәлиди иҫтәлегенә арналған фәнни конференциялар үткәреү традицияға әйләнде һәм улар ғәҙәттә «Вәлиди уҡыуҙары» исеме менән ойошторола. Бөгөнгө көндә барлығы дүрт конференция булып үтте.


کتاب
مفتاح التواریخ
اخطار

Хәбибназар Үтәкиҙең “Мифтах әт-тәүарих” тигән китабының тышы.

Атап кителгән конференция ҡарары буйынса Рәсәй Фәндәр Академияһы Өфө Фәнни Үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми хеҙмәткәре Р.М.Болғаҡов тарафынан Т.Байҡара әҙерләгән Ә.Вәлиди хеҙмәттәренең библиографияһы һәм унының тормош юлы тураһындағы мәҡәләләр рус теленә тәржемә ителде[19]. Ошо баҫма ярҙамында Рәсәй ғалимдары өсөн мәшһүр яҡташыбыҙҙың ижады менән тәүге тапҡыр яҡындан танышыу форсаты тыуҙы.

90-сы йылдар башынан алып Башҡортостанда Ә.Вәлиди хеҙмәттәрен ҡайтанан баҫып сығарыу эше йәнләнде. Был тәңгәлдә философия фәндәре кандидаты Ә.М.Юлдашбаев бик күп эштәр атҡарҙы. Ул шәхесебеҙҙең мираҫын өйрәнеүсе ғалимдар араһында тәүгеләр рәтендә булды. Уның байтаҡ мәҡәләләре республика матбуғатты биттәрендә, шулай уҡ фәнни баҫмаларҙа донъя күрҙе. Ә.Вәлидиҙең “Хәтирәләр”енең төрөк теленән башҡорт һәм урыҫ телдәренә тәржемәһе лә Ә.М.Юлдашбаев тарафынан башҡарылды[20]. Һүҙ ыңғайында мемуарҙың 1997 йылда Мәскәү ҡалаһында нәшер ителеүен дә билдәләп үтергә кәрәк[21]. «Хәтирәләр» өлөшләтә үзбәк һәм япон телдәренә лә тәржемә ителде[22].

Ә.Вәлиди хаҡында уҡыусылары һәм иптәштәре яҙған хеҙмәттәрҙе, унының тарафынан ебәрелгән һәм уға килгән хаттарҙы нәшер итеү буйынса ла Ә.Юлдашбаев ҙур эш башҡарҙы[23]. Ә.Вилданов менән бергә ул Вәлидиҙең «Башҡорттарҙың тарихы» һәм «Төрк вә татар тарихы» әҫәрҙәрен башҡорт телендә, ә Р.Болғаков менән Т.Байҡараның «Зәки Вәлиди Туған» исемле китабын рус телендә баҫтырып сығарҙы[24].

1997 йылда Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының «Ғилем» нәшриәтендә тарих фәндәре кандидаты И.В.Кучумов әҙерләгән «1917–1920 йылдарҙағы башҡорт милли хәрәкәте һәм Ә.Вәлиди» исемле йыйынтыҡ сыға[25]. Был йыйынтыҡҡа билдәле сит ил ғалимдарының хеҙмәттәре инә: Р.Э.Пайпстың «Советтар Союзының барлыҡҡа килеүе: 1917–1923 йылдарҙа коммунизм һәм милләтселек», Э.Х.Каррҙың «Совет Башҡортостаны хаҡында бер нисә күҙәтеү», С.А.Зеньковскийҙың «Рәсәйҙә пантюркизм һәм ислам», Ф.Бергдольттың «Төрөк тарихсыһы Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың рухи тамырҙары: үҙенең «Хәтирәләр»е буйынса». Был китапҡа ла Ә.Вәлидиҙең Рәсәйҙәге ғилми эшмәкәрлеге хаҡында материалдар ингән.

Н.У.Ишемғоловтың «Башҡорт милли хәрәкәте (1917–1921 йылдар)» исемле тарих фәндәре кандидатлығына диссертацияһында, С.Ф.Ҡасимовтың «Башҡорт халҡының милли дәүләт ҡоролошоноң барлыҡҡа килеүе (1917–1925 йылдар)» һәм М.М.Ҡолшәриповтың «Башҡорт халҡының милли хәрәкәте (1917–1921 йылдар)» исемле тарих фәндәре докторлығына диссертацияларында Ә.Вәлиди эшмәкәрлеге мөһим урын алып тора[26]. С.Ф.Ҡасимовтың һәм М.М.Ҡолшәриповтың тикшеренеүҙәре китап булып баҫылып сыҡты[27]. Социаль фәлсәфә өлкәһендә 2001 йылда Г.Н.Ишбирҙина «Ә.-З.Вәлидиҙең донъяға ҡарашы формалашыуының социаль-фәлсәфи нигеҙҙәре» исемле диссертация яҡланы[28].

Өфөлә Ә.Вәлиди, Ғ.Таған һәм А.Инандың тормошо һәм эшмәкәрлеге хаҡында «Башҡорт эмигрант ғалимдарының яҙмышы һәм мираҫы» исемле монография донъя күрҙе[29]. Бында Ә.Вәлидиҙең Рәсәйҙәге тормошо һәм ижады тураһындағы материалдар ҙа ҙур ғына урынды биләй.

Һуңғы ун йыллыҡта Үзбәкстандың бер нисә ғалимы Ә.Вәлидиҙең эшмәкәрлеген өйрәнеү менән шөғөлләнә. А.А.Заһитов, М.А.Абдурахманов, Р.Н.Шиһабетдиновтың тикшеренеүҙәре «Вәлиди уҡыуҙары» материалдарында, фәнни журналдарҙа һәм айырым баҫма булып нәшер ителде[30].

Һуңғы йылдарҙа Мәскәүҙә донъя күргән хеҙмәттәрҙе лә билдәләп үтергә кәрәк[31].

Ә.Вәлидиҙең ғилми эшмәкәрлеген өйрәнеүҙә ҙур уңыштар булыуға ҡарамаҫтан, уның ижады тулыһынса өйрәнелгән тип әйтергә әлегә иртә. Бөтә донъя тюркологтарына билдәле Әхмәтзәки Вәлидиҙең төрлө өлкәләргә ҡараған ижади мираҫы бик бай. Шуның өсөн уны өйрәнеүҙе ең һыҙғанып дауам итергә кәрәк.

---

[1] *Нурғәлин З.* Билдәлелек яҡтыһында. Өфө, 1992. 24-се бит.; Ә.Вәлиди етәкселегендәге башҡорт милли хәрәкәте әҙәби әҫәрҙәрҙә лә киң урын алды. Тик

Совет дәүерендә синфи көрәш күҙлегенән сығып был мәсьәлә бер яҡлы яҡтыртылды.Ҡарағыҙ: *Баимов Р.Н.* Особенности отражения национального движения революционных лет в башкирской литературе // Востоковедение в Башкортостане. Ч.2. Уфа, 1992. С. 31–34.

[2] *Башҡортостан* Республикаһының Үҙәк дәүләт тарих архивында Көҙән мәсетенең документтары һаҡлана. Унда Ә.Вәлидиҙең ата-әсәһенең исемдәре, тыуған йылдары теркәлгән. Ҡарағыҙ: *Хажиев В.* Мәғлүмәт // Башҡортостан. 1990. 20 декабрь.; Хөсәйеновтың мәғлүмәттәре буйынса, Ә.Вәлидиҙең шәжәрәһе түбәндәгесә була: Көҙән – Сураҡ – Яубаҫар Мәҡәләҡ – Иштуған (XVII–XVIII быуаттың беренсе яртыһы) – Тайып (1750–1837) – Вәлит (1780–1850) – Әхмәтйән (182?) – Әхмәтшаһ (1860–1937) – Әхмәтзәки (1890–1970). Ҡарағыҙ: *Ғ.Хөсәйенов.* Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Тарихи-биографик китап. Өфө, 2000. 6-10-сы бб.

[3] *Башҡорт* әҙәбиәте тарихы: 6 томда, 2-се т. XIX–XX быуат башы. Өфө, 1989. 137–138, 140, 150, 158, 160-сы бб. Хәбибназар Үтәки Ш.Мәржәни тураһында "Мәржәни" йыйынтығында һәм "Шура" журналында бер нисә мәҡәлә баҫтыра. Шулай уҡ уның төрки телендәге газеталарҙа ла бәләкәй мәғлүмәттәре донъя күргән.

[4] 1918 йылдан алып 1924 йылға тиклем Ә.Вәлиди ғилми хеҙмәттәр нәшер итмәгән. Был осорҙа ул тик сәйәси мәҡәләләр һәм документтар ғына баҫтыра. 1920 йылда Петроградта "Бәхет көнө" исемле йыйынтыҡта донъя күргән "Боронғо башҡорт ғәскәре" мәҡәләһен генә ғилми хеҙмәттәр исемлегенә индереп була.

[5] *Юлдашбаев А.М.* Профессор Ахметзаки Валиди Туган (политическая и научная деятельность). Уфа, 1991. С.22.

[6] *Янски Г.* Әхмәтзәки Вәлиди Туған: һирәк осрай торған күренеш (Ә.Юлдашбаев тәржемәһе) // Башҡортостан. 1991. 19–21 декабрь.

[7] *Байкара Т.* Ахмет Заки Валиди Туган (1890–1990): материалы к изучению жизни и творчества. Уфа, 1990. С.11.

[8] Там же. С.13.

[9] *Валеев Д.Ж.* Нравственная культура башкирского народа: прошлое и настоящее. Уфа, 1989. С.177.

[10] *Baykara Tuncer.* Zeki Velidi Togan (Зәки Вәлиди Туған). Ankara, 1989. S.66. Бында уның тарафынан Ә.Вәлиди хаҡында яҙылған мәҡәләләрҙең исемлеге бирелгән.

[11] *Беренсе* лауреат // Ағиҙел. 1992. №3. 191-се б.

[12] Бында шуны билдәләп үтергә кәрәк. Революцияға тиклем Рәсәй һәм сит ил матбуғатында Ә.Вәлидиҙең ғилми-тикшеренеү эшмәкәрлеге тураһында байтаҡ рецензиялар һәм хаттар баҫыла. Революциянан һуң Баҡы ҡалаһында 1926 йылдың 26 февраленән алып 5 мартҡа тиклем уҙғарылған Беренсе Бөтә Союз тюркология съезында Ҡазан тарихсыһы Г.С.Ғөбәйҙуллин "Төрки-татар халыҡта-

рында тарихи әҙәбиәттең үҫеше" исемле доклад уҡый. Унда ул, Ә.Вәлидиҙең 1917 йылға тиклемге ижадын етди анализлап, юғары баһалай (үҙе әйтеүенсә, "историк-самоучка", "историк-башкир самородок" 47–48-се бб.) Шул ваҡыттан алып Ә.Вәлидиҙең ғилми эшмәкәрлегенә тейешле иғтибар бирелмәй. Уның тик сәйәси эшмәкәрлеге генә синфи көрәш күҙлегенән сығып тәнҡитләнә. Совет шәрҡиәтселәренең тикшеренеүҙәрендә Ә.Вәлидиҙең ғилми хеҙмәттәренә һылтанмалар осрай, ҡайһы бер ваҡытта уларҙа авторҙарҙың фамилиялары күрһәтелмәгән. Ә.Вәлидиҙең сәйәси эшмәкәрлегенә ҡағылған тарихи хеҙмәттәр ошо өлкәгә ҡараған баҫмаларҙа күп мәртәбә яҡтыртылды. М.М.Ҡолшәриповтың "Башҡорт милли хәрәкәте (1917–1921 йылдар)» исемле китабы – һуңғы йылдарҙа сыҡҡан шундай хеҙмәттәрҙең береһе. (Өфө, 2000. 368-се б.).

[13] *Хөсәйенов Ғ.* Тарихсы Әхмәтзәки Вәлиди Туған // Ағиҙел. 1990. №3. 111–120-се бб.

[14] *Хусаинов Г.Б.* Ахметзаки Валиди Туган – выдающийся ученый, востоковед и крупный общественный деятель // Востоковедение в Башкортостане. Уфа, 1992. С.3–11.

[15] *Хөсәйенов Ғ.Б.* Вәлиди Туған ғалим // Әҫәрҙәр: 3 томда, 1-се т. Ил азаматтары. Тарихи шәхестәр тормошо. Өфө, 1998. 522–541-се бб.; *Хусаинов Гайса.* Ахметзаки Валиди Туган // Литература и наука. Избранные труды. Уфа, 1998. С.593–601.

[16] *Юлдашбаев Ә.М.* Һәйкәлдәргә лайыҡ шәхес: Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың тыуыуына 100 йыл // Ағиҙел. 1991. №12. 10–12-се бб.

[17] Шунда уҡ.

[18] *Ураҡсин З.* Ҡайтыуың менән! // Ағиҙел. 1991. №3. 110–113-се бб.

[19] *Ахмед Заки Валиди Туган.* 1890–1990: Материалы к изучению жизни и творчества / Пер. с турецкого языка, предисловие, примечание и указатели Р.М.Булгакова. Уфа, 1990. С.68.

[20] *Туған З.В.* Хәтирәләр: Төркөстан һәм башҡа Көнсығыш төркиҙәрҙең милли булмышы һәм культура өсөн көрәше / Ә.Юлдашбаев тәржемәһе // Ағиҙел. 1991. №1. 147–163-сө бб.; №2. 159–172-се бб.; №3. 91–109-сы бб.; №4. 108–142-се бб.; №5. 159–176-сы бб.; №6. 146–162-се бб.; №7. 139–166-сы бб.; №8. 150–174-се бб.; №9. 106–133-сө бб.; №10. 154–176-сы бб.; №11. 112–136-сы бб.; №12. 139–156-сы бб.; 1992. №1. 148–167-се бб.; №2. 110–131-се бб.; №3. 142–162-се бб.; №4. 175–192-се бб.; №5. 147–165-се бб.; №6. 148–166-сы бб. *Тоган З.В.* Воспоминания. Кн. I. Уфа, 1994. 400 с.; *Тоган З.В.* Воспоминания. Кн. II. Уфа, 1998. 368 с. *Туған З.В.* Хәтирәләр. Өфө, 1996.

[21] *Тоган З.В.* Воспоминания / Пер. на рус. В.Б.Феофановой; науч. ред., автор прим. и послесловий С.М.Исхаков. М., 1997.

[22] Zeki Velidi Togan Jiden (Хәтирәләр) / Komatsu Hisao, Koyama Koichiro, Yamauchi Masayuki // Shihou. 1976. №1(1). P.1–14; 1978. №3(1). P.9–23, 25–32; 1979. №4(1). P.1–9; №5(1). P.8–17. Тугон Ахмад Закий Валидий. Булинганни бури ер (Туркистон халикларининг миллий мустакиллик учун кураши тарихидан хотиралар). Тошкент, 1997.

[23] *Туған Ә.В.* Күрәҙәлек итә, тимәгеҙ (Хаттар, мөрәжәғәттәр, сығыштар)/ Тәржемәсеһе һәм төҙөүсеһе Ә. Юлдашбаев. Өфө, 1998. 192 бит; Известный и неизвестный Заки Валиди (в памяти современников) /Сост. А.Юлдашбаев. Уфа, 2000. 320 с.; *Янски Г.* Әхмәтзәки Вәлиди Туған: Һирәк осрай торған күренеш (Ә.Юлдашбаев тәржемәһе) // Башҡортостан. 1991. 19–21 декабрь.

[24] *Туған Ә.В.* Башҡорттарҙың тарихы. Төрк һәм татар тарихы. Өфө, 1994. 352 бит.; *Байкара Тунджер*. Заки Валиди Тоган. Уфа, 1998. 328 с.

[25] Башкирское национальное движение 1917–1920 гг. и А.Валиди / Сост. *И.В.Кучумов*. Уфа, 1997. 250 с.

[26] *Ишемгулов Н.У.* Башкирское национальное движение (1917–1921 гг.): Автореф. дис. ... канд. ист. наук. Уфа, 1996; *Касимов С.Ф.* Образование национальной государственности башкирского народа (1917–1925 гг): Автореф. дис. ... докт. ист. наук. Екатеринбург, 1995; *Кульшарипов М.М.* Национальное движение башкирского народа (1917–1921 гг.): Автореф. дис. ... докт. ист. наук. Уфа, 1998.

[27] *Касимов С.Ф.* Автономия Башкортостана: становление национальной государственности башкирского народа (1917–1925 гг.). Уфа, 1997. 352 с.; *Кульшарипов М.М.* Башкирское национальное движение (1917–1921 гг.). Уфа, 2000. 368 с.

[28] *Ишбердина Г.Н.* Социально-философские основания формирования мировоззрения А.-З. Валидова. Автореф. дис. ... канд. филос. наук. Уфа. 2001.

[29] *Валеев Д.Ж., Мадьяри А., Ураксин З.Г., Юлдашбаев А.М.* Судьба и наследие башкирских ученых-эмигрантов. Уфа, 1995. 143 с.

[30] *Шигабдинов Р.Н.* Ахмед Заки Валиди и идея автономии Туркестан // Туркестон мустакиллиги ва бирлиги учун кураш сахифаларидан. Тошкент, 1996. С.33–39.; *Абдурахманов М., Зохиди А.* А.З.Валидий Тугоннинг Туркистонга илмий сафари (1913–1914 йиллар). Тошкент, 1997. 76 бет; *Абдурахманов Махамаджон.* А.З. Валиди: Поиск истоков историко-духовного наследия Туркестана. Ташкент: 2000. 104 с. *Шигабдинов Р.Н.* Неизвестные страницы наследия А.Валиди // O'zbekiston tarihi, 2000. №1–2. 57–70 бетлар и др.

[31] *Бурмистрова Т.Ю.* Ахмет Заки Валиди Тоган: жизнь и творчество. М., 1996. 31 с.; *Исхаков С.М.* А.-З.Валидов: пребывание у власти // Отечественная история. 1997. №6. С.55–75; Из истории российской эмиграции: Письма А.- З.Валидова и М.Чокаева / Сост. С.М.Исхакова. М., 1999. 128 с. (Һуңғы хеҙмәткә рецензия баҫылды: *Кульшарипов М.* Ахметзаки Валиди: вымысел и правда // Ватандаш. 2000. №5. С.166–170.); Ланда Р.Г. Ахмет-Заки Валидов (Заки Валиди Тоган) как востоковед и общественный деятель // Восток. 2000. №1. С.122–137.

## *Беренсе бүлек*

# Ә.ВӘЛИДИҘЕҢ ҒИЛМИ ЭШМӘКӘРЛЕГЕНЕҢ БАШЛАНҒЫС ОСОРО ҺӘМ ДОНЪЯҒА ҠАРАШЫНЫҢ ҮҪЕҮЕНДӘ РӘСӘЙ ШӘРҠИӘТСЕЛӘРЕ ӘҺӘМИӘТЕ

### Эшмәкәрлегенең башланғыс осоро

"Хәтирәләр"ҙән күренеүенсә, Ә.Вәлиди 6–7 йәшенән үк төрлө телдәрҙе өйрәнә башлай. Атаһының мәҙрәсәһендә Әхмәтзәки төрки, ғәрәп һәм урыҫ телдәренән һабаҡ алһа, әсәһе ярҙамында фарсы телен үҙләштерә. Артабан телдәрҙе өйрәнеүҙе ул билдәле татар ғалимы Шиһабетдин Мәржәниҙең шәкерте булған, әсәһе яғынан олатаһы Хәбибназар Үтәкиҙең мәҙрәсәһендә дауам итә. Ҡазанда Ә.Вәлиди немец һәм француз телдәренән һабаҡтар ала башлай, әммә уларҙы етерлек кимәлдә үҙләштермәй[1]. Ул ваҡытта инглиз телен өйрәнергә башламаған була[2]. 1914 йылдың 26 авгусында В.В.Бартольдҡа хатты Ә.Вәлиди, рус телендә яҙған, сөнки автор "татар орфографияһын һәм татар яҙма телен" адресат ниндәй кимәлдә яҡшы үҙләштереүен белмәгән[3].

1923 йылда Парижда Ә.Вәлиди күренекле ғалимдар Мирза Мөхәммәтхан Казвини, Денис Росс һәм Мөхәммәт Фуруги менән осраша. Вәлиди ул ваҡытта "инглиз телен белмәү"[4] сәбәпле, улар фарсы телендә әңгәмә алып баралар.

Француз телен белмәһә лә, ул Францияның Азия һәм География йәмғиәттәре ултырыштарында ҡатнаша. Азия йәмғиәтендә хатта Мешхед һәм Һиратта табылған ҡулъяҙмалар тураһында сығыш яһай. Уны Ә.Вәлиди рус телендә әҙерләй, ә француз телендәге тәржемәне профессор Дени уҡып сыға.[5]

Ә.Вәлидиҙең революцияға тиклемге әҫәрҙәренең бер үҙенсәлеге шунда: ул төрлө телдәрҙән миҫалдар килтереп яҙа. 1911 йылда "Шура" журналында баҫылған "Йырҙарыбыҙ хаҡында" исемле мәҡәләһендә Вәлиди рус, ғәрәп, монгол, себер төркиҙәренең йыр өлгөләрен файҙалана. Үҙе белмәгән телдәрҙәге үрнәктәрҙе ул русса тәржемәләре аша төшөнгән, йәғни Әхмәтзәки Вәлиди үҙенән алда башҡарылған тикшеренеүҙәр тәжрибәһенә таянған.



Был ҡулъяҙма әҫәрҙең битендә Ә.Вәлидиҙең бәләкәй саҡта ҡалдырған ҡултамғаһы бар: “Ошо “Ғоҡуду мәнзүмәт”те уҡыным мин, Әхмәтзәки бин мулла Әхмәтша, 1901–1902 йылдарҙа”. Ул ошо әҫәрҙе Көҙәндә атаһының мәҙрәсәһендә уҡыған. Быны ҡулъяҙманың баш яғындағы яҙыу раҫлай: “Ошо “Ғоҡуду мәнзүмәт” китабын уҡыным мин Әхмәтвәли бин Йыһанша әл-Хәлкәй әл-Стәрлетамаҡи Көҙән муллаһы Әхмәтша бин мәрхүм мулла Әхмәтйән әл-Көҙәниҙең мәҙрәсәһендә 1901 йылда”. Әхмәтзәки Вәлидиҙең автографы ғалим Рәшит Шәкүр тарафынан Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Ҡульяҙмалар һәм иҫке баҫма китаптар фондына тапшырған материалдар араһында табылды.

Ҡулъяҙманы ул 1987 йылдың 29 сентябрендә Ишембай районы Хажый ауылында йәшәүсе Рәфис Мырҙашевтан алған.

Бынан тыш, күренекле шәхестәргә бағышланған ҡайһы бер мәҡәләләрендә ул һирәк осраған әҫәрҙәрҙән өҙөктәр килтерә. Бындайҙар рәтенә "Мәржәниҙең бер әҫәре тураһында Ҡәйүм Насыри" һәм "Хәлфиндәр" исемле мәҡәләләрҙе индерергә мөмкин. Беренсеһендә ул Насыриҙың 1887 йылда календарҙа сыҡҡан «Әт-тәфтиш вәт-тәхаким" ("Хәҡиҡәтте өйрәнеү") исемле мәҡәләһен тулыһынса файҙалана, ә икенсеһендә иһә 1819 йылда Ҡазанда Ибраһим Хәлфин нәшер иткән "Сынғыз-намә" китабының инеш өлөшө һәм 1816 йылда гимназияға ҡабул итеү имтихандарында мосолмандарҙы ҡатнашырға саҡырған мөрәжәғәте килтерелә.

1913 йылда "Шура" журналының бер нисә һанында Ә.Вәлидиҙең "Хәлфиндәр" исемле мәҡәләһе баҫылып сыға. Уны яҙыр өсөн материалдар эҙләгәндә, Ибраһим Хәлфиндең 1818 йылда Йена ҡалаһында немец телендә сыҡҡан бер мәҡәләһенә юлыға. Тик "һәр ни ҡәҙәр Хәлфиндең был мәҡәләһен ҡулымда тотһам да, немецсә белмәгәнемдән ни һөйләгәнен белә алманым", – ти[6].

Шул уҡ ваҡытта ул Г.Вамбери, Мәхтүмҡолой тураһындағы хеҙмәттәрендә немец телендә баҫылған китаптарға һылтана. "Вамбери" исемле мәҡәләһендә Ә.Вәлиди, уларҙы "бөтөн таныуым фәҡәт руссаға тәржемә иткән әҫәрҙәр арҡаһында ғына" мөмкин булды, "бәғзе берҙәрен немецсә белгән заттарҙың ярҙамы илә генә өйрәнгеләй алдым", ти[7]. Шунда уҡ бер тәржемәсенең исемен күрһәтә. Ул Ҡазандағы немец теле мөғәллиме Риклитский була[8]. Ә.Вәлиди "Хәтирәләр"ендә Риклитский һәм Арбеков исемдәрен телгә алып үтә. Уларҙан латин, немец телдәре буйынса һәм математиканан дәрес ала[9]. Вәлидиҙең Риклитский менән берлектә В.В.Радловтың алтай төркиҙәренең шиғыр формалары тураһындағы хеҙмәттәренең немец теленән төркисәгә тәржемәләре хаҡында ла әйтеп үтелә. Был хеҙмәт Истанбулға "Төрк йорто" журналына ебәрелә, әммә баҫылып сыҡмай[10].

Ә.Вәлидиҙең беҙ тикшергән осорҙағы мәҡәләләре төрлө гәзит-журналдарҙа, йыйынтыҡтарҙа донъя күрә. Уларҙың тел һәм стиль йәһәтенән бер-береһенән айырылып тороуы Вәлидиҙең үҙенең яҙыу стиленә, йә иһә мөхәррир төҙәтмәләренә бәйле булыуы мөмкин. Йәш ғалимдың әҫәрҙәре баҫылып сыҡҡандан һуң, уларға ҡарата яҙылған тәнҡит мәҡәләләрендә башҡа мәсьәләләр рәтендә уларҙың теленә лә иғтибар иткәндәр. Мәҫәлән, 1913 йылда "Ваҡыт" гәзите "Төрк вә татар тарихы"н тәнҡитләгәндә: "Өйәҙ ауылында зыярат тирәһенә ултыртылған бағаналар төҫлө бер рәттән теҙелеп "лар" ялғауы теҙелгән. Беҙҙең телдә яҙылышы "лр" шәкелендә булып, "лар" рәүешендә бик аҙ ғына ерҙә ҡулланылған хәлдә, "Сөйөмбикә" менән "Аҡ юл" журналында булған кеүек, был китапта ла һис урынһыҙ "лар"ҙар теҙелгән", – тиелә[11].



دیوان مختوم قلی

استرخانده امام عبدالرحمن افندی نیازی اوشبو اسم ایله تورکمن خلقینك مشهور شاعری مختوم قلی‌نك اشعارن جیوب نشر ایته باشلادی. حاضر چقّان برنجی جزئی اورتا قولده ۴۸ صحیفه‌لك بولوب استرخانده عمرف و شریکلری مطبعه‌سنده اعلا کاغدده باصلغان. حق ۲۰ تین. ع. نیازی افندی‌نك بو اشی بزنك عالمده جن چندن تبریك ایتولورگه تیوش اشدر. اول مونك ایله تورك ادبیاتنك تورلی قوملرینه منسوب اولغان قسملرن اوگره‌نورگه یول آچدی. چونکه تورك ـ تاتار ملتی صوڭغی عصرلرده‌غی سیاسی حاللر آرقاسنده تورلی آیرم هم بر برسی ایله بیك آز طانش اولغان جمعیتلرگه آیرلدی. آیرم جمعیتلرده اوز آرالرنده‌غی عمومی مناسبت ایله طانش اولماغان خلق شاعرلری آیرم اسملر ایله تورکمن، قرغز، قزان، سارت، قافقاز، قریم ادبیاتی دیگان کبی ادبیاتلر یاصی باشلادیلر. ایندی بزگه آلارنك بارسن بر یرگه جیوب اوگره‌نورگه بیك وقتدر. نیازی افندی تورکمن ادبیاتن جیا باشلاسه، اورتا آزیا تورکلری آنده‌غی شاعرلرنك اثرلرن جیوب نشر ایته باشلاسه‌لر اش هه‌یه‌تلنه.

“Шура” журналында баҫылған Ә.Вәлидизең “Диуани Мәхтүмҡолой” мәҡәләһенең башы.

Был китапҡа Ғәлимйән Шәрәф тә ентекле рецензия яҙа. Уның мәҡәләһендә авторҙың теле хаҡында ла әйтелә. Рецензент әйтеүенсә: “Яңы әҙәбиәтебеҙҙә ҡабул ителгән вә танылған “минем” һүҙе урынына “минең” һүҙе ҡулланылыуын сағатайсаға эйәреүме (архаизммы), башҡортсаға эйәреүме (провинциализммы) тиергә аптырап ҡалдыҡ”, – ти.

Унын был фекере шул йылдарҙа барған “тел ярышын” сағылдыра булһа кәрәк. Ул заманда ҡайһы берәүҙәр төрөк телен, икенселәр – ғәрәп телен, өсөнсөләр – төрки телен, дүртенселәр татар телен бөтә Рәсәй төрки халыҡтары өсөн әҙәби тел сифатында ҡабул итеүҙе талап иткәндәр[12]. Күренеүенсә, Ғ.Шәрәф татар теле яҡлы булған.

Ошо урында Ә.Вәлидизең башҡорт теленә мөнәсәбәте хаҡында ла әйтеп үтергә кәрәк. “Хәтирәләр”ҙә башҡорттарҙың ырыуҙарына һәм уларҙың тел үҙенсәлектәренә характеристика бирелгән. Ул башҡорттарҙы дүрт төркөмгә бүлә. Тәүге төркөмгә ҡараған бөрйән, үҫәргән һәм тамъян ырыуҙары башҡорттарын автор тау башҡорттары тип атай. Икенсеһенә дала башҡорттарын – юрматы, күҙәй, ғәйнә, ирәкте, йәнәй, таныш ырыуҙарын индерә. Уныңса, “с” өнө урынына тау башҡорттары “һ”, ә дала башҡорттары “ҫ” өнөн әйтә. Вәлиди шулай уҡ дала башҡорттарының Башҡортостандың көнбайышында һәм төньяҡ-көнбайышында йәшәгән күпселек өлөшө татарлашыуын да билдәләп үткән. Өсөнсө төркөмдә ҡыпсаҡ, ҡаңлы, һыуын, оран, ҡайлы, байлар, гәрәй, сураш, нуғай, ҡырғыҙ, меркет ырыуҙары тәшкил итә. Тау башҡорттары араһында йәшәгән был ырыу кешеләре саф башҡортса һөйләшә, ә Башҡортостандың көнбайыш өлөшөндә йәшәүселәр татар теле

йоғонтоһо кисерҙе, тип яҙа ғалим. Ошо уҡ төркөмгә ул “яңы башҡорттарҙы” – ҡасҡын татарҙарҙы, мишәрҙәрҙе, мосолман сыуаштарҙы индергән. Үҙен Вәлиди өсөнсө төркөм вәкиле тип иҫәпләй. Революцияға тиклем үк, башҡорттарҙың татарлашыуын танып, 1915 йылда В.Филоненконың “Башкиры” исемле китабына яҙған рецензияһында Ә.Вәлиди: “Башҡорттарҙың хәҙерге тормоштары, татарлашыуҙары хаҡында әйткән (В.Филоненконың – *Ә.С.*) һүҙҙәре лә бер ҙә үлсәүҙән тыш түгел”, – тип үҙ мөнәсәбәтен белдерә.




Ә.Вәлидиҙең ҡайһы бер мәҡәләләре донъя күргән “Ваҡыт” газетаһының баш өлөшө.

“Бөрйән башҡорттары араһында” исемле мәҡәләһендә ғалим башҡорт лексикаһын ҡуллана һәм улар башҡа төркиҙәргә аңлашылһын өсөн йәйә эсендә аңлатма бирә. Мәҫәлән, ҡарағай (нарат), өпсөн (сбруй). Ошо мәҡәләһендә Ә.Вәлиди бөрйән башҡорттарының тел үҙенсәлектәрен дә күрһәтеп үтә: “Барыһ йылы – барыҫ, юлбарыҫ тимәктер”.

“Ҡазан татарҙарының ҡара һүҙҙәренә ғаид яңы әҫәрҙәр” мәҡәләһендә ул башҡорттарҙың “сәнкем, сәнкем, сәнкем йылан, сәнкем башлы ҡара йылан” тип башланған арбауҙарын яҙып алыуы, ләкин әлегә бер ҡайҙа ла баҫтырмауы хаҡында хәбәр итә. Тимәк, Ә.Вәлидиҙең хеҙмәттәрендә төрлө телдәрҙән йыйған материалдарҙы ҡулланыуын иҫәпкә алып, уның башҡорт телендә яҙылған фольклор яҙмалары ла булған, тип фараз итергә мөмкин[13]. “Хәтирәләр”ҙән күренеүенсә, ул үҙенең дуҫтары Ибраһим Ҡасҡынбай менән Ғәлимйән Тағандың ҡәбер таштарына башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадынан алынған дүрт юллыҡ шиғыр ҙа яҙып ҡуя:

Ҡарлуғас ҡоштай, ай, ояла
Оялары уның да буяла.
Кемдәрҙең малы, кемдәрҙең йәне
Кемдәрҙең ҡалмай фани донъяла?[14]

Шулай итеп, Әхмәтзәки Вәлиди иртә йәштән төрлө телдәрҙе өйрәнгән. Эмиграцияға тиклем ул төрки, ғәрәп, фарсы һәм рус телдәрен белгән, бер нисә Европа телен өйрәнә башлаған булған.

Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең әҫәрҙәрен баҫтырғанда төрлөсә имзалаған. Илдә саҡта яҙышҡан осорҙа ул төрки телендәге хеҙмәттәре аҫтына ҡултамғаны Әхмәтзәки Вәлиди, Әхмәтзәки Вәлидов, Әхмәтзәки тип ҡуйған. Русса сыҡҡан хеҙмәттәрендә А.-З.Валидов, Ахмет Закий Валидов тип имзалаған. Ә бына 1913 йылда "Мәктәп" журналында баҫылған "Ҡайһы милләттәнһең?" исемле мәҡәләһе имзаһыҙ донъя күргән. Мәҡәләнең Ә.Вәлидиҙеке булыуын уның "Казан татарҙарының ҡара һүҙҙәренә ғаид яңы әҫәрҙәр" исемле мәҡәләһен уҡып беләбеҙ.

Ғалим Төркиәлә "Яңы Төркөстан" журналында баҫылған материалдары аҫтына "Суҡлыҡай улы" тип тә ҡул ҡуйғылаған[15]. Был псевдонимдың аңлатмаһы "Хәтирәләр"ҙә бар. Тыуған ауылы Көҙәндең төп халҡы башҡорттарҙың суҡлыҡай һәм унғут ырыуына ҡараған. Һәм Ә.Вәлиди үҙен суҡлыҡай ырыуы нәҫеленән тип иҫәпләп, "Суҡлыҡай улы" псевдонимын ҡулланған. Ҡайһы бер мәҡәләләре Төркиәлә лә имзаһыҙ сыҡҡан.

1935 йылда Әхмәтзәки Вәлиди Төркиә Республикаһының фамилиялар тураһындағы законы буйынса Туған фамилияһын һайлай. Был фамилия уның ата-бабаһы Иштуғандың исеменә барып тоташа. Ошо хаҡта ул "Хәтирәләр"ҙә: "Көҙән улдарынан һуң бишенсе быуын булған Иштуған бабабыҙ рустарға ҡаршы һуғышта беҙҙең яҡтан бик алыҫта ятҡан Кәмәлек йылғаһы буйында шәһит булған",[16] – тип яҙа.

Европала баҫылған әҫәрҙәрендә ул үҙенең фамилияһын "Валиди" тип ҡуя. Ошо хаҡта уның "Монголдар, Сыңғыҙ һәм төркилек" тигән хеҙмәтенең аҙағында аңлатмаһы ла бар. Унда ул: "Исемем Рәсәй һәм Европала баҫылған әҫәрҙәремдә "А.Заки Валиди" рәүешендә яҙылыуы һәм ҡайһы бер энциклопедияларға ла ошо рәүештә инеүе арҡаһында төрөксә әҫәрҙәремдә лә шулай ҡулландым. Фәҡәт ҡайһы бер иптәштәремдең төрөк теленә күрә "Зәки Вәлиди" тип яҙыуымды ҡабат-ҡабат тәҡдим итеүҙәре өсөн был әҫәремдән башлап исемемде "". Зәки Вәлиди" рәүешендә яҙыуҙы ҡабул иттем. Асылда "Ислам энциклопедияһы"ның ойоштороу комитеты ла ошо шәкелдә ҡабул иткән", – тип белдерә[17]. Әхмәтзәки Вәлидиҙең фамилияһы төрөксә "Тоган", ә башҡортса "Туған" рәүешендә яҙыла. Русса сыҡҡан Көнсығыш тураһындағы китаптарҙа уның фамилияһы "Тоган" булараҡ ҡулланыла. Һуңғы йылдарҙа башҡорт интеллигенцияһының рус телендә сыҡҡан әҫәрҙәрендә был фамилия "Туган" рәүешендә ҡабул ителгән. Бынан тыш, уның исемен ҡыҫҡартып Зәки йәки Әхмәт-Зәки тип тә йөрөтәләр.

Профессор, доктор Әхмәтзәки Вәлидиҙең ғилми эшмәкәрлеге бик һөҙөмтәле була. Уның хеҙмәттәренең һаны 400-гә етә. Тәүге әҫәрҙәре

Рәсәйҙең төрки телле матбуғатында донъя күрә, ә һуңыраҡ инде рус фәнни баҫмаларында сыға башлай. Артабан донъяның күп кенә илдәрендә төрлө телдәрҙә баҫылып сыға.

Ғалимдың тюркология буйынса хеҙмәттәренең библиографияһы тәүге тапҡыр уның 1934 йылда Истанбулда сыҡҡан "Ун ете ҡом аҫтындағы ҡала һәм Саҙри Мәҡсуди бей" исемле китабында, "Авторҙың ҡыҫҡаса биографияһы" тигән мәҡәлә ҡушымта рәүешендә бирелә[18]. Бында уның баҫылып сыҡҡан 64 эше һәм баҫмаға әҙер 11 әҫәре күрһәтелә. Илдә төрки һәм урыҫ телдәрендә донъя күргән хеҙмәттәренең исемдәре төрөк телендә бирелгән. Улар бигүк дөрөҫ тәржемә ителмәгән һәм нәшер ителеү йылдарында ла хаталар киткән.

Үҙенең "Хәтирәләр"ендә (Истанбул, 1969) Ә.Вәлиди 1925 йылға тиклем яҙған хеҙмәттәренең ижад ителеү процесы һәм йөкмәткеләре хаҡында ентекле рәүештә һөйләп үтә.

1955 йылда Истанбулда Ә.Вәлидигә 60 йәш тулыу айҡанлы 500 битлек "Зәки Вәлиди Туғанға бағышлау" тигән китап сыға. Был йыйынтыҡта Г.Янскиҙың ғалимдың тормошо һәм ғилми эшмәкәрлеге тураһында мәҡәләһе, шулай уҡ Сығатай Улучай һәм Мартин Диксон әҙерләгән библиография ла урын алған. Библиографияны төҙөгәндә ғалимдар Ә.Вәлидиҙең "Ун ете ҡом аҫтындағы ҡала һәм Саҙри Маҡсуди бей" исемле китабындағы исемлекте ҡулланалар. Шуға өҫтәп бынға тиклем донъя күрмәгән 36 әҫәре хаҡында ла мәғлүмәттәр килтерелә.

Һуңғараҡ, 1956–1957 йылдарҙа Абдулҡадир Инан, Мартин Диксондың һуңғы библиографияһына һәм яҙмаларына таянып, "Төрк йорто" журналының бер нисә һанында "Профессор, доктор Зәки Вәлиди Туғандың ғилми эшмәкәрлеге" исемле ҙур ғына мәҡәлә баҫтырып сығара[19]. Унда Вәлидиҙең революцияға тиклемге эшмәкәрлеге бик тулы сағылған.

Ә.Вәлидиҙең библиографияһын төҙөү менән уның уҡыусыһы профессор Тунжер Байҡара ла шөғөлләнгән. 1985 йылда Эрзерум ҡалаһындағы Ататөрк университетының әҙәбиәт факультеты сығарған фәнни журналдың Әхмәтзәки Вәлиди Туғанға бағышланған 13-сө һанында Т.Байҡараның "Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың тормошо һәм ижады", шулай уҡ "Ә.Зәки Вәлиди Туғандың (1890–1970) библиографияһы" исемле мәҡәләләре донъя күрә[20]. Һуңғыһында ғалимдың 338 әҫәре күрһәтелә. Т.Байҡараның был хеҙмәттәре Ә.Вәлидиҙең тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған халыҡ-ара фәнни конференцияға бәйле 1990 йылда Өфө ҡалаһында нәшер ителә[21]. Библиография рус телендә лә бирелә.

Т.Байҡара әҙерләгән исемлек 1989 йылда Анкарала Төркиәнең Мәҙәниәт министрлығы сығарған "Бөйөк төрөктәр" серияһында "Зәки Вәлиди Туған" исемле китапҡа индерелгән[22].

Үрҙә телгә алынған Ататөрк университеты журналында «Ә.Зәки Вәлиди Туғандың үҙенең классификацияһы буйынса документтары" һәм "Туғандың баҫылмаған әҫәрҙәре хаҡында мәғлүмәттәр" бирелгән. Улар ғалимдың ҡатыны Нәзмиә ханым, ҡыҙы Иҫәнбикә Туған һәм уҡыусыһы Т.Байҡара тарафынан әҙерләнгән[23] һәм архив хаҡында бик күп ҡыҙыҡлы материалдар йыйылған.

Ә.Вәлидиҙең баҫылмаған әҫәрҙәре тураһында "Бөгөнгө Төркөстан һәм яҡын тарихы" китабында ла ҡайһы бер мәғлүмәттәр килтерелгән[24].

1992 йылда Ҡазанда татар тарихсыһы Рәүил Әмирханов Ә.Вәлидиҙең 1915 йылда сыҡҡан "Ҡыҫҡаса төрөк-татар тарихы" исемле китабын татар телендә әҙерләп сығара[25]. Был китапҡа Р.Әмирхановтың "Халыҡҡа кире ҡайтарылған мираҫ" һәм "Зәки Вәлиди әҫәрҙәренең ҡыҫҡаса библиографияһы" тигән мәҡәләләре лә ингән. Библиографияны төҙөүсе Т.Байҡараның Өфөлә донъя күргән «Әхмәт Зәки Вәлиди Туған. 1890–1990: Тормошон һәм ижадын өйрәнеү өсөн материалдар" исемле хеҙмәтен, ваҡытлы матбуғат баҫмаларын һәм фәнни китапханаларҙағы каталогтарҙы файҙалана. Алдағы библиографияларҙан айырмалы рәүештә был баҫмала Ә.Вәлидиҙең беҙҙең илдә нәшер ителгән ҡайһы бер хеҙмәттәренең исемдәре асыҡланған һәм тулыландырылған.

1993 йылда Ә.Юлдашбаев "Ағиҙел" журналының бер нисә һанында башҡорт телендә тәүге тапҡыр Ә.Вәлидиҙең "Башҡорттарҙың тарихы" тигән хеҙмәтен баҫтырып сығарҙы. Әйтергә кәрәк, ғалимдың был хеҙмәте 1955 йылдан алып уның библиографияларында быға тиклем донъя күрмәгән әҫәрҙәр рәтендә булған. Һуңынан "Башҡорттарҙың тарихы" "Төрк вә татар тарихы" исемле әҫәре менән бергә "Китап" нәшриәтендә айырым бер китап булып сыҡты. 1997 йылда "Ағиҙел" журналы биттәрендә "Башҡорттарҙың тарихы" әҫәренең икенсе өлөшө донъя күрҙе.

Ә.Вәлиди хеҙмәттәренең библиографияһы менән ошо китаптың авторына ла шөғөлләнергә тура килде. Уның һөҙөмтәләре 1994 йылда Истанбулда "Тюрк Дюнъясы Араштырмалары Дергиси" ("Төрк донъяһы тикшеренеүҙәре журналы") журналында баҫылып сыҡты[26]. Революцияға тиклемге бөтә хеҙмәттәрҙең исемдәренә һәм сыҡҡан йылдарына асыҡлыҡ индерелде. Шулай уҡ был исемлек Ә.Вәлиди вафат булғандан һуң Башҡортостанда баҫылып сыҡҡан хеҙмәттәр менән тулыланды. Р.Әмирхановтыҡынан башҡа бөтә булған библиографиялар ҙа ҡулланылды.

Ә.Вәлидиҙең хеҙмәттәренең библиографияһы беҙҙең тарафтан уның 1996 йылда Өфөлә башҡорт телендә донъя күргән "Хәтирәләр"енә лә индерелде[27]. Истанбул һәм Өфө ҡалаларындағы китапханаларҙа табылған материалдар ҙа ҡулланылды. Исемлектәге хеҙмәттәр 1996 йылға

тиклем иҫәпкә алынды һәм уларҙың һаны 413-кә етте. Әммә улар рәтенә үҙгәртеп ҡороу йылдарынан һуң ғалимдың Өфө, Ташкент һәм Ҡазан ҡалаларында сыҡҡан гәзит-журналдарҙа донъя күргән әҫәрҙәренең өҙөктәре индерелмәгән.

1995 һәм 1996 йылдарҙа Өфөлә Р.М.Болғаҡов тарафынан әҙерләнгән "Материалы к библиографии Ахмет-Заки Валиди Тогана" исемле китап донъя күрҙе. Библиографияла әҫәрҙәрҙең исемдәре төп нөсхәләгесә һәм рус телендә бирелгән. Хеҙмәт өс өлөштән тора: Ә.-З.Вәлидиҙең библиографияһы, Ә.-З.Вәлидиҙең машинкала баҫылған текстары, Ә.-З.Вәлиди хаҡында әҙәбиәт.

Был библиографияны төҙөгәндә Т.Байҡара әҙерләгән исемлек ҡулланыла. Бынан тыш, беренсенән, Р.Болғаҡов ғалимдың Ә.Юлдашбаевтың шәхси китапханаһында һаҡланған 266 хеҙмәтен ҡарап сыға һәм уларҙы тасуирлай. Икенсенән, автор Ә.Вәлидиҙең Рәсәйҙәге осорҙа яҙған әҫәрҙәренең беҙ төҙөгән исемлеге менән эш итә. Китаптың өсөнсө өлөшөн Р.Болғаҡов БР Милли китапханаһының баш библиографы М.Х.Баһуманова ярҙамында төҙөй. Шулай итеп, ошо баҫма алда әйтелгән сығанаҡтар нигеҙендә донъя күрә. Әлеге көндә был иң тулы библиографик белешмә. Тикшеренеүҙәр күрһәреүенсә, уға ла яңы өҫтәмәләр индерергә була.

1917 йылда Ә.Вәлиди үҙенең фекерҙәштәре менән Урта Азияла Ташкентта "Кәңәш" гәзитен һәм Кокандта "Йорт" журналын сығара башлай. Уларҙа ғалимдың бер нисә мәҡәләһе лә баҫыла. Әммә был мәҡәләләр алда күрһәтелгән библиографияларға инмәгән. 25 июндән 8 сентябрға тиклем Вәлиди "Кәңәш" гәзитенең мөхәррире вазифаһын да башҡара. Ошо осорҙа гәзиттең 14 һаны донъя күрә. Уларҙың исеме тарихсы Р.Н.Шиһабетдинов тарафынан асыҡлана. Шулар араһында Ә.Вәлидиҙең "Ойошмаған милләт юғалыуға дусар" (1 август), "Мосолман ҡатын-ҡыҙҙарының һайлауҙарҙа ҡатнашыуы" (25 июль), "Төркөстан ойошмалары мәсьәләләре" (19 июль), "Выждан бының нисек ҡабул итә?" (19 июль), "Нәүбәттәге мәсьәләләр алдынан" (11 август) тигән мәҡәләләре лә бар. Был мәҡәләләрҙә Урта Азияла фирҡәләр һәм ойошмалар барлыҡҡа килеү, мосолмандарҙың милли хәрәкәте, Рәсәй эсендәге автономия, ҡатын-ҡыҙҙарҙың илдең ижтимағи-сәйәси тормошонда ҡатнашыуы кеүек мәсьәләләр ҡарала[28].

Шулай итеп, Ә.Вәлидиҙең хеҙмәттәренең библиографияһын төҙөү 1934 йылда ғалимдың үҙе тарафынан башланып, ярты быуат дауам итә. Әммә уның библиографияһында ҡайһы бер хаталар ҙа осрай һәм улар башҡа библиографияларға ла күсә. Ошо хаталарҙың байтағын миңә төҙәтергә тура килде. Айырып әйткәндә, Ә.Вәлидиҙең бынан алдағы баҫмаларға инмәгән хеҙмәттәре табылды, баҫылып сыҡҡан йылдары төҙәтелде, исемдәре асыҡланды.

## Ә.Вәлиди мосолман ғалимдары тураһында

Революцияға тиклем Ә.Вәлиди мосолмандар араһынан сыҡҡан ғалимдарҙың тормошо һәм эшмәкәрлеге хаҡында байтаҡ ҡына хеҙмәттәр яҙа. Шуларҙың береһе – “Шура” журналының өс һанында донъя күргән “Хәлфиндәр” мәҡәләһе[29]. Бында Хәлфиндәр ғаиләһенең 3 быуыны – XVIII быуат уртаһынан XIX быуат уртаһына тиклем Рәсәйҙә мәғрифәт өлкәһендә күренекле урын алып торған Сәғит, Исхаҡ, Ибраһим хаҡында һүҙ бара.

Сәғит Хәлфин (1732–1785 (?)) Ҡазанда Иҫке татар биҫтәһендә йомошло татар Хәсән Хәлфин ғаиләһендә тыуа. Ул урындағы адмирал контораһында тәржемәсе булып эшләй. 1767 йылда Яңы уложение проектын яҙыу коммиссияһына һайлана. Екатерина II сығарған указ буйынса 1769 йылда 1-се Ҡазан гимназияһында тәржемәселәр әҙерләү өсөн татар телен уҡытыуҙы индерәләр. Сәғит Хәлфин был гимназияла тәүге уҡытыусы булған, сөнки ул төрки, ғәрәп, фарсы һәм урыҫ телдәрен белгән. Бүләк рәүешендә үҙе һәм балалары һалымдан азат ителә. Сәғит Хәлфин үлгәс, уның эшен улы Исхаҡ (?–1800 (?)) һәм ейәне Ибраһим (1778–1829) дауам итә. Улар ҙа тәржемәләр, урыҫ-фарсы һүҙлектәре төҙөү, татар телен өйрәнеү өсөн китаптар сығарыу менән шөғөлләнә.

Ә.Вәлиди был мәҡәләһе өҫтөндә эшләгәндә Рәсәй ғалимдарының күп кенә тикшеренеүҙәрен, шулай уҡ Ҡазан университеты һәм 1-се Ҡазан гимназияһының архив материалдарын ҡуллана. Архив документтарына һылтанма эшләгәндә автор уларҙың шифрҙарын да бирә. Быны ул “киләсәктә Хәлфиндәрҙең биографияһын тикшереүселәргә уңайлы булһын”[30] өсөн эшләй. Тикшеренеүҙә тағы бер сығанаҡ – туғандарының хәтирәләрен ҡулланырға була, тип иҫәпләгән ғалим. “Мин быны эшләй алманым”, – тип үкенә ул[31]. Ә.Вәлиди Хәлфиндәрҙең эшмәкәрлеген Рәсәйҙәге көнсығыш телдәрен өйрәнеү тарихы менән бергә тикшерә. Көнсығыш телдәре менән ҡыҙыҡһыныу Рәсәйҙә Петр I дәүерендә үк башлана һәм был батша хөкүмәтенең тышҡы сәйәсәтенә, йәғни көнсығыш күршеләренең территорияларын яулап алыуына бәйле, тип иҫәпләй. Ә.Вәлиди рәсәйлеләрҙе көнсығыш телдәрен өйрәнеүгә этәргән ике сәбәпте дөрөҫ билдәләй: “Беренсеһе – миссионерлыҡ, икенсеһе – идара эштәре”[32]. Уның фекеренсә, ошондай ихтыяждан сығып, Екатерина II Рәсәйҙә көнсығыш телдәрен фәнни өйрәнеүҙе башлап ебәрә.

Хәлфиндәр хаҡында хикәйәләүҙән тыш, мәҡәләлә ғалимдың ошо хеҙмәте өҫтөндә нисек эшләүе хаҡында байтаҡ мәғлүмәттәр бар. Мәҫәлән, ул башта был мәҡәләһен “Йондоҙ” гәзитенә баҫтырырға биреүе тураһында яҙа. Әммә эш барышында мөхәррир текстың уртаһынан ҙур булмаған өҙөктө юғалта. Ә.Вәлиди уны ала ла “Шура” журналына тапшыра һәм

шуға күрә был баҫмала ла юғалған өлөш бирелмәгән[33]. Бынан тыш, Ә.Вәлиди Хәлфиндең "Татарҙарҙы нисек ағартыу" исемле ҙур булмаған мәҡәләһен ҡасан да булһа бер тәржемә итергә уйлаған була[34]. Тик уның был матур теләге тормошҡа ашмай ҡала.

И. Хәлфиндең үҙенең халҡына ҡарата булған мөнәсәбәте тураһында Ә.Вәлидиҙең уйланыуҙары ла бик ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Быны ул Хәлфин хеҙмәттәренең нигеҙенә һалынған фекерҙәрҙе анализлап эшләргә тырыша[35]. Уныңса, Ибраһим, үҙ күҙҙәре менән халыҡтың бөтөп барыуын күреп, күрәһең, уның тергеҙелеүенә һәм киләсәгенә ышанмаған[36]. Шуның өсөн дә Вәлиди И.Хәлфиндең хеҙмәттәре башҡа урындарҙа рус студенттарына тәғәйенләнгән, тип иҫәпләй. Шуға ҡарамаҫтан, ул барыбер үҙенең халҡын ҡайғыртҡан, сөнки "билдәле бер милләт кешеһе, уның әҙәбиәте һәм тарихы менән шөғөлләнгәндә, әлбиттә, халҡы тураһында ла уйлаясаҡ"[37].

Үҙенең хеҙмәтен Ә.Вәлиди "ошо биографияларҙы киләсәктә тикшереүселәр өсөн материалдар" тип баһалай[38]. Шул йүнәлештә эшен артабан да дауам итергә уйлап, ул былай тип яҙа: "1928 йыл 13 ғинуарҙа Ибраһим Хәлфиндең вафатына бер йөҙ йыл тула. Мөмкин булһа, хоҙай насип итһә, бәлки, ул ваҡыт берниндәй эш башҡарырмын"[39]. Үкенескә ҡаршы, уның был теләге лә үтәлмәй ҡала.

Әхмәтзәки Вәлидиҙең мәҡәләһенә бихисап рәхмәт хаттары килә. Шуларҙың береһе Мәхмүт бин Ғатаулла Әл-Мөслими тарафынан ебәрелгән. Ул хатында Вәлидиҙең артабан да үҙебеҙҙең милләткә хеҙмәт итеүен теләй[40]. Әстрәхан губернияһы Ямали ауылынан Ғүмәр Алаши исемле уҡытыусынан да рәхмәт һүҙе килә. Автор Ибраһим Хәлфиндең "Дастани Сыңғыҙ хан" йәки икенсе төрлө "Сыңғыҙ-намә" тигән әҫәренең бер данаһы үҙенең китапханаһында булыуы хаҡында хәбәр итә[41]. Бында ул, әлбиттә, яңылыша. Сөнки И.Хәлфин был әҫәрҙе тик нәшер итә генә, ә әҫәр үҙе боронғо осорға ҡарай. Әммә уҡытыусы ҡулындағы дана "хөрмәтле Вәлиди тарафынан һүрәтләнгән әҫәрҙән өс айырмаһы бар"лығы менән ҡиммәтле[42].

Эшмәкәрлеге Ә.Вәлиди тарафынан тикшерелгән икенсе күренекле мосолман ғалимы – Шиһабетдин Мәржәни (1818–1889). Шундай мәшһүр мәғрифәтсегә, тарихсыға, дини реформаторға һәм философҡа ул үҙенең революцияға тиклем яҙған бик күп мәҡәләләрен бағышлай.

Билдәле татар ғалимы Шиһабетдин ибн Баһауетдин әл-Мәржәни 1818 йылдың 16 ғинуарында Ҡазанға яҡын ғына урынлашҡан Ябынсы ауылында тыуған. Ул тыуғас, атаһы Ташкисеү ауылына күсә һәм шунда ғүмеренең аҙағынаса имам була. 17 йәшкә тиклем Ш.Мәржәни атаһының мәҙрәсәһендә уҡый. Артабан Бохарала һәм Сәмәрҡәндтә белем алыуын



Тарихсы Шиһабетдин Мәржәни.

дауам итә. 1849 йылда тыуған яғына ҡайтҡас, уны 1-се Ҡазан мәсетенең баш мөғәллиме итеп ҡуялар. Әллә күпме тарихи хеҙмәттәр яҙа ул[43]. Ғалимдың мирасы бөгөнгө көнгә тиклем өйрәнелеп бөтмәгән.

Ш.Мәржәни XIX быуаттың икенсе яртыһында һәм XX быуаттың башында татар һәм башҡорт халҡының рухи мәҙәниәтенең үсешенә бик ҙур йоғонто яһай. Башҡорт әҙәбиәтсеһе Ә.И.Харисов уны "XX быуат Волга буйы һәм Урал буйы мосолман донъяһының нуры" тип ифрат дөрөҫ әйткән[44]. Күренекле аҡыл эйәһенең хеҙмәттәре Әхмәтзәки Вәлидиҙең ҡараштары үсешендә ҙур роль уйнаған.

Иң тәүҙә Мәржәни хаҡында Ә.Вәлиди үҙенең олатаһы Х.Үтәкиҙән ишетә. Х.Үтәки 1862 йылдың 12 сентябрендә хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ғафури районында Үтәк ауылында Мөхәмәтҡафи Һатлыҡов исемле указлы мулла ғаиләһендә тыуған. Ауылдашы Әмирхандың саҡырыуы буйынса ул Ҡазанға килә һәм Мәржәниҙең мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Уҡыуын тамамлағас, шунда уҡ уны мөғәллим итеп ҡалдыралар. Ҡазанда 10 йыл тирәһе йәшәй. Үҙенең остазы менән яҡшы мөнәсәбәттә була, унының менән бергә сәйәхәт итә. Һуңынан яҙмыш елдәре Х.Үтәкиҙе тыуған яҡтарына илтә һәм ул мәҙрәсәлә уҡыта башлай.

Х.Үтәки "Мифтах әт-тәуарих" ("Тарих асҡысы"), "Мәжмүғә-и мөхиммә", "Науадир тәржемәһе" тигән китаптар нәшер итә. Бынан тыш бөйөк тарихсының тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы сығарылған "Мәржәни" исемле йыйынтыҡҡа ла унының бер мәҡәләһе ингән. Бында Ә.Вәлидиҙең һәм Р.Фәхретдиновтың да мәҡәләләре бар. Улар ҡайһы ваҡыт Мәржәниҙең әйткән һүҙҙәренә һылтанма яһайҙар. "Шура" журналының 1911 йылдың 27-се һанында сыҡҡан "Мәржәни хаҡында

минең яуабым" исемле мәҡәләһендә Х.Үтәки Ш.Мәржәнизең үҙе менән аралашыу бәхете тейгән замандашы булараҡ сығыш яһай. Ул йылдарҙағы гәзиттәрҙә уның ҡәләме аҫтынан сыҡҡан ҡыҫҡа ғына хәбәрҙәр ҙә осрай. Х.Үтәки үҙ заманы өсөн бик уҡымышлы кеше була һәм ҡустыһының донъяға ҡарашы формалашыуына ҙур йоғонто яһай. Ә.Вәлиди 12 йәшкә тиклем атаһының мәҙрәсәһендә һабаҡ ала. Артабан Үтәк ауылында Хәбибназар олатаһының мәҙрәсәһендә уҡый. Уның ярҙамында ".Вәлиди Шиһабетдин Мәржәнизең рухи мираҫын, тәржемәи хәлен һәм эшмәкәрлеген өйрәнә, үҙләштерә.

1908–1909 йылдарҙа Ә.Вәлидиҙең бер нисә мәҡәләһе Әстрәханда сыҡҡан "Иҙел" гәзитендә баҫыла. Гәзитте нәшер итеүсе Ғабдрахман Ғүмәров Х.Үтәкиҙең шәкерте булған. Улар дуҫ булғандар һәм хат алышҡандар. Эмиграцияға тиклем Ә.Вәлиди Әстрәханға ике тапҡыр бара. Икенсе тапҡыр барғанында "Морат әфәнденең "Тарих"ы һәм күренекле ғалим Мәржәни" исемле мәҡәлә яҙа һәм ул 1908 йылдың 30 ғинуарында, 3 февралендә донъя күрә. Ә.Вәлиди үҙенең "Тәлфиҡ әл-әхбәр вә тәлкиһ әл-әсәр фи ваҡаиғ Ҡазан вә Болғар мөлөк әт-татар" ("Ҡазан һәм Болғар тарихы һәм татар хакимдары тураһында компилятив мәғлүмәттәр") тигән китабында Ш.Мәржәниҙе тәнҡитләгән Морат Рәмзигә ҡаршы сыға. Байтаҡ йылдарҙан һуң былай тип яҙа: "Улар ("Иҙел" гәзитендәге мәҡәләләр – *Ә.С.*) гәзит мәҡәләһе булһа ла, минең иң беренсе ғилми әҫәрҙәрем ине. Иң әүәл Морат Рәмзиҙең юғарыла иҫкә алынған әҫәрен тикшереп һәм тәнҡит итәрәк бер мәҡәлә баҫтырып сығарҙым. Был автор Мәржәнигә хаҡһыҙ рәүештә һөжүм итә ине. Мин Мәржәниҙе бер бай фекерле хоҡуҡ белгесе, Морат Рәмзиҙе иһә был тәңгәлдә түбәнерәк баһалауым сәбәпле, Мәржәниҙе бик ныҡ яҡлап, мәҡәләмде "береһенең эштәре хуш күренһә, уның ғәйептәренә лә күҙ йоморҙар, икенсеһенә асыулы булһалар, уның күлдәгендә кер эҙләй башларҙар" мәғәнәһендәге ғәрәпсә шиғыр менән тамамланым"[45].

Ҡазанда ул Мәржәниҙең ғәрәп телендә яҙылған "Вафият әл-әсләф вә тәхийәт әл-әхләф" ("Алдан йәшәүселәргә некролог, һуңынан тыуғандарға васият") исемле алты томлыҡ ҡульяҙма хеҙмәтен өйрәнә. Был ҡульяҙма китап VI–XIX быуаттарҙа киң таралған. Рәсәй мосолмандарының билдәле фән һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре тормошо һәм ижадтары тураһында биобиблиографик йыйылма була. Һөҙөмтәлә Ә.Вәлиди был хеҙмәтте үҙенең бер томлыҡ китабында төрки теленә тәржемә итеп индерә, әммә ул донъя күрмәй. Шулай ҙа 1915 йылда "Ҡазан университеты эргәһендәге Археология, тарих һәм этнография йәмғиәтенең хәбәрҙәре"ндә сыҡҡан "Татар ғалимы, тарихсыһы Мәржәниҙең тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы" исемле мәҡәләһенә нигеҙ була[46]. Был мәҡәләлә Ә.Вәлиди

ҡыҫҡаса ғына Ш.Мәржәнизең тәржемәи хәле, баҫылып сыҡҡан хеҙмәттәре тураһында яҙып үтә, ғалимдың Мавераннахрҙың һуңғы династияһы хаҡында мәғлүмәттәр йыйыуын юғары баһалай һәм һуңғы ике томды айырым билдәләп үтә. Уларҙа XVIII–XIX быуаттарҙа Урта Азия һәм Волга буйында йәшәүсе билдәле шәхестәрҙең биографияһы һәм тарихы бирелгән. Автор Урта Азияның күренекле тикшеренеүселәре, мәҫәлән, В.В.Бартольд, татарҙар араһында ла шундай тарихсылар барлығы хаҡында белмәгәндәр, тип билдәләй. 1915 йылда Ҡазанда үрҙә әйтеп үтелгән төрлө авторҙарҙың төрки телендә яҙылған хеҙмәттәре индерелгән ҙур күләмле “Мәржәни” тигән китап сыға. Йыйынтыҡҡа Ә.Вәлидизең ике мәҡәләһе лә ингән. “Рус тарихи әҙәбиәтендә Мәржәни” исемлеһе рус тарихи әҙәбиәтенән Мәржәни тураһында йыйылған материалдарҙы өйрәнеүгә бағышланған. Тарихсыларҙың Мәржәни эшмәкәрлеге менән ҡыҙыҡһыныуы хаҡында Вәлиди былай ти: “Мәржәнизең Европа ғалимдары диҡҡәтен йәлеп итерлек хеҙмәттәре тарих темаһы буйынса булғаны өсөн уның хаҡында рус әҙәбиәтендә була торған һүҙҙәр ҙә фәҡәт тарихи әҙәбиәттә генә булған”[47].

Ә.Вәлиди Ш.Мәржәнизең ғилми мираҫын баһалағанда, уның “Мостафад әл-әхбәр фи әхвәли Ҡазан вә Болғар” (“Ҡазан һәм Болғар тарихы өсөн ҡулланған мәғлүмәттәр”) исемле хеҙмәтен “иң мөһиме”[48] тип билдәләй. Баҫылмаған әҫәрҙәре араһынан иң әһәмиәтлеһе тип “Вафият әл-әсләф вә тәхийәт әл-әхләф” исемлеһен айырып күрһәтә.

Әхмәтзәки Вәлидизең йыйынтыҡта баҫылып сыҡҡан икенсе мәҡәләһе шул осорҙоң ике бөйөк шәхесе – Шиһабетдин Мәржәни менән Ҡәйүм Насыризың үҙ-ара мөнәсәбәтен сағылдыра. Ул “Мәржәнизең бер әҫәре тураһында Ҡәйүм Насыри” тип исемләнә. Олатаһы Хәбибназарҙың шәкерте булған саҡта уҡ ошо кешеләрҙең мөнсәбәте хаҡында белгән. Сөнки уға олатаһы “Ҡәйүм менән Мәржәнизең араһында һис бер ваҡыт яҡшы мөнәсәбәт булманы”[49] тип һөйләгән.

Ҡайһы бер татар ғалимдары был ысынбарлыҡты кире ҡағалар. Мәҫәлән, М.Х.Йосопов: “Шиһабетдин Мәржәни үҙенең замандашы, мәғрифәтсе Ҡәйүм Насырига ҡарағанда етди фекер йөрөткән ғалим ул“, – тип яҙған[50]. Ошо хәл айырым ғалимдар тарафынан Ҡ.Насыри менән Ш.Мәржәнизе ҡапма-ҡаршы ҡуйыуҙың сәбәбелер, тип фараз итә Йосопов.

Ә.Вәлидизең атап кителгән хеҙмәтендә Ҡ.Насыриҙың үҙе нәшер иткән календарҙа 1885 йылда баҫылып сыҡҡан, бер кемгә лә билдәле булмаған мәҡәләһе хаҡында һүҙ бара. Бында автор Хисаметдин Мөслимизең “Тауарихи болғария” (“Болғар тарихы”) исемле хеҙмәтенә ҡарата әйткән Ш.Мәржәнизең тәнҡит һүҙҙәрен, йәғни уны яһалма әйбер тип атауын, кире ҡаға. Ә.Вәлиди был тәнҡит мәҡәләһен үҙенекенә индерә һәм тикшерә. Ул

Насыриҙың тәнҡит һүҙҙәрен кире ҡаға, Мәржәниҙең иҫбатлауын дөрөҫ тип һанай. Был урында Ҡ.Насыриҙың мәҡәләһен Ә.Вәлиди үҙе табыуын билдәләп үтергә кәрәк, сөнки Мәржәниҙең автор булараҡ исеме лә, хеҙмәттәре лә календарҙағы мәҡәләлә күрһәтелмәгән булған.

Ә.Вәлидиҙең ошо йыйынтыҡтағы ике мәҡәләһе лә 1912 йылда яҙылған һәм һуңынан беренсе мәҡәләһе 1914 йылда яңынан эшкәртелгән[51].

Вәлиди үҙенең "Мәржәни рус тарихи әҙәбиәтендә" Мәржәниҙең "Ғорфат әл-хауаҡин лигарфат әл-хауаҡин" ("Хакандарҙың тормошон өйрәнеү өсөн уларҙың торлағы") исемле хеҙмәте хаҡында яҙған мәҡәләһе тураһында хәбәр итә. Әхмәтзәки Вәлидиҙең был мәҡәләһе 1914 йылда "Аң" журналының 4-се һанында сыға башлай ҙа ни сәбәптәндер туҡталып ҡала[52]. Беҙ был журналдың 1914 йылда сыҡҡан барлыҡ һандарын ҡарап сыҡтыҡ, әммә уның дауамын тапманыҡ.

Ә.Вәлидиҙең был мәҡәләһе "Урта Азия тарихы буйынса Шиһабетдин хәҙрәттең бөйөк хеҙмәте" тип атала. Ул "Бөйөк ижадсының яҡынлашҡан тантанаһына әҙерлек" рубрикаһы аҫтында донъя күрә һәм рус, Көнбайыш Европа телдәрендә сыҡҡан әҙәбиәтте ҡулланып яҙылған. Мәҡәлә VI–XII быуаттарҙағы Төркөстан тарихы буйынса Мәржәниҙең үрҙә күрһәтелгән хеҙмәтен өйрәнеүгә арналған. Урта Азия тарихын өйрәнгәндә был мәҡәләнең әһәмиәтен баһалап, Вәлиди уның ролен Волга буйы тарихын тикшергәндә "Мостафад әл-әхбәр фи әхүәли Ҡазан вә Болғар" ("Ҡазан һәм Болғар тарихында ҡулланған мәғлүмәттәр") әҫәренең роле менән сағыштыра[53].

Мәржәниҙең "Ғорфат әл-хауаҡин лиғарфат әл-хауаҡин" тигән китабы бәләкәй тираж менән нәшер ителгән. Шуға күрә Урта Азияны өйрәнеүсе күп кенә билдәле ғалимдар уның менән таныша алмай. В.В.Бартольдтың "Монголдар дәүерендә Төркөстан" исемле хеҙмәте баҫылып сыҡҡанға тиклем Ш.Мәржәниҙең китабы ҡараханлылар тарихы буйынса иң яҡшы һәм тулы эштәрҙең береһе ине тип, Вәлиди бик дөрөҫ баһа бирә. Ул Мәржәниҙең был хеҙмәтен Бартольд күрмәүенә, Бартольдтың әҫәрҙәрен Мәржәни уҡымайынса вафат булыуына ҙур үкенес белдерә[54]. Ә.Вәлиди фекеренсә, әгәр Шиһабетдин хәҙрәттең был китабы, телгә алынмаған әҫәрҙәренең йыйынтығы донъя күрһә, уның тарих буйынса яҙылған хеҙмәттәре яртылаш ҡына яҡтыртылған булыр ине[55]. Был Ш.Мәржәни хеҙмәтенең бик ҡиммәтле, оло баһаға эйә булыуын күрһәтә.

1915 йылда "Сөйөмбикә" журналының 6-сы һанында Ә.Вәлидиҙең "Мәржәни хаҡында кескенәлегемдә яҙған бәғзе нәмәләр мөнәсәбәте менән" тигән мәҡәләһе баҫылып сыға. Бында ул бала сағында нисек олатаһы Хәбибназар Үтәки һәм Шафиҡ ахундың һөйләшкәндәрен тыңлап, яҙып ултырыуы хаҡында бәйән итә. Шафиҡ ахунға Ш.Мәржәни үҙенең китаптарын йыш ҡына ебәреп торған була. Олатаһы һәм остазы булған

Хәбибназар хәҙрәт Ш.Мәржәниҙең иң ихлас шәкерттәренән һәм мәшһүр хәлфәләренән булған, тип яҙа Вәлиди мәҡәләнең башында. Уның фекеренсә, Х.Үтәкиҙең донъяға ҡарашы Ш.Мәржәниҙекенә ҡарағанда күпкә сикләнгән. Әммә Хәбибназар хәҙрәт үҙ остазының эшен ышаныслы дауам итеүсе икәнен билдәләп үтмәү яҙыҡ булыр, ти. Шуға ла Ә.Вәлиди үҙен уның аша Мәржәниҙең шәкерте тип иҫәпләгән. Мәржәниҙе ул бөйөк мосолман ғалимы имам Әғзәм менән бер рәттән ҡабул иткән.

Мәҡәләһен яҙғанда Ә.Вәлиди 1906–1907 йылдарҙағы яҙмаларын ҡулланған. Уларҙа үрҙә телгә алынған шәхестәрҙән ишеткән мәғлүмәттәр булған. Был мәҡәлә Ә.Вәлиди тәрбиәләнгән мөхитте аңлауҙа ҙур әһәмиәткә эйә. Уны буласаҡ ғалимдың тәүге "Хәтирәләр"е тип атарға була, сөнки ул үткән ҡыҙыҡлы ваҡиғалар тураһында һөйләй. Мәҫәлән, ул нисек ҡыш көнө санала күрше ауылдан Шафиҡ ахунды килтереүе хаҡында иҫкә ала. Ә.Вәлиди былай тип яҙа: "Ахун хәҙрәт шуларҙы һөйләй-һөйләй миңә әйтә ине: "Улым, инде шул Мәржәни кеүек булһаң ине". Мин дә артынан уҡ эсемдән: "Я, рабби, Мәржәни кеүек булһам ине", – тип хоҙайҙан теләй инем"[56].

Ә.Вәлиди мәҡәләһендә Мәржәни мәҙрәсәһендәге уҡытыу алымдары хаҡында ла һөйләй. Был хаҡта 1914 йылда "Шура" журналының 9-сы һанында сыҡҡан "Мәржәни" мәҡәләһендә яҙып сыға. Бында ул Ш.Мәржәниҙең рус теле буйынса белеме тураһында ла һүҙ йөрөтә. Ә.Вәлиди ғалимдың рус сығанаҡтарын ҡулланыуын иҫбатлай. Уныңса, М.Рәмзиҙең "Тәлфиҡ әл-әхбәр вә тәлҡих әл-әсәр фи ваҡаиғ Ҡазан вә Болғар мөлөк әт-татар" ("Ҡазан һәм Болғар тарихы һәм татар хакимдары тураһында компилятив мәғлүмәттәр") исемле китабындағы тәнҡит урынһыҙ. Сөнки, Морат Рәмзи фекеренсә, сығанаҡтарҙа булмаған һүҙҙәр, рус йылъяҙмаларында осрай. Ул Ш.Мәржәниҙең рус сығанаҡтарынан файҙаланыуына бик күп миҫалдар килтерә. Хәҙерге заман татар тарихсыһы М.Х.Йосоповтоң мәғлүмәттәре буйынса, Ш.Мәржәни рус телен белгән, әммә етерлек камилдә түгел[57].

1969 йылда Истанбулда Ә.Вәлидиҙең "Хәтирәләр"е донъя күрә. Унда Х.Үтәкигә һәм Ш.Мәржәнигә ҙур ғына урын бүленгән. Китапта үҙенең олатаһын "башҡорт еренә Ҡазан йоғонтоһон үткәреүсе" тип атай һәм Ш.Мәржәни Башҡортостанда Шиһаб хәҙрәт исеме аҫтында билдәле булған, тип яҙа. Уның һүҙҙәренсә, Хәбибназар Үтәкигә "Шиһаб мулланың шәкерте" тип ҡарағандар[58].

Мәржәниҙең "Мостафад әл-әхбәр фи әһвәли Ҡазан вә Болғар" тигән китабында башҡорттарҙа фаллос культы хаҡында Ибн Фаҙландың юлъяҙмалары нигеҙендә яҙылған мәғлүмәттәр осрай. Ә.Вәлиди, автор шаманизмға ҡараған "тес" һүҙен яңылыш аңлата, тип иҫәпләй. Ул Муллаҡай ауылынан ғәрәп теле белгесе Ғабдулла хәҙрәт (хәҙер был ауыл

Башҡортостан Республикаһының Ишембай районында урынлашҡан) атаһының алдында Мәрйәниҙең был хеҙмәтен утҡа яға, тип яҙған.

Ә.Вәлиди “Хәтирәләр”ендә XIX быуаттың беренсе яртыһында йәшәгән Ғариф Һайрани хаҡында ла яҙып үтә. Ғ.Һайрани Ш.Мәржәниҙең «Әт-тәриҡәт әл-мутһла» исемле китабын уҡып, илһамланып, Бохараға уҡырға сығып китә. Әммә Бохарала күргәндәрҙән унын күңеле ҡайта. Ул Ә.Вәлидиҙең атаһына хат яҙа һәм уны Р.Фәхретдинов менән М.Рәмзигә тапшыра. Һуңғылары был хатты баҫтырып сығарған. Тағы ла бер хат Ш.Мәржәниҙең китабында бирелә[59].

Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең китабына Мәржәниҙең эшен дауам итеүселәр – олатаһы һәм уның ике иптәшенә бағышланған шиғырҙар индергән:

Назар, Ғәббәс һәм Саҙри –
Шәкерт икән үҙҙәре.
Типтерәләр бик оҫта,
Тәтәйҙәрҙә күҙҙәре[38].




**Х.Үтәки һәм иптәштәре тураһындағы таҡмаҡтың Ғиффәт Эрин тарафынан нотаға һалынған көйө.**

Был шиғырҙы Ш.Мәржәнигә ҡаршы кешеләр сығарған һәм ул Истанбулға тиклем таралған. Ә.Вәлиди Төркиәгә килгәс, ошо шиғырға һалынған көйҙөң ноталарын Ҡазан мырҙаһы Ғүмәр Тереғоловтың ҡыҙы Иффет Эриндан яҙҙырып алып, “Хәтирәләр”гә ҡушымта итеп бирә. “Мәржәни һәм уның ғилми хеҙмәттәре” тигән ҙур булмаған бүлектә ул Мәскәүҙәге төрөк илсеһе профессор Әли Мозаффар бей ярҙамында Истанбул университеты өсөн “Вафийәт әл-әсләф вә тәхийәт әл-әхләф” исемле ҡулъяҙманың күсермәһен алырға тырышыуы хаҡында яҙа. Әммә тырышлығы бушҡа китә.



Этнограф Әбүбәкер Диваев.

Тағы бер мосолман ғалимы, сығышы менән башҡорт Әбүбәкер Әхмәтйән улы Диваев (1855 (56?) – 1933) тураһында ла Ә.Вәлиди яҙып сыға. Ул мырҙалар затынан була. Олатаһы Шаһиморат старшина булған. Атаһы хәрби хеҙмәт өсөн дворян титулын ала һәм Ырымбурҙа төпләнә. Ә.Диваев, Неплюев исемендәге кадет корпусын тамамлағас, Урта Азияла хеҙмәт итә башлай. Бында ул үзбәк, ҡаҙаҡ һәм ҡырғыҙ халыҡтарының тормошо, йәшәйеше, фольклоры менән яҡындан танышҡан, этнографик материалдар йыйған, Урта Азия төрки халыҡтарының ауыҙ-тел ижады өлгөләрен яҙып алған һәм уларҙы Рәсәйҙә сыҡҡан баҫмаларҙа нәшер иткән. 1896 йылда Ә.Диваев Төркөстан археология һөйөүселәр түңәрәгенең тулы хоҡуҡлы ағзаһы итеп һайланыла. 1917 йылда революция ваҡиғаларынан һуң ул Төркөстан халыҡ университеты һәм Төркөстан көнсығыш университетында мөғәллимлек итә.

1884 йылда Һырдаръя губернаһының генерал-губернаторы Н.И.Гродековтың урындағы халыҡтың фольклорын һәм этнографияһын өйрәнергә теләүе Ә.Диваевтың этнография менән шөғөлләнә башлауына сәбәп була. Н.И.Гродеков фән өсөн түгел, ә шул рәүешле Урта Азия халыҡтарын Рәсәйгә тағы ла нығыраҡ буйһондороу өсөн тырыша. Маҡсатына ирешеү өсөн ул был эшкә аҫаба халыҡтың теле, ғөрөф-ғәҙәттәре буйынса белгес Ә.Диваевты йәлеп итә[61].

Ә.Вәлиди унын менән Урта Азияға тәүге тапҡыр командировкаға барған сағында таныша. Был танышыу бик файҙалы була, сөнки Ә.Диваев аша ул бик күп билдәле кешеләр менән аралаша башлай. Ошо хаҡта "Хәтирәләр"ендә еңтекле итеп яҙа: "Ул мине Ташкентта шулай уҡ батша ғәскәрендәге башҡорт офицерҙарынан Көсөков һәм татарҙарҙан генерал Еникеев, Сәмәрҡәндтә ҡырғыҙҙар генерал Колчанов һәм Мирбәдәлиев, башҡорт Әҡимбәтов менән таныштырҙы. Ҡайҙа ғына барһам да, унда Әбүбәкер ағайҙың мине таныҡкан һәм тәҡдим иткән

хаттары килеүен күрҙем. Ҡаҙаҡтарҙан ул саҡ гимназия уҡыусыһы, һуңынан коммунист Нәзир Түрәҡол (Түрәҡолов), Ташкенттан Петербург университеты хоҡуҡ бүлеге студенты Мостафа Чокаев, үзбәктәрҙән һуңынан шағир булған (Андижандан) Ғәбделхәмит Сөләймән, йәнә Ташкенттан сығышы нуғайҙарҙан булған тарихсы Полат Сәли, үзбәктәрҙән Мәнәүер Ҡары һәм Убайдулла Хужа, Сәмәрҡәндтән Мәхмүт Хужа Беһбуди, Бохаранан Әхмәтйән Мәхдүм, йәнә ҡырғыҙҙарҙан башланғыс мәктәп уҡытыусыһы Йәноҙаҡ улы Ибраһим – шулар иҫәбенән"[62]. Улар араһынан ".Вәлиди өсөн Нәзир Түраҡол һәм Ғәбделхәмит Сөләймән (Сулпан) рухи яҡтан яҡын була[63].

1915 йылда Ә.Вәлиди Ә.Диваев тураһында "Тормош" гәзитендә ике мәҡәлә баҫтырып сығара. Беренсеһе "Өфөбөҙҙән сыҡҡан бер ғалимдың хеҙмәтенә 25 йыл тулыу мөнәсәбәте менән" тип атала[64] һәм унда билдәле этнографтың хеҙмәттәре бик ентекле һәм төплө итеп тикшерелә. Ә.Вәлиди уның фольклор әҫәрҙәрен төрки теленән урыҫсаға тәржемә итеүен баһалап, былай тип яҙа: "Әҫәрҙәрҙең русса тәржемәләре бик һәйбәт эшләнгән, Әбүбәкер әфәнде уларҙың рухын тулыһынса белеп тәржемә итә, уларҙың үҙенсәлектәрен һаҡлай, күп мәртәбә ҡаҙаҡ йырҙарын руссаға рифмалап тәржемә итте"[65].

Ә.Вәлиди фекеренсә, Ә.Диваевтың баҫылған әйберҙәренең бер генә етешһеҙлеге бар, ул да булһа – төрки телендә оригиналдың булмауы. Әммә ғәйеп ғалимда түгел, ә йыйынтыҡты нәшер итеүселәрҙә, тип билдәләй автор.

Ә.Диваевтың фәнни-тикшеренеү эшмәкәрлеген ошолай һүрәтләй: "Беҙҙең белеүебеҙсә, Әбүбәкер әфәнденең йыйған материалдары бик күп. Әгәр был хөрмәтле кеше бөтә баҫылған һәм баҫылмаған тәржемәләрен йыя алһа ине, бәлки, иншалла, уларҙы баҫтыра алырлыҡ бер һиммәт әһеле табылыр ине. Әбүбәкер әфәнде йыйған әйберҙәр беҙҙең телебеҙ һәм халҡыбыҙ өсөн баһалап бөткөһөҙ хазиналыр. Әгәр улар төрки телендә нәшер ителһә ине, уларҙың ҡиммәте беҙҙең милли тормошобоҙ өсөн тағы ла артығыраҡ булыр ине. Беҙҙең милли тормошобоҙҙоң тәрәнлектәрен белергә теләһә, уға Радлов, Диваев, Катанов, Потанин тарафынан йыйылған милли үҙенсәлектәребеҙҙе үҙгәрешһеҙ һаҡлаған төрки этнографияһы буйынса материалдарҙы өйрәнергә кәрәк"[66].

Ә.Вәлиди Ә.Диваевтың ғилми эшмәкәрлегенә тик ыңғай яҡтан ғына баһа бирә, төрки халҡының тормошон һәм йәшәйешен яҡшы белеүсе этнограф булараҡ уны хөрмәт итә. Уға фән өлкәһендә ҙур уңыштар юрап, былай ти: "Беҙҙең Өфөбөҙҙән сыҡҡан башҡорт мырҙаһы Әбүбәкер әфәнде халҡыбыҙҙың рухын һәм йәнен яҡшы белә. Ул үҙ халҡын ярата, ул уның яҡшы тарафтарын белә һәм ярата. Беҙҙең ҡарт этнографыбыҙ әле бынан

һуң да оҙон ғүмер йәшәйәсәк һәм уны халҡы ла таныясаҡ, ул үҙе лә үҙенең милли ҡәләменең эҙен һөйөклө халҡының яңы майҙанға сығып килгән һәм был хөрмәтле ҡартты ҡыҙыҡһындырған әҙәбиәтендә ҡалдырасаҡ тип өмөт итәбеҙ”[67].

Ә.Вәлидиҙең икенсе мәҡәләһе “Диваевтың юбилейы рус йәмғиәтендә” тип атала[68]. Мәҡәләлә Ә.Диваевтың юбилейы айҡанлы рус ғилми түңәрәктәрҙә үткәрелгән тантаналар һүрәтләнгән, ғалимдың этнография өлкәһендәге эшмәкәрлеге ыңғай баһаланған. Аҙағында Ә.Вәлиди 1915 йылдың 21 ноябрендә Ә.Диваевтан алған хатына һылтанма яһай. Хаттың авторы Төркөстан археология һөйөүселәр түңәрәгендә үҙенә арнап үткәрелгән тантаналы йыйылыш хаҡында яҙған.

Шулай итеп, Ә.Вәлиди ғилми-тикшеренеү эшмәкәрлегенең башланғыс осоронда төрки ғалимдарының мираҫын өйрәнеүгә мөрәжәғәт итә. Беренсенән, ул Рәсәй ғалимдарының төрлө хеҙмәттәрен, шулай уҡ архив материалдарын ҡулланып, Хәлфиндәр династияһының эшмәкәрлеге хаҡында ҙур хеҙмәт яҙа. Көнсығыш мәҙәниәтенең икенсе билдәле вәкиле – Шиһабетдин Мәржәни эшмәкәрлеген ентекле өйрәнә. Үҙенең олатаһы, Ш.Мәржәниҙең шәкерте Хәбибназар Үтәки аша Ә.Вәлиди үҙен дә уның шәкерте тип һанаған. Был күренекле ғалимдың әҫәрҙәре Вәлидиҙең донъяға ҡарашының үҫешенә ҙур йоғонто яһай. Урта Азия фольклоры һәм этнографияһы белгесе Әбүбәкер Диваев – Ә.Вәлидиҙең фәнни ҡараштарына тәьҫир итеүсе мосолман, Көнсығыштың өсөнсө мәшһүр шәхесе. Уның менән Вәлиди Төркөстанға беренсе тапҡыр барғанында таныша. Ә.Диваев ошо экспедицияны үткәреүҙә булышлыҡ итә. Айырып әйткәндә, ул яҡташыбыҙҙы Урта Азиялағы күп кенә күренекле кешеләр менән таныштыра. Уларҙың хат алышыуы ла беҙгә билдәле.

Шулай итеп, Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең ғилми ҡараштары формалашыуында ҙур урын тотҡан төрки мосолман ғалимдарының мираҫын өйрәнгән.

### Ә.Вәлидиҙең ғилми эшмәкәрлегендә Рәсәй шәрҡиәтселәренең әһәмиәте

Рәсәйҙең бик күп билдәле ғалимдары Ә.Вәлидиҙең тормошонда баһалап бөткөһөҙ ҙур урын биләй. Шуларҙың береһе – академик Василий Владимирович Бартольд (1869–1930). Революцияға тиклем үк улар йылы мөнәсәбәттә булалар. Йәш тикшеренеүселә бөтә донъяға билдәле шәрҡиәтсенең фәнни асыштарына ҡарата ҡыҙыҡһыныу уяна.



Академик В.В.Бартольд.

В.В.Бартольд Санкт-Петербург ҡалаһында тыуған. 1891 йылда Петербург университетының көнсығыш телдәре факультетын тамамлай. Уға Рәсәйҙең күренекле шәрҡиәтселәре П.М.Мелиоранскийҙа, В.В.Радловта, Н.И.Веселовскийҙа, барон Виктор Розенда уҡыу бәхете насип була. 1891–1892 йылдарҙа Көнбайыш Европаның билдәле ғилми үҙәктәрендә була. Бында ул А.Мюллер, Э.Мейер, Т.Нельдеке, Г.Хюбшман кеүек шәрҡиәтселәрҙең лекцияларын тыңлаған.

Санкт-Петербургҡа ҡайтҡас, В.В.Бартольдты университетҡа Көнсығыш тарихы кафедраһына профессор дәрәжәһенә әҙерлек өсөн ҡабул итәләр.

1899 йылда магистрлыҡ дәрәжәһенә яҙған “Монгол яулауҙары осоронда Төркөстан” исемле хеҙмәте өсөн Көнсығыш тарихы докторы дәрәжәһе бирелә. 1866 йылда Петербург университетының приват-доценты була. 1901 йылда экстраординар, ә биш йылдан ординар профессор итеп тәғәйенләнгән. 1910 йылда уны мөхбир–ағза, ә бер йылдан һуң Азия халыҡтарының әҙәбиәте һәм тарихы буйынса академик итеп һайлайҙар. 1917 йылда Рәсәй фәндәр академияһының ағзаһы була. В.В.Бартольдтың мәҡәләләре матбуғатта йыш донъя күрә, шәрҡиәт ойошмаларында ғилми һәм ойоштороу эштәрендә лә әүҙем ҡатнаша ул. Фактик материалдар һәм бер нисә көнсығыш телдәр буйынса төплө белеме Үҙәк һәм Урта Азия дәүләттәре һәм халыҡтары тарихы тураһында күп һанлы хеҙмәттәр яҙғанда кәрәге тейә. Ул донъя күләмендә билдәлелек яулай һәм Ә.Вәлидиҙең фәнни яҡтан формалашыуына үҙ өлөшөн индерә.

1913 йылда Ырымбурҙа сыҡҡан “Ваҡыт” гәзитенең 1124–1125-се һандарында Ә.Вәлидиҙең “Профессор Бартольдтың беҙҙең арала булыуы мөнәсәбәте менән” исемле мәҡәләһе баҫылып сыға. Бында ул В.В.Бартольдтың Башҡортостанда булып китеүен бәйән итә.

Академик В.В.Бартольд Өфөлә һәм Стәрлебашта була, унда йома намаҙында ҡатнаша. Ул 1720 йылда нигеҙ һалынған, башҡорттарҙың рухи һәм ижтимағи тормошонда ҙур урын алған Стәрлебаш мәҙрәсәһендә була. XIX быуат аҙағында мәҙрәсә ҙур 16 бинала урынлашып, 1897 йылғы перепись буйынса Стәрлебаш ауылында йәшәүсе һәр дүртенсе кеше шәкерт булған[69].

Үҙенең тәьҫораттары нигеҙендә В.В.Бартольд Стәрлебаш мәҙрәсәһе хаҡында бер мәҡәлә яҙа. Баҫылмай ҡалған ошо мәҡәләлә ул, Дәүләт Думаһының 1–2 саҡырыуы депутаты Мөхәмәтшакир Туҡаевтың мәғлүмәттәренә таянып, уның хаҡында тарихи белешмәләр килтерә һәм "Рәсәйҙә мосолман ғилеменең тере үҙәктәренең береһе"[70] тип атай.

Мәҙрәсәнең китапханаһы менән дә ныҡ ҡыҙыҡһына. "Ваҡыт" гәзите хәбәр итеүенсә, В.В.Бартольд, "Стәрлебаш мәҙрәсәһенең китапханаһында эҙләнеп, 100–300, хатта 500 йыл элек яҙылған ҡульяҙма китаптарҙы иғтибар һәм ләззәт менән ҡарап сыҡҡан"[71].



Әхмәтзәки Вәлидиҙең Рәсәй Фәндәр академияһы архивының Петербург филиалындағы В.В.Бартольд фондында һаҡланған фотоһы өҫтөнә: "Бартольд ағабыҙға йәдкәр. Әхмәтзәки Вәлиди", – тип яҙылған.

Үҙенең мәҡәләһендә Ә.Вәлиди мосолман халыҡтары араһында булғанда ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында ла "Көнсығыш ғилеме буйынса берәй төрлө мәсьәләне күтәреп сыҡҡан"[72] В.В.Бартольдтың шәреҡте өйрәнеүе хаҡында тик йылы һүҙҙәр генә әйткән. Ул ғалимдың ниндәй маҡсат менән килеүен белмәгән. Әммә унда "беҙҙең яҡтар фәнни тикшеренеүҙәр өлкәһенә эләгәсәк" тигән өмөт саҡҡылары уяна[73]. Йәш ғалим Урал-Волга буйы төрки халыҡтарының тарихи, этнографик һәм лингвистик планда аҙ тикшерелеүенә зарлана. Уның фекеренсә, был яҡтарҙы өйрәнергә килгән Европа ғалимдары халыҡ тормошон тик тышҡы яҡтан ғына күргәндәр. Улар башҡорт, мишәр, татар халыҡтарының мәҙәниәттәрен төптән өйрәнмәгәндәр. Боронғо тарих менән фольклор ҙа өйрәнелмәгән. Шуға ла билдәле шәрҡиәтсе килгәс, Вәлиди, ниһайәт, ғалимдарҙың Урал-Волга буйы халыҡтарына күҙ һалырҙарына өмөтләнә. "Ваҡыт"та Бартольд йәнәптәренең Ырымбурға килгәнен, Ҡарғалыға барып ҡайтыуын, унан Стәрлебаш, Өфө тарафтарынан сәфәр итәсәген ишеткәс, инде беҙҙең был тарафтар ҙа фәнни тикшеренеүҙәр аҫтына керерме әллә тигән уйға килдем", – ти ул[74].

В.В.Бартольд Урта Азия тарихы буйынса ҙур белгес була. Ә.Вәлиди уның объектив ғилми хеҙмәттәрен үҙ иткән. Уның Көнсығыш ғилемен өйрәнеүен

юғары баһалап, Вәлиди, әгәр ғалим Урал-Волга буйы тарихы менән шөғөлләнә башлаһа, “беҙҙең тарих өсөн был ҙур бәхет булыр ине”[75], тип яҙа.

Ә.Вәлиди уйлауынса, Рәсәйҙә В.В.Бартольд, Г.Н.Потанин, Н.И.Ядринцев, Н.Н.Пантусов, Полевкин, В.В.Радлов, Ф.Е.Корш кеүек ғалимдар бик әҙ. Шундай шәрҡиәтселәр һаны артһа, төрки халыҡтары тарихы насар яҙыусы, журналист һәм миссионерҙарҙан азат булыр ине.

Ә.Вәлиди В.В.Бартольдтың күп кенә әҫәрҙәренә дөйөм күҙәтеү яһай. “Монгол яулауҙары осоронда Төркөстан” исемле хеҙмәтенең (уның өсөн ғалим Көнсығыш тарихы буйынса профессор дәрәжәһенә эйә була) әһәмиәтен билдәләп: “Төрк тарихы менән шөғөлләнеүселәр өсөн һәр ваҡыт ҡулда тоторға, бәлки уны уҡымайынса төрк тарихы майҙанына сыҡмаҫҡа тейеш әҫәр”, – тип һүрәтләй[76]. Ә.Вәлидиҙең шундай уҡ юғары баһаһына В.В.Бартольдтың “Европала һәм Рәсәйҙә Көнсығышты өйрәнеү тарихы” исемле хеҙмәте лайыҡ була: “Был хеҙмәттә беҙҙең тарихты өйрәнеүсе һәр кем ҡулланырға тейеш”[77]. Шул уҡ ваҡытта Урал-Волга буйы төрки



1914–1915 йылдарҙа Ә.Вәлидиҙең тарафынан Бартольдҡа яҙған хаттары.

халыҡтарының тарихын, этнографияһын һәм телен өйрәнеү торошо менән ризаһыҙлығын белдергән. Был регион менән В.В.Бартольд кеүек объектив ҡарашлы ғалимдар шөғөлләнеүен теләй ул.

1913–1914 йылдарҙа Ә.Вәлиди ике тапҡыр Урта Азияға боронғо көнсығыш ҡулъяҙмаларын өйрәнеү өсөн экспедицияға бара. Беренсе командировкаһы алдынан Ҡазан университеты эргәһендәге Тарих, этнография һәм археология йәмғиәтенә үтенес хаты яҙа. В.В.Бартольдтың Урта Азияла ҡиммәтле ҡулъяҙмаларҙың булмауы хаҡында мәғлүмәттәренең урынһыҙ икәнлеген дәлил итеп ҡуя. Йәш ғалимдың фараздары дөрөҫ булып сыға. Һөҙөмтәлә, В.В.Бартольд та был мәсьәлә буйынса үҙенең фекерен үҙгәртә.

Алда әйтеп үткәнебеҙсә, Ә.Вәлидиҙең сәйәхәт һөҙөмтәләре В.В.Бартольд төҙәтмәләренән һуң Санкт-Петербургта “Записки Восточного отделения Императорского Русского археографического общества” йыйынтығында баҫыла.

Атаҡлы ғалим һәм йәш тикшеренеүсе революцияға тиклем үк хат алыша башлағандар. Был документтар менән иҫбатлана. Мәҫәлән, Ә.Вәлиди Урта Азияға яһаған беренсе сәйәхәтендә Ырымбурҙа туҡтай. Унда “Шура” журналының мөхәррире Ризаитдин Фәхретдинов менән осраша һәм бүләккә унан “Сыңғыҙ-намә” ҡулъяҙмаһын ала. Вәлиди, Ташкент эргәһендәге Чили исемле ауылға килеп еткәс, Р.Фәхретдиновҡа хат яҙа: “Мөхтәрәм хәзрәт! Һеҙ биргән китап, тикшеренеү һуңында аңлашылыуынса, шул “Тәлфиҡ...”тә аңлатылған Хажи Ғәбделғафар тәәлифе булған “Ғибәдәте әл-әхбәр” китабы икән. Быны Морат әфәнде тәржемә иткән ҡитғалар менән сағыштырыу һуңында белдем. Быны Бартольд та (Записки Восточн.отд.имп. Археол.общ. Т. XV. С.226–232) яҙған отчетында “Сыңғыҙ-намә” тип атай”[78]. Һәм “быны Бартольдҡа хәбәр итермен, иншалла”, – ти[79]. Был хат шуныһы менән ҡыҙыҡлы, унда Ә.Вәлидиҙең В.В.Бартольд менән бәйләнешкә инергә теләүе хаҡында яҙыла[80].

“Лотфи һәм уның диуаны” тигән хеҙмәтендә Ә.Вәлиди В.В.Бартольдҡа Лотфиҙың Азия музейында һаҡланған әҫәрҙәренең ҡулъяҙма экземплярында бер ҡасыданың барлығы тураһында һорап хат яҙыуы хаҡында һүҙ бара. Шунда уҡ 1914 йылдың 17 октябрендә алынған яуап та килтерелә. Унда ҡасыданың был йыйынтыҡта 53А – 53В биттәрендә хәмд-и салауаттан һуң бирелеүе тураһында яҙылған[81].

“Хәтирәләр”ендә Ә.Вәлиди В.В.Бартольд менән икәүһе араһындағы яҡшы мөнәсәбәтте билдәләп үтә. Бөйөк ғалим менән ул Урта Азияға яһаған беренсе сәйәхәтенән һуң Петербургка килгәс таныша. В.В.Бартольд уны күренекле шәрҡиәтселәр менән осраштыра. Йәш ориенталист аҙна һайын

Император эргәһендәге археологик һәм географик йәмғиәттә йәки В.В.Радловтың өйөндә ойошторолған көнсығышты өйрәнеү йыйылыштарында ҡатнашҡан[82]. Шуларҙың береһендә, В.В.Бартольдтың кәңәше буйынса, ул үҙенең фәнни-тикшереneү эшмәкәрлегенең киләсәк пландары хаҡында һөйләй.

Беренсе Донъя һуғышы ваҡытында В.В.Бартольд Ә.Вәлидигә хәрби хеҙмәттән ҡотолорға ярҙам итеп ҡарай[83]. Шуның өсөн уны көнсығыш телдәре мәктәбенә мөғәллим сифатында урынлаштырырға уйлай, әммә килеп сыҡмай. Шуға Ә.Вәлиди уның кәңәше буйынса Ҡазанға китә һәм рус булмаған халыҡтар мәктәбе уҡытыусыһы дәрәжәһенә имтихандар бирә. Һөҙөмтәлә хәрби хеҙмәттән ҡотола[84].

В.В.Бартольд Ә.Вәлидиҙе Петербург университетының көнсығыш телдәре факультетына уҡырға инергә һәм уны Урта Азияны өйрәнеү буйынса Халыҡ-ара комитет эшмәкәрлегенә йәлеп итергә, шулай уҡ мосолман сығанаҡтарын өйрәнеү өсөн Көнбайыш Европа илдәренә ебәрергә тырыша. Әммә башланған һуғыш бөтә уй-хыялдарын емерә[85].

Граждандар һуғышы йылдарында башҡорт ғәскәрҙәре Петроградта саҡта, Ә.Вәлиди хәтирәләре буйынса, ул күп кенә билдәле шәрҡиәтселәргә, шул иҫәптән В.В.Бартольдҡа ла, матди ярҙам күрһәтә[86].

Эмиграциянан һуң да Ә.Вәлиди В.В.Бартольд менән яҡындан аралашырға теләй. Был хаҡта беҙ уның 1924 йылдың 12 апрелендә Берлиндағы СССР-ҙың Тулы хоҡуҡлы вәкиле Н.Н.Крестинскийға яҙған хатынан беләбеҙ. Унда, беренсенән, ҡатыны Нәфисәгә бала менән Советтар Союзынан сығырға[87], икенсенән, ҡатыны уның шәхси ғилми китапханаһын үҙе менән бергә алырға, шулай уҡ Башҡортостанда ҡалған туғандары, Рәсәйҙең ҡайһы бер атаҡлы ғалимдары һәм ғилми ойошмалар менән хат алышырға рөхсәт һорай. Ул былай тип яҙа: "Инҡилаптан алдағы бөтә ғилми эшмәкәрлегем рус ориенталистары даирәләре менән бик тығыҙ бәйле булғанлыҡтан миңә хәҙер Рәсәй ғалимдары менән бәйләнешкә инергә бик кәрәк. Ленинградтан 1) академик Бартольд, 2) профессор Самойлович; Мәскәүҙән 3) профессор Гордлевский; Ташкенттан 4) профессор Шмидт, 5) Әбүбәкер Диваев, Ҡазандағы, Ырымбурҙағы һәм Ташкенттағы халыҡ мәғарифы комиссариаты ғилми комиссиялары менән хат һәм китаптар алышырға теләр инем.

Гәзиттәрҙән минең менән хат алышҡан ҡайһы бер кешеләрҙең ҡулға алыныуы хаҡында белгәндән һуң ошо үтенес менән мөрәжәғәт итергә бурыслымын. Рәсәй хөкүмәте миңә юғарыла иҫкә алынған кешеләр менән ғилми мөнәсәбәттә булырға рөхсәт итһә һәм уларҙы минең менән ниндәйҙер сәйәси бәйләнештә тороуҙа ғәйепләмәһә ине, сөнки Совет Рәсәй хөкүмәте

әле булһа минең Рәсәй эсендәге теге йәки был сәйәси төркөмдәрҙең эшмәкәрлегенә бер ниндәй мөнәсәбәтем булмауы хаҡындағы белдереүемдең эскерһеҙ булыуына ышанмауын дауам итә"[88].

1926 йылда академик В.В.Бартольд, Төрөк Республикаһы хөкүмәтенең һорауын үтәп, Урта Азия төрки халыҡтарының тарихы буйынса ун ике дәрестән торған хеҙмәт яҙа. Бынан тыш, ул Төркиәгә командировкаға бара һәм Истанбул университетының Төркиәт институтында лекциялар уҡый[89]. Уның исеменән лекцияларын йәш төрөк тюркологы Рәғиб Холоси төрөксә уҡый. В.В.Бартольд дәрестәренең беренсе өлөшөн төрөк теленә Ә.Вәлиди тәржемә итә, ә икенсе өлөшөн – Р.Холоси[90]. Был лекциялар 1927 йылда Истанбулда донъя күрә. Командировкаларға В.В.Бартольд Вәлиди менән сыға. Буш ваҡыттарында Истанбул китапханаларында көнсығыш ҡулъяҙмаларын өйрәнеү менән мәшғүл була. Айырып әйткәндә, Истанбул университетының, Йылдыз-кешк һарайының, Төпҡапы Һарайының, Кепрюлю, Ая-Суфия, Нуру-Ғосманиә, Фатих һәм Сөләймәниә китапханаларында эшләй. Бында уға Ә.Вәлиди ҙур ярҙам күрһәтә. Сөнки В.В.Бартольд әйтеүенсә, ул Константинополь китапханалары менән яҡшы таныш һәм, үҙенең фәнни приоритетын ҡайғыртып тормайынса, ҡайһы бер уникаль әҫәрҙәрҙе күрһәтә[91]. Төркиәгә сәйәхәте хаҡында шәрҡиәтселәр коллегияһы ултырышында яһаған сығышында В.Бартольд: "Үҙенең фәнни приоритетын ҡайғыртмайынса ҡулъяҙмаларҙың бик күп нөсхәләренә һәм һирәк экземплярҙарына телдән һәм шәхси хаттар аша иғтибар иттергән беҙҙең "Көнсығыш бүлегенең хәбәрҙәре" буйынса коллегабыҙ Әхмәтзәки Вәлидовтың мәғлүмәттәре иң күп файҙа бирҙе. Әгәр эшләргә тура килгән бөтә яңы табылған ҡулъяҙмалар өсөн булмаған хәлдә лә, уларҙың күпселеге өсөн мин Әхмәтзәки Вәлидигә бурыслымын"[92], – тип билдәләй.

1963–1977 йылдарҙа Мәскәүҙә В.В.Бартольдтың 9 томлыҡ әҫәрҙәр йыйынтығы сыға һәм унда үрҙә телгә алынған 12 лекция ла индерелә. Рус телендәге ҡулъяҙманы Истанбул университеты профессоры Әхмәтзәки Вәлиди Туған ебәрә. Һәм ул В.Бартольдтың ошо әҫәре буйынса Т.Менцель тарафынан эшләнгән немец телендәге тәржемәһенә 1937 йылда баһалама яҙа.

1932 йылдың июлендә Төркиәлә үткән Төрөк тарих йәмғиәтенең Беренсе конгресында төрөк тарихы ысулдарының мөһим мәсьәләләре ҡарала. Төрөк дәүләте башлығы – Мостафа Кемаль Ататөрк ҡурсалауы аҫтында барған конгреста рәсми тарих мәсьәләһе ҡаралырға тейеш булған. Гректарҙың дәғүәһенә ҡаршы Ататөрк төрки халҡының гректарға тиклемге Анатолияла йәшәүен фәнни иҫбатларға теләй. Конгреста Урта

Азияның сүллеккә әйләнеү мәсьәләһе ҡарала. Был хаҡта Ә.Вәлиди ҙә сығыш яһай. Урта Азияның ҡороуын иҫбатларға тырышҡан яңы рәсми тарихи теорияға ҡаршы сығып, Вәлиди В.В.Бартольдтың да хеҙмәттәрен ҡуллана. Шуның арҡаһында В.Бартольд та конгреста ныҡ ҡына тәнҡит утына эләгә. Доктор Рәғиб Ғалиб хатта ғалимдың Төркиәгә килеүенә, Истанбул университетында лекциялар уҡыуына һәм Төркиәлә хеҙмәттәрен нәшер итеүенә үкенеп ҡуя. Ә бер уҡытыусы В.Бартольдты "төрки халҡының дошманы" тип тә атай[93].

1939 йылда Ә.Вәлиди "Ибн Фаҙландың юлъяҙмалары" тигән китап баҫтырып сығара һәм уны үҙенең дуҫы һәм остазы В.В.Бартольдҡа бағышлай[94]. Үҙ сиратында В.В.Бартольд "Монгол яулауҙарына тиклем Төркөстан" исемле китабында «Ә.З.Вәлиди дуҫы"нан[95] алған мәғлүмәттәргә һылтана.

Ә.Вәлиди менән В.В.Бартольд, ғалимдар булараҡ, бер-береһенең хеҙмәттәрен объектив баһалағандар, хаталарын тәнҡитләгәндәр. Мәҫәлән, В.В.Бартольдтың «төркиҙәр Төркөстандың аҫаба халыҡтары түгел», тигән фекеренә Ә.Вәлиди ҡаршы сыға һәм был хаҡта "Көнсығыш тураһында яңы әҫәрҙәр" мәҡәләһендә яҙа[96].

Ул шул тиклем әсе тәнҡитләй, хатта В.В.Бартольд "Ваҡыт" гәзитендә яуап бирә. Былай тиелә унда: "Был телмәремдә мин Төркөстанды төркиҙәрҙең боронғо Ватаны тип иҫбат итергә тырышҡан татар мөхәррирҙәре тураһында яҙҙым. Рус һәм Көнбайыш Европа (бигерәк тә немец) тарихсылары тарафынан Төркөстандың төп халҡы ирандар булыуы һәм төркиләшеүе беҙҙең эраның VI быуатында башланыуы күптән инде ҡабул ителгән. Мин шулай уҡ үткәндәр хаҡында һөйләнем. Уның киләсәккә бер ниндәй ҙә мөнәсәбәте юҡ. Минең мәҡәләмдә "төркиҙәрҙе Төркөстандан ҡыуыу тураһында" бер һүҙ ҙә юҡ. Киреһенсә, мин һәр хәлдә Төркөстандың киләсәген төркиҙәр менән бәйләйем. Төркөстандың бөтә тарихы уның яйлап төркиләшеүе менән бәйле. Был күренеш Төркөстандың Рәсәйгә ҡушылыуынан һуң да туҡтаманы, хатта, киреһенсә, элеккеһе менән сағыштырмаса көсәйҙе... Был күренешкә ҡаршы тороу бер ниндәй ҙә файҙа бирмәйәсәк. Минең хаҡымда төрки милләте тураһында мин бер ҡасан да әйтмәгәнде һөйләмәүҙәрен теләйем. Был минең өсөн әһәмиәтле"[97].

1919 йылдың 19 июнендә В.В.Бартольдҡа Сәғәҙиев тигән кеше артынан ебәргән хатында Ә.Вәлиди "үҙәк совет гәзиттәрендә Рәсәй тарихы һәм дөйөм тарих буйынса дәреслектәрҙәге Көнсығыш, мосолмансылыҡ, төрөк-татарҙар һәм Көнсығыштың кешелек тарихындағы роле хаҡында яҙылған урындарҙы үҙгәртеү тураһында мәсьәлә ҡуҙғатыуын" һорай. Унда: "Һеҙ бит батша режимы ваҡытында ла Европа тарихы донъя тарихы түгелдер тип күп тапҡыр яҙғайнығыҙ. Мин Көнбайыш тарихы яңыса яҡтыртылған



[redacted]

яңы дәреслектәрҙе күрҙем, ләкин Көнсығышҡа ҡарата элекке система һаҡланған", – тиелә[98]. Был хат ошондай ауыр йылдарҙа ла Ә.Вәлидиҙең тарих ысулдарында хәҡиҡәт зарурлығына ҙур иғтибар бүлеүен күрһәтеп тора.

Эмиграцияның башында 1923 йылда Ә.Вәлиди Мешхед тигән иран ҡалаһына килә һәм өс көн буйы Рауза-и имам Ризаның систематик каталогы булмаған китапханаһын өйрәнеү менән мәшғүл була. Уға тиклем дә Мешхедҡа ошо китапхананы өйрәнеү маҡсаты менән 1858 йылда Н.В.Ханыков, ә 1919 йылда В.А.Иванов килеп китәләр. Әммә Ә.Вәлидиҙең билдәләүенсә, был ориенталистарға китапхананың үҙендә булырға тура килмәй[99]. Китапханала ул быға тиклем тикшеренеүселәр тарафынан телгә алынған ҡулъяҙмаларҙы өйрәнгән. Улар араһында Ибн әл-Факихтың, Әбү-Дүләфтең һәм Ибн Фаҙландың әҫәрҙәре лә булған[100]. Шулай итеп, ул быға тиклем Яҡут әҫәрҙәрендәге һылтанмалар аша ғына шәрҡиәтселәргә билдәле булған Ибн Фаҙландың әҫәрен өр-яңынан аса. Тексты тикшергәс, Вәлиди: "В.В.Бартольдтың фараздарына ҡаршы барон Розендың: "Ибн Фаҙландың китабын күргән һәм баштан аҙағына тиклем уҡыған берҙән-бер билдәле яҙыусы Яҡут", – тип әйтеүе тулыһынса дөрөҫ булыуы асыҡланды", – тип яҙа[101]. Бында шуны ла билдәләп үтергә кәрәк, В.В.Бартольд адресына әйтелгән иҫкәрмәләр баҫмаға Бартольдтың үҙе тарафынан бирелә. Ә.Вәлидиҙең "Ибн әл-Факихтың Мешхедтағы ҡулъяҙмаһы" исемле мәҡәләһен В.В.Бартольд Тарихи фәндәр һәм филология бүлегенең 1924 йылдың 24 июлендә үткән ултырышында баҫмаға тәҡдим итә[102]. Һуңыраҡ Ә.Вәлиди В.Бартольдтың ҡараштары дөрөҫ икәнлеген таный. Был миҫал ошо ике билдәле фән әһелдәре араһындағы дуҫлыҡты һәм мөнәсәбәттәренең объектив характерҙа булыуын тағы бер мәртәбә иҫбатлай.

"Хәҙерге ваҡытта, Ленинградта рус профессоры Бартольд үлгәндән һуң, Урта Азия тарихы һәм географияһы буйынса бик юғары белемле профессор Зәки Вәлиди был өлкәлә бөтә донъяла билдәле тере корифей булып ҡалды"[103], – тип яҙа 1937 йылда немец профессоры П.Каале.

Икенсе немец профессоры Карл Ян, Ә.Вәлиди үлгәс, ошондай һүҙҙәр әйтә: "XIX–XX быуат башы рус тарихсылары мәктәбенең эшмәкәрлеге тамамланды. Сөнки В.Бартольд һәм В. Минорскийҙан һуң хәҙер инде Зәки Вәлиди Туған да вафат булды"[104].

Революцияға тиклем Ә.Вәлидиҙең донъяға ҡараштары формалашыуына ҙур йоғонто яһаған ғалимдарҙың береһе – профессор Н.Ф.Катанов (1842–1922). Ул сығышы буйынса хакас милләтенән. Алдағы бүлектә әйтеп үтелеүенсә, Ә.Вәлиди Ҡазанға килгәс, уны Ҡазан университеты эргәһендәге Археология, тарих һәм этнография йәмғиәтенең рәйесе итеп һайлайҙар. Н.Ф.Катанов Ә.Вәлидиҙе Урта Азияға көнсығыш ҡулъяҙмаларын

өйрәнергә командировкаға ебәрергә ярҙам иткән.

Ә.Вәлиди Н.Ф.Катанов һәм Н.И.Ашмарин менән рус булмаған халыҡтар өсөн уҡытыусылар семинарияһы уҡытыусыһы Емельянов аша таныша. Емельяновтан ул рус әҙәбиәте һәм тарих буйынса һабаҡтар алған[105]. Профессор Н.Ф.Катанов менән танышлыҡ Ә.Вәлидиҙең фәнни яҡтан үҫеүендә бик әһәмиәтле була. Күренекле ғалим үҙенең йәш коллегаһына ныҡ ярҙам итә. Ул шәхси китапханаһындағы китаптарҙы ҡулланырға рөхсәт иткән, Көнсығыш ғилеме буйынса сығанаҡтар һәм китаптар табыуҙа ярҙам күрһәткән, файҙалы кәңәштәр биргән[106]. Уның ярҙамы менән Ә.Вәлиди Лондондан Мирхонд һәм Хондемир китаптарының күсермәләрен, Бабурҙың хәтирәләрен яҙҙыртып ала[107].



Профессор Н.Ф.Катанов.

Ә.Вәлидиҙең немец теленән уҡытыусыһы Риклитский уға телде өйрәнгән саҡта ғәрәп, фарсы һәм төрки телдәрендәге әҫәрҙәрҙе немец телендәге тәржемәләре менән сағыштырырға һәм шул рәүешле тел нескәлектәренә төшөнөргә кәңәш итә. Быны профессор Катанов та хуплай һәм уға Радловтың "Образцы народной литературы тюркских племен" тигән китабын, "Ҡотаҙғу белек"те өйрәнергә тәҡдим итә. Уларҙы сағыштырып тикшереү нигеҙендә Ә.Вәлиди "Йырҙарыбыҙ хаҡында" исемле мәҡәлә яҙа һәм уны "Шура" журналында баҫтырып сығара. Мәҡәлә Н.Ф.Катановтың юғары баһаһына лайыҡ була[108].

Ә.Вәлиди, Н.Ф.Катанов әйтеүе буйынса, Ҡазан университетының филология факультетында лекциялар тыңлауын иҫкә ала. Унда уға В.А.Богородицкий, М.М.Хвостов, К.В.Харлампович кеүек күп кенә билдәле Рәсәй ғалимдарының лекцияларында булыу бәхете эләгә һәм уның аң-ғилем даирәһе тағы лә киңәйә.

"Хәтирәләр"ендә Ә.Вәлиди үҙенең фәнни яҡтан формалашыуында Н.Ф.Катановтың, В.В.Бартольдтың, В.А.Богородицкийҙың уйнаған ролдәре хаҡында тик йылылыҡ һәм рәхмәт һүҙҙәре менән иҫкә ала. Мәҫәлән, ул 1915 йылда Дәүләт Думаһы мосолман фракцияһының депутаттарына ярҙамға Өфө губернаһынан вәкил итеп һайлана. Ул

ваҡытта Ә.Вәлиди үрҙә телгә алынған ғалимдарға үҙенең сәйәси эшмәкәрлегенең ваҡытлыса булыуы хаҡында хат яҙа[109]. Һәм шулай була ла. Оҙайлы ғына ваҡыт арауығынан һуң ул ғилми-тикшеренеү эшмәкәрлегенә кире әйләнеп ҡайта. 1935 йылда Ә.Вәлиди диссертация яҡлай һәм Бонн университетының исламды өйрәнеү буйынса почетлы профессоры дәрәжәһенә лайыҡ була. Унда ул, билдәле профессорҙар П.Кале һәм О.Шпис менән фотоға төшөп, ошондай йөкмәткеле хатын Катанов менән Богородицкийға ебәрә: "Мин һүҙемдә торҙом. Һеҙгә сикһеҙ рәхмәтлемен"[110]. Был ваҡытта Катанов донъя ҡуйған була, В.А.Богородицкий бер генә һүҙҙән торған яуап ебәрә: "Афарин!".

Ә.Вәлиди иҫтәлектәрендә Н.Ф.Катановҡа ҙур иғтибар бүленгән. Айырып әйткәндә, уның 50 йәшлек юбилейын үткәреү тасуирланған. Тантана 1912 йылда үтә. Юбилейҙа Катанов, алкоголь тәьҫире аҫтында булһа кәрәк, Ә.Вәлидигә былай ти: "Көнсығыш төрөк һәм монголдарҙан шәрҡиәтселәр юлына өс кеше – Доржи Банзаров, Чоҡан Вәлиханов һәм мин баҫтыҡ, һәммәбеҙ ҙә рус мәҙәниәтенә бөтә булмышыбыҙҙы бағышланыҡ, мин шаманлыҡтан айырылып, христиан булдым, уларға хеҙмәт итәм. Доржи менән Чоҡан 35 йәшкә лә етмәҫтән араҡынан үлде. Сөнки рус арҡадаштарым беҙгә араҡы эсеүҙән башҡаны өйрәтмәне. Инде һин дүртенсе булырһың, был даирәнән үҙеңде һаҡла. Минең мөхитем исламиәт кеүек ҡеүәтле бер мәҙәниәткә эйә түгел, беҙҙең булмышыбыҙ мөшкөл, рус мөхитендә лә яттар иҫәбендә ҡалдыҡ, һине ҡеүәтле бер мәҙәни мөхит вәкиле икәнлегеңдең әһәмиәтен аңлаған кеше төҫлө күрәм"[111]. Был хәл уларҙың һәйбәт мөнәсәбәттә булыуына шаһит. Шул уҡ ваҡытта Н.Катанов һәм уның рус коллегалары араһындағы ниндәйҙер тартыш барлығын да күрһәтә. Катановтың ҡыҙы атаһы хаҡындағы иҫтәлектәрендә "Ҡазан университетының Николай Федоровичты насар ҡаршылауы" тураһында һөйләй. Привилегиялы профессорҙар үҙҙәренең араһына рус булмаған халыҡ вәкиленең инеүен үҙһенмәй, ҡайһы берҙәре: "Оҙаҡламай беҙгә ҡырағайҙарҙы ебәрә башлаясаҡтар", – ти[112]. Ҡазанға килгән көндән алып Катановтар фин-уғыр телдәре уҡытыусыһы Н.И.Андерсондың (1845–1905) ғаиләһе менән дуҫлаша.

Н.Ф.Катановтың көнсығыш ғилеме буйынса студент йылдарынан уҡ йыя башлаған бай китапханаһы булған. Әммә ҡатынының талабы буйынса ул уны һатырға мәжбүр булған. Ошоға бәйле шул йылдарҙа ваҡытлы матбуғатта бик күп хәбәрҙәр донъя күрә. Ә.Вәлиди ҙә "Профессор Катанов китапханаһы хаҡында" тигән мәҡәлә яҙа.

Китапханалар – кешелектең күп быуатлы яҙма мәҙәни мираҫын һаҡлау урыны ул. Башҡорттарҙың һәм болғарҙарҙың исламды ҡабул итеүе ҡулъяҙма китаптарҙың Волга-Урал регионында таралыуына

булышлыҡ итә. Тәүге китапханалар был регионда мәсеттәрҙә һәм мәҙрәсәләрҙә ҡулъяҙмалар тупланмаһы рәүешендә һаҡланған. XVIII быуат аҙағынан башлап Өфөлә төрлө уҡыу йорттары, улар эргәһендә китапханалар асыла башлай. Тәүге шәхси китапхана һәм уҡыу бүлмәһе Өфөлә 1835 йылда асыла һәм 30 йыл эшләй. Бер йылдан ҡалала беренсе дәүләт китапханаһын асалар. 1864 йылда губерна статистика комитеты эргәһендә бөтә халыҡ өсөн асыҡ китапхана эшләй башлай. Дүрт йыл үткәс саудагәр Н.К.Блохиндың китап кибете эргәһендә шәхси китапхана һәм уҡыу бүлмәһе асыла. 1917 йылға тиклем Өфө губернаһында бөтәһе 340 китапхана һаналған, шул иҫәптән 13 ҡала, 327 ауыл, улар араһында 20 % рус булмаған халыҡтар өсөн булған[113].

XIX быуатта Ҡазанда университет, духовная академия, "Мөхәммәҙиә", "Мәржәни" мәҙрәсәләре эргәләрендә китапханалар булған, шулай уҡ Б.Хәлфинден һәм Ғ.Барудиҙың шәхси китапханалары булыуы ла билдәле. Ә XX быуат башында был ҡалала 33 рус һәм бер нисә татар китапханаһы эшләгән: Көтөпханаи Исламия (1906), Көнсығыш клубы китапханаһы (1908), Алафуз фабрикаһының татар эшселәре өсөн китапхана (1906), Ғилметдин Шәрәфиҙең рус-татар китапханаһы һәм уҡыу бүлмәһе (1916), Алабуға мосолман хәйриә йәмғиәтенең китапханаһы[114].

Шулай итеп, революцияға тиклем үк Урал-Волга буйы регионында китапханалар һаны үҫә башлай. Ғәрәп графикалы китап баҫтырыуға тиклем ҡулъяҙмалар яҙма рухи мәҙәниәт әҫәрҙәрен һаҡлауҙың төп сараһы булып иҫәпләнгән. Әммә уларҙы йыйыу һәм һаҡлау өсөн иғтибар үтә аҙ бүленгән. Был мәсьәлә милли зыялыларҙы бик борсоған. Мәҫәлән, Ризаитдин Фәхретдинов: «Әҫәрҙәребеҙҙең насар һаҡланыуының сәбәптәре ошондай: 1) беҙ боронғо ҡулъяҙмаларҙы ҡәҙерләй белмәйбеҙ һәм уларҙы һаҡлау өсөн бер ни ҙә эшләмәйбеҙ; 2) беҙҙең боронғо ҡулъяҙмаларыбыҙҙы, иҫке китаптарыбыҙҙы һаҡларлыҡ һәм шулай итеп киләсәккә ҡалдырырлыҡ бер китапханабыҙ ҙа, йәки музейыбыҙ ҙа юҡ; 3) ҡулыбыҙҙа булған боронғо ҡулъяҙмаларыбыҙҙы башҡаларҙан йәшерәбеҙ, хатта күсерергә лә бирмәйбеҙ; 4) беҙҙең халҡыбыҙҙың күбеһе ауылдарҙа йәшәй, ә унда йыш ҡына янғындар була... Ошо сәбәптәр арҡаһында беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙан бик аҙ әйберҙәр һаҡланған, әгәр ошондай хәл дауам итһә, беҙҙән һуң киләсәк быуындар өсөн бер нәмә лә ҡалмауы ихтимал", – тип әсенеп яҙған[115].

Ә.Вәлиди "Профессор Катановтың китапханаһы хаҡында" тигән мәҡәләне яҙыуҙың сәбәбен былай тип аңлата: "Быға тиклем китапхана тураһында һүҙ йөрөткән кешеләр уны бер ҡасан да күрмәгәндәр. Бәлки шуның өсөндөр китапхана һәм уның һатылыуы тураһындағы хәбәр иғтибарһыҙ ҡалды. Был мәҡәләлә мин үҙ күҙҙәрем менән күргән китапхана хаҡында яҙып тағы бер мәртәбә халыҡҡа мөрәжәғәт итергә уйлайым"[116].

Ул Н.Ф.Катановты китапханаһын һатырға мәжбүр иткән сәбәпте тикшереүҙе урынһыҙ тип иҫәпләгән.

Ә.Вәлиди Н.Ф.Катановтың төркиҙәрҙең тарихы, теле, мәҙәниәте буйынса бик күп китаптарын күргән, улар араһында XVII–XX быуаттарҙа Рәсәйҙә һәм Европа илдәрендә нәшер ителгән баҫмалар ҙа булған. Бында тағы ғәрәп, фарсы һәм төрки телдәрендә Һиндостанда, Египетта, Төркиәлә һәм Европала сыҡҡан китаптар ҙа бар. Йыйылма күп кенә һирәк осрай торған библиографик әҫәрҙәрҙән торған. Ә.Вәлиди китапхананың ҙурлығын ошолай баһалай: "Китаптар һәр береһе алты кәштәнән торған йөҙ егерме дүрт шкафта һаҡлана. Һәр кәштәлә төрлө форматлы йөҙгә яҡын китап тора. Барлығы ун меңгә яҡын том"[117].

Тюркология буйынса Европа ғалимдары тарафынан яҙылған китаптарҙың күплеге мәҡәләнең авторына көслө йоғонто яһай. Ул был хаҡта: "Европалылар беҙҙең телебеҙ, әҙәбиәтебеҙ, тарихыбыҙ, этнографиябыҙ, ижтимағи хәлебеҙ тураһында бик күп әҫәрҙәр яҙған, хатта, беҙгә бер ниндәй эш тә ҡалмаған тип уйларға була. Ошондай уҡ мәсьәләләр һәм тикшеренеүҙәр менән шөғөлләнгән беҙҙең яҡташтарыбыҙ был хеҙмәттәр менән таныш түгел. Бәлки таныштырҙар ҙа ине, әммә был китаптар юҡ һәм китапханалар аҙ. Беҙҙең ғалимдарыбыҙ тырыштып бер ниндәй тема менән шөғөлләнәләр, әммә был мәсьәлә күптән инде һәм бик күпкә яҡшыраҡ итеп Европала өйрәнелгән булып сыға", – тип яҙа[118].

Ә.Вәлиди үҙенең яҡташтарына фән, техника һәм мәҙәниәт өлкәһендә юғары кимәлгә еткән Европа халыҡтарының тәжрибәһен ҡулланырға тәҡдим итә. Быға ирешер өсөн, Ырымбур һәм Өфө кеүек эре мәҙәниәт үҙәктәрендә Катановтыҡы һымаҡ бай китапханаларҙың булыуы зарур, тип иҫәпләй ул. Һигеҙ-туғыҙ мең аҡсаны ҡайһы бер хәҙрәттәрҙе ҙурлау, данлау маҡсаты менән төҙөлгән мәҙрәсәләргә, имам итеп һайлар өсөн ауылды әллә нисә өлөшкә бүлеүсе мәсеттәргә ҡарағанда, китапханалар төҙөүгә ҡулланыу әллә күпме файҙа килтерер ине, тип яҙа Ә.Вәлиди[119].

Әммә Рәсәйҙә был китапхананы бер кем дә алмай. Мәҡәләһе менән бер ваҡытта Ә.Вәлиди Истанбулға "Төрк Йорто" журналының редакторы Йософ Аҡсураға хат яҙа. Һуңғыһы был хаҡта Төркиәнең ваҡыфтар идараһына хәбәр итә һәм ул үҙенең ике вәкилен – Наил Решат һәм Ғүмәр Тереғоловты Ҡазанға профессор Катановтың китаптарын алырға ебәрә[120]. Бында улар Ә.Вәлиди ярҙамында китапхананы һатып алып, Төркиәгә оҙаталар[121]. Наил Решат Вәлидигә Катанов китапханаһында булмаған китаптарҙы һатып алырға аҡса ҡалдыра. Петербургта булғанында Ә.Вәлиди китаптарҙы һатып ала һәм Истабулға ебәрә[122].

Был китаптар Истанбул университеты эргәһендәге Төркиәт институты китапханаһының нигеҙен тәшкил итә. Төркиәгә килгәс, Ә.Вәлиди ғилми

хеҙмәттәр яҙғанда уларҙы ҡуллана. Ошо китаптарҙың үҙ ғилми эшмәкәрлегендәге әһәмиәтен ул былай тип билдәләй: «Әгәр китапханала тупланған рус ғилми нәшриәте Истанбулға килмәгән булһа, минең тарихи хеҙмәттәрем Шәреҡ һәм Европа сығанаҡтарына ғына таянып яҙылыр һәм тулы булмаç ине”[123].

1915 йылдың 24 февралендә Ырымбурҙа сыҡҡан “Ваҡыт” гәзитендә Ә.Вәлидиҙең “Академик Корштың иҫтәлегенә” исемле мәҡәләһе донъя күрә. Аҙағында «ошо йылдың 17 февралендә Сызрань станцияһында тамамланды», тип күрһәтелгән. Мәҡәләлә күренекле ғалим Ф.Е.Корштың ғилми эшмәкәрлеге, шәрҡиәт буйынса айырым хеҙмәттәре тикшерелә. Ф.Е.Корш үҙенең ориенталистик тикшеренеүҙәрен бик баçалҡы ғына баһалай. “Слово о полку Игореве” әçәренең телендә төрөк элементтары” исемле хеҙмәтендә ул: “Мин үҙемде һис тә ориенталист тип иçәпләмәйем. Шунын өсөн үҙемдең көнсығышты өйрәнеүгә ҡараған фекерҙәремде һәм уйланыуҙарымды уртаҡ эш өсөн төрөктәр әйтмешләй, “карынджа кадарынджа” (“ҡырмыçҡа ҡәҙәре”) тырышып, фараздар һәм мәсьәләләр рәүешендә әйтәм”, – тип яҙа[124]. Ә.Вәлиди мәҡәләһендә үҙен Ф.Е.Корштың ситтән тороп уҡыусыһы һәм эшен дауам итеүсе тип атай[125]. Ул ғалимдың Рәсәйҙәге мосолман халҡына яҡшы мөнәсәбәттә булыуын билдәләй. Рус матбуғатында 1912 йылда Балҡандағы хәрби ваҡиғалар менән бәйле Рәсәй мосолмандары хаҡында негатив характерҙағы мәҡәләләр күренә башлағас, тик Корш ҡына йәмғиәткә дөрөçлөктө әйтә алды. Беренсе донъя һуғышы ваҡытында төркиҙәр ике мәшһүр вәкилен юғалтты: беренсеһе – Исмәғил Гаспралы, икенсеһе – Федор Евгеньевич Корш, тип яҙа Вәлиди[126]. Был – Ф.Е.Корштың ижтимағи һәм ғилми эшмәкәрлегенә бик юғары һәм дөрөç баһа булды.

Йомғаҡлап әйткәндә, Ә.Вәлидиҙең фән өлкәһендә ныҡлы урын алыуына бөтә донъяға билдәле ике Рәсәй ғалимы йоғонто яһай: В.В.Бартольд һәм Н.Ф.Катанов[127]. Уларҙың ярҙамында ул Рәсәй ғалимдары менән таныша, Урта Азияға тәүге ғилми экспедициялар яһай, Рәсәйҙең фәнни баçмаларында мәҡәләләрен баçтырып сығара. Н.Ф.Катановтың шәхси китапханаһында тюркология буйынса күргән китаптарҙың һаны һәм төрлөлөгө йәш ғалимдың күңелендә онотолмаçлыҡ тәьçирҙәр ҡалдыра. Китапхананы ҡарап сыҡҡандан һуң, ул милли зыялыларҙы Европа ғалимдарының алдынғы тәжрибәһе менән файҙаланырға саҡыра.

Йәш шәрҡиәтсе Ҡазанда күп кенә күренекле ғалимдар менән таныша. Рәсәй шәрҡиәтселәренең ҡаҙаныштарын өйрәнә, уларҙың фәнни алымдарын үҙләштерә.

В.В.Бартольд менән танышлыҡ оло дуçлыҡҡа әүерелә һәм ғүмере буйынса дауам итә. Хатта эмиграциянан һуң да Ә.Вәлиди В.Бартольд

менән хат алыша, уның көнсығыш ғилеме буйынса хеҙмәттәрен өйрәнә һәм үҙенең мәшһүр китаптарында уҡытыусыһының мәғлүмәттәрен, алдынғы тәжрибәһен, методик алымдарын бик уңышлы файҙалана.

---

[1] *Тоган З.В.* Воспоминания. Ч.2 Уфа, 1998. С.242–245.

[2] Там же. С.241.

[3] ПФА РАН. Ф.68. Оп.2. Д.38. Л.8.

[4] 27 ғинуарҙа В.Бартольдҡа яҙған хатында Ә.Вәлидов ошо көндәрҙә инглиз теленән дәрестәр ала башлаясағы һәм яҙ көнө Лондонға китергә өмөтләнеүе хаҡында яҙа (ПФА РАН. Ф.68. Оп.2. Д.38. Л. 51 об.).

[5] Шунда уҡ. 242–243-сө бб.

[6] *Вәлиди Ә.* Хәлфинләр // Шура. 1913. №4. 107-се б.

[7] *Вәлиди Ә.* Вамбери // Мәктәп. 1913. №10. 245-се б.

[8] Шунда уҡ. 245-се б.

[9] *Тоган З.В.* Воспоминания. Ч.1. С.93.

[10] Шунда уҡ. 123-сө б.

[11] Матбуғат: Төрк-татар тарихы // Ваҡыт. 1913. №1711.

[12] *Галяутдинов И.Г.* Два века башкирского литературного языка. Уфа: Гилем, 2000. С.94.

[13] Ә.Вәлидиҙең Истанбулдағы шәхси архивында башҡорт фольклоры өлгөһө "Бытбылдыҡ"тың магнитофон яҙмаһы һаҡлана. Күсермәһен Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов, Иҫәнбикә Туғандан алып, Көҙәндәге Ә.Вәлиди йорт музейына тапшырған.

[14] *Тоган З.В.* Воспоминания. Ч.1. С.134.; *Туған Ә.В.* Хәтирәләр. Өфө, 1998. 114 б. ("Хәтирәләр"ҙә күрһәтелеүенсә, Ғ.Таған был йырҙы бик яратҡан һәм уны "Рәсәй хәрби әсирҙәренең йырҙары. Башҡорт йырҙары" исемле йыйынтыҡҡа индергән. Китап З.Рәйемғужина менән минең тарафымдан тәржемә ителде һәм "Ватандаш" журналында баҫылып сыҡты (1998. №4)).

[15] Р.М.Болғаҡов башҡа ике псевдонимдары хаҡында яҙа: А.Т.Ҡаһъяоглу һәм Һөйәрғол. Ҡарағыҙ.: Материалы к библиографии Ахмет-Заки Валиди Тогана. Уфа, 1996. С.146.

[16] *Тоган З.В.* Воспоминания. Ч.1. С.11.

[17] *Velidi A.Z.* Moğollar, Cengiz ve Türklük (Монголдар, Сыңғыҙ һәм төркилек). Istanbul, 1941. S.32.

[18] *Velidi Ahmet Zaki.* Onyedi Kumaltı Şehri ve Sadri Maksudi Bey (Ҡом аҫтындағы 17 ҡала һәм Саҙри Маҡсуди бей). Istanbul, 1934. 62 s.

[19] *Inan Abdulkadir.* Prof. Dr. Zeki Velidi Togan'ın Ilmi Faliyetleri (Профессор, доктор Зәки Вәлиди Туғандың ғилми эшмәкәрлеге) // Türk Yurdu. 1956. №262. №263; 1957. №264.

[20] *Baykara T.* A. Zeki Velidi Togan (1890–1970) Bibliyografyası (Ә.Зәки Вәлиди Туғандың библиографияһы (1890–1970)) // Fen-Edebiyat Fakültesi Araştırma

Dergisi. Ord. Prof. Dr. Ahmet Zeki Velidi Togan Özel Sayısı. 1985. Sayı 13. Fasikül 1. S.11–31.

[21] Ахмед Заки Валиди Туган. 1890–1990: Материалы к изучению жизни и творчества / Пер. с турецкого языка, предисловие, примечания и указатели Р.М.Булгакова. Уфа, 1990. 68 с.

[22] *Baykara T.* Zeki Velidi Togan (Зәки Вәлиди Туған). Ankara, 1989. 230 s.

[23] *Togan N,. Arıcanlı I., Baykara T.* A. Zeki Velidi Togan'ın kendi tasnifine göre mesai evrakları (Үҙ классификацияһы буйынса Ә.Зәки Вәлиди Туғандың документтары) // Fen-Edebiyat Fakültesi Araştirma Dergisi. Ord. Prof. Dr. Ahmet Zeki Velidi Togan Özel Sayısı. 1985. Sayı 13. Fasikьl 1. S.33–58.

[24] *Togan Z.V.,* Bugünkü Türkistan ve Yakın Tarihi. 2. Basım. (Бөгөнгө Төркөстан һәм яҡын тарихы) Istanbul, 1981. S.210.

[25] *Вәлиди Әхмәтзәки.* Кыскача төрк-татар тарихы. Казан, 1992.

[26] *Salihov Ahat.* Ahmet Zeki Velidi Togan Bibliyografyası // Türk Dünyasü Araştırmaları. 1994. Sayı 93. S.209–230.

[27] *Туған Әхмәтзәки Вәлиди.* Әҫәрҙәр. 1917 йылға ҡәҙәр яҙылған әҫәрҙәре: иҫке төрки теленән тәржемә / Тәржемәсеһе, анл. биреүсе, библиографияны төҙ. һәм инеш һүҙ авт. Әхәт Салихов. Фәнни мөхәррире Ишмөхәммәт Ғәләүетдинов. Өфө, 1996. 216 б.

[28] *Шигабдинов Р.Н.* Ахмед Заки Валиди и идея автономии Туркестана // Туркестон мустакиллиги ва бирлиги учун кураш сахифаларидан. Тошкент, 1996. С.36.

[29] Ризаитдин Фәхретдиновтың билдәле биобиблиографик әҫәре "Аҫар"ҙа Хәлфиндәр хаҡында мәғлүмәттәрҙең булмауын Ә.Вәлиди мәҡәләнең башында билдәләп үтә. Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк, Р.Фахретдиновтың Рәсәй фәндәр академияһы Көнсығышты өйрәнеү институтының Санкт-Петербург филиалы Шәрҡиәтселәр архивы фондында Буинск өйәҙенең Һөйөш ауылында тыуып, Ҡазан өйәҙенең Аҙна ауылында үлгән Шәрәфетдин бин Сәйфулла бин Сәйетҡол бин Мөхәмәтшәриф бин Рахманғол бин Сөләймәндең биографияһы һаҡлана. Уны 1909 йылдың 25 апрелендә Әхмәтзәки Вәлиди ебәргән. Ул былай тип имзаланған: "Исемдәре тарих биттәрендә яҙылырға лайыҡлы кешеләр тураһында, ҡайҙа ғына булмаһын, һорашып яҙып алырға яратҡан йәш егет Әхмәтзәки Вәлиди" (Ф.131. Оп.1. Л.137.).

[30] *Вәлиди Ә.* Хәлфинләр // Шура. 1913. №3. 68-сеит.

[31] Шунда уҡ. №4. 105-сеит.

[32] *Вәлиди Ә.* Хәлфинләр // Шура. 1913. №3. 69-сы б.

[33] Шунда уҡ. 70–71-се б.

[34] Шунда уҡ. №4. 108-се б.

[35] Шунда уҡ. №5. 138-се б.

[36] Шунда уҡ.

[37] Шунда уҡ.

[38] Шунда уҡ. №4. 105-се б.

[39] Шунда уҡ. №5. 105-се б.

[40] *Әл-Мөслими Мәхмут бин Ғатаулла,* Идараға мәктүб // Шура. 1913. №5.

[41] *Алаши. F.* Хәлфинләр мөнәсәбәте илә // Шура. 1913. №11. 339-сы б.

[42] Шунда уҡ.

[43] Ш.Мәржәниҙең баҫылып сыҡҡан һәм донъя күрмәгән хеҙмәттәренең исемлеге *М.Х.Йософовтың* "Ш.Марджани как историк" исемле китабына ингән. Әхмәтзәки Вәлиди Туған исемендәге Милли китапхананың һирәк китаптар бүлегендә Ш.Мәржәниҙең "Назурат әл-хаҡ" тигән китабының ҡульяҙмаһы һаҡлана. Унда ошондай яҙма бар: "Ҡульяҙманың ҙур ғына өлөшө, Ризаитдин бин Фәхретдин һәм Кәшәфетдин Тәржемәни һүҙҙәре буйынса, Шиһабетдин Мәржәниҙең шәкерте – Ғайса бин Фәхретдин тарафынан яҙылған. Унын яҙыуына оҡшаған. 1926 йылдың 17 ғинуары. Өфө". Бынан тыш, титул битендә, 632-се бит Мәржәниҙең үҙ ҡулдары менән яҙылған, тигән яҙма бар.

[44] *Харисов А.И.* Литературное наследие башкирского народа (XVIII–XIX века). Уфа, 1973. С.279.

[45] *Туған Ә.В.* Хәтирәләр // Ағиҙел. 1991. №3. 98-се б.

[46] Шунда уҡ.

[47] *Вәлиди Ә.* Рус тарихи әдәбиәтендә Мәржәни // Мәржәни. Ҡазан, 1915. 468-се б.

[48] Шунда уҡ.

[49] *Вәлиди Ә.* Мәржәнинең бер әсәре туғрысында Ҡаюм Насыри // Мәрджәни. Ҡазан, 1915. 582 б.

[50] *Юсупов М.Х.* Шигабутдин Марджани как историк. Казань, 1981. С.8. Бында ул ошондай хеҙмәттәргә һылтанма яһай: *Усманов М.Х.* Татарские исторические источники XVII–XVIII вв. Казань, 1972. С.137; *Хайруллин А.Н.* Насыри и Марджани // Выдающийся просветитель Каюм Насыри. Казань, 1976. С.188–193. Мәржәни менән ҡаршылыҡтары булған башҡа кешеләр тураһында түбәндәге әҫәрҙәрҙә уҡығыҙ: *Вәлиди Ә.* Мәржәни хаҡында кескенәлегемдә яҙған бәғзе нәмәләр мөнәсәбәте менән. // Сөйөмбикә. 1915. №6. 8–12-се б. һәм *Ahmet Zeki* Velidi Togan. Hatiralar. Istanbul, 1969.

[51] *Вәлиди Ә.* Рус тарихи әдәбиәтендә Мәржәни // Мәржәни. Ҡазан, 1915. 589-сы б.; *Вәлиди Ә.* Мәржәнинең бер әсәре туғрысында Ҡаюм Насыри // Мәржәни. Ҡазан, 1915. 484-се б.

[52] *Вәлиди Ә.* Шиһаб хәзрәтнең Урта Азия тарихына ғаид бөйөк әсәре // Аң. 1914, №4. 74-се б.

[53] Шунда уҡ.

[54] Шунда уҡ. 77-се б.

[55] Шунда уҡ. 74-се б.

[56] *Валиди А.* Мәржәни тугрысында кечкенәлегемдә язған бәғзе шәйләр мөнәсәбәте илә // Сөйөмбика. 1915. №6. 12-се б.

[57] Шунда уҡ. 48-се б.

[58] *Тоган Заки Валиди.* Воспоминания. М., 1997. С.16.

[59] Шунда уҡ. 14-се б.

[60] Шунда уҡ.

[61] Диваев Ә. Тарту (Курастырған, алғы сөзин және түсініктемелерин жазған Флора Оразаева) (Бүләк). Алматы, 1992. 5–6-се бб.

[62] *Тоган З.В.* Воспоминания. Ч.1. Уфа, 1994. С.138.

[63] Шунда уҡ.

[64] Мәҡәләнең аҙағында уны Стәрлетамаҡ өйәҙенең Көҙән ауылында 8 майҙа тамамлауы хаҡында яҙылған.

[65] *Вәлиди Ә.* Уфамыздан сыҡҡан бер ғалимның хеҙмәтенә егерме биш йыл тулу мөнәсәбәте илә // Тормош. 1915. 12 июнь.

[66] Шунда уҡ.

[67] *Шунда уҡ.*

[68] *Вәлиди Ә.Диваев* юбилесы рус жәмғиәтендә // Тормош. 1915. 1 декабрь.

[69] *Харисов А.И.* Литературное наследие башкирского народа (XVIII–XIX века). Уфа, 1973. С.300. Тарихсы М.Н. Фархшатовтың мәғлүмәттәре буйынса, XIX быуаттың 60-сы йылдарында мәҙрәсә биналарының һаны егерме бишкә еткән.

[70] *Бартольд В.В.* Стерлибашевское медресе // ПФА РАН. Ф. 68. Оп.1. Д. 379. Л.1. Мәҡәлә яҙылып бөтмәгән. Цитаталар ошо хеҙмәттәрҙән алынған: *Фархшатов М.Н.* Народное образование в Башкирии в пореформенный период 60–90-е годы XIX в. М., 1994. С.59. Рәсәй фәндәр академияһы архивының Петербург филиалында М.Х.Туҡаевтың В.В.Бартольдҡа 1915 йылдың 27 сентябрендә яҙған хаты һаҡлана. Унда автор Көнсығыш тарихы буйынса библиографик күрһәткесте ебәреүе өсөн ғалимға рәхмәтен белдерә һәм былай тип хәбәр итә: "Беҙ бында йыш ҡына Һеҙҙең Стәрлебашҡа килеүегеҙҙе иҫкә төшөрәбеҙ һәм Стәрлебашта аҙ булыуығыҙ өсөн үкенәбеҙ. Бынан тыш мин Һеҙгә Стәрлебаштың тирә-яғын күрһәтә алманым, Һеҙ киләсәктә бер көнгә түгел, ә аҙнаға һәм күберәккә килерһегеҙ тағы ла тигән өмөт менән үҙемде йыуатам. Дуҫым Ризаитдин әфәнденән хат алдым. Һеҙ мине өйҙә осратыуығыҙға ул бик шат. Иң изге теләктәрҙә ҡалам. Ихтирам һәм рәхмәттәр менән Мөхәмәтшәкир Туҡаев". (ПФА РАН. Ф. 68. Оп.2. Д.238. Л.1)

[71] Ваҡыт. 1913. 9 июнь. Цитаталар ошо хеҙмәттән алынған: *Харисов А.И.* Литературное наследие башкирского народа (XVIII–XIX века). Уфа, 1973. С.300. Үҙенең "Дневник путешествия по маршруту Оренбург–Башкирия–Сибирь–Кяхта" (1913 г.) исемле көндәлегендә В.В.Бартольд, Стәрлебаш китапханаһында һаҡланған иң боронғо ҡульяҙма XIII быуатҡа ҡарай, тип яҙа. Ул шулай уҡ Шахрухтың мисәте булған бер ҡульяҙма булыуы тураһында ла хәбәр итә һәм уның фаразы буйынса "ҡульяҙма ла уныҡы булырға тейеш, әммә быға дәлилдәр юҡ". Шунда уҡ М.Туҡаевтың атаһының китапханаһы мираҫ буйынса 1844 йылғы, Мәккәгә хаж ҡылыу тураһында 1862 йылғы, тарханлыҡ тураһындағы документтар хаҡында мәғлүмәттәр бар (ПФА РАН. Ф.68. Оп.1. Д.206. Л.7.).

[72] *Вәлиди Ә.* Профессор Бартольдның беҙнең арабыҙда булыуы мөнәсәбәте илә // Ваҡыт. 1915. 13 июнь.

[73] Шунда уҡ.

[74] Шунда уҡ.

[75] Шунда уҡ.

[76] Шунда уҡ.

[77] Шунда уҡ.

[78] Тарихсы *Морат Рәмзиҙең* "Тәлфиҡ әл-әхбәр вә тәлҡих әл-әсәр фи ваҡаиғ Казан ва Болғар мулук әт-татар" тигән 1908 йылда Ырымбурҙа донъя күргән ике томлыҡ хеҙмәтенең ҡыҫҡартылған исеме.

[79] *Вәлиди Ә.* Мөхәррирнең кәнди исеменә язылған бер мәктүб // Шура. 1913. №23. Тышының 2–3-се бб.

[80] Ә.Вәлидиҙең В.В.Бартольдҡа яҙған хаттарының һаҡланып ҡалған иң тәүгеһе 1914 йылдың 26 авгусына ҡарай. Ә.Вәлидиҙең хаттары ПФА РАН-да, ә В.В.Бартольдтың яуаптары Ә.Вәлидиҙең Истанбулдағы (Төркиә) шәхси архивында һаҡлана. В.В.Бартольдтың һәм В. Минорскийҙың хаттары Ә.Юлдашбаев тарафынан әҙерләнеп "Ватандаш" (2000, №6) журналында нәшер ителә.

[81] *Вәлиди Ә.* Лотфи вә аның диваны // Казан, 1914. 19-сы б. ПФА РАН (Ф.68. Оп.2. Д.38. Л.13 об.) һаҡланған Ә.Вәлидиҙең В.Бартольдҡа 1914 йылдың 25 сентябрендә яҙған хатында былай тиелә: "Ошо хатҡа мин сағатай шағиры Лотфиҙың Шахрух хаҡында маҡтаулы шиғырҙарын ҡушам. Шиғырҙарҙың Коканд нөсхәһендә улар юҡ, мин уларҙы Ҡаршыла Азия музейы өсөн алған нөсхәлә таптым. Минең өсөн Азия музейында һаҡланған тулы булмаған ошондай уҡ диуанда (йыйынтыҡта) барлығын белеү бик ҡыҙыҡһындыра" (№ВВВ 574 АД).

[82] *Тоган З.В.* Воспоминания. Ч.1. С.142–154.

[83] В.В.Бартольдҡа 26 августа яҙған хатында Ә.Вәлиди былай ти: "1912 йылғы армияға саҡырыуҙа мине беренсе разряд ополчениеға яҙҙылар. Шуның өсөн беҙҙең өйәҙгә сират еткәс, мин хәрби мөдиргә барып үҙемдең хеҙмәткә барып хеҙмәткә ярамағаным хаҡында таныҡлыҡ алырға тейеш инем. 8 августа мин Бохаранан киттем һәм Сәмәрҡәнд, Ташкент, Ырымбур һәм Өфө аша 16 августа Стәрлетамаҡҡа килдем. Икенсе сентябрҙә тикшереү буласаҡ һәм таныҡлыҡ бирелəсәк. В.В.Бартольдҡа 25 сентябрҙә ебәргән хатында Ә. Вәлидов былай тип хәбәр итә: "Ополчениенан азат ителеп ителмәүем тураһында тулыһынса белмәйенсә Ҡазанға киттем" (ПФА РАН. Ф.68. Оп.2. Д.38. Л.12 об., 14.).

[84] *Тоган З.В.* Воспоминания. Ч.1. С.155–156.

[85] Шунда уҡ.142-се б.

[86] Шунда уҡ. 318-се б.

[87] 1925 йылдың 13 июлендә Анкаранан В.В.Бартольдҡа яҙған хатында Ә.Вәлиди түбәндәгеләрҙе хәбәр итә: "Ҡатыныма ярҙам иткәнегеҙ өсөн рәхмәт, ул хәҙер Башҡортостанда атаһында, бер нисә айҙан миңә киләсәк тип өмөтләнәм". 15 октябрҙә яҙған икенсе хатында: "Ҡатыным хәҙер Өфөлә һәм уға миңә килергә рөхсәт итәләр", – тиелә (ПФА РАН. Ф.68. Оп.2. Д.38. Л.38, 40 об.). Әммә уның был теләге тормошҡа ашмай ҡала. Шунда уҡ Ә.Вәлидиҙең Ә.Диваевҡа хат яҙыуы, ләкин яуап алмауы тураһында хәбәр бар.

[88] *Тоган А.В.* Не сочтите за пророчество. Уфа, 1998. С.143.; Ә.Вәлидиҙең билдәле үзбәк ғалимы Пулат Сәлиевҡа 1925 йылдың 9 мартында яҙған хатында



[redacted]

былай тиелә: “1924 йылдың апрелендә Берлиндағы Рәсәй вәкиле Крестинский әфәнде аша мин Петербургтағы, Ташкенттағы, Ырымбурҙағы, Өфөләге, Ҡазандағы ғилми комиссиялар, ҡайһы бер профессорҙар менән хат алышырға һәм мәғлүмәттәр менән алыш-биреш итергә, шулай уҡ китаптарымды Рәсәйҙә нәшер итергә рөхсәт һорап Совет хөкүмәтенә мөрәжәғәт иттем”. Был хат Үзбәкстан Республикаһының Үҙәк дәүләт архивында һаҡлана. Шунда уҡ Үзакадемүҙәк рәйесенең Ә.Вәлидигә ебәргән яуабы ла бар: “Үзбәкстан Академия мәркәзе Һеҙҙең хеҙмәттәрегеҙҙең баҫылыуына һәр төрлө ярҙам вәғәҙә итә”. Ҡарағыҙ: *Шигабдинов Р.Н.* Неизвестные страницы наследия А.Валиди // O’zbekiston Tarixi. 2000. №1–2. 61-чи б. Ташкенттан килгән тарихи фәндәр кандидаты Мөхәмәджан Абдурахманов IV “Вәлиди уҡыуҙары”нда (сентябрь, 2000) был документ тураһында сығыш яһаны.

[89] В.В.Бардольд Төркиәлә 1926 йылдың 2 ғинуарынан 17 февраленә һәм 24 апреленән 19 авгусына тиклем була.

[90] В.В.Бартольдтың командировка буйынса отчетында былай тип билдәләп үтелә: “Лекцияларҙың иҫәбе 12 ине. Улар VI быуатта үҙҙәрен төрк тип атаған тәүге халыҡтан алып иң һуңғы заманға тиклем Урта Азия төрки халыҡтарының тарихын үҙ эсенә алды. Был лекциялар Венгрияла юғары белем алған Рәғип Холоси исемле йәш ғалим тарафынан минең исемдән уҡылды. Ул курстың икенсе өлөшөн тәржемә итте (беренсе өлөштөң тәржемәсеһе Фәндәр академияһына таныш башҡорт сығышлы ғалим Әхмәтзәки Вәлиди булды)” (ПФА РАН. Ф.68. Оп. 1. Д.222. Л.1). Шунда уҡ Бартольдтың рус телендә лекциялар курсы яҙырға уйлауы һәм уларҙы Ә.Вәлиди тәржемә итеп, уның исеменән уҡырға тейеш булыуы тураһында ла хәбәр ителә (Л.3).

[91] ПФА РАН. Ф.68. Оп. 1. Д.222. Л.1.

[92] ПФА РАН. Ф.68. Оп. 1. Д.223. Л.1. Документта “Көнсығыш бүлегенең хәбәрҙәре буйынса беҙгә билдәле коллегабыҙ” тигән һүҙҙәр урынына тәүҙә “минең яҡшы танышым” тип яҙылған булған. Һуңынан төҙәтелгән. В.В.Бартольдтың “Дневник пребывания в Константинополе и другие заметки по этой поездке” исемле көндәлегендә шулай уҡ Ә.Вәлидиҙең һәм А.Инандың тормошо тураһында мәғлүмәттәр осрай. Мәҫәлән: “Вәлидов һәм Абдулҡадир квартиралары өсөн һәр ай 12 лира түләйҙәр” йәиһә “Вәлидов китапханала 9-ҙан 5-кә тиклем шөғөлләнә” (ПФА РАН. Ф.68. Оп. 1. Д. 220. Л.6,1).

[93] *Байкара Тунджер.* Заки Валиди Тоган. Уфа, 1998. С.29–34.

[94] *Velidi Z.* Ibn Fadlan’s Reisebericht (Ибн Фаҙландың юлъяҙмалары). Leipzig , 1939. XLIX; 336 s.; 46 s.

[95] *Barthold V.V.* Moğol Istilasına Kadar Türkistan. Haz. Hakkı Dursun Yıldız (Монголдар баҫып алғанға тиклемге Төркөстан). Ankara, 1990. S.17.

[96] *Вәлиди Ә.* Шәреҡҡә ғаид яңы әсәрләр // Шура. 1914. №20. 638 б.

[97] Мөстәшриҡ Бартольд тарафындан // Ваҡыт. 1915. №1782.

[98] ПФА РАН. Ф.68. Оп.2. Д.38. Л. 27.

[99] *Валидов А.-З.* Мешхедская рукопись Ибну-ль Факиха // Известия Российской Академии наук. 1924. С.240.

[100] 1925 йылдың 6 мартындағы хатында Ә.Вәлиди В.Бартольдҡа былай тип яҙа: "Үткән аҙнала миңә Персиянан «Мешхедтағы мөтәүәлли Ибн-уль-Факихтың копияһын алырға рөхсәт итмәне» тип хәбәр иттеләр. Был хаҡта миңә һәм Х.Казем Заде Таһранға ярҙам итеүҙәрен һорап хаттар яҙҙыҡ. 1923 йылда Мешхедта мин был китапты күргәндә, китапхана хеҙмәткәрҙәре уны миңә арзанға һата алырҙар ине. Ләкин мин уны һатып алманым, ә киреһенсә, мөтәүәллигә уның һирәклеген белдерҙем. Хәҙер улар уны шул тиклем ныҡ һаҡлайҙар, хатта уның ҡиммәтлеген белдергән кешегә лә күрһәтмәйҙәр" (ПФА РАН. Ф.68. Оп.2. Д.38. Л. 34.).

[101] Шунда уҡ. 243-сө б.

[102] Шунда уҡ. 237-се б.

[103] *Фархшатов М.Н.* Повороты судьбы Заки Валиди: Немецкие архивные документы о жизнедеятельности башкирского ученого-эмигранта в Германии // Ядкяр. 1999. №1. С.108.

[104] Ахмед Заки Валиди Туган. Материалы к изучению жизни и творчества. Уфа, 1990. С.14.

[105] *Тоган З.В.* Воспоминания. Ч.1. С.82.

[106] Шунда уҡ. 93, 120, 122-се бб.

[107] Шунда уҡ. 93-сө б.

[108] Шунда уҡ. 95-се б.

[109] Шунда уҡ. 162–163-сө бб.

[110] Шунда уҡ. 163-сө б.

[111] Шунда уҡ. 25–26-сы бб.

[112] Николай Федорович Катанов. Материалы и сообщения. Абакан, 1958. С.174.; Цитировано по: *Иванов С.Н.* Николай Федорович Катанов (Очерк жизнедеятельности). Изд. 2-е. М., 1973. С.35.

[113] *Бишева С.Р.* Библиотеки Башкортостана как центры информации по культуре // Библиотеки России в информационном обеспечении культурной деятельности регионов: Материалы 2-го Всероссийского совещания. Уфа, 1996. С.57.

[114] Библиотека // Татарский энциклопедический словарь / Гл. ред. *М.Х.Хасанов.* Казань, 1999. С.76. ТР Милли китапханаһының тарихы тураһында ентекле рәүештә ошо китаптан уҡырға була: *Делешова М.Х.* На языке души. Казань, 1989. 128 с.

[115] *Харисов А.И.* Указ. соч. С.162.

[116] *Вәлиди Ә.* Профессор Катановның көтөпханасы хаҡында // Ваҡыт. 1913. №1178.

[117] Шунда уҡ.

[118] Шунда уҡ.

[119] Шунда уҡ.

[120] 1913 йылдың 20 декабрендә сыҡҡан "Ил" гәзите хәбәр итеүенсә, Төркиәнең ваҡыфтар идаралығы ғилми ойошмалар бүлегенең етәксеһе Решат эфәндене Рәсәйгә ебәрергә йыйына. Шул уҡ йылда "Иҡдам" гәзитендә "Мөстәшрик Катановның китапханасы" тигән мәҡәлә баҫылып сыға (№5986).

[121] 1914 йылдың 28 апрелендә донъя күргән "Кояш" гәзитендә Ваҡыфтар идаралығы мәктәптәренең, мәҙрәсәләренең һәм китапханаларының етәксеһе Решат әфәнде һәм уның урынбаҫары Ғүмәр әфәнде Н.Ф.Катановтың китапханаһын алты мең һумға һатып алыуы һәм китаптар яҡын көндәрҙә төрөлөп ебәреләсәге тураһында хәбәр ителә.

[122] *Тоган З.В.* Воспоминания. Ч.1. С.141–142. Ә.Вәлиди В.В.Бартольдҡа Берлиндан ебәргән хатында 1914 йылда Катановтың китапханаһын байытыу маҡсаты менән Истанбулға бөтә академик баҫмаларҙы ебәреүе тураһында яҙа. (ПФА РАН.Ф. 68. Оп.2. Д.38. Л.60.).

[123] *Тоган З.В.*Воспоминания. Ч.1. С.141–142. Ә.Вәлиди 1925 йылдың 14 апрелендә В.Бартольдҡа яҙған хатында былай тип хәбәр итә: "Әлеге көндә Төркиәнең фәнни комиссияһында (Таалиф вә Тәрджүмә Энджумени) вазифа алырға йөрөйөм һәм оҙаҡламай Төркиәгә китеүем ихтимал. Бер аҙ ваҡыт Истанбул китапханаларында шөғөлләнергә уйлайым. Һуңынан кире Европаға китергә өмөтләнәм. Төркиәлә кәрәкле Европа баҫмаларын, йәғни хеҙмәттәрҙе табырлыҡ яҡшы китапхана юҡ тиҙәр. Катановтың китапханаһын мин һәйбәт беләм. Унда күберәге миссионер баҫмалары йыйылған" (ПФА РАН. Ф.68. Оп.2. Д.38. Л. 36).

[124] *Грушка А.* Федор Евгеньевич Корш (Некролог) // Журнал Министерства народного просвещения. Пг., 1916. Ч.LXII. С.127.

[125] *Вәлиди Әхмәтзәки.* Академик Корш хәтирәсе // Ваҡыт. 1915. 24 февраль.

[126] Шунда уҡ.

[127] Шулай уҡ Ә.Вәлидиҙең билдәле Рәсәй ғалимдары К.Г.Залеман (был хаҡта Ә.Вәлидиҙең 1914 йылдың 25 сентябрендә В.В.Бартольдҡа яҙған хатында иҫкә алына), И.Ю.Крачковский (ПФА РАН-да Ә.Вәлидиҙең И.Ю.Крачковскийға 1915 йылдың 10 майынан алып 1947 йылдың 4 сентябренә тиклем Стәрлетамаҡтан, Өфөнән, Ҡазандан, Венанан, Калахауҙан (Австрия) ебәргән 8 хаты, 4 открыткаһы һаҡлана) һәм С.Е.Малов менән хат алышыуы (ПФА РАН-да Ә.Вәлидиҙең 1925 йылдың 14 апрелендә Берлиндан яҙған хаты һаҡлана) билдәле. Ә.Вәлидиҙең И.Ю.Крачковскийға һәм С.Е.Маловҡа яҙған хаттары тураһында түбәндәге монографияла телгә алына: *Валеев Р.М.* Казанское востоковедение: истоки и развитие (XIX в. – 20 гг. XX в.). Казань, 1998. С.359, 361.

# *Икенсе бүлек*

## Ә.ВӘЛИДИ – ТӨРКИ ХАЛЫҠТАРЫНЫҢ ТАРИХЫН ӨЙРӘНЕҮСЕ

### “Төрк вә татар тарихы” һәм уның әһәмиәте

1912 йылда Ҡазанда “Милләт” типографияһында Ә.Вәлидиҙең “Төрк вә татар тарихы” исемле беренсе китабы донъя күрә. Һуңыраҡ, 1915 йылда, ул ҡыҫҡартылып һәм бер үк ваҡытта ҡайһы бер материалдар менән тулыландырып, яңы вариантта баҫылып сыға. Был вариант 1917 йылда тағы бер тапҡыр нәшер ителә. Китап Ә.Вәлидиҙең Ҡазандағы “Ҡасимия” мәҙрәсәһендә мөғәллимлек иткәндә уҡыған лекциялары нигеҙендә яҙылған. Күп йылдар үткәс, ошо хаҡта хәтерләп, Вәлиди былай тип яҙа: “Был уҡыу йылы (1909–1910 йылдарҙың ҡышы) мине “Ҡасимия” мәҙрәсәһендә төрөк тарихы һәм ғәрәп әҙәбиәте тарихынан мөғәллим итеп тәғәйенләнеләр. Мин дәреслек итеп “Төрөк тарихы” исемле әҫәремде яҙа башланым”[1].

Автор хеҙмәтен “Төркиҙәр тарихы” тип атаған. Әммә матбуғат өлкәһендә юғары урындарҙы биләгән татар милләте вәкилдәре милли тойғоларҙан сығып, китаптың исемендә татарҙар тарихының сағылышын күрергә теләгәндәр. Мәҫәлән, Ғәлимйән Ибраһимов китапты “Татарҙар тарихы” тип атарға тәҡдим иткән, ә нәшер итеүсе Иҙрисов – “Төрк-татар тарихы” тип. Был тәҡдимдәргә автор ҡаршы сыға. “Бик тә булмаһа, уны “Төрк һәм татар тарихы” тип атарға кәрәк”, – ти ул[2]. Бынан тыш, нәшер итеүсе Иҙрисов китаптың көнсығыш төркиҙәрс хаҡындағы өлөштө “беҙҙе, татарҙарҙы, ҡыҙыҡһындырмай” тип алып ташлай[3].

Хеҙмәтенең мөһимлеген дәлилләп, Ә.Вәлиди инеш өлөштә: “Беҙҙең китап баҙарҙарыбыҙҙа яҙыласаҡ тарих китаптары өсөн мәғлүмәт бирерлек байтаҡ әҫәрҙәр һатыла. Быларҙың барыһы ла, бер-ике әҫәрҙе генә иҫәпкә алмағанда, “Мөстәфад әл-әхбәр” балаларылыр. Ошо көнгә тиклем һис бер кеше, һис юғында шул баҙарҙағы китаптарҙан йыйып ҡына булһа ла, бер әҫәр сығарманы. Газеталар, журналдар ҙа шундай әҫәрҙәргә ихтыяж

тураһында шул тиклем күп һөйләнеләр, инде уларҙы уҡый-уҡый ялыҡҡан кешеләр ҙә юҡ түгелдер. Халыҡтың башына төшкән шул ихтыяждың бынан өс йыл элек үҙ башыбыҙға килеүе сәбәпле, күп әҫәрҙәрҙән йыйып, беҙ ошо “Төрк һәм татар тарихы” исемле әҫәребеҙҙе яҙған инек”, – тип яҙа[4]. “Төрк вә татар тарихы” китабы төрлө әҙәбиәт нигеҙендә яҙылған. Иң мөһимдәрен Ә.Вәлиди айырым исемлектә күрһәткән. Бына улар: француз тарихсыһы Леон Каен, төрөк тарихсыһы Нәжип Асим, Рәсәй ғалимдары Ш.Мәржәни, М.Пинегин, М.Рыбушкин, П.Рычков, М.Рәмзи, Абулғази-хан, И.Березин, А.Васильев, В.Вельяминов-Зерновтың һәм башҡа ватан шәрҡиәтселәренең айырым баҫма булып һәм фәнни йыйынтыҡтарҙа сыҡҡан әҫәрҙәре. Китаптың тексында йыш ҡына теге йәки был хеҙмәттәргә, ҡайһы ваҡыт бер нисә хеҙмәткә бер юлы яһалған һылтанмалар осрай.


٤ تورك وتاتار تاريخى

كتابنى يازغان وقتده كوب كتابلردن فائدهلانديق؛ حتى بعض جملهلر بيچه كتابلردن توزولدى. همهسينى كورسهتكانده كتاب ... اوزناباجاق اولدى. بز مأخذ ايتدكمز كتابلرنى بو اورنده اجمالا ذكر ايتهمز. بعض بر ياتراق سوزلرنڭ گه، شبهه بولماسون اوچون، مأخذلرينى تحت الخط يازدق.

مهمرك مأخذلر اوشو اثرلردر:

١) مشهور فرانسوز مؤرخى Лень Кагенъ نڭ تورك تاريخى. ١٨٩٧ نچى سنه ماسكاوده نشر ايتلگان ٨٠ صحيفهلك.

٢) مشهور تورك مؤرخى نجيب عاصم افندينڭ شولوق اوون كاوننڭ تاريخنه قاراب كوب تكميل ايله يازديغى «تورك تاريخى» ديگان كتابى. ١٣١٦ نچى هجريده استانبولده نشر ايتلگان ٤٥١ صحيفهلك.

٣) مستفاد الاخبار ٢ جزء. ١ نچى جزئى ١٨٨٥ ده ١٨٩٧ نچى يل باصلغان ٢٤٦ صحيفهلك، ٢ نچى جزئى ١٩٠٠ نچى يل باصلغان ٣٦٨ صحيفهلك.

٤) قزان دارالفنوننڭ آثار عتيقه جمعيتنڭ مجموعهسى Извѣстія общества Археологіи· Исторіи и Этнографіи при Имп. Каз. университетѣ بو مجموعه ١٨٧٩ نچى يلدان بيرلى چقماقدهدر. مونده شپيلافسكى، شپتاكوف، فيرسوف، صابلوكف، احمروف، اشماورين، فوكس، كاتانف، كبك عالملرنڭ بزنڭ تاريخمز حقنده كوب اثرلرى چقدى.

٥) Труды II го и IV го Археологического съѣзда — въ Петербургѣ и въ Казани استنده گى مجموعه سونده

Ә.Вәлидиҙең “Төрк вә татар тарихы” (Казан, 1912) китабынан бер өҙөк. Бында ҡулланылған әҙәбиәт һанала.

“Инеш”тә автор төрки халыҡтарын пантюркизм идеяларына нигеҙләнеп билдәләй: “Төрк тигән һүҙ был көндә Азияның төньяҡ яртыһында һәм көнбайышында, Европаның көнсығыш өлөшөндә тереклек итә һәм бер телдә һөйләшә торған ҙур бер милләттең исемелер”[5].

Ғосманлы төркиҙәрен атау өсөн Европа фәнендә ҡабул ителгән “төрөк” һәм төрки халыҡтарының дөйөм атамаһы “төрки”, уның фекеренсә, аңлашылмаусылыҡ арҡаһында хата булып иҫәпләнәләр. “Икеһе лә бер үк “төрк”һүҙенән килеп сыҡҡандар”, – ти ул, әммә китаптың үҙендә Европа ғалимдары ҡабул иткән атаманы ҡуллана[6].

Ә.Вәлидиҙең төрки милләтенең билдәләнеүенә булған мөнәсәбәте уның 1913 йылда “Мәктәп” (№7) журналында имзаһыҙ баҫылып сыҡҡан

“Ҡайһы милләттәнһең?” тигән мәҡәләһендә асыҡ күренә. Ул милләтте “татар” тиеүселәр яҡлы Ғабдулла Баттал мәҡәләһенә яуап итеп яҙылған. Ә.Вәлиди был мәсьәләне төрлө яҡтан яҡтырта. Элек былдай мәсьәлә булмай торғайны, Рәсәйҙәге Ислам динен тотҡан барса төрки халҡы “Ибраһим милләте”, “Рәсәй христиандары” тип йөрөтөлә ине, ти ул[7]. Ә.Вәлиди фекеренсә, “татар” исеме бөтә төрки халҡы өсөн урынһыҙ, сөнки хатта Ҡазан һәм Ҡырым татарҙары өсөн дә берҙәм генә татар теле юҡ, ә ҡайһы бер шәрҡиәтселәр был исем менән монгол, маньчжур, төрки телдәрен дә атайҙар. Шуға ла ул бөтә төркиҙәргә “төрки” атамаһын бирергә, ә Рәсәй төркиҙәрен шәрҡиәтселәр кеүек “үҙәк төркиҙәр” тип атарға тәҡдим итә. “Ошоноң өсөн инде хәҙергә ниндәй ҡәүемдәнһең тиһәләр, ҡаҙаҡ ҡәүеменән, һарт ҡәүеменән, татар ҡәүеменән тип яуап бирергә яраһа ла, “ҡайһы милләттәнһең?”, – тип һораусыларға: “Ибраһим милләтенәнмен, йәки Россия мосолмандарынанмын, йәки ҡаҙаҡ, башҡорт, татар милләтенән тимәйсә “төрк милләтенәнмен”, – тип яуап биреү тейештер”[8].

Вәлиди тарафынан ҡабул ителгән тарихи процестың осорҙарға бүленеше бик ҡыҙыҡлы. Ул антик дәүергә ҡараған тарих процесының өс баҫҡыслы осорҙарға бүленешен ҡуллана. Йәшәйеш, тормош өс баҫҡысҡа бүлеп ҡарала: беренсе баҫҡыс – вәхши тереклек, икенсеһе – бәдәүи, өсөнсөһө – мәҙәни тереклек[9].

“Төрк халыҡтары, – тип яҙа автор, – тарихтың беҙгә билдәле булмаған ваҡыттарынан бирле үк йәшәйештең икенсе баҫҡысы булған күсмә – бәдәүи тереклектә йәшәп килгәндәр”[10].

Ә.Вәлиди осорондағы төрки халыҡтары, уныңса, күсмә һәм ултыраҡ тормош алып барыусыларға бүленә. Һуңғыларына ул Ҡазан татарҙарын, мишәрҙәрҙе, башҡорттарҙы, нуғайҙарҙы, Ҡырым татарҙарын, ҡумыҡтарҙы, Кавказ төркиҙәрен, һарттарҙы, үзбәктәрҙе, уйғырҙарҙы индерә, ә күсмә тип ҡырғыҙ-ҡаҙаҡтарҙы, төрөкмәндәрҙе һәм Себерҙәге бөтә төрки халыҡтарын иҫәпләгән[11].

Төрки дәүләттәренең үҙаллылығы Вәлиди өсөн икенсе төрлө ике дәүергә бүлеүгә үҙенсәлекле нигеҙ була: бойондороҡһоҙ һәм бойондороҡло. Уларҙың араһында Сыңғыҙ-хан төҙөгән дәүләттең емерелеүе һәм Ҡазан ханлығының рустар тарафынан яулап алыныуы тора[12].

Ошо осорҙарға бүленештән сығып, ул үҙенең китабының беренсе томында төрки халҡының боронғо дәүерҙән алып Ҡазан ханлығының баҫып алыныуына тиклемге тарихын индерергә уйлаған, ә икенсе томда – төрки халыҡтарының тарихын Ҡазан алынғандан алып хәҙерге хәленә тиклем осорҙо яҡтыртырға теләгән[13].

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, “Төрк вә татар тарихы” китабының беренсе томы ғына донъя күрә. Авторға уның икенсе томын баҫтырып сығарырға тура килмәй. Әммә ул томдың яҡынса йөкмәткеһе беренсе томдың аҙағында килтерелгән һәм ул Ә.Вәлидиҙең төрки халыҡтарының тарихи үҫешенең икенсе осоро буйынса ҡараштары хаҡында һүҙ йөрөтөргә мөмкинселек бирә. Һеҙгә уны тулыһынса килтерәбеҙ: “Ҡазандың алыныуынан һуң Болғар ере һәм болғар халҡы. – Әстрхан рус ҡулына күсә. – Төрктәр рус ҡулына керә башланылар. – Нуғай хандары. – Хөкүмәттең саралары. – Болғар, Ҡазан халҡы (сыуаштар, болғарҙар, татарҙар, арҙар, сирмештәр) үҙаллылыҡты ҡайтарып алыу ҡайғыһына керәләр. – Ихтилалдар (восстаниелар). – Эштәр һөҙөмтәһеҙ сыға. – Себер ханлығы. – Себерҙе баҫып алғандан һуң үҙ милкенең ниһәйәһеҙ ергә һуҙылғанын күрә. – Башҡорттар менән хөкүмәт араһындағы ваҡиғалар. – Салауат. – Алдар. – Хәмит. – Аҡай. – Батырша мулла. – Екатерина. – Ҡырым. – Әбей батшаның был ҙур эштәре арҡаһында мосолмандар Александр II ваҡытына тиклем иркен тын алалар. – Инде бик күп төрк ерҙәре Рәсиәгә ҡушыла. – Хөкүмәттең һуңғы саралары алдында мосолмандар. – Рустар һаман алға атлаған ваҡытта болғарҙар ни өсөн ҡуҙғалмайҙар? – Был хаҡта ҙур ғалимдар ни уйлағандар. – Халыҡ уяна, тормошта үҙгәрешкә хәжәт таба. – Был яңы хыянатҡа әҙерлек. – Рәсиә мосолмандарының Сыңғыҙҙан һуңғы хәлдәре һәм был үҙгәрештәре хаҡында оло ғалимдарҙың фекерҙәре. – Ғөмүмән, төрктәрҙең был көндәге хәлдәре хаҡында рус ғалимдарының фекерҙәре”[14].




Ә.Вәлидиҙең “Фетнә ваҡытында һәм Михаил Федорович Романовты һайлау эштәрендә мосолмандар” (Ҡазан, 1913) исемле хеҙмәтенең титул бите.

Революцияға тиклем донъя күргән хеҙмәттәрендә ҡуйылған мәсьәләләр араһында, беҙҙең уйлауыбыҙса, Ә.Вәлиди Рәсәй мосолмандарының хәлен тулы-

һынса аса алған. "Мәктәп" журналында (1913. №1) ошо мәсьәлә буйынса яҙылған хеҙмәтенең ҡыҫҡаса варианты булып "Романов сөләләһе батшалыҡ иткән дәүерҙә Россия дәүләте һәм мосолмандар" тигән мәҡәләһе баҫылып сыға. Уның тулыраҡ варианты "Фетнә ваҡытында һәм Михаил Федорович Романовты һайлау эштәрендә мосолмандар" тигән исем аҫтында айырым китап булып сыға.

"Төрк вә татар тарихы" китабында Ә.Вәлиди халыҡтың үҫеш кимәле уның йәшәү мөхитенә бәйле, тигән фекер үткәрә. Ул былай тип яҙа: "Халыҡтарҙы ерҙәре тәрбиә итә. Европа халыҡтарын, мәҫәлән, үҙҙәренең ерҙәре, диңгеҙҙәре, йылғалары сауҙа итергә, төрлө халыҡтар менән ҡатнашып, төрлө тормошто танып, мәҙәниәттә, ғилемдә һәм мәғарифтә тәрәҡҡи итергә өйрәтте"[15].

Күрәһең, халыҡ үҫеше мәсьәләһенең ошо рәүешле ҡуйылышына француз тарихсыһы Леон Каендың "Төрки тарихы" тигән хеҙмәте йоғонто яһағандыр. Сөнки Вәлиди уға, һылтанма яһап, төркиҙәр үҙ теләге менән күсмә тормош менән йәшәмәгән, уларҙы тормош шарттары мәжбүр иткәндер, тип яҙған[16].

Ә.Вәлиди ултыраҡ дәүер төшөнсәһен мәҙәниәт төшөнсәһе менән бәйләмәй. "Төрктәр ни тиклем генә күсмә булһалар ҙа, уларҙың күсмә тормоштары эсендә мәҙәнилектең һәр нәмәһе тиерлек бар ине. Шундайҙар иҫәбенән ошоларҙы әйтергә кәрәк: милли әҙәбиәт, аҡыл һәм әхлаҡи сафлыҡты үҙендә туплаған, мәҙәни ҡәүемдәрҙә булмай торған халыҡ әҙәбиәте, милли һәм фәҡәт үҙ телдәренең үҙенсәлектәренә ҡарап төҙөлгән хәрефтәр, әлифба, яҙыу, милләткә, ватанға мөхәббәт, донъя ҡороу, донъя көтөү оҫталығы, зирәклеге", – ти ул[17]. Дәреслектең йөкмәткеһен асҡанда, ул һәр ваҡыт ошондай дәлилдәр килтерә.

Ғалим төркиҙәрҙең башҡа халыҡ менән мөнәсәбәте мәсьәләһенә туҡтала. Уның фекеренсә, "яҡшы һәм насар мөнәсәбәттәр" һаны буйынса беренсе урында төркиҙәрҙең яҡын күршеләре – ҡытайҙар тора, уларҙан һуң иранлылар килә, ә өсөнсө урында – Европа халыҡтары[18].

Төркиҙәр һәм рустар араһындағы мөнәсәбәткә ҡағылғанда, Вәлиди, славяндар үҙҙәренең тарихының башланғыс осоронда ҡырағайлыҡ баҫҡысында торған ырыуҙар булараҡ билдәле ине, тип әйтеп үтә[19].

Вәлиди, төркиҙәрҙең ислам менән бәйләнешенә иғтибар бүлеп, ғәрәп мәҙәниәтенең төркиҙәргә йоғонтоһон бер ҙә кәметмәйенсә, төркиҙәрҙең мосолман мәҙәниәте үҫешендәге ролен һыҙыҡ өҫтөнә ала, уларҙың вәкилдәре ғәрәп һәм фарсы исемдәре аҫтында ижад иткәндәр. Ислам дәүләттәрендәге төрки зыялыларының эшмәкәрлеген ул "Рәсәй өсөн тарих яҙған Карамзин исемле татар"ға оҡшата[20].

Сынғыҙ-хан төҙөгән Алтын Урҙа дәүерен Ә.Вәлиди төрки халыҡтары өсөн иң уңайлы осор булған тип иҫәпләгән. Ошо осорҙа "монгол хөкүмәте донъяның төрлө тарафындағы төрктәрҙе бер-береһе менән ҡатыштырҙы"[21]. Ысынлап та, Сынғыҙ-хандың империяһы ҙур ғына кимәлдә төрки этностары нигеҙендә төҙөлгән, сөнки улар үҙҙәрен яулап алыусыларға ҡарағанда күпкә алға киткән һәм үҫешкән булған. Тикшереүсе Т.С.Сәйетбаев яулап алыу һөҙөмтәләрен бына нисек итеп билдәләй: "Урта Азия мәҙәниәт яғынан үҙенең баҫҡынсыларын үҙенә буйһондора. Урта Азия халыҡтарының етештереү көсөнөң үҫешкәнлеге арҡаһында улар үҙҙәренең үҙенсәлекле мәҙәниәтен һаҡлап ҡала алдылар. Монголдар иһә, киреһенсә, был региондың халыҡтары араһында иренеләр. Улар ерле халыҡтарҙы үҙ диненә әйләндерә алманы һәм был ғына түгел, үҙ диндәрен юғалтып, ерле дингә әйләнгән исламды ҡабул итәләр. Улар башҡа өлкәләрҙә лә ассимиляциялана… Мәҙәни үҫештең юғарыраҡ баҫҡысында торған ҡыпсаҡтар монгол халҡының төркиләшеүенә, тора бара монгол теленең төрки теле менән алмаштырылыуына ҙур йоғонто эшләйҙәр"[22].

Дөйөм алғанда, китапта төркиҙәрҙең тормошо төрлө яҡтан һүрәтләнә: йәшәйеше, дине, йәшәү урыны, сәйәси тарихы, башҡа халыҡтар менән мөнәсәбәте һ.б. Хеҙмәт биш бүлектән тора:

1) Боронғо заманда төрк халыҡтары.

2) Исламиәт һәм төрктәр.

3) Сынғыҙ хан. Бөйөк Төрк хөкүмәте.

4) Дәшт Ҡыпсаҡ, йәки Алтын Урҙа мәмләкәте.

5) Татарҙарҙан һуң болғарҙар. Ҡазан ханлығы.

Китаптың аҙағында "Бөйөк төрки-монгол ханлығы" картаһы һәм төрлө осор төркиҙәренең яҙма өлгөләре бирелгән.

Философия фәндәре кандидаты И.Насыров билдәләүенсә, Ә.Вәлидиҙең "Төрк вә татар тарихы" китабы төҙөлөшө буйынса башҡорт тарихсыһы Морат Рәмзиҙең "Тәлфиҡ әл-әхбәр вә талких әл-әсәр фи ваҡаиғ Ҡазан вә Болғар мөлөк әт-татар" исемле ике томлыҡ хеҙмәтенә тап килә[23]. Ул былай тип яҙа: "Йәш тарихсы Әхмәтзәки Вәлидиҙе механик рәүештә күсереүҙә йәки плагиатта ғәйепләп булмай, әммә, һис шикһеҙ, ул Морат Рәмзиҙең ун биш йыллыҡ хеҙмәт емешенә таянған"[24].

Китап донъя күргәс, ваҡытлы матбуғатта уның тураһында бихисап мәҡәләләр баҫылып сыға. Ғ.Ибраһимов уны: "1911 йылдағы иң етди ғилми тикшеренеү", – тип атай[25]. "Төрк вә татар тарихы" Рәсәйҙең төрлө яҡтарынан – Ҡырым, Әзербайжан, Ырымбур, Ҡазан зыялыларынан һәм ғалимдарынан баһаламалар ала. Уның хаҡында төрөк матбуғатында



Ә.Вәлидиҙең "Төрк вә татар тарихы" (Ҡазан, 1912) китабының биттәре. Уң яғында "Бөйөк төрки-монгол ҡағанлығы" картаһы, һулда Билгә ҡаған һәйкәлендәге яҙыуҙар төшөрөлгән.

ла яҙып сығалар. Ә.Вәлидиҙең үҙен ошо хеҙмәте өсөн Ҡазан университеты эргәһендәге Археология, тарих һәм этнография йәмғиәтенең ағзаһы итеп һайлайҙар. Беренсе китабының ыңғай ҡаршыланыуы, авторҙа артабан тарих менән шөғөлләнеү теләген нығыта. Был китап арҡаһында ул зыялылар араһында танылыу яулай. Шулай, "Мәктәп" журналы (1913. №1) уны үҙе менән хеҙмәттәшлек итеүселәр исемлегендә "йәш тарихсы Әхмәтзәки Вәлиди" тип атай. 1914 йылда "Сада-и Төркистан" ("Төркөстан тауышы") журналында: "Кем Төркөстан тарихын яҙа аласаҡ?" – тигән бәхәс тыуа. Фекер алышыуҙа билдәле йәмғиәт эшмәкәре, "Айна" ("Көҙгө", 1914. №38) журналында баҫылып сыҡҡан "Төркөстан тарихы кәрәк" исемле мәҡәлә авторы Махмудхужа Бехбуди ҡатнаша. Тарихтың файҙаһы һәм кәрәклеге тураһында бик оҙаҡ һөйләгәндән һуң, ул сығышын ошондай һүҙҙәр менән тамамлай: "Шуның өсөн был хеҙмәтте Төркөстан тарихы менән таныша башлаған йәш тарихсыбыҙ мөхтәрәм Әхмәтзәки Вәлиди әфәндене ҡәләменән өмөт итәбеҙ"[26].

Китаптың беренсе өлөшөнә ҡағылған һәм унда баҫылып сыҡмаған материалдарын Ә.Вәлиди айырым китап итеп сығарырға йыйынған. Исеме “Һарай хөкүмәтенең эске ҡоролошо” тип уйланылған булған[27]. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уның был теләге бойомға ашмай.

Бынан тыш, ул “Төрк вә татар тарихы”ның беренсе өлөшөндәге Ҡазан батшабикәһе Сөйөмбикә хаҡындағы материалдарҙы айырым баҫма итеп әҙерләүе тураһында хәбәр итә[28]. Уның был теләге ҡабул була: 1913 йылда “Сөйөмбикә” исемле мәҡәлә донъя күрә.

Шулай итеп, “Төрк вә татар тарихы” Вәлидиҙең артабанғы ғилми эшмәкәрлеге өсөн нигеҙ була. Өс йылдан һуң, 1915 йылда, был хеҙмәттең яңы варианты “Ҡыҫҡаса төрк-татар тарихы” исеме менән донъя күрә. Иллюстрацияларға бай китап мәктәптәргә уҡыу әсбабы итеп тәғәйенләнгән. Уны әҙерләгәндә автор, төрк тарихы буйынса дөйөм китаптарҙың юҡлығын иҫәпкә алып, һәр бүлек аҙағында өҫтәлмә әҙәбиәт күрһәткән. Шулай уҡ был баҫмала беренсе тапҡыр осраған исемдәргә ентекле аңлатма бирелгән. Китапта ваҡ хәрефтәр менән уҡытыусылар өсөн өҫтәлмә мәғлүмәт тә килтерелгән. Инештә Ә.Вәлиди “Төрк тарихы буйынса атлас” сығарырға теләүе хаҡында хәбәр итә. Үҙенең теләген ул “беҙҙең милли тарих буйынса һәйбәт атластың булмауы” менән дәлилләй[29].


المجلد الاول
من تلفيق الاخبار و تلقيح الاثار
في وقائع قزان و بلغار
و ملوك التتار

Морат Рәмзиҙең “Тәлфиҡ әл-әхбәр...” (Ырымбур, 1908) әҫәренең тәүге томының титул бите.

Ғ.Шәрәф материалды өйрәнеп һәм фәнни этикетты һаҡлап, “Ҡыҫҡаса төрк-татар тарихы” китабына ентекле тәнҡит мәҡәләһе яҙа. Ул 1916 йылда “Шура” журналының 11–14 һандарында донъя күрә. Ғ.Шәрәф рецензияһын төрки халыҡтарының историографияһын тикшереү менән башлай. Ул Ш.Мәржәниҙең һәм Әбулғази Баһадир-хандың хеҙмәтен Төрк тарихы буйынса иң әһәмиәтле китаптар, тип иҫәпләгән. “Тауа-

рих-и Болғария”, “Сыңғыҙ вә Аҡһаҡ-Тимер”, “Шәжәрә”, “Сыңғыҙ-намә”, “Жәмиғ әт-тауарих”, унының фекеренсә, “нигеҙҙә хикәйәттәр һәм ышаныуҙар менән тулы”[30]. Һуңғы йылдарҙа сыҡҡан китаптар араһынан ул Х.Ғәбәши, Р. Фәхретдинов хеҙмәттәрен айырып күрһәтә. “Әммә, – тип дауам итә Ғәлимйән Шәрәф, – 1912 йылға тиклем беҙҙең телдә төрки тарихын һуңғы заманға тиклем аңлатҡан, төрлө дәүерҙәрҙә бер-бер артлы ғилми ысулдар менән бер епкә теҙгән әҫәр булманы”[31].

Ғ.Шәрәф Вәлидиҙең беренсе китабына ҡыҫҡа ғына, әммә тос баһа бирә һәм уны “беҙҙең тарихыбыҙ буйынса материалдарҙы ғилми ысулдар менән бер системаға килтереүҙең тәүге тәжрибәһе”[32] тип һүрәтләй. “Ҡыҫҡаса төрк-татар тарихы”н тикшереүгә күсеп, ул төрлө характерҙағы хаталарҙы айырып күрһәтә: Сыңғыҙ ханға тиклемге төрк хөкүмәттәренә аҙ урын бүлгән, шаманизмды тулыһынса асмаған, яңы термин “урал-алтай халыҡтары” урынына иҫке термин “туран”ды ҡулланған һ.б. Шулай уҡ был китаптың ыңғай яҡтарын да билдәләп үтә: аҙ танылған шәхес Аҡһаҡ-Тимергә иғтибар бүлеүе, төрлө эпоха төрки халыҡтарының мәҙәниәтен яҡтыртыуы, бай иллюстрацияланыуы һ.б. Китап йөкмәткеһенең тулы анализы был әҫәрҙең телен тәнҡитләү менән тамамлана. Рецензент “минең” һүҙенең “минем” формаһындағы яңы яҙылышы урынына иҫкеһен ҡулланыуға ризаһыҙлығын белдерә. Ул: “был сағатайса (архаизм), йә иһә башҡортса (провинциализм)”, – тип иҫкәрмә яһай. Был, беҙ алда иҫкә алып үткән, XX быуат башында барған “тел дискуссияһын” сағылдыра.

1917 йылда Ә.Вәлидиҙең “Ҡыҫҡаса төрк-татар тарихы”


تورك — تاتار تاريخى ٦٤

Ә.Вәлидиҙең “Ҡыҫҡаса төрк вә татар тарихы” китабының бер бите. Һүрәттә Аҡһаҡ Тимер йәш сағында төшөрөлгән.

китабы әллә ни ҙур булмаған ҡыҫҡартыуҙар менән яңынан нәшер ителә. Мәҫәлән, инеш инмәгән, һылтанмалар ҡыҫҡартылған. Әммә төп текст һаҡланған.

1915–1917 йылдарҙа баҫылып сыҡҡан хеҙмәттәр төркиҙәрҙең Рус дәүләтенә ҡушылыуынан һуңғы осорҙо яҡтыртҡан икенсе китапты яҙыуҙың кәрәклеген дәлилләү менән тамамлана.

“Төрк вә татар тарихы” һәм “Ҡыҫҡаса төрк-татар тарихы” 1940 йылда беренсе тапҡыр донъя күргән “Төркиҙәрҙең дөйөм тарихына инеш” хеҙмәтенә нигеҙ булалар.

Революцияға тиклемге осорҙа Ә.Вәлиди китаптың икенсе өлөшө өҫтөндә даими эшләй һәм был уға Төркиәлә “Төркиҙәрҙең дөйөм тарихына инеш”енең икенсе томын әҙерләргә ярҙам итә. Әммә был том ул тере саҡта донъя күрмәй ҡала[33].

“Төрк вә татар тарихы”н яҙғанда Ә.Вәлиди Н.И.Карее́втың тарих методологияһы хаҡында китабынан өйрәнгән тарихи тикшеренеү ысулдарын ҡулланған. Аҙаҡ асыҡлауынса, Кареевтың китабы “немец профессоры Е.Бернхайм менән француз тарихсыһы Сенебоның тарих методологияһына бағышланған әҫәрҙәренән ҡыҫҡартып яҙылған” булып сыға[34].

Профессор Н.И.Кареевтың хеҙмәте Ә.Вәлидиҙең ҡараштарына йоғонто яһаған һәм ул был хаҡта рәхмәт һүҙҙәре менән иҫкә ала. Үҙенең “Хәтирәләр”ендә Ә.Вәлиди “Төрк вә татар тарихы”нда ҡулланған Плехановтың һәм Бартольдтың иҡтисади ҡараштарына тоғро ҡалған[35].

Шулай итеп, “Төрк вә татар тарихы” Ә.Вәлидиҙең төрки халыҡтары тарихын системалы сағылдырған беренсе эше булды. Шул уҡ ваҡытта был китап бөтә төрки халыҡтарының тарихын үҙ эсенә ала алмай. Быны автор үҙе лә билдәләй. Уның әйтеүенсә, был хеҙмәт халыҡтың ихтыяжын тулыһынса ҡапламай, ә ошо йүнәлештә сығасаҡ хеҙмәттәр нигеҙенең тәүге хеҙмәтен үтәй[36].

Китаптарҙың ике варианты ла революцияға тиклемге төрки телле мосолман уҡыу йорттарында уҡыу әсбабы рәүешендә ҡулланыла. 1917 йылда мосолман уҡыу йорттары мөғәллимдәренең икенсе съезы булып үтә һәм унда милли мәктәптәр өсөн тәҡдим ителгән дәреслектәр исемлеге ҡабул ителә. Бында шулай уҡ алты йыллыҡ мәктәптәр өсөн тарих буйынса дәреслектәр исемлеге лә күрһәтелгән:

1. Баттал Ғабдулла. Татар тарихы;
2. Вәлиди Әхмәтзәки. Төрк вә татар тарихы;
3. Вәлиди Әхмәтзәки. Ҡыҫҡаса төрк-татар тарихы;
4. Атласи Хади. Ҡазан ханлығы;
5. Атласи Хади. Себер тарихы;

6. Атласи Хади. Сөйөмбикә;

7. Ғәбәши Хәсән Ғата. Мофассал тарих-и кәүми төрки (Төрки халҡының тулы тарихы);

8. Мәржәни Шиһабетдин. Мостафад әл-әхбәр фи әхвәли Ҡазан вә Болғар (Ҡазан һәм Болғар тарихы өсөн мәғлүмәттәр);

9. Ҡорбанғәли Хәлит. Тауарих-и хамса-и шәрҡи (Көнсығыштың биш тарихы)[37].

Китаптарҙың авторҙары – төрки халыҡтарының рухи үҫешенә ҙур өлөш индергән һәм уларҙың этник тарихында эҙ ҡалдырған башҡорт, татар һәм ҡаҙаҡ халыҡтарының билдәле эшмәкәрҙәре. Әйтеп үтергә кәрәк, Х.Ғәбәшиҙең китаптарынан тыш, бөтә күрһәтелгән әҫәрҙәр үҙгәртеп ҡороу йылдарынан һуң яңынан нәшер ителә. Был иһә XIX быуат аҙағы – XX быуат башының тарихи фекер үҫешен күрһәткән ҡомартҡыларҙың хәҙерге көндә лә тюркология өсөн үҙҙәренең әһәмиәттәрен юғалтмауҙарын күрһәтә.

Исемлеккә Ә.Вәлиди китабының ике варианты ла инеүен һыҙыҡ өҫтөнә алып китергә кәрәк.

1924 йылда Ҡазан тарихсыһы Ғәзиз Ғөбәйҙуллин, үҙенең “Татарҙарҙа синыф тарихы өсөн материалдар” исемле мәҡәләһендә Ә.Вәлидиҙең революцияға тиклемге ғилми эшмәкәрлеген баһалап, “Баттал, Зәки Вәлиди кеүек милли тарихыбыҙға нигеҙ һалыусыларыбыҙ милләтсе рус тарихсыларынан үрнәк алдылар һәм уларҙың мәғлүмәттәрен кирегә әйләндереп яҙҙылар. Сөнки беҙ ул ваҡытта тарихты материалистик аңлауға үҫеп етмәгән инек”, – тип яҙа[38]. Ике йылдан һуң, Баҡы ҡалаһында үткән Беренсе Бөтә союз тюркология съезында сығыш яһағанда, ул Ә.Вәлидиҙең Рәсәйҙәге эшмәкәрлеге хаҡында бик яҡшы һүҙҙәр әйтә. Ғ.Ғөбәйҙуллин фекеренсә, “Төрк вә татар тарихы” төркиҙәрҙең донъм тарихы буйынса Леон Каен һәм Нәжип Асимдың хеҙмәттәренән айырмалы рәүештә, татар тарихы яғына тайпылыш менән яҙылған. Унынса, был хеҙмәт – рус һәм Европа тарихи әҙәбиәтен ҡулланып яҙылған сәйәси тарих. Ә.Вәлидиҙең Рәсәй һәм Көнбайыш тикшеренеүселәре өлгөһөнә ҡарап эшләгән һылтанмалары төрки телендәге тарихи әҙәбиәттең үҫешендә этәргес көс булды, тип билдәләй Ғ.Ғөбәйҙуллин[39].

Шулай итеп, Ә.Вәлидиҙең китаптары төрки телле йәмәғәтселек һәм Рәсәй зыялылары араһында оло билдәлелек яулай. Улар шулай уҡ Ҡазан ғалимдары араһында ла таныла. Йәш тарихсының хеҙмәттәре Рәсәй төркиҙәренең ғилми ҡараштары формалашыуына ҙур йоғонто яһай. “Төрк вә татар тарихы” китабында Ә.Вәлиди беренсе тапҡыр төрки халыҡтары тарихын төрки телендә системалы яҡтырта. Ғилми-тикшеренеү эшенең башында уҡ автор беҙҙең алға бөтә төрки халыҡтарының тарихын һәм мәҙәниәтен өйрәнеүсе булараҡ килеп баҫа[40].

Ә.Вәлидиҙең беҙ тикшергән хеҙмәттәре араһында бигерәк тә башҡорт халҡының этнографияһы һәм тарихына ҡағылышлы эштәре үҙенә йәлеп итә. Тәү сиратта улар араһынан “Бөрйән башҡорттары араһында” тигән мәҡәләһен билдәләп үтергә кәрәк. Был хеҙмәт бөрйән башҡорттарының тормошон ҡайһы бер тарихи мәсьәләләр менән бергә этнографик күҙәтеү рәүешендә яҡтыртҡан. Ул 1913 йылда йәйге каникулда, бөрйән башҡорттары йәшәгән районға яһаған ҙур булмаған сәйәхәтенән һуң яҙыла һәм шул уҡ йылда “Шура” журналының 19–20-се һандарында донъя күрә.

Мәҡәләлә хикәйәләү автор исеменән алып барыла. Беренсе биттән үк беҙ унын бөрйәндәрҙә бер үҙе генә түгел, ә студент дуҫы менән бергә булыуҙары хаҡында беләбеҙ. Мәҡәләнең аҙағынаса Вәлиди “беҙ” алмашын ҡуллана, әммә дуҫының исемен атамай. Ул Башҡортостанға унын менән бергә ял итергә һәм ҡымыҙ эсергә килеүсе татар яҙыусыһы Фуат Туҡтаров булып сыға. Был хаҡта Ә.Вәлидиҙең “Хәтирәләр”ендә телгә алына: «Мәҡәлә Ф.Туҡтаров Ҡазанға ҡайтып китеү менән, барыһы ла яҡшы хәтерҙә булғанда яҙыла».

Был бүлектең беренсе параграфында, әйтеп китеүебеҙсә, тарихи процесты ҡарағанда Ә.Вәлиди өс баҫҡыслы осорҙарға бүленеште ҡуллана: ҡырағайлыҡ, вәхшилек һәм цивилизация. Үҙе йәшәгән осорҙағы башҡорттарҙы ул өсөнсө баҫҡысҡа – цивилизациялы осорға индерә. Беҙ тикшергән мәҡәлә унын башҡорттар тарихына булған ҡараштарын ярайһы ғына тулыландыра. Бында ул башҡорт халҡының төрлө төркөмдәренең ижтимағи, иҡтисади һәм мәҙәни үҫештәрендәге айырмаларын дөрөҫ билдәләй. Ә.Вәлиди бөрйән ырыуы – иң төп башҡорт ырыуы тип иҫәпләгән Небольсиндың фекеренә ҡушыла. “Хәҡиҡәтән, – ти Вәлиди, – башҡорттар менән яҡын таныштлыҡ күрһәтә ки, бөрйәндәр кәрәк мәғишәт, тел вә ғәир хосустарҙа башҡорттарҙың иң саф булғандарын тәшкил итәләр”[41]. Өшо фекерҙе артабан да үҫтереп, һәм үҙенең тәжрибәһенә таянып, “беҙ булған был ауылдар мәғишәт тарафынан ҡыҫылып, икенсенән күрше башҡорт вә татарҙар тәьҫиренә бирелә төшөп бер аҙ үҙгәргәндәр”, – тип яҙа[42].

Вәлиди фекеренсә, “бөрйәндәр – башҡорттарҙың саф булғандары – үҙенсәлектәрен тамам юғалтып баралар”[43]. Рустар һәм татарҙар менән аралашыу башҡорттарҙы бөтөнләй үҙгәртте тип иҫәпләй ул: “Тел, ғоруф вә ғәҙәттәрендә юғары ике күрше ҡәүемдәренең тәьҫире күренеп тора. Бынан зыян да юҡ кеүек: әммә уларҙың иске һәм тышҡы мәҙәниәттәренә (әхләҡ вә мәғишәттәренә) тәьҫирҙәре быларҙы был көн тамам аянысхәлгә




Ә.Вәлидиҙең "Бөрйән башҡорттары араһында" исемле мәҡәләһенән бер өҙөк.

килтергән; башҡорттар иркен күсмә тормош ләззәттәрен онотмағандар, уҡыу-яҙыуҙың юҡлығы, сиктән сыҡҡан ялҡаулыҡ тамам боронғоса, әммә кешеләр илә мөғәмәләлә, тормошта тәклиф (көс ҡулланыусы) булырға йоҡҡан: риялана (ике йөҙләләнә), алдай, хыянат итә беләләр һәм матурыраҡ кейем кейергә, тәтәй арбалар тоторға, баҙарҙарын да көтмәйенсә эсеп иҫерек хәлдә йөрөргә яраталар"[44]. Был башҡорттар тормошонон традицион шарттары үҙгәреүен Ә.Вәлиди кире баһалағанын күрһәтә. Башҡортостанда капитализмдың үсеше башҡорт ерҙәренең һатылыуы менән оҙатыла килә. Формацияларҙың кинәт алышыныуы ярым күсмә хужалыҡлы райондарҙа йәшәүсе башҡорттарҙың йәшәү кимәлендә айырыуса ауыр сағылды, сөнки бында хужалыҡ өсөн ҙур ер майҙаны талап ителә. XIX быуат аҙағында – XX быуат башында был регионда игенселек-малсылыҡ хужалыҡтары формалашыуы күҙәтелә[45]. Этнограф Р.Йәнғужиндың тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында һәм Урал аръяғында традицион хужалыҡ – ярым күсмә малсылыҡтың һынылышы күҙәтелә, әммә крәҫтиәндәрҙең төп массаһы араһында хужалыҡтың яңы формаһы тулыһынса таралып бөтмәгән була. Был яҡтарҙа, хатта Октябрь революцияһынан һуң да, урыны менән йәйләүҙәр һаҡланған. Хужалыҡты үҙгәртеп ҡороу бик күп аҡса талап иткән, ә халыҡта быңдай аҡса булмаған[46]. Шуға күрә Ә.Вәлидиҙең сәйәхәте ваҡытында бөрйән башҡорттары "үтә лә ярлы"[47] булып күренгәндәр.

Күбеһенсә Ә.Вәлиди цивилизацияның башҡорттарға, уларҙың рухи мәҙәниәтенә кире йоғонто яһауы хаҡында һүҙ йөрөтә. Ул боронғоно

идеаллаштыра һәм цивилизация йоғонтоһона эләкмәгән бөрйәндәр әхләҡи яҡтан тарҡалмағандар тип иҫәпләгән[48].

Мәҡәләһендә Ә.Вәлиди үҙенең хеҙмәтен ғилми характерҙа түгел тип билдәләй. “Беҙ, – тип яҙа ул, – бөрйән араһына фәнни бер маҡсат илә кермәнек. Ошоноң өсөн дә йөрөүебеҙ фәнни бер төҫ ала башламай ине тип, ишеткән ҡурайҙар, йырҙар, хикәйәләрен һәммәһен дә ҡыҙыҡ өсөн генә тыңлаштырҙыҡ. Иҫке яҙыу фәлән йыйманыҡ. Йыр һәм хикәйәләрҙе яҙып маташманыҡ”[49]. Үҙенең “Хәтирәләр”ендә этнографик мәҡәлә тип яҙа[50]. Ысынлап та, был башҡорттар хаҡында төрлө мәғлүмәттәрҙе ҡулланып яҙылған этнографик характерҙағы мәҡәлә. Унда автор башҡорт халҡының тарихына историографик күҙәтеү яһай. Никольский тарафынан төҙөлгән һәм 1899 йылда “Этнографическое обозрение” журналында донъя күргән башҡорттар тарихы буйынса хеҙмәттәрҙең каталогын айырым билдәләп үтә һәм “башҡорттар тураһындағы әҙәбиәтте өйрәнеүҙе” еңелләштерҙе, ти[51].

Ә.Вәлиди башҡорттар тарихының насар өйрәнелеүенә зарлана һәм былай ти: “Беҙҙең ғоләмә һәм ғилми йәмғиәттәр Себерҙең әллә ҡай соҡорҙарындағы: бөтән халҡы ике меңдән ғибәрәт булған ваҡ таифәләрҙе өйрәнеү юлында байтаҡ ҡына аҡса сарыф итәләр. Әммә күҙ төбөндәге ошо башҡорттарҙы өйрәнеү хосусында эштә эшләмәйҙәр”[52]. Башҡорт тел ғилеменә нигеҙ һалыусы профессор Н.К.Дмитриев та башҡорт теленең революцияға тиклем Рәсәйҙә аҙ өйрәнелеүен билдәләй. Былай тип яҙа ул: “Революцияға тиклем башҡорт теле элекке Рәсәйҙә иң аҙ өйрәнелгән телдәрҙең береһе булған, хатта үҙе ингән төрки телдәр группаһы эсендә лә. Азербайджан, сыуаш, ҡаҙаҡ, татар телдәре генә түгел, хатта үҙәктән алыҫта булған яҡут йәки урәнхәй (тува) телдәре лә күп мәртәбәгә яҡшыраҡ өйрәнелгән булған. Күренекле тюркологтар: академик В.В.Казембек, И.Н.Березин һәм башҡаларҙың хеҙмәттәрендә башҡорт теле һис тә телгә алынмаған тиергә була, алынған хәлдә лә авторҙар йыш ҡына уны тулыһынса яңылыш күҙ алдына килтергәндәр”[53]. Был һүҙҙәр Ә.Вәлидиҙең фекере менән ауаздаш.

Әхмәтзәки Вәлиди Рәсәй ғалимдарын “беҙҙең ғалимдар” тип атаһа ла, шул уҡ ваҡытта сығыштары буйынса төрки булған ғалимдарҙы уларҙан айыра. Был осраҡта ул һуңғыларын “беҙҙеке” тип йөрөтә. Башҡорттар хаҡында тикшеренеүҙәрҙә былай тип яҙа ул: “Беҙҙең үҙебеҙҙә инде бер нәмә лә юҡ тиһәк тә ярай ине. Тик һуңғы көндәрҙә бер-ике мәҡәлә илә бер китап сығып ҡалды”[54]. Шул китаптар һәм мәҡәләләр араһынан ул Һаҙый Атласиҙың “Башҡорт тарихы” исемле китабын, Ғ.Ғүмәриҙең “Башҡорттар бөтәрме?” тигән әҫәрен, М.Өмөтбаевтың “Йәдкәр”ен атап китә.

Һ.Атласиҙың китабын тикшергәндә, Әхмәтзәки Вәлиди, Игнатьев һәм Гурвичтың "Справочная книга Уфимской губернии" тигән китабын тәржемә итеп, тик ҡайһы бер мәғлүмәттәр генә кереткеләүе өсөн уны бик ныҡ тәнҡитләй. Артабан ул башҡорт тарихын өйрәнеүҙә талаптар ҡуя: "Әммә "Башҡорт тарихы" булһа, унда ул ҡәүемдең Русия ҡулына кереүҙән элгәре хәлдәре, мәғлүм булған ҡәҙәре хандары вә Русия ҡул аҫтына кергәндәре һуңынан хөкүмәттең, мәсәлән, уларҙың ерҙәргә вә идара хосустарына ҡарап төҙөгән тәдбирҙәре вә ул тәдбирҙәрҙең вә мәғишәтенең ошо һуңғы заманғы башҡортто нисек килтереп сығарыуы һөйләнергә кәрәк ине"[55]. Был талап Вәлидиҙең башҡорт тарихын системалы өйрәнеү теләген сағылдыра. Уның башҡорт шәжәрәләрен ғәрәп һәм Европа сығанаҡтары менән сағыштырып башҡорт тарихын өйрәнеүҙе ниәт итеп ҡуйыуы ла ошо фекерҙән сығып эшләнелә һәм ул "уларҙың асылдары, этник составтары хаҡында шул ваҡытта ғына бер ҡарарға килергә кәрәк"[56], тигән һығымта яһай.

Башҡорттарҙың килеп сығышына килгәндә, Әхмәтзәки Вәлиди улар финдар йоғонтоһо булған төрки ырыуҙарҙан барлыҡҡа килгәндәр тип иҫәпләгән. Уның был фекере хәҙерге башҡорт тарихсыларының тикшеренеүҙәре менән тап килә[57].

М.Рәмзиҙең "Тәлфиҡ әл-әхбәр" тигән китабына таянып, ул "бөрйән халҡы ла пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһиссәләмдең тыуыуынан элгәре үк тарих битенә кереп ҡалған һәм был көнгә ҡәҙәре онотолмай килгән бер ҡәүем" тип ғорурлыҡ менән яҙа ғалим[58].

Ә.Вәлиди башҡорт йырҙарына ла байтаҡ иғтибар бүлә. Улар дуҫы менән бик күп халыҡ йырҙарын тыңлайҙар. Улар араһында С.Г.Рыбаковтың "Музыка и песни уральских мусульман" (1897) исемле китабында ғына осраған "Калматай" йыры тураһында ла һүҙ бара[59]. Автор үҙенең китабында башҡорт халыҡ йырҙары "моңлораҡ, эффектлы һәм уларҙа ниндәйҙер үҙенсәлекле киңлек, йәйенкелек бар, уларҙың үҙенә генә хас гүзәллек күренә, ниндәйҙер билдәһеҙлеккә, уйсанлыҡҡа ынтылыш һиҙелә... Ғөмүмән, башҡорт йырҙары эстәлегенең тормош фәлсәфәһе элементтары тормошҡа фәлсәфәүи ҡарауға йүнәлеү күренә" тип яҙа[60]. Ул башҡорт көйөнөң милли үҙенсәлеген дә билдәләп үтә: "Башҡорт көйҙәренә көнсығыш стилендәге биҙәүҙәр аҙыраҡ хас: уларҙың ритмы тигеҙлек менән айырыла. Улар, ғөмүмән, ҙур яңылыҡ хисе ҡалдыра"[61].

Ә.Вәлиди Рыбаковтың тикшеренеүҙәре менән таныш булған һәм башҡорт музыкаһын тасуирлағанда йыш ҡына унең фекеренә һылтанған, әммә шул уҡ ваҡытта, Рыбаковтың төрк тарихын насар белеүен һәм башҡорт көйҙәрен европаса ҡабул итеүен һыҙыҡ өҫтөнә алып үтә. Рыбаковтың «Европа кешеһенең ҡолағы башҡорт көйҙәренә тиҙ эйәләшә

алмай» тигәне менән Вәлиди килешмәй. Унын фекеренсә, башҡорт көйө боронғо төрки сығышлы. Вәлиди Рыбаковтың һүҙҙәрен төрки халҡының милли байлығына бер ниндәй тарихи ерлекһеҙ хасланыу тип иҫәпләгән.

Музыка хаҡында бәйән иткәндә, Ә.Вәлиди милли мәсьәләгә лә ҡағылып үтә. Ул үҙҙәрен "мәҙәни" тип һанаған һәм башҡалар өсөн ҡарарҙар ҡабул иткән кешеләрҙе ғәйепләп яҙған[62]. Унынса, төрки халыҡтарының милли музыкаһы тергеҙелеүе уларҙы башҡа халыҡтарҙың рухи йоғонтоһонан һаҡлай алыр ине. "Беҙ үҙебеҙҙең милли музыкабыҙҙы юғалтһаҡ, киләсәгебеҙ өсөн ҙур енәйәт яһаған булырбыҙ", – тип ул башҡорттарҙы иҫкәртә[63].

Әхмәтзәки Вәлиди төрки халҡының ассимиляцияға бирелеү сәбәбен эҙләй һәм уны ғәскәрлектә, юлбашсы артынан эйәрергә өйрәнеүҙә күрә. Был идея француз тарихсыһы Леон Каендыҡы. Беренсе тапҡыр ул Ә.Вәлиди тарафынан "Төрк вә татар тарихы" китабында ҡулланыла. Ә был мәҡәләһендә бөрйән башҡорттарының пассивлығын тәнҡитләү өсөн Л.Каенға һылтанмалар эшләй.

Ҡарап үтелгән мәсьәләләрҙән тыш, "Бөрйән башҡорттары араһында" мәҡәләһенә башҡорт, ғөмүмән төрки халыҡтарының тарихы, этнографияһы буйынса мәғлүмәттәр, һәм Вәлидиҙең бөрйән башҡорттарының йәшәү рәүеше хаҡындағы үҙ күҙәтеүҙәре ингән.

Мәҡәлә донъя күреү менән "Шура" журналының киләһе ике һанында замандаштарының яуап хаттары баҫылып сыға. Журналдың 23-сө һанында Алма-Ата ҡалаһында йәшәүсе Сабирйән әл-Ҡормаши исемле башҡорттың рәхмәт хаты баҫыла. Әйтеп үтергә кәрәк, Ҡормаши был журналдың иң әүҙем уҡыусыларының береһе булған. Ул йыш ҡына журналға үҙенең мәҡәләләрен ебәреп торған. "Шура"ның төрлө йылдарҙағы һандарында унын мәҡәләләре, ҡыҫҡа ғына хәбәрнамәләре, хаттары осрай. Ғәҙәттә, ул мәҡәләләре аҫтына "Сабирйән әл-Ҡормаши" тигән имза ҡуйған. Ҡормаши үҙенең хатында "Вәлиди йәнәптәренә беҙҙең милли тарихыбыҙға ҙур әһәмиәт биргәне өсөн"[64] рәхмәтен белдерә һәм теләген яҙа: "Инде ул кеше бөрйән башҡорттарында Темәс вә Күсәй ауылдарына барып "Мораҙым" тигән көйҙөң вә йырҙың донъяға таралыуына сәбәпсе булһа, яҡшы булыр ине. Шунан һуң, бәлки, нотаға һалыусылар ҙа табылыр. Әгәр ҙә был көй нотаға һалынһа, йөрәк тамырыбыҙға кереп урынлаша торған бер милли көйөбөҙ булып ҡалыр ине"[65].

Иркутск ҡалаһында йәшәүсе Хәбибулла Ғәбитов исемле уҡытыусынан килгән икенсе хат "Башҡорттарҙың кәмеүенең сәбәбе ни?" исеме аҫтында мәҡәлә итеп яҙылған. Ул "Йәш тарихсыбыҙ З. Вәлиди йәнәптәренең Башҡортостанда булыуы мөнәсәбәте менән" тигән иҫкәрмә менән баҫылып

сыға[66]. Автор башҡорттарҙың һан яғынан кәмеүенең сәбәптәренә анализ яһарға тырыша һәм башҡорттоң үткәнен идеаллаштыра. Ошо идеализацияны мәҡәләһенән килтерелгән бер цитатаһы сағылдыра: "Аллаһы тәғәлә тарафынан һибә ителгән иркенлектән теләгәндәренсә файҙаланып донъяның ожмахы булған киң Урал тауҙарының йәмле баҡсаларында гүзәл һәм борғоланып, иркәләнеп ағып ятҡан шишмәләре буйҙарында, бал ҡортондай наҙланып күсеп-күсеп йөрөгән был хоҙай бәндәләре заманында ҡәүемдәрҙең, бәлки, иң бәхетлеһе булғандарҙыр..."[67]. Автор "киң тәбиғәт эсендә һис нәмәгә буйһонмай, тамам үҙ теләктәре һәм үҙ ихтыярҙары менән генә йөрөргә ғәҙәтләнгән башҡорттар бынан башҡа тормош эҙләмәүҙәре лә тәбиғи ине..." тигән фекер үткәрә[68]. Әммә быларҙың бөтәһен дә, унынса, "сит көстәр" боҙҙо. "Сит йоғонто" төшөнсәһен ентекле итеп аңлатмайынса (Башҡортостанды колонизациялау хаҡында һүҙ баралыр тип һиҙемләргә генә ҡала), ул былай ти: "Ана шул тышҡы тәьҫир кергәндән башлап башҡорттарҙың тормош һәм әхүәлдәре икенсе төҫкә керә... Уларҙа йәмле, изге тормош ҡутарыла... Аҡ күңелдәре керләнә... Саф выждандары таплана башлай. Киң далала утлап йөрөгән һәм хаҡһыҙ ризыҡ ташыған хайуандарын ҡулдарынан ысҡындырғас, Башҡортостанды фәҡирлек һәм меҫкенлек ҡаплай"[69].

Х.Ғәбитов башҡорт ауылдарын тасуирлай, уларҙа нисек итеп башҡорттарҙың ҡарындыҡ тәҙрәле, бер ниндәй санитар шарттар булмаған, аслыҡ һәм һыуыҡ хөкөм һөргән өйҙәрҙә йәшәүе хаҡында яҙа. Мәҡәләнең аҙағында: "Башҡорттарҙы һан йәһәтенән йылдан йыл кәметә барған нәмәләр: чахотка, катар, ревматизм, паралич, тиф... кеүек ҡурҡыныслы ауырыуҙар булып тышҡы тәьҫирҙең килтереп сығарған нәтижәләре тиһем килә. Быға тиклем сифилис, шанкр, бобон, триппер... кеүек бысраҡ ауырыуҙар" тип һығымта яһай[70].

Башҡорттарҙың кәмеүенең сәбәптәре хаҡындағы фекерләүҙәре "Шура" журналы редакцияһының иғтибарынан ситтә ҡалмай һәм Х.Ғәбитовтың мәҡәләһенән һуң ошо хаҡта редакция үҙ фекерен белдерә. Бында редакция исеменән Х.Ғәбитовтың законһыҙ рәүештә чахотканы башҡорттарҙың кәмеү сәбәбе, "юғиһә "чахотка башҡорттарҙың кәмеүенең сәбәбелер" тигән һүҙҙәр тәҡдир тиеүҙән күпкә айырылмай" тип яҙыла[71]. Комментарийҙың башында уҡ шундай фекер һуҙыла: "Заманында донъяны үҙеңә эйәртә алмаһаң, үҙең заманға эйәр!". Редакцияның иҫкәрмәләре ошондай һүҙҙәр менән тамамлана: "Һәр хәлдә, әгәр чахотка кеүек нәмәләрҙе башҡорттарҙың кәмеүенең сәбәбелер тип уйлағанда, уны икенсе йүнәлештә тикшерергә кәрәк. Чахотка кеүек нәмәләр башҡорттарҙы кәметеүсе сәбәп түгел, уларҙың нәтижәһелер"[72].

XX быуат башында башҡорттарҙың милли-этник торошо мәсьәләһе бик актуаль була. Башҡорттарҙың "бөтөүе" тураһында Л.Сабанеев, В.Флоринский, Г.Успенский яҙалар. Н.Гурвич, Н.Скалозуб, А.Калачев и С.Сомье былдай фекер менән риза булмайҙар. Мәҫәлән, М.В.Лоссиевский "Кое-что о Башкирии и башкирах в их прошлом и настоящем" (1903 г.) исемле китабының бер бүлеген, ә Ғ.Ғүмәри үҙенең брошюраһын "Вымирают ли башкиры" тип атаған[73]. Әммә билдәле тарихсы Б.Х.Юлдашбаевтың тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, XIX быуат аҙағында – XX быуат башында башҡорт йәмғиәтендә ерҙәрҙең кәмеүе һөҙөмтәһендә хужалыҡтың традицион формалары тарҡалыуы күҙәтелә, ә был башҡорттарҙың бөтөүенә алып килә[74].

Шулай итеп, Ә.Вәлидиҙең "Бөрйән башҡорттары араһында" мәҡәләһе көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһен ҡуҙғата һәм революция алдынан башҡорт йәмәғәтселегенә ҙур йоғонто яһай. "Дүрт йыл һуңыраҡ, башҡорт сәйәси хәрәкәттәре башланғас, был мәҡәләләрҙең файҙалы булыуы күренде"[75]. Ә.Вәлидиҙең ғилми эшмәкәрлегендәге мәҡәлә башҡорттар тарихын өйрәнеүҙә тәүгеләрҙән була, был өлкәлә иң һуңғы хеҙмәте – "Башҡорт тарихы".

Ә.Вәлидиҙең башҡорттарға арналған тағы бер хеҙмәте – ул тюрколог В.И.Филоненконың (1884–1977) "Башҡорттар" тигән китабына яҙған баһаламаһы. Ул 1915 йылда Ф.Г.Соловьевтың электр типографияһында нәшер ителә. 1913–1914 йылдарҙағы "Вестник Оренбургского учебного округа" журналының айырым оттискыһы рәүешендә сыға. Китап инештән, 10 бүлектән, шулай уҡ башҡорттар тураһында әҙәбиәт күрһәткесенә өҫтәлмәләрҙән тора.

XX быуат башында, бигерәк тә 1905–1907 йылдарҙағы революциянан һуң, Өфөлә һәм Ырымбурҙа ғилми-тикшеренеү, крайҙы өйрәнеү эштәренең көсәйеүе күҙәтелә. 1908 йылда Өфөлә тыуған яҡты өйрәнеү буйынса йәмғиәт ойошторола һәм унда урындағы зыялыларҙың иң алдынғылары инә: уҡытыусылар, табиптар, земство хеҙмәткәрҙәре һ.б. Йәмғиәттең етәксеһе итеп 2-се һанлы ҡатын-ҡыҙҙар гимназияһы мөғәллиме Виктор Иосифович Филоненко һайлана.

Тыуған яҡты өйрәнеү буйынса йәмғиәттең баҫма органы булмаған, әммә ул урындағы баҫмаларҙы киң файҙалана. Өфө краеведтары үҙҙәренең эштәрендә башҡорттарҙың тарихына, мәҙәниәтенә, этнографияһына, халыҡ ижадына, теленә, Өфө ҡалаһының тарихына, Башҡортостанды колонизациялау мәсьәләләренә ҙур иғтибар бүләләр.

1908 йылда В.И.Филоненко йәмғиәт ағзаларының йыйылышында башҡорттарҙың килеп сығышы хаҡында доклад яһай һәм был уның башҡорттар тураһында хеҙмәтенең башы була. Баҫылып сыҡҡан тарихи тикшеренеүҙәрҙе, архив сығанаҡтарын һәм башҡа материалдарҙы

файҙаланып, ул башҡорттарҙың боронғо дәүерҙән алып XX быуатҡа тиклемге тарихы буйынса хеҙмәт яҙа. В.И.Филоненконың монографияһы тәүҙә мәҡәләләр серияһы рәүешендә 1913–1914 йылдарҙа "Вестник Оренбургского учебного округа" журналында (Өфөлә 1912 йылдан башлап сыға) донъя күрә. Һуңынан Өфөлә (1915 йыл) айырым китап булып сыға. Китапта башҡорттарҙың килеп сығышы, теле һәм дине, Башҡортостандың боронғо дәүерҙән алып Рәсәй составына кергәнсе һәм унан һуңғы тарихи ваҡиғалары, шулай уҡ крайҙы колонизациялау, башҡорт ерҙәрен тартып алыу, Башҡортостан территорияһында тау заводтарының барлыҡҡа килеүе, башҡорттарҙың хәрби хеҙмәте, башҡорт восстаниелары, Башҡортостан менән идара итеүҙең төрлө аспекттары урын ала. Башҡорт фольклорына ла ярайһы уҡ урын бирелә.

В.И.Филоненконың тикшеренеүе Башҡортостан тарихы буйынса бик үҙенсәлекле хеҙмәт булып һанала. "Башҡорт АССР тарихы буйынса очерктар" китабының беренсе томы авторҙары баһалауынса, Виктор Иосифович "батшаларҙың Башҡортостанға ҡарата колониаль сәйәсәтен аҡлаусы монархист тарихсыларға эйәрмәй. Ул башҡорт халҡы тарихының мөһим дәүерҙәрен, батша хөкүмәте менән мөнәсәбәтен һәм башҡа мәсьәләләрҙе яҡтыртырға тырыша. Автор башҡорттарҙың мәҙәниәт тарихына, йәшәү рәүешенә һәм халыҡ ижадына иғтибар итә. Уға тиклемге был яҡты өйрәнеүселәр халыҡтың бөтөн тарихы менән шөғөлләнмәйенсә, тик этнографик күҙлектән генә тикшеренеүҙәр үткәргәндәр һәм шуларҙы билдәләп китергә кәрәк"[76].

В. Филоненко хеҙмәтен яҙған саҡта Өфө ҡалаһының элекке башлығы Волковтың баҫылмаған ҡулъяҙмаларын ҡулланған. Был материалдар араһында "тәржемәсе Өмөтбаевтан" тип исемләнгән 10 битлек иҫке ҡулъяҙма ла була. Улар билдәле башҡорт мәғрифәтсеһе Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев тарафынан эшләнгән булған.

Башҡорттар үҙҙәренең ысын исеме "башҡорт (баш бүре)" аҫтында X быуат башында уҡ территория биләгәндәр, тип яҙа В.И.Филоненко. Башҡорттарҙың килеп сығышы мәсьәләһенә ҡағылғанда, ул: "Хәҙерге ваҡытта башҡорттарҙың төрки телдә һөйләшеүҙәрен генә билдәләп була", – ти[77].

Ә.Вәлиди был хеҙмәткә ентекле баһалама яҙа һәм уны "Башҡорттар тураһында яңы әҫәрҙәр" тип исемләй. Ул В.И.Филоненконың башҡорттарҙың боронғо тарихын интерпретациялауы менән риза булмай. "Һуң ниңә был башҡорт тарихы менән артығыраҡ моҡтәдир (компетентный) кешеләр шөғөлләнмәйҙәр, ни өсөн был мәсьәлә менән иҫке вә сәйнәлеп бөткән эбер-себер һүҙҙәрҙе һөйләп тора, етмәһә, шуларҙан

әүһәләп үҙҙәренән әллә ниндәй бүре баштары сығара торған кешеләр генә сыуалалар, тиәһе килә", – тип яҙа рецензент[78].

Ә.Вәлиди: "Дөрөҫ, мөәллиф тарафынан ҡуҙғатылған был мәсьәләләр бик ауыр, ләкин ни ҡәҙәре ауыр булһа ла был ҡәҙәр ҡараңғы, был ҡәҙәр хыялдарға сумдырырлыҡ түгел", – тип дауам итә[79]. Автор тарафынан Флоренскийҙың "Башкирия и башкиры" һәм М.Өмөтбаевтың "Йәдкәр" исемле хеҙмәттәргә яһалған һылтанмаларҙы ул "фәнни ерлеге булмаған гипотезалар"ға таяныу тип иҫәпләй.

В.И.Филоненконың китабында тасуирланған Рәсәй хөкүмәте составында башҡорттар тарихы, башҡорт восстаниелары, кантондар осоро, һуңғы йылдар тарихы "кеүек мәсьәләләр хаҡында тарихи дәлилдәр күп булғанлыҡтан, бик ваҡ ҡына бәғзе һүҙҙәрҙе иҫәпкә алмағанда, яңылыш фекерҙәр кереткәне күренмәне" тип билдәләй[80].

Рецензияланған хеҙмәттең иң әһәмиәтле өлөшө тип, Ә.Вәлиди рустарҙың Башҡортостанға күсеп килеүе, башҡорттарҙың хәҙерге тормошо һәм уларҙың татарлашыуы хаҡында һөйләнелгән бүлектәрҙе атап китә: "Китаптың ҡиммәтле урындары, әлбиттә, ошо ерҙәлер. Ләкин был бабтарға ғына ҡарап, беҙ был китапты башҡорттоң фәнни тарихи бабында бер аҙым алға китеү тип әйтә алмайбыҙ"[81].

Ә.Вәлидиҙең башҡорттар тураһындағы хеҙмәттәренең сираттағыһы – башҡорт ғәскәре тарихы хаҡында мәҡәлә. Ул Петербург ҡалаһында Башҡорт дивизияһының сәйәси бүлеге хеҙмәткәрҙәре тарафынан сығарылған "Бәхет көнө" журнал-альбомында 1920 йылда донъя күрә[82]. Башҡорт ғәскәрҙәренең Ҡыҙыл Армия яғына күсеүенең беренсе йыллығына арналған был йыйынтыҡ бай иллюстрацияланған. Унда Башҡорт бригадаһының һәм дивизияһының сәйәси бүлеге өндәмәләре, Х.Әмировтың, Ғ.Ибраһимовтың башҡорт ғәскәрҙәре тураһында мәҡәләләре индерелгән. Улар араһында Ә.Вәлидиҙең "Боронғо башҡорт ғәскәре" исемле хеҙмәте лә бар. Автор сығанаҡтарҙы күрһәтмәйенсә, ҡыҫҡаса унын тарихын һөйләп бирә.

Ошо тема өҫтөндә эшләргә ул йылдарҙа 1-се башҡорт кантонының башлығы Ғабдулла Дәүләтшиндың улы генерал Ғәбделғәзиз Дәүләтшин теләк белдергән. Ғабдулла 1812 йылда Себенле ауылында тыуған, атаһының мәҙрәсәһен тамамлаған, ахун дәрәжәһен алған, 1839 йылғы Хиуа походында, 1854 йылда батша Александр II коронация церемонияһында башҡорт ғәскәренең вәкиле булараҡ ҡатнаша. Ә унын улы Ғәбделғәзиз Неплюев исемендәге кадет корпусын, Петербург юғары хәрби училищеһын, Главный штаб эргәһендәге көнсығыш телдәре курсын тамамлаған, Урта Азияла, аҙаҡ Петербургта Главный штабта хеҙмәт иткән. 1919 йылдың 13 ноябрендә ул Әхмәтзәки Вәлидигә хат яҙа: "Күп



# باشقوردلارنك بورونغی عسکرلری حقنده.

باشقردنك چن آرمیا بولوب خدمت ایتوی ۱۷۹۸نچی
یلدان باشلانغان؛ لکن باشقرد بورون-بوروندان‌اوق
عسکری خلق بولغانلقدان روسیه حکومه‌تی قولینه کرو
بلن اوز اختیارلری بلن اوق عسکر خدمه‌تینه بار-
غان. باشقردعسکری حقنده برنچی خبر ۱۶۰۸نچی یلده
کوروه. ۱۶۷۶نچی یل بر مکلف باشقرد قریم-
صوغشینه بارغانلار هم تورلی وقتلرده پاله‌کلرغه قارشی
بارغانلار؛ لکن بو خدمتلر بارسی‌ده تله‌کان کشیلرنك
باروی، اختیارلی اش بولغان. ۱۷۵٤نچی یل ۱٤مارتدان

اشلرینه قاراب تاغرادغنه آلغانلار، اما ۱۷۵٤نچی یلدان
۱۷۹۷نچی‌گه قدر خدمت ایتوچیلرگه ژالوونیه فوراژ
هم پراؤیانت بیرلگان. باشقردنك ۱۷۹۸نچی یلغه چاقلی
ایتکان عسکری خدمتن برنچی دوردیب ایتورگه بولا.
اول چاقده باشقرد همه عسکر ترتیبی اشلرنده اوزی
تله‌کان فورماده بولغان، روسیانك منتظم عسکرلری
کبك عمومی قانونلارغه قاراماغان، خدمتکه تلاب
چقغان کشیلر بولسون حکومت امری بوینچه خدمتکه
بارغانلار بولسون بارسیده اوزلری تله‌گه‌ن کشینی باش

مه‌سکه‌وده روسیه شورالارینك توب
باشقارما کامیتیتی حوضورنداغی باشقورد
وه‌کیلی: عه‌بدوللا ئه‌دهه‌موف.

تؤحفه‌تولین.

مه‌سکه‌وده روسیه شورالارینك توب
باشقارما کامیتیتی حوضورنداغی باشقورد
وه‌کیلی: عه‌بدورره‌شید بیکباووف.

باشلاب روسیا حکومتی باشقرلاردان کیراك چاقندا
عسکر آلوغه امر چغارغان هم شول وقتدان باشلاب
۱۷۹۷نچی یلغه چاقلی لینیا خدمتلرینه (یعنی مملکتنك
چیکلرنده‌گی کریپوسلارده خدمتکه) بارغانلار. ۱۷۵۵نچی
یل خدمتده ۱۹٦۹کشی بولغان ۱۷۵٤نچی یلغه چا-
قلی خدمتلری اوچون ژالوفیه آلماغانلار. تیك قیلغان

ایتوب صایلاب اوزلرنچه اش کورگانلار.
۱۷۹۸نچی یلدان باشلاب ۱۸٦۳نچی یل ۱٤ مایغه
چاقلی باشقردلار یارم‌منتظم (ایرریگولیرنی) عسکرلك
خدمتینه مجبورا تارتلگانلار. بو خدمت حاضرگی کازا-
چیلارنك خدمتی کبك بولغان. باشقردلار بلن برگه-
باشقردغه کورشی تورغان میشارلارده بو خدمتکه طار-

**1920 йылда Петербургта донъя күргән “Бәхет көнө” исемле йыйынтыкта баҫылған Ә.Вәлидиҙең “Боронғо башҡорт ғәскәре” мәҡәләһенең башы.**

йылдар инде мине башҡорт ғәскәрҙәре тураһында тарихи очерк яҙыу фекере ташламай. Башҡорт ғәскәрҙәренең мәсьәләләре менән шөғөлләнеүсе хәрби министрлығының етәксе органы булған Азия бүлегендә хеҙмәт итә башлағанда уҡ башымда күсеректәр, яҙмалар эшләп барырға кәрәк тигән

фекер тыуғайны. Әммә эшем күп булды, шулай уҡ Мәскәүҙән (төп штабтың иҫке эштәре Мәскәүҙә Лефортово һарайында һаҡлана) кәрәкле ҡағыҙҙарҙы яҙҙырып алырға ваҡытым булманы.

Хәҙер мин, нигеҙҙә архив материалдарын һәм әҙәби сығанаҡтарын файҙаланып, был эш менән етди шөғөлләнергә уйлайым. Башҡортостан эштәрендә актив ҡатнашырға мөмкинселегем булмағас, ошо юл менән булһа ла тыуған халҡыма билдәле файҙа килтерергә һәм атайым мәрхүмдең васыятын үтәргә теләйем. Киләсәктә ниндәй генә хәлдәр тыуыуына ҡарамаҫтан, үҙ халҡыныңдың яҡындағы үткәнен белеү һәм тарихи үрнәктәрҙә өйрәнеү файҙалы булыр тип уйлайым. Яҡынса схемам:

1. Инеш – башҡорттарҙың боронғо тарихынан ҡыҫҡаса мәғлүмәттәр. XVIII быуаттың икенсе яртыһына тиклемге Башҡортостан идараһы.

2. Башҡорттар менән яңыса идара итеүҙе ойоштороу (башҡорт ғәскәрҙәре). Реформаның сәбәптәре. Идара сафына башҡорттарҙы ылыҡтырыу. Яңы реформа ни ҡәҙәре башҡорттарҙың рухына һәм йәшәү рәүешенә яуап биргән. Ер реформаһы.

3. Башҡорттарҙың хәрби хеҙмәте. Көнбайыштағы һуғыштарҙа, Ҡырым компанияһы һәм Урта Азиялағы дала сәфәрҙәренә ҡатнашыуҙары.

4. Башҡорт ғәскәрҙәре бөтөрөлгәндән һуң ойошторолған башҡорт частары.

5. Йомғаҡлау, һығымталар…”[83].

Шулай итеп, Ә.Вәлиди Башҡортостан тарихының иң актуаль мәсьәләләренең береһенә мөрәжәғәт итә. Ул йылдарҙа башҡорт халҡы алдында үҙ ғәскәрен булдырыу мәсьәләһе килеп баҫа. Был мәсьәлә өсөнсө Бөтә башҡорттар ҡоролтайында ҡарала. Тарихсы М.М.Ҡолшәрипов билдәләүенсә, Ә.Вәлиди Башҡорт хөкүмәтенең шәхси хәрби көстәре булыуына ҙур мәғәнә бирә[84]. Башҡорт Үҙәк Советының 1-се һанлы фарманында былай тиелә: “Һеҙ, башҡорттар, үҙегеҙҙең Мәркәз шурағыҙға бик ауыр бурыстар йөкләнегеҙ… Һеҙ Мәркәз шураға ярты быуат элек юғалтҡан эскандрондарығыҙҙы тергеҙергә ҡуштығыҙ”[85]. Граждандар һуғышы йылдарында Ә.Вәлиди юғары хәрби вазифаларға үрләй. Ул Башҡорт хөкүмәте эргәһендә хәрби һәм эске эштәр мөдире, ғәскәрҙәр командующийы, хәрби комиссар була.

1914 йылда Петербургта булған сағында Ә.Вәлиди башҡорттарҙың, ҡаҙаҡтарҙың һәм нуғайҙарҙың этнографияһы һәм статистикаһы буйынса материалдарҙы өйрәнә. Ул күберәк Императорҙың география йәмғиәте Этнография бүлегендә һәм Рәсәй империяһы халыҡтарының этнографик картаһын төҙөү буйынса комитетында, Фәндәр академияһының архивында шөғөлләнгән[86]. Петербургта В.Бартольд В.В.Радловтың өйөндә үткәрелгән йыйылышта унан киләсәк пландары хаҡында һөйләүен



[redacted]

һорай. Ә.Вәлиди сығышында былай ти: “Бөгөн Рәсәй хакимлығында булған, Хазар диңгеҙенең көнсығышында һәм төньяғында йәшәгән төрки ҡәүемдәрҙең тарихын ун алтынсы быуаттан башлап бөгөнгө торошона тиклем өйрәнәм. Бының өсөн далала көн итеүсе ҡәүемдәргә, башҡорттарға ҡағылған закондарҙы һәм уларҙағы үҙгәртеүҙәрҙе, ер мәсьәләләренең тарихын, Щербина, Кузнецов, Румянцев, Скрупулев, Переплатчиков



**“Бәхет көнө” (Петербург, 1920) йыйынтығында баҫылған Ә.Вәлидиҙең фотоһы төшөрөлгән бит. Фотоның аҫтына: “Башҡортостан хәрби комиссары иптәш Зәки Вәлиди”, – тип яҙылған.**

кеүек заттар туплаған һәм ошо көндә 40-сы томы сыҡҡан, мөһим өлөштәре "Күсмә халыҡтар идараһы" архивтарында ҡулъяҙма хәлендә һаҡланған материалдарҙан башлыса ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ ерҙәре мәсьәләләрен тикшерҙем. Тарихты, бөгөнгө тормоштан алып боронғо дәүерҙәргә тиклем, аныҡ өйрәнеү юлын тотам, дала халыҡтарының ижтимағи тормошон һәм этнографияһын тикшереү ысулдарын һеҙҙән өйрәнергә теләйем"[87].

Был белдереүҙә – уның киләсәккә ҡоролған пландары ята һәм унда башҡорт халҡының тарихын өйрәнеүгә лә ҙур иғтибар бүленгән.

1925 йылда Ә.Вәлидиҙең ағаһы Ғәбдрәүефтең өйөн тентегәндә ғалимдың шәхси китапханаһын, шул иҫәптән ҡулъяҙмаларын алып китәләр[88]. Был ваҡиғаға тиклем Вәлидиҙең Анкараға тип ебәрелгән алты пакет ҡулъяҙмалары Совет хөкүмәтенә эләгә. 1925 йылдың 24 декабрендә Сталин исеменә яҙылған хатында ул "Советтар һәм большевизм нимә икәнлеген дә ишетмәгәндә яҙған" фәнни ҡулъяҙмаларын ҡайтарыуҙарын һорай[89]. Әхмәтзәки үҙенең хеҙмәттәренә ошондай баһа бирә: "Ҡулъяҙмалар – минең бөтә революцияға тиклемге тормошомдоң емеше"[90]. Шулай уҡ Ә.Вәлиди совет почтаһында алып ҡалынған пакеттарҙы кире ҡайтарыуҙа ярҙам һорап, 1926 йылдың 13 мартында Төркиәнең сит ил эштәре министры Тәүфиҡ Рөштө исеменә лә хат яҙа. Был пакеттарҙа ошондай материалдар булған: "Мәхмүт Ҡашғариҙың хеҙмәттәрен тикшереү", "Төркөстан тарихы", Төрки ырыуҙарының һаны буйынса статистик мәғлүмәттәр", "Төрки ҡәүемдәренең тарихы буйынса яҙмалар", "Төньяҡ Кавказ һәм Ҡырымноғайлыларының тарихы", "Төркиҙәрҙә шаманизм", "Боронғо төркиҙәр тормошоноң ижтимағи ҡоролошон өйрәнеү өсөн материалдар", "Ойрат-ҡалмыҡтар тарихы", "Ҡырғыҙ-ҡаҙаҡ тарихы", "Көнсығыш Бохаралағы үзбәк ҡәбиләһе лаҡайҙарҙың фольклоры буйынса материалдар", шулай уҡ 1912–1916 йылдарҙа йыйылған "Нуғай, ҡырғыҙ һәм башҡорттарҙың фольклоры буйынса материалдар"[91].

1916–1922 йылдарҙа Әхмәтзәки Вәлиди сәйәси эшмәкәрлеккә күп көс һала. Шуға ҡарамаҫтан, ул ғилми-тикшеренеү эшен дә ташламай, тарихи темаларға мәҡәләләр яҙа. Шул йылдарҙа төрлө гәзиттәрҙә уның имзаһы менән күп кенә документтар баҫылып сыға. Вәлидиҙең туранан-тура ҡатнашлығы менән "Башҡорт", "Башҡорт тауышы" тигән башҡорт милли гәзиттәре сыға башлай.

Мәскәүҙә (1917 й. май) үткән Бөтә Рәсәй мосолмандары съезында Ә.Вәлиди Рәсәй мосолмандарының этник составы тураһында сығыш яһай һәм был хаҡта "Яңы Көнсығыш" тигән немец журналы яҙып сыға[92]. Ошо баҫмаға һылтанма менән "Төрк Йорто" исемле төрөк журналында уның сығышы хаҡында ҙур булмаған мәҡәлә баҫылып сыға[93].

Башҡорттарҙың өсөнсө ойоштороу съезында ҡабул ителгән сәйәси һәм иҡтисади ҡарарҙар араһында түбәндәге пункттар ҙа билдәләнә:

– Башҡортостан автономияһының иғлан ителеүен мәңгеләштереү маҡсаты менән юғары мәҙрәсә (университет) һәм ҙур музей ойошторорға;

– Башҡортостан хөкүмәтендә эшләр өсөн специалистар әҙерләүҙе яйға һалырға һәм 20 стипендия бүлергә. Уларҙың унынһын Рәсәй эсендә, ҡалғандарын сит илдәрҙә ҡулланырға;[94]

Әммә съезд делегаттарының фәнгә һәм мәҙәниәткә булған мөнәсәбәттәрен күрһәтеүсе изге уй-ниәттәре тормошҡа ашмай ҡала. Делегаттарҙың шундай ҡарарҙарҙы ҡабул итеүенә һис шикһеҙ башҡорт милли хәрәкәтенең юғары белемле лидерҙары йоғонтоһо ҙур була.

1920 йылдың 12 мартында Башревкомдың рәйесе Ә.Вәлиди ҡул ҡуйған ғаризала ошондай үтенес яҙылған: "Архивтарҙы, саф милли ҡаралтыларҙы, китаптарҙы, башҡорттарға ҡараған этнографик материалдарҙы, шулай уҡ ғәскәри частарҙың эштәрен һәм архивтарын таларға бирмәҫкә, уларҙың барыһын да бер урынға йыйып һәм Башревком билдәләгән башҡорт кешеһенең береһенә, уның үҙенә һәм һаҡлаған әйберҙәренә һис тейелмәйәсәк тигән шарт менән һаҡларға ҡушырға кәрәк"[95].

Башҡорт милли хәрәкәте лидерҙарының уҡымышлылыҡ кимәлен төрөк авторы Ҡазым Ҡарабекир бик дөрөҫ билдәләгән: "Күренекле тарихсы Зәки Вәлиди һәм уның кеүек йәш һәм көслө вәкилдәр йоғонтоһонда һәм ерле интеллигенцияның ярҙамында 14 кантон территорияһында бойондороҡһоҙлоҡ иғлан ителде һәм тормошҡа ашырылды"[96].

Башҡорт халҡының автономияһы төрлө проекттар эшләү Әхмәтзәки Вәлиди исеме менән бәйле. Беренсе Бөтә Рәсәй мосолмандары съезында уҡ 58 кешелек башҡорт делегацияһы башҡорттарҙың айырым съезын саҡырыу буйынса бюро ойоштора. Уның составына Ә.Вәлиди, С.Мерәсов, Ә.Йәғәфәров инә. 1917 йылдың ноябрь айы башында Ә.Вәлиди Башҡортостан автономияһының 3 схематик картаһын төҙөй: 1) Кесе Башҡортостан, 2) Оло Башҡортостан, 3) Көнсығыш Рәсәйҙең автономиялы мосолман өлкәләренең союзы.

Ошо материалдар нигеҙендә ул 1917 йылдың 28 ноябрендә үткән Ырымбур өлкәһенең тау һәм алтын промышленниктары съезын ойоштороу бюроһының ултырышында һәм 1917 йылдың 8–20 декабрендә үткән III Бөтә башҡорттар ҡоролтайында сығыш яһай.

Күрһәтелгән ваҡытҡа Башҡорт өлкә шураһы, 1917 йылдың ноябрендәге 2-се һанлы фарман буйынса, Кесе Башҡортостан сиктәрендә Башҡортостан автономияһын иғлан итә һәм унда Ырымбур, өлөшләтә Өфө, Пермь һәм Һамар өлкәһенең башҡорттары инә ("Кесе проект"). Шул уҡ ваҡытта Ә.Вәлиди тарафынан "Оло проект" әҙерләнә. Уның буйынса,



Ә.Вәлиди тарафынан эшләнелгән
“Кесе Башҡортостан” картаһы.

юғарыла һанап кителгән территорияларҙан тыш, Екатеринбург, Щадрин, Красноуфимск һәм Өфө губернаһының бөтә өйәҙҙәре Башҡортостанға ингән. Һуңынан ул көнсығыш Рәсәйҙең автономиялы мосолман өлкәләре федерацияһының проекты өҫтөндә эшләй. Ә.Вәлидиҙең төрк тарихы буйынса тупланған белеме башҡорт халҡының милли-территориаль автономияһының төрлө проекттарын, карта-схемаларҙы әҙерләгәндә бик уңай була. Петроградта булғанда, ул төрки халыҡтарының күсенеүе хаҡында мәғлүмәттәр менән танышырға мөмкинселек таба. 1915 йылда уҡ Ә.Вәлиди үҙенең "Ҡыҫҡаса төрк-татар тарихы" китабының инешендә төрк тарихы буйынса йүнле атластың булмауына зарлана һәм ошо бушлыҡты тултырырға теләүе хаҡында хәбәр итә.

Бөгөнгө көндә Кесе һәм Оло Башҡортостандың ғәрәп графикалы карта-схемаһы экземплярҙары Рәсәй Фәндәр Академияһы Өфө Фәнни Үҙәгенең Ғилми архивында һаҡлана, Оло Башҡортостандың кириллицалағы картаһы – Башкортостан Республикаһы Милли музейының фондтарында, "Көнсығыш Рәсәйҙең автономиялы мосолман өлкәләре союзы"ның картаһы Ә.В.Туғандың "Хәҙерге Төркөстан һәм уның яңы тарихы" исемле китабында баҫылып сыға. Һуңғы проект буйынса Федерация составына 4010139 квадрат километр майҙаны менән территория һәм 15673680 кеше инә, шулар араһынан мосолмандар "Союз" халҡының 82% тәшкил итер ине[97].

Революция ваҡытында башҡорт ғәскәрҙәре Ҡыҙыл Армия яғына күскәс, уларҙың бер өлөшө Петербургка ебәрелә. Ғәскәр менән бергә Ә.Вәлиди ҙә китә. Унан Башҡортостанға төрлө ғилми әсбаптар, дарыуҙар, баҫма станоктар, машинкалар, ҡоролмалар ебәрә. Украина фронтынан да шундай уҡ әйберҙәр оҙатыла. Петербургтан бер нисә китапхана сығарыла[98]. Башҡортостанда эшләү өсөн белгестәр ҙә саҡырыла. Ә.Вәлиди менән Абдулҡадир Инан Салтыков китапханаһында һәм Фәндәр академияһының китапханаһында һаҡланған, һирәк осрай торған тарихи китаптарҙың күсермәләрен алалар[99].

1914 йылда "Шура" журналында (№5) баҫылып сыҡҡан Абдулҡадир Инандың (Фәтхелҡадир Сөләймәнов) "Башҡорт йәйләүендә" исемле хикәйәһе Ә.Вәлидигә бик оҡшай һәм ул авторға хат яҙа. Адресын белмәйенсә хатты журналдың редакцияһына ебәрә, унан хат Абдулҡадир Инанға барып етә.

Хатында Ә.Вәлиди "XVIII быуаттың аҙағында яҙылған һәм рус-башҡорт һуғыштары хаҡында бәйән иткән П.И.Рычковтың "Ырымбур топографияһын...", Фирсовтың Рәсәй тарафынан Ҡазан, Урал һәм Ҡаҙағстанды баҫып алыуы тураһындағы хеҙмәтен һәм Витевскийҙың Неплюев биографияһы буйынса китабын" уҡырға кәңәш итә[100].




Ә.Вәлиди тарафынан эшләнелгән
“Оло Башҡортостан” картаһы.

“Төрк вә татар тарихы” китабы авторының хаты А.Инанды рухландырып ебәрә һәм ул тағы ла ҙур тырышлыҡ менән башҡорт халҡының тарихы буйынса хеҙмәттәрҙе өйрәнә башлай. Ә.Вәлиди менән А.Инан беренсе тапҡыр 1918 йылдың июнь айынынң башында осрашалар[101].



Ә.Вәлиди тарафынан эшләнелгән “Көнсығыш Рәсәйзең автономиялы мосолман өлкәләренең берләге” картаһы.

1923 йылда улар бергә сит илгә сығып китәләр. Сит илдә йәшәгән йылдарының байтаҡ өлөшөн Төркиәлә үткәрәләр, йыш осрашып торалар. Ә.Вәлиди, А.Инандың һүҙҙәре буйынса, уның башҡорт милли хәрәкәте тарихсыһы булыуын һәм тюркология менән шөғөлләнеүен теләгән[102].

Шулай итеп, Ә.Вәлиди Рәсәйҙә сағында уҡ башҡорт халҡының тарихын өйрәнеүгә тотона. Әммә уның башҡорттар тарихына арналған хеҙмәттәре әллә ни күп түгел. Революцияға тиклем башҡорт тематикаһы буйынса 3 мәҡәлә яҙған: "Бөрйән башҡорттары араһында", "Башҡорттар тураһында яңы әҫәр" һәм "Боронғо башҡорт ғәскәре". Уларҙа авторҙың Башҡортостан тарихына ҡараған төрлө проблемаларына ҡараштары сағылған. Бынан тыш, Ә.Вәлидиҙең башҡа баҫмаларында ла Башҡортостан тарихы һәм башҡорттар тураһында әһәмиәтле мәғлүмәттәр һәм материалдар бар.

## Урта Азия халыҡтарының рухи мираҫын өйрәнеү

Башҡорт һәм татар халыҡтарының тарихын һәм этнографияһын өйрәнеүҙән тыш, Ә.Вәлиди Урта Азия халыҡтарын – ҡаҙаҡтарҙы, үзбәктәрҙе, төрөкмәндәрҙе, ҡырғыҙҙарҙы өйрәнеүгә лә күп иғтибар бүлгән. Рәсәйҙәге төрки телле төрлө матбуғат баҫмаларында баҫылып сыҡҡан уның тәүге мәҡәләләре, шулай уҡ "Төрк вә татар тарихы" (1912) китабының сығыуы уға киң билдәлелек килтерә. Уны Ҡазан ғалимдары араһында таный башлайҙар. Төрки халыҡтары тарихы һәм мәҙәниәте буйынса ғилми эшмәкәрлеге Ә.Вәлидигә Ҡазан университеты эргәһендәге Археология, тарих һәм этнография йәмғиәтенә инергә мөмкинселек бирә.

Археология, тарих һәм этнография йәмғиәтенә 1878 йылда Ҡазан ҡалаһында нигеҙ һалына. Ойоштороусыларҙың ниәте буйынса ул өс бүлектән торорға тейеш була: археологик, тарихи һәм этнографик. Йәмғиәттең уставында уның маҡсаты билдәләнә – Рәсәй дәүләте сиктәрендә рус һәм элекке Болғар-Хазар һәм Ҡазан-Әстрхан батшалыҡтары территорияһында сит милләттәрҙең үткән һәм хәҙерге мираҫын, шулай уҡ Себерҙе һәм Урта Азияны өйрәнеү[103].

Йәмғиәттең "Известия Общества археологии, истории и этнографии при Казанском университете" исеме аҫтында баҫма органы ойошторола һәм йыл һайын бер том сығарыла. Һәр том алты сығыштан тора. Бында төп нөсхә һәм тәржемә мәҡәләләр, археология, тарих һәм этнография буйынса тикшеренеүҙәр, материалдар донъя күрә. Уларға ҡушымта итеп йәмғиәттең Дөйөм йыйылышы һәм Совет ултырышы протоколдары

баҫыла. 1894 йылдың 12 ғинуарында Ҡазанға Н.Ф.Катанов килә. Шул уҡ йылдың 29 ғинуарында ул Ҡазан университетында "Төрөк-татар ырыуҙарына этнографик күҙәтеү" исемле инеш лекция уҡый[104] һәм был уның егерме биш йыллыҡ мөғәллимлек эшмәкәрлегенең башланғысы була. Университетта ул экстраординар профессор дәрәжәһен ала.

Санкт-Петербург университетының көнсығыш телдәр факультеты студенты сағында уҡ Н.Ф.Катанов 1884 йылдың 8 декабрендә Ҡазан университеты эргәһендәге Археология, тарих һәм этнография йәмғиәтенең ағза-хеҙмәткәре итеп һайлана. Ҡазанға килгәс, 1894 йылдың 8 апрелендә уны ошо Йәмғиәттең тулы хоҡуҡлы ағзаһы һәм сәркәтибе итеп һайлайҙар. Бер йылдан Н.Ф.Катанов Йәмғиәттең рәйесе була һәм ошо вазифала 1898 йылдың 18 мартынан 1914 йылға тиклем эшләй. Ул шул осорҙа Йәмғиәттең эшмәкәрлеге тураһында даими отчеттар төҙөгән, "Известия" өсөн материалдар әҙерләгән, ғилми-тикшеренеү командировкаларына йөрөгән, күп һанлы мәҡәләләр, библиографик күҙәтеүҙәр яҙған, шәрҡиәтселәр һәм Рәсәйҙең төрлө региондарындағы музейҙар менән хат алышҡан. Н.Ф.Катанов бәләкәй халыҡтарҙың мәҙәниәтен һәм этнографияһын өйрәнеүгә төрлөсә ярҙам итергә тырышҡан. Мәҫәлән, Н.Н.Пантусов, А.А.Алекторов, М.Н.Беимов, С.Матвеев, В.А.Мошков, Я.Д.Коблов, С.Е.Маловтың һәм башҡа бик күп күренекле һәм аҙ билдәле ғалимдарҙың, крайҙы өйрәнеүселәрҙең хеҙмәттәрен нәшер итеүҙә уның ярҙамы ҙур була. Катанов Йәмғиәт эшенә татар, башҡорт, сыуаш, мари, удмурт зыялыларын йәлеп итеүгә ҙур иғтибар бүлә[105].

Ә.Вәлидиҙе Археология, тарих һәм этнография йәмғиәтенең тулы хоҡуҡлы ағзаһы итеп һайлағанда ла ул туранан-тура роль уйнай. 1913 йылдың 18 мартында үткән йыллыҡ Йәмғиәттең йыйылышында Катановтың "Татар телендәге тарихи хеҙмәттәр авторы Ә.Зәки Вәлидиҙе һәм Императорҙың Ҡазан университеты Көнбайыш Европа әҙәбиәте кафедраһының приват-доценты Вальтер Николаевич Андерсонды" Йәмғиәттең тулы хоҡуҡлы ағзаһы итеп һайлау тураһындағы тәҡдиме тыңлап үтелә һәм был һорауҙы киләһе йыйылыштың көн тәртибенә ҡуйырға ҡарар ителә[106]. 1913 йылдың 4 майында Йәмғиәт Советының ултырышы була һәм унда Дөйөм йыйылыштың көнө билдәләнә[107]. Ул 1913 йылдың 23 майында үтә, һәм Н.М.Петровский уның рәйесе итеп тәғәйенләнә. Совет рәйесе Н.Ф.Катанов һәм рәйес урынбаҫары Н.Ф.Высоцкий билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында унда булмайҙар.

Йыйылышта тулы хоҡуҡлы ағзалар: М.Н.Петровский, А.Т.Соловьев, Б.Ф.Адлер, С.П.Сингалевич, А.Г.Муравьев, А.М.Селищев, мөхбир ағзалар: В.М.Васильев, М.Е.Евстигнеев, сәркәтип – М.И.Бенеманский һәм 8 сит кеше ҡатнаша[108]. Ябыҡ һайлау үткәреү һөҙөмтәһендә

Йәмғиәттең өс яңы ағзаһы һайлана[109]. В.Н.Андерсон һәм А.А.Апанаев бер тауыштан, ә Ә.Вәлиди бер генә ҡаршы тауыш менән һайланалар. Йыйылыш: “Уларҙы йәмғиәттең ысын ағзалары исемлегенә индерергә һәм Йәмғиәттең Советы тарафынан билдәле үрнәктәге дипломдарҙы бирергә”, – тип ҡарар сығара[110]. Шулай итеп, Ә.Вәлиди Ҡазан университеты эргәһендәге Археология, тарих һәм этнография йәмғиәтенең ағзаһы итеп һайлана һәм уның эшмәкәрлегендә әүҙем ҡатнаша башлай.

Йәмғиәт Советының 1913 йылдың 4 октябрендә булып үткән сираттағы ултырышында Ә.Вәлиди тарихи-археологик һәм этнографик тикшеренеүҙәр өсөн үҙен Фирғәнә өлкәһенә командировкаға ебәреүҙәрен һорай. Ултырышта Н.Ф.Катанов, М.М.Хомяков, М.Н.Петровский һәм М.И.Бенеманский ҡатнаша.



Ғалим, “Шура” журналының мөхәррире Риза Фәхретдинов.

Ә.Вәлиди үҙенең үтенесен Урта Азия тикшеренеүселәренең сығанаҡтарҙа телгә алынған ерле халыҡ китапханаларын бығатиклем Коканд ҡалаһында эҙләүҙәре менән дәлилләй. “Тик академик Залеман ғына 1897 йылда Кокандта йәшәүсе Һарымсаҡта исемле кешелә Хоҙаяр хан китапханаһының ҡалдыҡтарын күрә. Залеман әфәнде үҙ күргәндәрен “Фәндәр академияһының хәбәрҙәрендә” (1889, VIII том) хәбәр итә. Әммә оҙаҡ та үтмәй уның артынса уҡ барған профессор Бартольд “был китаптар тулыһынса юғалған” һәм “хәҙерге ваҡытта Кокандта бер ниндәй ҙә ҡульяҙма йыйылмалары юҡ” тигән һығымтаға килә (Записки Восточного отделения Императорского Русского археологического общества. 1904. XV том, 269 бит)”[111].

Әммә Ә.Вәлиди тарафынан Ҡазанда булып киткән Коканд уҡытыусыһы Ғәшүр Ғәли Заһировтан 1912 йылда алған мәғлүмәттәр буйынса, Коканд ҡалаһында йәшәүсе Юныс Джан-Дадхала бик ҡиммәтле ҡульяҙмалар тупланмаһы була. Ғ.Заһиров ҡайһы берҙәрен Ә.Вәлидигә

атап үтә. Унын әйтеүенсә, ҡулъяҙмаларҙың бәғзеләре тулыһынса билдәһеҙ һәм улар тураһында мәғлүмәттәр Урта Азияны, ғөмүмән, Көнсығышты тикшереүсе иң компетентлы ғалимдарҙа ла осрамай[112].

Ә.Вәлиди үҙенең тикшеренеү һөҙөмтәләре менән "Известия"ла һәм Йәмғиәттең ултырышында сығыш яһарға вәғәҙә итә. Ул командировка өсөн кәрәкле документтарҙы һәм "Йәмғиәткә уңайлы күләмдә субсидия" әҙерләүҙәрен һорай[113]. Совет "Вәлиди әфәндегә Йәмғиәт Советынан үтенестә билдәләнгән эштәрҙе башҡарыуына танытма биреү" тураһында ҡарар ҡабул итә[114].

Ә.Вәлидиҙең Урта Азияға барған был командировкаһының дөрөҫ ваҡыты билдәһеҙ. Ул яҡынса октябрҙән алып март аҙағына тиклем ваҡытҡа тура килә. Ошо ваҡытты Ә.Вәлидиҙең Ҡазан университеты эргәһендәге Археология, тарих һәм этнография йәмғиәтенә 1913 йылдың 4 октябрендә Урта Азияға командировкаға ебәреүҙе һорап яҙған үтенесе, Коканд ҡалаһына килгәс, 12 ноябрҙә "Шура" журналының мөхәррире Риза Фәхретдиновҡа яҙған хаты раҫлай. Командировканың аҙаҡҡы ваҡыты хаҡында Ә.Вәлиди "Хәтирәләр"ендә хәбәр итә: "Март аҙағында мин Ҡазанға килдем. Унда "Мөхәммәдиә" мәҙрәсәһендә уҡырға инеү өсөн минең Ғәбделбарый менән Ғәбдерәүеф килгәндәр ине. Бер аҙ ваҡыт уларҙың эштәре менән шөғөлләндем. Археология йәмғиәтенә отчет бирҙем"[115]. Бынан тыш, унын 17 мартта Төркөстан археология һөйөүселәр түңәрәгенең ултырышында сығыш яһауы, 20 апрелдә Ҡазан университеты эргәһендәге Археология, тарих һәм этнография йәмғиәтенең ултырышында отчет тапшырыуы ла билдәле.



Ә.Вәлидиҙең Төркөстанға барған ваҡытта (Коканд, 1913–1914 йылдар) төшкән фотоһы. 1997 йылда Мәскәүҙә нәшер ителгән "Хәтирәләр"ҙән алынды.

Был ваҡиғалар "Хәтирәләр"ҙә һәм Вәлидиҙең 1914 йылдың 20 апрелендә Йәмғиәттең ултырышында уҡыған Фирғәнәгә яһаған сәйәхәтенең отчетында сағылдырылған. Ә.Вәлидиҙең иҫтәлектәренән аңлашылыуынса, үтенесе Ҡазанда ҡаралған саҡта үҙе булмай, унын йәйге каникулға тыуған ауылына ҡайтҡан сағы була. Был мәсьәләне Советта унын өсөн Н.Ф.Катанов хәл итеп йөрөгән. "Ҡазанға килгәс тә, профессор Катанов "Ҡазан университетының урындағы тарих, археология һәм этнография йәмғиәте" тарафынан мине, тарихи һәм этнографик тикшеренеүҙәр

үткәреү өсөн, Төркөстанға Фирғанә вилайәтенә ебәреүҙе юллау мәшәҡәттәренең ыңғай һөҙөмтә биреүе хаҡында хәбәр итте", – тип яҙа "Хәтирәләр"ендә Ә.Вәлиди[116]. Отчетында иһә: "Үткән 1913 йылдың көҙөндә шәхси эштәрем менән Кокандҡа китешләй, мин, профессор Катанов юллауы буйынса, Ҡазан университетының Археология, тарих һәм этнография йәмғиәтенән көнсығыш ҡулъяҙмалар тураһында мәғлүмәт йыйырға йөкләмә алдым", – тип яҙа[117].

Уның Урта Азияға юлы Ырымбур аша үтә, унда үҙенең элекке танышы – Риза Фәхретдинов менән осраша. XIX быуат аҙағы – XX быуат башы ижтимағи фекерҙең күренекле вәкиле менән Ә.Вәлиди 1908 йылда Ҡазанға уҡырға китеп барғанында таныша. Һуңғы осрашыу ваҡытында ул Р.Фәхретдиновтан башы булмаған иҫке ҡулъяҙма ала. Фирғанә өлкәһенә килгәс, М.Рәмзиҙең "Тәлфиҡ әл-әхбәр" китабы нигеҙендә ошо ҡулъяҙманың исеме "Ғибәҙәт әл-әхбәр" икәнен һәм уның авторы Һажи Ғәбделғафар булыуын билдәләгән. Вәлиди был хаҡта Р.Фәхретдиновҡа хат яҙа: "Был китап Ташкенттың ғөмүми китапханаһында ла бар. Быны Бартольдт та (Записки Восточн.отд.имп. Археол.общ. Т. XV. С.226–232) яҙған отчетында "Сыңғыҙ-намә" тип атай һәм мөәллифен Үтәмеш Хужа исемендәге бер Хуржум кешеһе булған, китабы Илбарыс хан исеменә яҙған, тип һөйләй. Ташкенттағы нөсхәлә шулай яҙылған, ти. Беҙҙең нөсхәбеҙҙең башы юҡ. Әммә Бартольд күргән Ташкент нөсхәһендә аҙағы юҡ икән. Был эш бик яҡшы тура килеү булды. Быны Бартольдҡа хәбәр итермен, иншалла"[118].

Китаптағы факттарҙы сағыштырып, ул ҡулъяҙманың яҙылыу ваҡытын билдәләргә теләй. "Беҙҙең нөсхәбеҙҙә лә мөәллиф Илбарыҫ


تورکستان مکتوبلری.

I

تاسکندگه کیلگاچ تورکستانغه عائد
یازارلق خبرلر بیك کوبه‌یدی؛ تاریخی
شهرتینك اوستینه بو قالاداغی صارت
تورکلرینك بورونغیدن تقریبا برده
اوزگارتمی چاقلاب کیلگان ایسکی
طورمشلری تاشکندنی ینه آرگینالنی راق
ایتوب دقتنی دخی آرتغراق جلب ایته.
ایکی یوز آلتمش بیش مکدن آرتق خلقی
بولغان تاشکند قالاسی городъ هم شهر

حیاتلرینه عائد اول قدر حیت معلومات
بیرگانلری بولارنك معیشتلری ایران هم
تاجیك خلقلرینك معیشتلری ایله تمام بر
توسلی ایکانون کوکلگه اورناشدررلق
کوب سویله‌گانلری یوق ایدی. اوشبونك
اوچون مین «شهر» یاغینه کیلوب کرو
بله خیالمه کیلمه‌گان بر اشکه اوچرادم:
اورتا آزیاده مدنی تزکلك ایته طورغان
تورکلرنك معیشتلری یاوروپا کشیلری
تصویر ایتکان ایران معیشتدن هیچ
آیرماسز بولووی.
بیك طارغنه اورامlرنك ایکی طرفندن

اوی درویسر یعرب
سویله‌ب، قایسی برلری
تارتوب قرآن اوقوب او
شونده‌اوق خاتونلار ب
قابلاب دیوارغه‌صغنوب‌ایر
کوتوب طورالر. شو
اویاتسزلری یاش ایر با
قوشوب، آلارنی سویله
اوطورالر.
— آغای بو اورنده
سودا ایتمسك؟
— ایندی ایللی ب

**1913–1914 йылдарҙа Петербургта "Ил" газетаһында баҫылған "Төркөстан мәктүптәре" исемле мәҡәләһенең башы.**

хандың үҙ ауыҙынан ишеткән һүҙҙәрен хикәйә итеүе"нән[119] сығып, Ә.Вәлиди китап милади йыл хисабы буйынса VI быуатта яҙылған, тип иҫәпләй[120].

Авторҙың Хуржумдан Волга буйына сәйәхәте ваҡытында "үҙ күҙҙәре менән күреүе"[121] тураһында китабында тасуирлауы, тикшереүсе фекеренсә, мәғлүмәттәренең дөрөҫлөгөнә дәлил булып тора. Һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың хронологияһына һәм ҡулъяҙма теленең айырмаһына нигеҙләнеп, 84–86 биттәрҙән һуң яҙылғандар һуңғы осорҙа өҫтәлгән, тип билдәләй ул.

Хат аҙағында табылған ҡулъяҙманың ҡиммәте тураһында һығымта яһай: "Нәфис китапта (нисек мин һеҙгә һөйләгән инем) Алтын Урҙа тарихына ҡараған байтаҡ файҙалы мәғлүмәттәр бар"[122]. Үҙенең һүҙҙәрен Вәлиди Вельяминов-Зерновтың "О касимовских царях" исемле китабынан алынған миҫал менән нығытып ҡуя. Китап авторы Мамактың кем улы икәнен белмәгән һәм Вәлиди был хаҡта мәғлүмәттәрҙең ошо ҡульяҙмала булыуын күрһәтә.

Отчетта Ә.Вәлиди "Сыңғыҙ-намә" ҡулъяҙмаһын "Ташкент вариантынан сағыштырмаса тулыраҡ" тип һүрәтләй[123]. Үҙенең табышын былай тип тасуирлай: "Беҙҙең ҡулъяҙмабыҙ 75 биттән тора, улар Ташкент ғөмүми китапханаһындағы ҡулъяҙманың 15–46-сы биттәренә тура килә. Ҡулъяҙманың яҙылыу ваҡыты 1019–1610/11 йылдарға ҡарай"[124].

Хәҙерге ваҡытта китап Истанбулдағы Ә.Вәлидиҙең китапханаһында булыуы ла мөмкин. Уның бер нисә тапҡыр нәшер ителгән "Тарихта ысул" тигән китабында "Төрк тарихы буйынса сығанаҡтар" исемле ҡушымта бар. Унда: "Үтәмеш-хажи, Тарих-и Дуст Солтан". Алтын Урҙа хандарының тарихы, 1550 йылда яҙылған. Тулы нөсхәһе шәхси китапханамда һаҡлана. Ҡарағыҙ: Валидов А.-З. ЗВОРАО. XXII. С. 320. Башҡа нөсхәһе Ташкент ғөмүми китапханаһында һаҡлана. Ҡарағыҙ: **Бартольд В.В.** Зап. Вост. Отд. XV. С. 226–232", – тип яҙылған[125].

Бынан тыш, Т.Байҡара, Н.Туған һәм И.Туған тарафынан Эрзурум университетының әҙәбиәт факультетында нәшер итеүгә әҙерләнгән "Ә. Зәки Вәлиди Туғандың классификацияһы буйынса документтары" исемле күрһәткесендә, ғалим архивында ошо темаға арналған материал барлығы күрһәтелгән[126]. Шулай итеп, Ә.Вәлиди Фирғәнәгә китеп барғанында уҡ төрк тарихы буйынса ҡиммәтле сығанаҡҡа юлыға.

Ташкентҡа килгән көндө Ә.Вәлиди 1360 йылда үлгән Нәҡшбәнди орденының шәйехе Хауинд Таһурҙың тормошо һәм сәйәхәттәре тураһында билдәһеҙ ҡулъяҙма таба һәм уны Нәҡшбәндигә һуҡырҙарса ышаныусы атаһы һәм күршеһе Бикбулат-хәҙрәткә бүләк итеп ебәрә[127]. Ҡулъяҙмала ғалимдың төрки һәм фарсы телдәрендәге шиғырҙары һәм әйтемдәре лә булған.

Ә.Вәлиди Фирғәнә өлкәһе буйлап сәйәхәт итә һәм шәхси китапханаларҙа һаҡланған ҡулъяҙма ҡомартҡылар менән таныша. Кокандта ул Ҡазанда уҡ танышҡан Юныс-Джан-Дадха-Мөхәмәтовтың, Яҡуп хужа Яхъяхановтың, Иса хан-тәрәнең, Абдуссәләм бай Мөхәмәт-Джановтың, Ҡорхана мәсете имамы Раджи мулланың, Иҫке Маргеланда – Ибраһим хужа Мөхәммәт-Ша-ходжаевтың, Ахун-Джан-хужаның, Ғариф хужаның ҡулъяҙма ҡомартҡыларын ҡарап сыға. Андижанда ул мәрхүм халыҡ судъяһы Атабәктең китапханаһы менән таныша. Ошта Ҡөҙрәтулла Таһирбаев исемле мулла менән осраша һәм уның ҡулъяҙма коллекцияһын ҡарай. Унда фал асыу һәм астрономия буйынса ҡулъяҙмалар ҙур урын алған. Мирза Фәзил-бәктең ҡулъяҙмалары менән дә таныша ул. Андижанда Ә.Вәлиди-Йософ хан-түрәлә, Насыр хан-түрәлә, Мөхәммәт хужа Лаларишта, Ташкентта Баҡый-Джан байҙа һәм Хәйретдин-бәктә була һәм уларҙа һаҡланған яҙма ҡомартҡылар менән таныша.

Бөтә күргән һәм яҙып алынған ҡулъяҙмалар фәндең төрлө өлкәләре – астрономия, тарих, география, дин буйынса әһәмиәтле сығанаҡтар булып иҫәпләнә. Улар араһынан XI быуат төрки әҙәбиәте һәм мәҙәниәтенең иң боронғо һәм бөйөк ҡомартҡыһы "Ҡотаҙғу белек" исемле ҡулъяҙманы[128] билдәләп үтергә кәрәк. Автор поэманы Баласағунда яҙа башлай һәм Ҡашғарҙа тамамлай. Был ғәрәп-фарсы поэзияһынан үҙләштерелгән квантитатив шиғыр үлсәме – ғаруз менән яҙылған тәүге әҫәр булараҡ фәнгә билдәле. Уның авторы – Йософ Хасс-хажиб Баласағуни. Шағирҙың нисбәһе тыуған ҡалаһының исеменән алынған, хәҙер был ҡала донъя йөҙөндә юҡ[129]. Автор әйтеүенсә, "Ҡотаҙғу белек" Бограхан телендә һәм төрки һөйләшендә яҙылған[130]. Был өгөт-нәсихәт, дидактик характерҙағы поэмала мәңгелек әхләҡи ҡиммәттәр һәм шул осорҙағы ижтимағи тормош сағылған.

Һирәк осрай торған әҫәр беҙҙең көндәргә 3 ҡулъяҙма рәүешендә килеп еткән: Вена (Һират), Ҡаһирә, Наманган (Фирғәнә). 1913 йылға тиклем ул тәүге ике нөсхә буйынса ғына билдәле булған.

Вена нөсхәһе 1439 йылда Һиратта (икенсе исеме ошонан килә) ғәрәп графикалы нөсхәнән уйғыр хәрефтәре менән күсерелгән. Һираттан ул Төркиәгә килеп эләгә һәм уны Австрия ғалимы И.Хаммер-Пургшталь (1774–1856), һатып алып, Вена король китапханаһына тапшыра.

Ғәрәп графикалы Ҡаһирә нөсхәһен 1896 йылда Ҡаһирәлә Һидив китапханаһында директоры немец ғалимы Б.Мориц таба. Ике нөсхәнең дә етешһеҙлектәре бар.

1913 йылда Наманганда Мөхәмәт-хужа-ишан Лалариш китапханаһында Ә.Вәлиди тарафынан табылған "Ҡотаҙғу белек"тең өсөнсө ғәрәп графикалы ҡулъяҙмаһы иң тулыһы тип иҫәпләнә[131]. Күпмелер ваҡыт ул юғалған тип һаналған. Әммә 1925 йылда үзбәк шағиры Фитрат уны яңынан

таба һәм шул уҡ йылда “Мәғариф һәм уҡытыусылыҡ” журналында “Ҡотаҙғу белек” исемле мәҡәләһен баҫтырып сығара. 1914 йылда икенсе командировкаһы ваҡытында Ә.Вәлидиҙең уны үҙенә алырға тырышыуы һөҙөмтәһеҙ була. 1925 йылдың 14 апрелендә Бартольдҡа яҙған хатында былай ти: “”Ҡотаҙғу белек”тең эҙенә төшөүегеҙгә бик шатмын. 1914 йылда мин Наманган өйәҙ начальнигынан ярҙам һорап, бөтә эште боҙҙом”[132]. Хәҙерге ваҡытта был нөсхә Ташкентта Үзбәкстан Фәндәр академияһының Көнсығыш ғилеме институтында һаҡлана. Ҡульяҙма 1942 йылда Төркиәлә тәүге тапҡыр факсимиле рәүешендә нәшер ителә.

Үҙенең отчетында Ә.Вәлиди “Ҡотаҙғу белек”те яҙма үҙенсәлектәре буйынса Ҡаһирә нөсхәһенә ҡарағанда Вена нөсхәһенә яҡынырак, ә “исеменең яҙылышы Ҡаһирә нөсхәһенеке кеүек” тип, үҙенсәлеген аңларлыҡ дәрәжәлә асыҡ һүрәтләй һәм әҫәрҙән өҙөк килтерә. Уның һүрәтләүе буйынса, табылған ҡульяҙманың үҙенсәлектәрен һәм ҡиммәтен бик асыҡ билдәләргә була.

Күренекле тюрколог Ә.Нәжип фекеренсә, поэма теле яғынан ғәрәп-фарсы элементтары менән төрки телдәренең g-з-төркөмөнә ҡарай[133]. “Ҡотаҙғу белек”тең бөтә телгә алынған нөсхәләре графика, яҙыу манераһы, фонетика, морфология, лексика, текстың күләме яғынан бер-береһенән нығ айырылалар[134]. Наманган ҡульяҙмаһы 5 793 бәйеттән тора. Әгәр ҙә ҡалған ике нөсхәләге бәйеттәрҙе ҡушһаҡ, әҫәрҙең күләме 6 531 бәйеткә етәсәк.

Бөтә өс нөсхәнең дә факсимиль баҫмалары 1942–1943 йылдарҙа Истанбулда эшләнә. Һуңғы йылдарҙа Төркиәлә уларҙы ҡабатлан факсимилдә баҫтырмаҡсылар. Вәлиди тапҡан Наманган нөсхәһе 1971 йылда Ташкентта К.Кәримов тарафынан хәҙерге үзбәк теленә тәржемә ителеп рус графикаһы нигеҙендә “Фән” нәшриәтендә донъя күрә. Ул өлөшләтә етмәгән бәйеттәрҙе икенсе күсермәләрҙән алып тултыра.

Поэманы тағы венгр тюркологы һәм сәйәхәтсеһе Г.Вамбери (1832–1913), рус тюркологы В.В.Радлов (1837–1918), төрк ғалимы Р.Арат[135], ҡаҙаҡ шағиры А.Егеубаев баҫтырып сығара. С.Е.Малов поэманың өҙөктәрен әҙерләп баҫмаға бирә. Рус теленә шиғри тәржемәләрҙе Н.Гребнев һәм С.Н.Иванов яһай. Күп кенә ғалимдар, шул иҫәптән Ә.Вәлиди ҙә, урта быуаттарға ҡараған ошо бөйөк ҡомартҡыға бер нисә тапҡыр мөрәжәғәт итәләр.

Экспедиция ваҡытында Вәлиди үҙе өсөн бер нисә ҡульяҙма ала. Иң мөһимдәрен отчетында күрһәтеп китә: Мир Мөхәммәт Әмин Бохариҙың “Ғөбәйзулланамә”һе (“Ғөбәйҙулла китабы”), Хафиз бин Мөхәммәт әл-Бохариҙың “Ғабдулланамә”һе (“Ғабдулла китабы”), Али бин Шиһабетдин әл-Хәмәҙәниҙең “Зәһират-әл-мөлөк” китабы (“Батшалар

көстәренең күренеүе"), Мөхәммәт Наршахи әл-Бохариҙың "Тарих-и Наршахи" китабы ("Наршахи тарихы"), Джамал Кәримиҙең "Мөлхәҡәт-ас-сирах" ("Асыҡ ҡушымталар"), Шаукиҙың "Тарих-и Шауҡи" ("Шауҡи тарихы"), Агахиҙың "Рияз-әд-дәүләт" ("Байлыҡ баҡсаһы") һ.б. Былар барыһы ла Урта Азияның төрлө осорҙағы тарихы буйынса ҡиммәтле сығанаҡ булып һаналалар[136]. Улар араһында Р.Фәхретдиновтан алынған "Сынғыҙнәмә" лә телгә алына.

1914 йылдың 20 апрелендә Ҡазан университеты эргәһендәге Археология, тарих һәм этнография йәмғиәтенең дөйөм йыйылышында Ә.Вәлиди Фирғәнә өлкәһенә яһаған сәйәхәт һөҙөмтәләре тураһында сығыш яһай. Сығыш аҙағында К.В.Харламкович, Б.П.Денике, П.Г.Архангельский, Н.В.Никольский һәм М.М.Хвостовтың теләктәре һәм иҫкәрмәләре була. Улар "сығыш яһаусы тарафынан табылған ҡайһы бер ҡульяҙмаларҙың русса тәржемәләре, миниатюралары һәм уларҙың ентекле характеристикалары, лингвистик характерҙағы күҙәтеүҙәре, милади йыл иҫәбе күрһәтелеп һәм рус сығанаҡтарынан алынған параллель өҙөктәр менән тиҙерәк баҫылыуын теләүҙәрен белдерә"[137].

Һуңынан Вәлиди Петербургка килә һәм унда Радловтың өйөндә Бартольд алдында үҙенең фәнни командировкаһы тураһында ентекле сығыш яһай. Был Рәсәй шәрҡиәтселәрендә ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Уға тикшеренеү һөҙөмтәләрен "Записки Восточного отделения археологического общества" журналында баҫтырып сығарырға тәҡдим итәләр.

Ә.Вәлидиҙең Ҡазан университеты эргәһендәге Археология, тарих һәм этнография йәмғиәтенә яҙған хаты 1914 йылдың 22 авгусында Совет ултырышында ҡарала. Хатында ул Төркөстан сәйәхәте тураһында уҡыған отчетын "Археология йәмғиәтенең көнсығыш бүлеге яҙмаларында" баҫтырырға рөхсәт итергә һәм шулай уҡ икенсе сәйәхәткә барыу өсөн субсидия биреүҙәрен" һорай[138].

Был үтенескә Йәмғиәт Советы былай тип яуап бирә: "Йәмғиәт телгә алынған баҫмала отчетын баҫтырыуға ҡаршы түгел һәм мөмкин ҡәҙәр булғансы күберәк отписк нөсхәләрен ебәреүҙе үтенә; әлеге ваҡытта Йәмғиәттең матди ҡыҫынҡылығы арҡаһында субсидия биреүҙән баш тарта"[139].

Бартольдтың төҙәтмәләренән һуң Ә.Вәлидиҙең отчеты 1915 йылда "Записки Восточного отделения Императорского русского археологического общества" журналының XXII томында донъя күрә. Уның беренсе командировкаһы уңышлы тамамлана. Ә.Вәлидиҙең эшмәкәрлеге менән илдең шәрҡиәтселәре ҡыҙыҡһына башлайҙар. 1914 йылда, В.Бартольд рекомендацияһы буйынса, Император Фәндәр академияһы, Урта һәм Көнсығыш Азияны өйрәнеү буйынса Рус комитеты Ә.Вәлидиҙе

ҡулъяҙмалар хаҡында мəғлүмəттəр йыйыу өсөн Бохараға ебəрə. Был юлы ул үҙенең үткəн йылғы тəжрибəһенə таяна. “Үткəн йылда ҡышҡыһын Бохарала һəм Сəмəрҡəндтə булғанда, Бохара китапсыларынан ишеткəндəремə таянып, бөтə ерҙə лə бик күп ҡулъяҙмалар табырмын тигəн һығымтаға килгəйнем”, – ти ул[140]. Шулай итеп, уның артабан эшлəйһе эштəренең алдан уйланылған планы булған.

Ə.Вəлидиҙең был командировка маршруты һəм ваҡыты билдəле. Петербургтан ул 31 майҙа сығып китə, 6 июндə Ташкентта була, 7-һенəн алып 12 июнгə тиклем Наманганға һəм Скобелевҡа бара, 12 июнь Бохарала була, 23 июнь почта юлы буйлап Шаршаузға килə. Һуңынан Ғузарҙа, Байсунда һəм Сурхан буйының төрлө ҡалаларында була. Кире ҡайтҡан саҡта Ə.Вəлиди бер аҙнаға Каршиҙа туҡтала. Уның күҙəтеүҙəре буйынса, Бохара ханлығының көнсығыш төбəктəре ҡиммəтле ҡулъяҙмаларға ярлы булған. Шуға күрə ул Бохараға яңынан килə һəм тағы ике аҙна тирəһе, 24 июлдəн 4 августҡа тиклем шунда йəшəй. Аҙаҡ Вəлиди отчетында яҙыуынса, уға бəйле булмаған хəл арҡаһында Өфөгə ҡайтырға мəжбүр булған[141]. Сəбəбе Ə.Вəлидиҙең 1914 йылдың 26 авгусында В.В.Бартольдҡа яҙған хатында асыҡлана. 1912 йылда беренсе разрядлы ғəскəргə алыныу сəбəпле медосмотр үтеү өсөн 8 (?) августа Бохаранан китə һəм шул айҙың 16-да Сəмəрҡəнд, Ташкент, Ырымбур һəм Өфө аша Стəрлетамаҡҡа килə.

Үткəн ҡыш Урта Азияла ҡулланған ярлыҡ ҡулъяҙмаларын ҡабаттан ҡарау маҡсаты менəн Наманган һəм Скобелев ҡалаларында була[142]. Һуңынан ул Бохара ханлығы буйлап йөрөй һəм ҡулъяҙма китаптары булған кешелəр менəн осраша. Ə.Вəлиди яңы табылған бөтə ҡулъяҙмалар менəн ентекле таныша, уларҙы юлъяҙмаларына теркəй, ҡайһы берҙəренең күсермəлəрен ала. “Кемал бай Бейҙари һəм Абрар Хужа Хатиптың ҡулъяҙмалары байтаҡ, əммə улар Европа китапханаларындағы ҡулъяҙмалары буйынса беленгəн киң билдəле əҫəрҙəр йəки фарсы шағирҙарының шиғыр йыйынтыҡтары булып сыҡтылар”[143], ə “Мөхəмəт Рəжəп муллала легендар Тимерҙең тарихының бер күсермəһе бар”, – тип баһалай ул ҡайһы берҙəрен[144]. Был командировкаһында ул бик күп ҡиммəтле ҡулъяҙмалар таба һəм уларҙы тасуирлай. Мөмкин булғанса, Вəлиди ҡулъяҙма китаптарҙы Азия музейы өсөн ала барған.

Карши ҡалаһының баҙарында ул дарыуҙар һатыусы бер кешене осрата. Дарыуҙарҙы төрөү өсөн ул кеше иҫке төрки телендəге ҡулъяҙманың биттəрен ҡулланған. Вəлиди уны Азия музейы өсөн һатып алған. Был ҡулъяҙма Ҡөрьəндең төрки телендəге иң боронғо тəржемəһе булып сыға. Вəлиди фекеренсə, ул Х быуатҡа ҡарай[145].

Был тəфсир – XVIII сүрəнəн башланған Ҡөрьəндең һүҙмə-һүҙ тəржемəһе һəм комментарийҙары. Уны диҡҡəт менəн өйрəнгəн

А.К.Боровков бына нисек итеп һүрәтләй: “Тәфсирҙең тәүге өлөшөндә һәр сүрәнең һуңында уның сюжетына ҡоролған хикәйәләр килтерелә, икенсе өлөшөндә иһә, XLIX сүрәнән башлап, һәр айырым аяттың тәржемәһенә тәфсир бирелгән. Тәфсирҙә төҙөүсенең һәм күсереүсенең исеме телгә алынмай, төҙөү һәм күсереү ваҡыты билдәһеҙ”[146].

Һуңыраҡ шәрҡиәтсе В.В.Бартольд ошо Ҡөрьән тураһында мәҡәлә яҙған[147]. Был ҡомартҡыны тикшереү менән шулай уҡ уны рус теленә тәржемә итеүсе[148] шәрҡиәтсе А.К.Боровков, унан тыш башҡорт ғалимы, эмигрант, Ә.Вәлидиҙең дуҫы һәм көрәштәше Абдулҡадир Инан да шөғөлләнгән[149]. Улар тәфсирҙең яҙылыу ваҡытын билдәләүгә лә иғтибар бирәләр. В.В.Бартольд фекеренсә, I быуаттағы билдәле поэма “Ҡотаҙғу белек”кә ҡарағанда был ҡомартҡы алдараҡ яҙылған, ә төрөк ғалимдары Ф.Кепрюлю, А.Эрдоган һәм А.Инан тәфсир оригиналының ижад ителеү ваҡыты X быуат аҙағы – XI быуат башына ҡарай, тип иҫәпләгәндәр. Ҡулъяҙмала монгол дәүере һәм унан һуңыраҡ тимурид осоро терминдарының булыуын иҫәпкә алып, А.К.Боровков был нөсхә XV быуатта күсерелгән, ә тәүге тәржемәһе һәм комментарийы XII–XIII быуаттарға ҡарай, тип билдәләгән. Шул уҡ ваҡытта ул: “Әгәр Ҡөрьәндең төрки телендәге беренсе тәржемәһен тәүге Табари тәфсиренән эшләнгән тип ҡабул иткәндә, төркисә тәфсирҙең барлыҡҡа килеү датаһын X быуаттың аҙағы тип теоретик рәүештә иҫәпләргә була”, ти[150]. Теле яғынан был комментарий XI–XIV быуаттарға ҡараған ҡомартҡылар рәтенә инә.

Ә.Вәлиди Төркиәлә Истанбул университеты эргәһендәге Ислам тикшеренеүҙәре институты журналында инглиз телендә “Ҡөрьәндең төрки телендәге тәржемәләре” исемле мәҡәлә баҫтырып сығара. Унда үҙе тапҡан Ҡөрьән тәржемәһенең телен башҡа күсермәләре менән сағыштырып, ошондай һығымтаға килә: барыһы ла саманид Мансур бин Нух (961–976) осоронда фарсы телендәге “Табари тәфсире”нә нигеҙләнеп эшләнгән тәржемәгә ҡарайҙар. Тәржемәселәр араһында Истинжабтан бер төрки ҙә булған, шуға күрә ғалим фекеренсә, төрки телендәге тәржемә ислам динен тәүгеләрҙән булып ҡабул иткән аргу һәм ҡарлуҡ телдәрендә эшләнеүенә ҡарамаҫтан, Чу һәм Һырдаръя буйы уғыҙҙарының теле лә йоғонто яһай[151].

“Табари тәфсире” тәржемәһенең тарихынан билдәле булыуынса, Ҡөрьәндең ғәрәп телендә яҙылған комментарийы саманид һарайына күрһәтелгәс, китапты уҡыуы һәм аңлауы бик ауыр икәнлеге асыҡлана. Шуға ла Әмир Әбү-Сәлих Мансур ибн Нух уны фарсы теленә әйләндерергә фарман бирә: “Халыҡтың телен белгән рәсүл ебәрелһен” Ҡөрьәндең аятына (14; 4) нигеҙләнеп, ғалимдар быға фәтүә бирәләр. Яҡынса шул ваҡытта (X быуаттың аҙағында) Ҡөрьәндең тәүге һүҙмә-һүҙ тәржемәләре күренә башлай[152].

Командировка ваҡытында Әхмәтзәки Вәлиди 23 ҡиммәтле ҡульяҙмаға эйә була[153]. Хәҙерге ваҡытта ҡулъяҙмалар тупланмаһы Рәсәй Фәндәр академияһы Көнсығышты өйрәнеү институтының Санкт-Петербург филиалында һаҡлана һәм шәрҡиәтселәргә ул Вәлиди коллекцияһы булараҡ билдәле[154].

Шул уҡ ваҡытта Ә.Вәлиди ҡайһы бер ҡулъяҙмаларҙы үҙе өсөн дә ала. Улар араһында XII быуатҡа ҡараған Мәхмүт Вәлиҙең география буйынса китабын һәм суфый шағирҙарҙың әҫәрҙәр йыйынтығын күрһәтергә мөмкин. Ике китапты ла ул революция ваҡытында юғалта[155]. Аҙаҡ, Ә.Вәлиди асыҡлауынса, Мәхмүт Вәлиҙең ҡулъяҙмаһы табыла һәм дүрт томда нәшер ителә[156]. Уның баҫылыуын үзбәк ғалимы А.Урунбаев та раҫлай[157].


ЗАПИСКИ
ВОСТОЧНАГО ОТДѢЛЕНІЯ
ИМПЕРАТОРСКАГО
РУССКАГО АРХЕОЛОГИЧЕСКАГО ОБЩЕСТВА
Основаны барономъ В. Р. Розеномъ.
ТОМЪ ДВАДЦАТЬ ВТОРОЙ.
1913–1914.
ПЕТРОГРАДЪ.
1915.

"Записки Восточного отделения Императорского русского археологического общества" исемле йыйынтыҡтың тышы.

Археографик тикшеренеүҙән тыш, Ә.Вәлиди фольклор материалдары йыйыу менән дә ҡыҙыҡһынған[158].

Бохара ханлығындағы ҡулъяҙмаларҙың торошо менән туранан-тура танышлығы нигеҙендә ул: "Ханлыҡта ҡулъяҙмалар булған хәлдә лә, тик баш ҡала Бохарала ғына, әммә мәҙрәсәлә йәки уҡымышлы муллалар ҡулында түгел, ә отставкаға һәм увольняться иткән чиновниктар ҡулында булыуына, шулай уҡ был яҡтың яңы тарихы буйынса һәм яңы Урта Азия Төркөстан әҙәбиәте буйынса китаптар табырға мөмкин булыуына ышандым", – тигән һығымтаға килә[159].

Был командировкаһының отчеты Төркөстан ҡулъяҙмалары тураһында бик мөһим мәғлүмәттәрҙе үҙ эсенә алған һәм В.В.Бартольд төҙәтмәләренән һуң, 1916 йылда "Записки Восточного отделения Императорского русского археологического общества" журналының XXIII томында донъя күрә.

Экспедицияның һөҙөмтәләре академик В.В.Бартольд тарафынан юғары баһалана һәм ул былай тип яҙа: "Ерле халыҡтарҙың юғалыу

ҡурҡыныcы аҫтындағы яҙма әҫәрҙәрен һаҡлап алып ҡалыуҙа, археологик һәм этнографик материалдар туплауҙа шул халыҡтарҙың тулы ышаныcын ҡаҙанған урындағы ғалимдарҙың ни тиклем файҙалы булыуы Зәки Вәлиди сәйәхәте тарафынан тулыһынса иҫбатланды”[160].

Л.Н.Карскаяның “Аннотированная библиография отечественных работ по арабистике, иранистике и тюркологии 1818–1917 гг.” (М., 2000) китабында килтерелгән мәғлүмәттәре буйынса, Ә.Вәлидиҙең беренсе отчетында 74, икенсеһендә 101 ҡулъяҙма телгә алына.

Бында шуны ла әйтеп үтергә кәрәк, тикшеренеүҙәргә урындағы халыҡты йәлеп итеү, улар менән ғилми бәйләнешкә инеү, тикшеренеүсе Н.Н.Нәзирова фекеренсә, Урта һәм Көнсығыш Азияны өйрәнеү буйынса рус комитетының эшмәкәрлегендә мөһим урындарҙы алып торған. Мәҫәлән, 1908–1909 йылдарҙа Олуғбәктең обсерваторияһын ҡаҙған саҡта В.Л. Вяткинға ошо ерҙә йәшәүсе Әбү Сәйет исемле кеше ярҙам итә, А.Н.Самойловичҡа 1908 йылдағы Хиуа ханлығына яһаған сәйәхәтендә уҡытыусы Сәйет-Рәсүл һәм шағир Әхмәт-Табибтың ярҙамы ҙур була, Монголиялағы экспедицияға күрһәткән ярҙамы өсөн ҡалмыҡ К.Уйғыловҡа Б.Я.Владимирцев Рус комитетынан бүләк юллай[161].

Ҡаҙаҡ ғалимы В.З.Ғәлиевтың тикшеренеүҙәренән күренеүенсә, ҡаҙаҡ, татар, башҡорт, уйғыр, үзбәк һәм башҡа аҫаба халыҡтарҙың тәржемәселәре һәм юл күрһәтеүселәре Ҡаҙағстан тарихында, айырып әйткәндә, уның Рәсәйгә ҡушылыуында ҙур роль уйнағандар[162]. Уларҙың эшмәкәрлеге Рәсәйҙә көнсығыш ғилеме үҫешенең бер өлөшө була.

Ә.Вәлиди Урта Азияға эшләнгән экспедициялар материалдары нигеҙендә бер нисә хеҙмәт яҙа. Петербургта сыҡҡан “Ил” гәзитендә 1913 йылдың 28 ноябренән башлап 1914 йылдың 2 майына тиклем “Төркөстан хаттары” исеме аҫтында мәҡәләләр серияһын баҫтырып сығара[163]. Тәүге хатында былай тип яҙа: “Ташкентҡа килгәс, Төркөстан тураһында яҙырлыҡ хәбәрҙәр бик күбәйҙе. Шәһрәтенең өҫтөнә был ҡалалағы сарт төрктәренең боронғоһо менән сағыштырғанда бер ҙә үҙгәртмәй һаҡлап килгән иҫке тормоштары Ташкентты йәнә оригиналлерәк итеп диҡҡәтте тағы артығыраҡ йәлеп итә”[164]. Ул ике өлөшкә бүленгән ҡаланы күреп хайран ҡала: беренсеһендә Рәсәйҙән күсеп килгән халыҡ йәшәй, ә икенсеһендә – сарттар. Шулай уҡ Коканд ханлығы тураһында ла ентекле итеп һөйләй. Урындағы халыҡ хан осорон үтә һағынмай, тип билдәләй Ә.Вәлиди. Уның уйлауынса, зыялылар һәм дин менән нык ҡыҙыҡһынған ололар үткәнгә мөрәжәғәт итәләр. Бының сәбәптәре төрлөсә: эскелектең, аҙғынлыҡтың таралыуы, ислам ҡағиҙәләрен үтәмәү һ.б. Шул уҡ ваҡытта ул Рәсәй хөкүмәтенең Урта Азия халыҡтары тормошона яһаған йоғонтоһон да әйтеп үтә. Урындағы халыҡтың

йәшәйеше менән рус цивилизацияһының бәйләнешкә инеүе һөҙөмтәһендә ыңғай үҙгәрештәр буласаҡ, тип уйлай автор. Бының өсөн, ти ул, Урта Азия территорияһына берҙәм Рәсәй законын индереү зарур. Тик шунан һуң ғына яңы кешеләр быуыны үҫәсәк. Был инде, үҙ сиратында, Ә.Вәлидиҙең шул осорҙа рус мәҙәниәтенең йоғонтоһо аҫтында булыуын күрһәтә.

Төрки халыҡтарының тарихы өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булған Бабурҙың әҙәби эшмәкәрлеге тураһында ла Ә.Вәлиди күп һөйләй. Бабур үҙенең теленә тоғро булған, тип билдәләй ул. Уның фекеренсә, төрки яҙма теленең формалашыуында классик төрки телле шиғриәттең сәскә атыу эпохаһы, Навои (1441–1501), Лотфи (1366–1465) һәм Бабур (1483–1530) кеүек шағирҙарҙың әҫәрҙәре ҙур роль уйнай. Уларҙың ижад емештәрен һәр ваҡыт уҡырға кәңәш итә. Дөйөм китаптарҙы уҡыу юлы менән берҙәм әҙәби төрки телен тыуҙырыу мөмкин, тип иҫәпләй автор. Бының өсөн иң кәрәкле китаптарҙың береһе тип, Ә.Вәлиди “Бабур-намә”не айырып күрһәтә.

Ә.Вәлиди ислам һәм христиан диндәре араһында айырмалар күрмәгән бер ярлы ҡырғыҙ менән осрашыуын бик ентекле тасуирлай. Берҙәкте күберәк нисек ашарға табыу мәсьәләһе борсой. Бында Ә.Вәлиди христиандарҙың миссионерлыҡ эшмәкәрлеген ғәйепләй.

Был хаттарҙа Ә.Вәлидиҙең ҡыҙыҡлы этнографик күҙәтеүҙәре килтерелә. Йәш тикшеренеүсе шул яҡтың билдәле һәм ябай кешеләре менән үҙенең осрашыуҙарын бәйән итә. Ул элек осрашҡан атаҡлы кешеләрҙең хәҙер ябай сарттар кеүек йәшәүе һәм “уларҙың власы өй тышына сыҡмауы” тураһында яҙа. Ә.Вәлидиҙең “Төркөстан хаттары” Урта Азия халыҡтарының тарихы этнографияһы һәм мәҙәниәте буйынса ҙур хеҙмәт тип иҫәпләнә. Әммә, автор билдәләүенсә, уҡыусыларҙы ялҡытмаҫ өсөн бөтә ишеткәндәрен дә индермәй.

1914 йылда “Сөйөмбикә” журналының алтынсы һәм туғыҙынсы һандарында Ә.Вәлиди “Наливкин Фирғәнә ҡатын-ҡыҙҙары тураһында” исемле мәҡәләһен баҫтырып сығара. Был мәҡәләнең яҙылыу сәбәбен автор ошолай аңлата: “‘Казанда саҡта уҡ мин “Сөйөмбикә” журналының мөхәрриренә: “Һеҙҙең өсөн, әлбиттә, Фирғәнә ҡатын-ҡыҙҙары тураһында берәй нәмә яҙырға тейешмен”, – тип вәғәҙә биргән инем,”– ти. Ләкин Төркөстанда ул тик рус, йәһүд һәм сиған ҡатын-ҡыҙҙарын ғына осрата. Мосолман ҡатын-ҡыҙҙары этикаға ярашлы рәүештә пәрәнжәлә булғандар һәм сит ирҙәрҙең улар менән һөйләшергә хоҡуҡтары булмаған. Ә.Вәлиди, үҙенең һүҙҙәре буйынса, “килбәтһеҙ мумие”ларҙы хәтерләтеп уранған көнсығыш ҡатын-ҡыҙҙарын ғына күрә алған. “Кем белә, ул ҡара чимбәттәр, сапандар аҫтында әллә ниндәй бер күрһәң йән фиҙа итерлек “дилбәрҙәр” барҙыр. Бәлки, ул йәшерен ғәләм эсендә үҙҙәренең матур ҡыланыштары йәки матур тәбиғәт, хатта ҙур ғилем, бөйөк шағирлыҡтары

менән “Европа ҡатындарын оялтырлыҡ заттар барҙыр… Быларҙың барыһы ла миңә мәғлүм түгел… Ошоноң өсөн мин үҙебеҙҙең Ҡазан ҡатындарын Фирғәнә ҡатындары алдында бөтөнләй Европа ҡатындары рәтенә ҡуйырға теләйем”, – тип яҙа ул”[165].

Ә.Вәлиди Төркөстан халыҡтарының тормошо, йәшәйеше, мәҙәниәте һәм теле буйынса ике белгес Владимир Петрович Наливкин (1852–1918) һәм уның ҡатыны Мария Владимировнаның “Очерк быта женщины оседлого туземного населения Ферганы” исемле хеҙмәттәренә мөрәжәғәт итә. Был китап 1886 йылда Ҡазанда нәшер ителә һәм Рус география йәмғиәтенең алтын миҙалына лайыҡ була. В.В.Бартольд уны “сарттар тормошо хаҡында шәп китап” тип баһалай[166]. Вәлиди ҙә Наливкиндың был хеҙмәтенә юғары баһа бирә, авторҙарҙың тәржемәи хәлдәренән мәғлүмәттәр килтерә, уларҙың эшмәкәрлеге менән таныша. Фирғәнә ҡатын-ҡыҙҙарының тормош-көнкүреше мәсьәләләре буйынса белгес булмауына ҡарамаҫтан, ул үҙ мәҡәләһенең аҙағында Наливкиндың телгә алынған хеҙмәтенән урындағы ҡатын-ҡыҙҙарҙың хоҡуҡфиғеле, ғөрөф-ғәҙәттәре, уратып алған мөхит менән мөнәсәбәте хаҡында бәйән ителгән бүлегенең ҡыҫҡартылған тәржемәһен нәшер итергә вәғәҙә бирә. Әммә билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында тәржемә баҫылмай ҡала.

Беренсе экспедицияһының материалдары нигеҙендә Ә.Вәлиди “Фирғәнәнең XVIII быуат тарихы буйынса ҡайһы бер мәғлүмәттәр” тигән мәҡәлә яҙа һәм ул 1915 йылда “Төркөстан археология һөйөүселәр түңәрәгенең протоколдары”нда донъя күрә. Мәҡәләнең бер өлөшө Төркөстан археология һөйөүселәр түңәрәге ултырышында 1914 йылдың 17 мартында уҡыла[167]. Был хеҙмәтен яҙғанда ул бик күп сығанаҡтар



Сообщеніе А. З. Валидова

Нѣкоторыя данныя по исторіи Ферганы XVIII-го столѣтія *).

Въ Скобелевѣ, въ областномъ правленіи, хранится довольно порядочное количество вакуфныхъ документовъ, къ сожалѣнію, до сихъ поръ еще никѣмъ не использованныхъ¹). Подобные документы и ярлыки, какъ я могъ убѣдиться во время своихъ разъѣздовъ по Ферганѣ, въ 1913 году, по порученію О-ва археологіи, исторіи и этнографіи при Имп. Казанскомъ университетѣ, и въ 1914 г. по порученію Имп. Академіи наукъ и Русскаго комитета для изученія Средней и Восточной Азіи, имѣются и въ частныхъ рукахъ ²).

Документы эти, какъ источникъ для изученія исторіи Ферганы, тѣмъ болѣе важны, что мы знаемъ ея исторію съ конца XVII-го вѣка³) вплоть до воцаренія

*) Часть этой статьи была доложена на засѣданіи Турк. Кружка Люб. Арх. 17-го марта 1914 года.

¹) Нѣкоторые изъ этихъ документовъ, именно часть документовъ Караскакского мазара приводитъ В. В. Бартольдъ въ своемъ отчетѣ о поѣздкѣ въ Туркестанъ (З. В. О. XV, 275).

²) На важность изученія вакуфныхъ документовъ, хранящихся въ Скобелевскомъ областномъ правленіи, было между прочимъ обращено вниманіе въ Туркестанской печати (см. замѣтку Л. Зимина „Вакуфные документы“ въ Турк. Вѣдомостяхъ отъ 10 дек. 1910 г. Замѣтка эта цѣликомъ перепечатана во французскомъ переводѣ въ „Revue du Monde Musulman“, vol. XIII, février 1911, p. 276, 277). Прим. ред.

³) Источниковъ для изученія исторіи Ферганы и ея владѣтелей, Аштарханидовъ, до начала XVIII-го вѣка имѣется достаточно; самый лучшій изъ нихъ Бахрулъ-асраръ извѣстенъ только по рукописи библіотеки India office въ Лондонѣ, а потому намъ не доступенъ. Общеизвѣстные Тарихи-Раким и Мукимъ-хани о Ферганѣ ничего не даютъ. Во время своихъ разъѣздовъ мнѣ удалось познакомиться еще съ нѣкоторыми источниками, изъ которыхъ наибольшій интересъ представляютъ слѣдующія: 1) Таджут-таварихъ, соч. Мухаммедъ Шерифа, сына Мухаммедъ Накіб, которое содержитъ подробную исторію Аштарханидовъ и Мангытовъ до Хайдара. Экземпляръ его сохраняется въ библ. Кази-Калана въ Бухарѣ. 2) Тарихи Шахъ Махмудъ Чурасъ, сочиненіе Махмудъ Чураса, содержитъ исторію Кашгаріи до средины XVII-го вѣка. Между прочимъ въ ней имѣются свѣдѣнія о бухарскихъ ханахъ и о Ферганѣ. 3) Жизнеописанія святого Ходжи Исхака († 1008=1599 г.) Таких книгъ двѣ: одна называется Зіяулъ-Кулубъ и принадлежитъ коканд[illegible] Юнусъ Джанъ Ходжѣ, другая „Манакибъ Ходжа Исхака“, принадлежитъ намангандцу Юсуфъ Ходжѣ. Въ обѣихъ книгахъ имѣются свѣдѣнія о Ферганѣ. Къ этимъ источникамъ могутъ быть отнесены два сочиненія ферганскаго поэта Машраба († 1730 г.) одно изъ нихъ его „Диванъ“ и другое „Манакибъ Авлія“. Обѣ книги принадлежатъ Юнусъ Джану. Въ литографированныхъ сокращенныхъ изданіяхъ „Дивана Машраба“ отсутствуютъ тѣ указанія, которыя имѣются въ рукописи Юнусъ Джана.

**1915 йылда “Протоколы Туркестанского кружка любителей археологии” тигән йыйынтыҡта Ә.Вәлидиҙең “XVIII быуат Фирғәнә тарихы буйынса ҡайһы бер мәғлүмәттәр” исемле мәҡәләһенең тәүге бите.**

ҡуллана. Улар араһында үҙе тапҡан ҡулъяҙмалар һәм документтар ҙур ғына урын алып тора. Ошо сығанаҡтарҙан алған мәғлүмәттәрҙе сағыштырыу нигеҙендә Вәлиди XVIII быуатта Фирғәнә үҙәне территорияһында барған тарихи ваҡиғаларҙы аяҡҡа баҫтыра.

Уның тикшеренеүҙәре шуныһы менән әһәмиәтле, XVIII быуат Фирғәнә тарихын быға тиклем "тик XVIII быуаттың икенсе һәм өсөнсө сиректәрендә яҙылған китаптар буйынса өйрәнгәндәр; ә улар… дөрөҫлөктө тулыһынса боҙоп күрһәтә һәм уларға ышаныс менән мөрәжәғәт иткән тикшеренеүселәрҙе бөтөнләй яңылыштыра"[168]. Шуға күрә ул шул осор сығанаҡтарына таянып, "Фирғәнәлә Аштарханидтар власы XVIII быуаттың башында ла дауам иткән", тип иҫбат итә[169]. Вәлиди тарафынан табылған ярлыҡтар шул тиклем яҡшы һүрәтләнгән, хатта улар юғалған осраҡта ла ошо һүрәтләүҙәр ғалимдар өсөн сығанаҡ булып хеҙмәт итә алалар.

Ә.Вәлиди фекеренсә, шул ваҡыттағы иң мөһим документтарҙың береһе – Мөхәммәт Вафаи-Карминагиҙың "Тарихи Рәхим-хани" ("Рәхим-хан тарихы") исемле хеҙмәте, уның икенсе исеме лә бар – "Төхват әл-хани" ("Хан бүләге"). Автор әҫәрен 1745 йылда (һижри буйынса 1158 йылда) яҙа башлаған, тип фараз итәләр[170].

Вәлиди, был сығанаҡтың төп нөсхәләге һәм рус телендәге тәржемә тексын әҙерләп, алда ҡарап үткән мәҡәләһенең аҙағына урынлаштырған[171]. Хеҙмәтенең һуңында "ярлыҡтар кеүек документтарҙы өйрәнеүҙең һәм уларҙы көндән көн күбәйә килгән ерле тарихи сығанаҡтар биргән мәғлүмәттәр менән сағыштырыу" бик мөһим сара, тип һығымта яһай[172].

Үзбәк тарихсыһы Р.Н.Шиһабетдиновтың Үзбәкстан Үҙәк дәүләт архивында тапҡан мәғлүмәттәре буйынса, рәйес урынбаҫары Н.П.Остроумов рәйеслек иткән Төркөстан археология һөйөүселәр түңәрәгенең ултырышында Ә.Вәлиди 72 түңәрәк ағзаһы алдында үҙенең сәйәхәте һөҙөмтәләре тураһында сығыш яһай. Шунда уҡ уны, рәйестең тәҡдиме буйынса, В.С.Платонов һәм И.А.Корольков менән бергә түңәрәктең тулы хоҡуҡлы ағзаһы итеп һайлайҙар. Был әһәмиәтле ваҡиға уның фәнни ҡаҙаныштарын тағы ла бер тапҡыр раҫлай.

Ә.Вәлидиҙең Урта Азиялағы актив эшмәкәрлеге Төркөстан район охрана бүлегенең иғтибарын йәлеп итә. Урҙә телгә алынған үзбәк тикшереүсеһе Төркөстан генерал-губернаторлығы канцелярияһының 1914 йылдың 2 июнендә охрана бүлегенә ебәргән һорауын таба: "Вәлиди әфәнденең Урта Азияла сәйәхәт итеүенә ҡаршылыҡтар бармы?" һәм уға 1914 йылдың 15 июнендә ошондай яуап алына: "Вәлиди әфәнденең Урта Азияла сәйәхәт итеүенә ҡаршылыҡтар юҡ"[173].

Ә.Вәлидизең революцияға тиклемге осорҙа, икенсе командировкаһынан һуң яҙылған “Сығатай шағиры Лотфи һәм уның “Диуаны” исемле мәҡәләһе тәүҙә “Йондоҙ” гәзитенең дүрт һанында баҫылып сыға һәм һуңынан айырым брошюра итеп нәшер ителә. Улар икеһе лә 1914 йылда донъя күрә.

Үҙе тапҡан сығанаҡтарға таянып, Әхмәтзәки Вәлиди Лотфиҙың ижадын һүрәтләй. Уның уйлауынса, Лотфи төрки телендә яҙған, сөнки уның фарсы телендә, бер-ике шиғырын иҫәпкә алмағанда, әҫәрҙәре юҡ тиерлек һәм уның исеме лә шул осорҙағы фарсы шағирҙары хаҡындағы китаптарҙа осрамай. Шуға күрә “уның бөтөн шөһрәте шул төрки шиғырҙары менән булған”, тип һығымта яһай Вәлиди[174]. Ул Лотфиҙы ябай матурлыҡты нәфис сағылдырыусы шағир булараҡ баһалай.

Артабан Ә.Вәлиди былай тип яҙа: “Боронғо шағирҙар, мәҫәлән, Әхмәт Йәсәүи, Сөләймән Баҡырғани, Хәйҙәрҙәр, яҙған нәмәләренең тышҡы яҡтан зиннәтле булыуына артыҡ иғтибар итмәйенсә, бик ябай ғына итеп дини нәмәләр, вәғәздәр, тәсауфҡа ғаид һүҙҙәр генә яҙалар ине. Сакаки менән Лотфи донъяның нәфис нәмәләренә артыҡ әһәмиәт биреп, шул матурлыҡҡа ҡаршы үҙҙәрендә ниндәй тойғолар һаҡлағандарын һөйләгәндәр һәм Иран шағирҙарында булған кеүек үк нескә, үткен ғибәрәт вә өслүбтәр табырға тырышҡандар һәм яҡшы уҡ алға киткәндәр. Хосусан Лотфи был хосуста тағы алға киткән. Уның текстары Сакакиҙыҡынан тағы аңлайышлыраҡ һәм мәғәнә йәһәтенән тағы бөйөгөрәк булған”[175].

Лотфиҙың эшмәкәрлеген Әхмәтзәки Вәлиди төркиҙәрҙең милли үҙаңының үҫеше менән бәйләгән. Уның фекеренсә, төрки зыялылары үҙҙәренең әҫәрҙәрен күпме сит рух менән һуғарһалар, милли колорит та шунса зыян күрәсәк.

Ә.Вәлидизең Лотфи тураһындағы был мәҡәләһе Ырымбурҙа Мәхмүт Ғәләү нәшер иткән “Ҡармаҡ” сатирик журналында 1915 йылда исемдәрен яҙмаған замандаштарының тәнҡит утына эләгә[176]. Телгә алынған баҫмасы донъяға ҡарашы буйынса социалист булған. Был журналды нәшер итеүгә рөхсәт 1914 йылдың 25 августында алына, ә тәүге һаны 1915 йылдың 15 ғинуарында донъя күрә. Ай һайын ике һаны сыҡҡан. Ҡайһы бер һандары парлы, йә иһә өсәүһе бергә сыҡҡан. “Ҡармаҡ” журналының бөтәһе 60 һаны донъя күрә. 1915 – 1916 йылдарҙа 24-шәр һаны сыға, ә 1917 йылда – 12 һаны. Журналдың 1916 йылдың 1 ноябрендә сыҡҡан ун туғыҙынсы һәм егерменсе ҡушар һандарында артабан баҫма “М.Ғәләүетдинов һәм З.Дәминовтың сауҙа йорто” тарафынан нәшер ителәсәге тураһында әйтеп үтелә.

Тәнҡит мәҡәләһе “Бөйөклөк манияһы” ауырыуы” тип аталған. Әйтеп үтергә кәрәк, тәнҡит бик ҡаты була. Бында Ә.Вәлидиҙе “Беҙҙең милли тарихыбыҙ тураһында рус әҙәбиәтен уҡыуҙан ләззәт тапҡан Зәки әфәнде үҙен

милли тарихты берҙән бер белеүсе тип иҫәплэй", тип ғәйепләйҙәр[177]. Шул уҡ тондарҙа төрки мәҙәниәтенең башҡа күп кенә әһелдәренә баһа бирелә.

Тәнҡитсе фекеренсә, Ризаитдин Фәхретдинов менән Хәсән Ғата Ғәбәшиҙең егерме йыллыҡ эшмәкәрлектәре "Ибн Батутта сәйәхәтенең көндәлеге"нән һәм Карамзиндың "Тарих"ынан ары китмәгән. Шулай уҡ ул Ямалетдин Вәлидиҙе "Һуңғы көндәргә тиклем беҙҙең әҙәбиәтебеҙҙә "Хисаметдин мулла" исемле әҫәрҙең барлығын белмәгән", тип ҡаты тәнҡитләй[178]. Ә.Вәлидиҙең "Татар әҙәбиәте үҫеше" (1912) китабының шул осор татар әҙәбиәте тарихы өлкәһендә берҙән-бер хеҙмәт булыуын билдәләп үтергә кәрәк[179].

Ғ.Батталдың "Татар тарихы" әҫәре лә тәнҡитләнә. Тәнҡитсенең һүҙҙәре буйынса, автор Н.М.Карамзиндың "История государства Российского" китабы хаҡында белмәйенсә, тик "Шура" журналында баҫылып сыҡҡан татар хандары тураһындағы материалдарға таянып ҡына китап яҙып нәшер итә. Шулай уҡ ул Ә.Вәлидиҙең Урта Азияға яһаған сәйәхәте хаҡында ла кире уйҙа була. Йәнәһе "профессор Бартольд Бохараға боронғо китаптар йыйырға барырға йыбанғас, Төркөстанға Зәки әфәндене ебәрергә кәңәш иткән. Зәки әфәнде Бохараға барып һарттарға үҙен рус чиновнигы итеп таныҡҡан да, китап йыйып ҡайтҡан. " Төркөстанда ҙур рус түрәләрендә ҡунаҡ булған" тигән нигеҙһеҙ фекер әйтелә[180]. Ә.Вәлидиҙе бөйөклөк манияһында, хәреф ҡоло булыуҙа һәм ғәҙелһеҙлектә ғәйепләйҙәр. Мәҡәләнең авторы иҫәпләүенсә, Сыңғыҙ-хан тураһында яҙғанда, уның боронғо ата-баба булыуын иғтибарға алмайынса, һалҡын ҡанлы булырға кәрәк[181]. Тәнҡитсе Ә.Вәлидиҙең яҙыусы ла, шағир ҙа түгел икәнен һыҙыҡ өҫтөнә ала. Уның әйтеүенсә, "тарихи әҫәрҙәр, дөйөм һәм айырым тарихтар (әҙәбиәт тарихынан тыш) яҙыр өсөн уҡыу, тикшереү, анализлау һәм иҫбатлау етәрлек булыуы мөмкиндер, әммә әҙәбиәт тарихсыһы булыр өсөн аҙ ғына булһа ла әҙәби талант булыуы кәрәк"[182]. Автор фекеренсә, Ә.Вәлидов Туҡайҙың "Шүрәле"һен һәм Лотфиҙың ижадын тикшерә алмаған, ул үҙен "әҙәбиәт, шиғриәт күҙлегенән "Шүрәле" нимә? "Шүрәле"нең яҙыусыһы булараҡ Туҡай кем?" – тигән мәсьәләләргә яҡынлаша алмаған хронограф сифатында күрһәткән[183].

Ә.Вәлидиҙең "Лотфи һәм уның Диуаны" исемле әҫәрен баһалап, тәнҡитсе: "Лотфи һәм уның диуаны" исемле мәҡәләлә: "Фарсы шиғырҙары һәм уларҙың сағатай шағиры Лотфиға ниндәй йоғонто эшләгән?" – тигән һорауға яуап табылмай. Был әҫәрҙә: "Ҡайһы китапханала Лотфи диуанының ниндәй ҡулъяҙмалары бар, донъяла уларҙың барлығы нисә нөсхәһе бар?" – тигән һорауҙарға яуап, Лотфиҙың рәсми биографияһын белеп була. Әммә Лотфиҙың ниндәй шағир икәнен белеп булмай", – тип яҙа[184].

"Диуани Мәхтүмҡолой" исемле мәҡәләһен Ә.Вәлиди Ғабдрахман Ниязи тарафынан Әстрханда нәшер ителгән Мәхтүмҡолой шиғырҙарының беренсе өлөшө донъя күреү уңайы менән яҙа. Мәҡәлә "Шура" журналының 12–13-сө һандарында баҫылып сыға һәм ошо мәҡәләнең дауамы булып, был журналдың артабанғы дүрт һанында "Мәхтүмҡолой шиғырҙарына күрһәткес" донъя күрә.

Инештә Ә.Вәлиди төрки халыҡтарын һәм әҙәбиәтен һүрәтләй һәм уларҙың тәү осорҙағы берҙәмлеген һыҙыҡ өҫтөнә ала: "Төрк-татар милләте һуңғы быуаттарҙағы сәйәси хәлдәр арҡаһында төрлө айырым һәм бер-береһе менән бик аҙ таныш булған йәмғиәттәргә айырылды. Айырым йәмғиәттәрҙә үҙ араларындағы ғөмүми мөнәсәбәт менән таныш булмаған халыҡ шағирҙары айырым исемдәр менән төрөкмән, ҡырғыҙ, Ҡазан, сарт, Кавказ, Ҡырым әҙәбиәте тигән кеүек әҙәбиәттәр яһай башланылар"[185].

Мәхтүмҡолойҙоң бөтә эшмәкәрлеген Ә.Вәлиди ошо күҙлектән сығып баһалай: "Мәхтүмҡолой төрк-татар шағирҙары араһында иң ҙуры түгел; ләкин төрк-татарҙарҙың "халыҡ шағирҙары" араһында мөһим урынды алыусыларҙың береһелер"[186].

Был хеҙмәтендә Ә.Вәлиди текстолог булараҡ сығыш яһай. Ул Мәхтүмҡолойҙоң шул ваҡытҡа тиклем нәшер ителгән бөтә шиғырҙарын тиерлек Кокандта йәшәүсе уҡытыусы Ғәшүр Ғәли Заһиров ебәргән ҡульяҙмалар менән сағыштыра. Шуның нигеҙендә "Мәхтүмҡолойҙоң шиғырҙарына күрһәткес" төҙөлә. Тикшеренеүсе ҡулындағы ҡульяҙма был шағирҙың күп һанлы шиғырҙарынан 210 ҡасиданан торған. Бөтә билдәле баҫмаларҙы тикшереп, ул Мәхтүмҡолойҙоң бөгөнгө көндә 269 шиғыры билдәле булыуы тураһында һығымта яһай. Һеҙөмтәләре алда әйтеп үтелгән "Мәхтүмҡолойҙоң шиғырҙарына күрһәткес"тә килтерелә.

Ә.Вәлиди шағирҙың төрлө варианттарҙа шиғырҙары булыуы хаҡында яҙа һәм уларҙың башланғыс хәлен билдәләү өсөн бөтә булған күсермәләрҙең тел үҙенсәлектәрен сағыштырырға тәҡдим итә. Бындай ысулды хәҙерге ваҡытта текстологтар һәм археографтар киң ҡуллана. Хеҙмәтенең аҙағында ул киләсәктә Мәхтүмҡолой әҫәрҙәренең тулы йыйынтығын нәшер итергә кәрәк тигән матур теләктә ҡала[187].

Ә.Вәлиди үҙ күрһәткесен һәм мәҡәләһен яҙған саҡта Урта Азия әҙәбиәтен өйрәнеүсе А.Н.Самойловичтың (1880–1938) хеҙмәттәренә таяна. Түбәнге Новгородта гимназия директоры ғаиләһендә тыуып үҫеп, Нижегород дворяндар институтын, һуңынан Санкт-Петербург университетының көнсығыш телдәре факультетын тамамлаған А.Н.Самойлович, П.Мелиоранский кәңәше буйынса, ғилми эшмәкәрлегенең башланғысы итеп, төрөкмән телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеүҙе һайлай. Был шөғөл ғалимдың фәнни ҡыҙыҡһыныуҙары араһында төплө урын ала.

Әлбиттә, Ә.Вәлидиҙең Мәхтүмҡолой тураһындағы хеҙмәте лә уның иғтибарынан ситтә ҡалмай. А.Самойлович "Записки Восточного отделения Русского археологического общества" журналының XXII томында баҫтырып сығарған "Материалы по среднеазиатско-турецкой литературе" (II–III) исемле хеҙмәтенә "Третье дополнение к указателю песен Махтумкули" тигән мәҡәләһе лә ингән. Инеш өлөшөндә был өҫтәлмәнең донъя күреүенә сәбәпсе булған ике хәлдең береһе – Ә.Вәлидиҙең хеҙмәте нәшер ителеүен һәм, икенсеһе – Санкт-Петербург университетының студенты, сығышы буйынса мервтың тәкә ырыуынан булған Какаджан Бердиевтың уға Мәхтүмҡолой шиғырҙарының ҙур күләмле ҡулъяҙма томын тапшырыуын әйтеп үтә.

Ә.Вәлиди үҙенең мәҡәләһен яҙған саҡта, А.Н.Самойлович Мәхтүмҡолойҙоң 197 шиғыры булыуы хаҡында хәбәрҙар булған. Хәҙер инде уның ҡулына 222 шиғырҙан торған йыйынтыҡ эләгә[188]. Ә.Вәлидигә Ғәшүрали Заһиров биргән йыйынтыҡҡа 209 шиғыр ингән. Үҙенең мәҡәләһендә А.Н.Самойлович Ә.Вәлидиҙең хеҙмәттәренә ентекле анализ яһай, уның мәҡәләләрендә осраған етешһеҙлектәрҙе күрһәтеп үтә. Мәҫәлән, Ә.Вәлиди рифмаларҙы айырым яҙып алған һәм йырҙарҙың формалары тураһында йыйынтыҡтың үҙендә мәғлүмәт бирмәгән, алфавит тәртибе тулыһынса һаҡланмаған[189]. Ул шулай уҡ техник хаталарға ла иғтибар итә.

Ә.Вәлидиҙең мәҡәләһендә Мәхтүмҡолойҙоң күп һанлы шиғырҙары бирелә. Әммә уларҙың авторлығы буйынса А.Н.Самойловичта икеләнеүҙәр уяна һәм ул Ә.Вәлидигә яҙма рәүештә һорау менән мөрәжәғәт итә. Яуап итеп уға "уның йыйынтығында Мәхтүмҡолойҙан башҡа тахаллустар юҡ" тип, "хөрмәт менән хәбәр итә".

Ентекле анализ барышында А.Н.Самойлович "әгәр Вәлидиҙең йыйынтығындағы бөтә яңы 56 йыр ҙа ысынлап та Мәхтүмҡолойҙоҡо булһа, ул ваҡытта хәҙерге көндә төркмән шағирының беҙгә билдәле әҫәрҙәре 222 + 56 (?) + 1 = 279 (?) була", тип һығымта яһай[190].

Дөйөм алғанда А.Н.Самойлович Ә.Вәлидиҙең был хеҙмәтенә юғары баһа бирә: "Вәлидов үҙендәге Мәхтүмҡолой шиғырҙарының нөсхәһенә күрһәткес баҫтырып, тюркологтарға мәшһүр төрөкмән шағирының әҫәрҙәрен өйрәнеү мәсьәләһендә тағы бер аҙ алға китергә мөмкинселек биреп, һәр хәлдә төрөкмән әҙәбиәтенә ҙур ярҙам күрһәтте."[191].

Мәҡәләһенең өсөнсө бүлегендә Ә.Вәлиди көнсығышты өйрәнеүселәрҙе төркиҙәрҙең теле, рухы менән аҙ таныш булыуҙа тәнҡитләй. Бүлек ошондай һүҙҙәр менән тамамлана: "Шулай итеп, беҙгә Мәхтүмҡолой әшғәре хаҡында ысынлап һөйләргә урын киң әле"[192]. Самойлович был һүҙҙәрҙе "бик ҡыҙыу" ти һәм үҙенең мөнәсәбәтен түбәндәгесә белдерә: "Ориенталист булараҡ, беҙҙең камил булмаған эштәребеҙ көнсығышты өйрәнеү

ғилеменә милләттәре буйынса был фәнни өлкә, бигерәк тә, яҡын һәм ҡәҙерле булған яңы хеҙмәткәрҙәрҙе ылыҡтырыуына ҙур шатлыҡ белдерәм. Ни ҡәҙәр татар, ғөмүмән, төрки ғалимдарының "шәрҡиәтсе әфәнделәр" менән берләшеүе ныҡыраҡ булһа, шул ҡәҙәр тегеләре лә, былары ла тюркологияның үҫешенә уңышлыраҡ, бергәләп ярҙам итәсәктәр"[193].

Хәҙерге көндә Төркмәнстанда Мәхтүмҡолойҙоң тиҫтәнән ашыу шиғырҙар йыйынтығы донъя күрҙе. 1983 йылда шағирҙың тыуыуына 250 йыл тулыу айҡанлы Ашхабадта 498 шиғырҙан торған ике томлы китап баҫылып сыҡты. 1964 йылда Иранда Мәхтүмҡолойҙоң 446 шиғыры ингән йыйынтығы нәшер ителде. 1994 йылда Анкарала Төркиәнең Мәҙәниәт министрлығы нәшриәтендә шағирҙың ҙур күләмле йыйынтығы донъя күрҙе.

Төркмәнстандағы Мәхтүмҡолой исемендәге Тел һәм әҙәбиәт институтының ҡулъяҙмалар фондында 865 номер аҫтында Мәхтүмҡолойҙоң 1913 йылда "Шура" журналында баҫылып сыҡҡан шиғырҙар күрһәткесенең күсермәһе һаҡланыуын да билдәләп үтергә кәрәк. Исемлектең аҙағында: "Төп нөсхәнән биш йөҙ илле һигеҙ юл, 1 269 дүрт юллыҡ дөрөҫ күсерелгән. Сығанаҡ: 1913 йылғы "Шура" журналы Башҡортостан яҙыусылар союзының яуаплы сәркәтибе (Н.Ҡәрипов), 9/VI – 1941." тип күрһәтелгән һәм БАССР-ҙың Яҙыусылар союзы идараһының түңәрәк мисәте ҡуйылған [194].

1926 йылда Ә.Вәлиди был темаға тағы бер әйләнеп ҡайта. Ул Истанбулда шәйех Мөхсин Фани тарафынан нәшер ителгән Мәхтүмҡолойҙоң шиғырҙар йыйынтығына тәнҡит мәҡәләһе яҙа. Бында ул теманың историографияһын яҡтырта, был мәсьәлә буйынса үҙенең хеҙмәте һәм А.Н.Самойловичтың мәҡәләһе тураһында яҙа. Үҙенең көнсығышты өйрәнеүселәрҙе тәнҡитләүе хаҡында һүҙ йөрөткәндә, был һүҙҙәр А.В.Вамбери һәм Н.П.Остроумовтың (1846?–1930) хаталарына ғына ҡағылғайны, тип яҙа[195].

1915 йылда Ҡазандағы "Өмөт" типографияһында Ә.Вәлидиҙең "Хоҙаяр хандың һуңғы көндәре" исемле ҙур булмаған китабы сыға. Ул "Аҡ юл" тигән балалар журналына ҡушымта итеп баҫтырылған икенсе бүләк китабы булараҡ донъя күрә. Был хеҙмәттә Кокандтың һуңғы ханы Хоҙаярҙың фажиғәле яҙмышы хаҡында бәйән ителә. Китаптан күренеүенсә, Ә.Вәлиди уны командировкаларҙа саҡта урындағы кешеләрҙән ишеткән хикәйәттәрҙән алған тәьҫирҙәренән һуң яҙған. Ҡайһы бер ваҡыт, шул осорҙағы айырым шәхестәр тураһында һүҙ йөрөткәндә, уларҙың тоҡомдары әле лә унда йәшәүҙәрен әйтеп үтә ул. Автор һис шикһеҙ Коканд ханлығының һуңғы ханы хаҡында киң таралған ҡулъяҙма әҫәрҙәрҙе лә ҡулланған. Хоҙаяр хан 1845 йылда тәхеткә ултыра һәм утыҙ йыл тирәһе хакимлыҡ итә. Ул хакимлыҡ иткән осорҙа бер нисә тапҡыр

восстаниелар күтәрелгән. Рәсәй генералы Кауфман, хандың ошондай ауыр хәленән файҙаланып, уға пенсия вәғәҙә итә һәм ғаиләһе менән бергә Ырымбурға ебәрә. Әммә тиҙҙән Хоҙаяр хан Ырғыҙ ырыуынан булған ҡаҙаҡ Азбиргән Мәинбәсов ярҙамы менән чавдар ырыуы төрөкмәндәренә (Хиуа ханлығы) ҡаса. Һуңынан Иран, Афғанстан һәм Һиндостан аша Мәккәгә барып етә. Ғүмеренең һуңғы йылдарын Афғанстанда Курух ауылында Дар әл-Әмин ишан ханакаһында уҙғара. Ә.Вәлиди хикәйәһен тамамлап, былай тип яҙа: "Уның дәүләтендә хөкөм һөргән генералдар ҡайҙа күмелеүе тураһында уйланмайҙар ҙа". Әммә автор фекеренсә, хандың рухы өсөн иң ауыры – үҙ халҡының онотоуылыр[196].

Беренсе командировкаһы ваҡытында Ә.Вәлиди төрөк ғалимы Фуад Кепрюлюға хат яҙа. Был хаҡта "Төрк әҙәбиәтендә тәүге суфыйҙар" тигән монографияла әйтеп үтелә. Бер нисә урында Ф.Кепрюлю ошо хатҡа һылтанма яһай һәм унан мәғлүмәттәр килтерә. Мәҫәлән, ул былай тип яҙа: Беренсе донъя һуғышы башланмаҫ борон бер йыл алдан Рәсәй фәнни йәмғиәттәре тарафынан Төрөкмәнстанға тарихи тикшеренеүҙәр яһарға ебәрелгән тарихсы Зәки Вәлиди Туған сығышы менән Кокандтан булған һәм Әхмәт Йәсәүигә оҡшатып "Диуан-и хикмәт" ижад иткән Гюльдесте исемле ҙур шағир тураһында уға хәбәр итә[197].

Ә.Вәлиди аша ул профессор А.Н.Самойловичтың XIV быуатта Египетта Ҡотб исемле шағир тарафынан уйғырса яҙылған "Хөсрәү вә Ширин"ды табыуын ишетә[198]. Хатта А.Н.Самойловичтың Мәхтүмҡолой шиғырҙарының тулы йыйынтығын баҫмаға әҙерләүе тураһында ла мәғлүмәт бар[199]. Әхмәтзәки Вәлиди Төркиәгә килгәс, Фуад Кепрюлю менән дуҫлаша[200].

"Төрк йорто" исемле төрөк журналы, Рәсәйҙәге төрки телле газеталарға нигеҙләнеп, Ә.Вәлидиҙең Урта Азияға яһаған беренсе сәйәхәте тураһында мәғлүмәт урынлаштырыуын да әйтеп үтергә кәрәк. Журнал үҙенең уҡыусыларына был хаҡта ҡыуаныс менән, ниһайәт, төркиҙәр араһында Европа кимәленә ярашлы тикшеренеүселәр барлыҡҡа килә башланы тип хәбәр итә. Баҫма уны Урта Азияға тарихи тикшеренеүҙәр өсөн ебәрелгән Ҡазан университеты эргәһендәге Археология, тарих һәм этнография йәмғиәте ағзаһы, "йәш тарихсы" тип атай[201].

"Хәтирәләр"ҙәге мәғлүмәттәр буйынса, Ә.Вәлиди командировкалар ваҡытында Урта Азиялағы төрки халыҡтарының этнографияһы менән ҡыҙыҡһынған[202]. Үрҙә ҡарап үтелгән ҡайһы бер мәҡәләләр уның һүҙҙәрен раҫлай. Бынан тыш, В.В.Бартольдҡа 1925 йылдың 14 апрелендә яҙған хатында ул Зеравшан һәм Хорезм үҙәндәрендә 1920–1923 йылдарҙа яһаған этнографик күҙәтеүҙәре тураһында ла телгә ала. Уның хатында этногенез, фольклор, халыҡ медицинаһы, урындағы төркиҙәрҙең ырымдары

тураһында мәғлүмәттәр килтерелә. Бакшиҙарҙың алғыштарын һәм ҡарғыштарын элекке Аференкен түмәненең Ҡара-һыу ҡышлаҡтарына һәм Митән өйәҙенең Тупар ҡышлағында яҙып алыуы хаҡында ла Ә.Вәлиди билдәләп үтә. Ул шулай уҡ үҙ ҡатынының төрки ҡатын-ҡыҙҙары араһында яһаған күҙәтеүҙәренә һылтанма яһай, урындағы телдәр араһында айырманы күрһәтеп үтә[203].

Шулай итеп, революцияға тиклемге осорҙа Вәлиди Урта Азияны өйрәнеү менән бик әүҙем шөғөлләнә. Был региондың тарихы һәм мәҙәниәте буйынса тиҫтәләгән хеҙмәт яҙа һәм улар уның артабанғы ғилми эшмәкәрлегендә ҙур роль уйнайҙар. Тап ошо осорҙа ул Рәсәйҙең күренекле шәрҡиәтселәре һәм Төркиәлә үҙенең буласаҡ арҡадашы һәм коллегаһы Фуат Кепрюлю менән хат аша таныша.

---

[1] *Тоган З.В.* Воспоминания. Ч.1. Уфа, 1994. С.92.
[2] Шунда уҡ.
[3] Шунда уҡ.
[4] *Вәлиди Ә.* Төрк вә татар тарихы. Казан, 1912. 3-сө б.
[5] Шунда уҡ. 4–6-сы бб.
[6] *Вәлиди Ә.* Төрк вә татар тарихы. Казан, 1912. 8-се б.
[7] *Туған Ә.В.* Әҫәрҙәр: 1917 йылға ҡәҙәр яҙылған әҫәрҙәре. Өфө, 1996. 77-се б.
[8] Шунда уҡ.79-сы б.
[9] Шунда уҡ. 13-сө б.
[10] *Вәлиди Ә.* Төрк вә татар тарихы. Казан, 1912. 13-сө б.
[11] Шунда уҡ. 7-се б.
[12] Шунда уҡ. 3-сө б.
[13] Шунда уҡ.
[14] *Вәлиди Ә.* Төрк вә татар тарихы. 280-се б.
[15] Шунда уҡ. 14–15-се бб.
[16] Шунда уҡ. 15-се б.
[17] Шунда уҡ.
[18] Шунда уҡ. 15-се б.
[19] Шунда уҡ. 66-сы б.
[20] Шунда уҡ. 53-сө б.
[21] *Вәлиди Ә.* Төрк вә татар тарихы. 130-сы б.
[22] *Саидбаев Т.С.* Ислам и общество: опыт историко-социологического исследования. М., 1978. С.27–28.
[23] Морат Рәмзи 1864 йылда Өфө губернаһында Минзәлә өйәҙе Бүләр волосының Әлмәт ауылында тыуған. Ҡарағыҙ: *Насыров Илшат.* Тарихсы Морат Рәмзи // Ватандаш. 1999. №4. 146–147-се бб.

[24] *Насыров Илшат.* Тарихсы Морат Рәмзи // Ватандаш. 1999. №4. 149–150-се бб.

[25] *Тоган З.В.* Воспоминания. Ч.1. С.153.

[26] *Бехбудий Махмудхужа.* Танланган асарлар (Әҫәрҙәр йыйынтығы). Тошкент, 1997. 154–156-чи бб.

[27] *Вәлиди Ә.* Төрк вә татар тарихы. Казан, 1912. 193-сө б.

[28] Шунда уҡ. 237-се б.

[29] Шунда уҡ.

[30] *Шәрәф Г.* Төрк-татар тарихы. Зәки Вәлиди әфәнденең хезмәте // Шура. 1916. №13. 331-се б.

[31] Шунда уҡ.

[32] Шунда уҡ.

[33] *Тоган.З.В.* Воспоминания. Ч.1. С.155.

[34] Шунда уҡ. 93-сө б.

[35] Шунда уҡ. 97-се б.

[36] Шунда уҡ. 2-се бит.

[37] Рәсәй Фәндәр Академияһы Өфө Фәнни Үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Ҡульяҙмалар һәм иҫке баҫма китаптар фондындағы А–59 номерлы документ.

[38] *Гобәйдуллин Газиз.* Татарларда сыйныфлар тарихы өчен материаллар // Тарихи сахифәләр ачылганда: сайланма хезмәтләр. Казан, 1989. 196-сы б.

[39] *Губайдуллин Г.С.* Развитие исторической литературы у тюрко-татарских народов // Первый Всесоюзный тюркологический съезд. 26 февраля – 5 марта 1926 г. (Стенографический отчет). Баку, 1926. С.47–48.; Ә.Вәлидигә был сығыш тураһында тәүгеләрҙән булып В.В.Бартольд 1926 йылдың 21 сентябрендә яҙған хатында хәбәр итә: "Бөтә сығыштар һәм бәхәстәр тураһында отчеттар, шул иҫәптән минең сығышым да баҫылған "Беренсе бөтә союз тюркология съезы" китабы Бакуҙа донъя күрҙе. Миңә уның 10 оттисктарын бирҙеләр, мин, әлбиттә, уларҙың береһен институтҡа ебәрәм. Ғөбәйҙуллиндың "Төрки-татар халыҡтарының тарихи әҙәбиәтенең үҫеүе" исемле сығышында Һеҙгә һәм Һеҙҙең эштәрегеҙгә байтаҡ урын бирелгән. Был китап Истанбулда К.Задала һәм институтта булыр тип ышанам" (Письма академика В.В.Бартольда // Ватандаш. 2000. №6. С.117–118.).

[40] Революция йылдарында Ә.Вәлиди Ҡазандағы "Касимиә" мәҙрәсәһен тамамлауы тураһындағы таныҡлығын юғалта һәм 1931 йылда Төркиәлә ул кәрәк булғас, Рәсәйҙән килгән эмигрант-шаһиттар һәм башҡа аргументтар менән бер рәттән ул шунда эшләгән сағында яҙған "Төрк вә татар тарихы" китабын да күрһәтә. 1931 йылдың 1 сентябрендә Истанбул университетының әҙәбиәт факультеты деканатына яҙылған был хат ғалимдың Истанбулдағы шәхси архивында һаҡлана.

[41] *Вәлиди Ә.* Бөржән башҡортлары арасында // Шура. 1913. №19. 587-се б.

[42] Шунда уҡ

[43] Шунда уҡ.

[44] Шунда уҡ

[45] Тикшеренеүсе Р.Йәнғужин мәғлүмәттәре буйынса, XVIII быуат аҙаҡтарында – XIX быуат баштарында Башҡортостанда өс район хужалығы төҙөлә: 1) игенселек (төньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш өлкәнең төп өлөшө); 2) ултыраҡ малсылыҡ-игенселек (игенселек менән шөғөлләнгән район менән туранан-тура сиктәш булған территория); 3) аҙ үҫешкән игенселек малсылыҡ (Өфө ҡалаһынан төньяҡҡа, төнъяҡ-көнбайышҡа, төнъяҡ-көнсығышҡа киткән территория) һәм ярым күсмә (Урал аръяғы, көньяҡ-көнсығыш, көньяҡ, көньяҡ-көнбайыш, төнъяҡ-көнсығыш һәм үҙәк Башҡортостандың төп өлөшө). Ҡарағыҙ: *Янгузин Р.* Хозяйство и социальная структура башкирского народа в конце XVIII – начале XIX в. Уфа, 1998. С.233; *Шул уҡ.* Хозяйственное районирование Башкирии в конце XVIII – начале XIX вв. // Второй международный конгресс этнографов и антропологов: Резюме докладов и сообщений. Ч.1. Уфа, 1997. С.214–215.

[46] *Янгузин Р.* Хозяйство и социальная структура башкирского народа в конце XVIII – начале XIX вв. С.234.

[47] *Вәлиди Ә.* Бөржән башҡортлары арасында // Шура. 1913. №19. 587-се б.

[48] Шунда уҡ. №19. 587-се б.; 22. 682-се б.

[49] Шунда уҡ. №22. 617-се б.

[50] *Тоган З.В.* Воспоминания. Ч.1. С.135.

[51] *Вәлиди Ә.* Бөржән башҡортлары арасында // Шура. 1913. №19. 588-се б.

[52] Шунда уҡ. №19. 589-сы б.

[53] *Дмитриев Н.К.* Грамматическая терминология в учебниках родного языка. М., 1955. С.59.

[54] *Вәлиди Ә.* Бөржән башҡортлары арасында // Шура. 1913. №19. 589-сы б.

[55] Шунда уҡ. 589-сы б.

[56] Шунда уҡ.

[57] *Ҡолшәрипов М.* Башҡорт-венгр этник бәйләнештәре хаҡында // Ағиҙел. 1988. 4. 128-се б.

[58] *Вәлиди Ә.* Бөржән башҡортлары арасында // Шура. 1913. №20. 618-се б.

[59] *Ғәлин С.* Зәки Вәлидиҙең тәүге фольклористик әҫәрҙәре // Йәшлек. 1991. 8 август.

[60] *Рыбаков С.* Музыка и песни уральских мусульман. СПб., 1897. С.121.

[61] Шунда уҡ. 121-се б.

[62] *Вәлиди Ә.* Бөржән башҡортлары арасында // Шура. 1913. №21. 649-сы б.

[63] Шунда уҡ.

[64] *Ҡормаши С.* Идараға мәктүб // Шура. 1913. №23.

[65] Шунда уҡ.

[66] *Ғәбитов Х.* Башҡортларның кәмеүенең сәбәбе ни? // Шура. 1913. №24. 746-сы б.

[67] Шунда уҡ

[68] Шунда уҡ. 747-се б.

[69] Шунда уҡ.

[70] Шунда уҡ.

[71] Шунда уҡ.

[72] Шунда уҡ.

[73] Был мәсьәләләр бик ентекле рәүештә *Б.Х Юлдашбаевтың* "История формирования башкирской нации (дооктябрьский период)" исемле 1972 йылда Өфөлә донъя күргән монографияһында ҡарала (С.59–74). Тикшеренеүсе фекере буйынса, башҡорттар ул осорҙа бөтөп барған халыҡтар иҫәбенә инмәгән.

[74] *Юлдашбаев Б.Х.* История формирования башкирской нации (дооктябрьский период). Уфа, 1972. С.65.

[75] *Тоган З.В.* Воспоминания . Ч.1. С.135.

[76] Очерки по истории Башкирской АССР. Т.1, Ч.2. Уфа, 1959. С.469.

[77] *Филоненко В.* Башкиры. Уфа, 1915. С.20.

[78] *Туған Ә.В.* Әҫәрҙәр: 1917 йылға ҡәҙәр яҙылған әҫәрҙәре. Өфө, 1996. 134-се б.

[79] Шунда уҡ.

[80] Шунда уҡ. 133-сө б.

[81] Шунда уҡ. 136-сы б.; С.В.Чичеринаның " О приволжских инородцах и современном значении системы Н.И.Ильминского" (СПб., 1906) тигән сығышында былай тип билдәләп үтелә: "Тәү сиратта татар йоғонтоһона тулыһынса тип әйтерлек үҙ телдәрен оноҡкан башҡорттар, уларҙан ҡала ҡырғыҙҙар бирелгән" (С.21).

Башҡорттарҙың диндәре хаҡында улар башта мәжүси булғандар – тәбиғәткә табынғандар, һуңынан XIII быуат миләдиҙең баштарында ислам динен ҡабул иткәндәр, ти. Һәм шуға Минзәлә өйәҙе Зәй һыуы буйындағы Хөсәйенбәк тигән кешенең (1227 м – 623 һ. йылда вафат булған) ҡәберен дәлил итеп күрһәтә.

Башҡорттарҙың боронғо тарихы бүлегендә байтаҡ фараздарға сумғылағас, былар башта болғар, һуңынан Алтын Урҙа, Себер, Ҡазан

хандары, нуғайҙар ҡулы аҫтында торғандар, ти һәм рустарға буйһоноу ваҡытын дөрөҫ кенә билдәләй алмай. Френдың хеҙмәтенә таяныл, бәлки, 1557 йылда йәки унан да һуңыраҡ йылдарҙа булғандыр, тип уйлай.

Бына шуларҙы уҡығас, ниңә һуң был башҡорт тарихы менән артығыраҡ компетентлы кешеләр шөғөлләнмәйҙәр, ни өсөн был мәсьәлә менән иҫке һәм сәйнәлеп бөткән эбер-себер һүҙҙәрҙе һөйләп тора, етмәһә, шуларҙан әүһәләп үҙҙәренән әллә ниндәй бүре баштары сығара торған кешеләр генә сыуалалар, тиәһе килә. Дөрөҫ, автор тарафынан ҡуҙғатылған был мәсьәләләр бик ауыр, ләкин ни ҡәҙәре ауыр булһа ла, был ҡәҙәр ҡараңғыға, был ҡәҙәр хыялдарға сумдырырлыҡ түгел. Урал тауҙары тирәһендә ногул, остяк, ҡалмыҡтарҙың тороуы әле бик яңы ғына эш. Был мәсьәләне бик өрөп ҡабартып алып китеүсе Флоренский менән башҡорттарҙың боронғо телдәре һәм унын сағатайсаға мөнәсәбәте хаҡында һөйләүсе Өмөтбаевтарҙың һүҙҙәре "фәнни гипотеза" тип әйтерлек нәмәләр түгел[1]. Йәнә башҡорттарҙың Иртыш, Тубыл яҡтарында кимәк тигән төркиҙәр менән сиктәш булып тереклек итеүҙәре Иран тарихсыһы Гардизиның "Зәйнел-әхбәр" тигән әҫәрендә күрһәтелгән. Китаптың был ерҙәре рус фәнни әҙәбиәтендә лә тексы һәм тәржемәһе менән нәшер ителде[2]. Көнбайыштағы башҡорттар менән шулай уҡ көнбайыштағы мажарҙар араһындағы айырма ла әҙәбиәттә яҙылып үтте. Өфө – Ырымбур башҡорт тарихтары менән шөғөлләнгән кешеләр ғөмүмән Көнсығыш Рәсәй, Алтын Урҙа һәм уны тәшкил иткән ваҡ ханлыҡтарҙың тарихы менән был яҡтарҙа ул боронғо заманда таралған телдең ядкәрҙәре, хатта ғөмүмән был ерҙәрҙең археологияһы менән таныш булмаған заттар булып килделәр. Филоненко әфәнде рәсми шәрҡиәтселәр араһында һаналырға хаҡы булһа ла, беҙ уны шәреҡ телдәрен яҡшы белмәй булһа кәрәк тип уйлайбыҙ[3]. Ошо йәһәттән ул элекке иптәштәре кеүек башҡорт һүҙе хаҡында хыялдар, башҡорттарҙың ислам динен ҡабул итеүҙәре, уларҙың нуғайҙарға мөнәсәбәте хаҡында әллә ниндәй "тәрән" фекерҙәргә сума. Был әфәнделәрҙең ҡайһы саҡта унан-бынан соҡоштороп бер әҙәм башы (ҡайһы ваҡыт әҙәм башы булмаҫҡа ла мөмкин) алып ҡайталар ҙа шуны йә башҡорт башы, йә мишәр башы тип фараз итеп тәрән уйҙарға керәләр һәм хәҙер уны мажар баштары менән тиңләргә башлайҙар. Йәки бәғзән, мәҫәлән, Шишмә, йәки Зәй буйындағы кеүек бәғзе ҡәберҙәрҙе табалар ҙа шул башҡорттарға килгән боронғо мосолман миссионерҙары, уларҙың мәркәздәре (стандары) тип ҡаҙынырға башлайҙар. Хәлбүки Өфө виләйәттәрендә ундай иҫке ҡәберҙәр байтаҡ бар. Тик күптәренең таштары Шишмә таштары кеүек түҙем булмағанлыҡтан, яҙыуҙары юйылған. Нуғай мырҙаларының тормошо, башҡорттарға, Ҡазан һәм Себер хандарына, һуңынан Рәсәйгә мөнәсәбәттәре тураһында Вельяминов-

Зернов, Карпов рус тарихсылары тигән үҙҙәренең хеҙмәттәрендә яҙып сыҡтылар. Улар хаҡында башҡорттар араһында йөрөгән шәжәрәләрҙә лә байтаҡ мәғлүмәт бар. "Тормош"та ошо шәжәрәләр хаҡында бәғзе нәмәләр яҙырға иҫәбебеҙ бар. Шунда был мәсьәләне ҡуҙғатырға һәм иншалла күренер ки, был хаҡта ла хыялдарға сумырлыҡ урын юҡ. Бындай уңайһыҙ, ауыр мәсьәләләрҙә Филоненко әфәнде үҙе компетентлы булмағас, ул хаҡтарҙа шул үзенең һәм Волков йыйынтығына йыйылған мәғлүмәтте генә ҡушыу менән (суммировать) генә ҡәнәғәтләнһә, ул тураларҙа үҙемдеке тип артыҡ бер фекерҙәр ырғытмаған булһа, тағы яҡшы булыр ине.

Автор Волков йыйынтығын нисек башҡарыуы һәм уның үҙемдеке тип индергән фекерҙәре хаҡында әйтергә теләгән һүҙебеҙ шул.

Тарихи мәғлүмәттәре (данныйҙары) күп булған һуңғы дәүерҙәр хаҡында автор эшен бик яҡшы үтәгән, хатта башҡорт фетнәләренең мәмләкәт идараһындағы низамһыҙлыҡтарынан килеп сығыуы, унда боронғо дәүләтте ҡайтарыу фекерҙәре бәғзе бер кешеләрҙең телдәрендә һөйләнгән һүҙҙәр генә булыуы башҡорт ерҙәренә рустарҙы ултыртыу мәсьәләләре хаҡында Волковтан алып һәм үҙенән ҡушып килтергән дәлилдәре бөтөнләй яңы нәмәләр. Башҡорттарҙың хәҙерге тормоштары, татарлашыуҙары хаҡында әйткән һүҙҙәре лә бер ҙә үлсәүҙән тыш түгел. Китаптың ҡиммәтле урындары, әлбиттә, ошо ерҙәрелер. Ләкин был бүлектәргә генә ҡарап беҙ был китапты башҡорттоң фәнни тарихы өлкәһендә бер аҙым алға китеү (шаг вперед) тип әйтә алмайбыҙ. Был китаптың шул юғарыла әйткәнебеҙсә ҡәҙерлелеге лә Волков йыйынтығы кеүек ҙур китапты, борон сығып килгән, ләкин нөсхәләре ҡалмаған әҫәрҙәрҙе ғөмүмән, халыҡ ҡулланыуына ҡуя алыу, китапҡа ярлы ҡалала был мәсьәләләрҙе тикшерә алыуға юл асыуҙалыр.

1915 йылдың 28 апреле,
Стәрлетамаҡ.

---

[1] Флоренскийҙың "Башҡорттарҙың ере һәм башҡорттар" тип яҙған әҫәре (Вестник Европы. 1874. №12) һис бер фәнни әҫәр түгел, бер әҙәби генә әҫәрҙер. Ул үҙе лә фәнни хеҙмәт яҙам тип яҙмаған. Өмөтбаев иһә үҙенең "Ядкәр" исемендәге татарса һәм 1883 йылғы Өфөнөң белешмә китабында русса яҙған мәҡәләләре менән үҙенең был мәсьәләләр хаҡында һәр төрлө хыялдарға ышана торған кеше икәнлеген күрһәтә. Быларҙың әҫәрҙәрен фәнни гипотеза тип түгел, шәхси бер фекер итеп килтерергә лә тартынырға тейеш.

[2] Ҡара: Записки Импер. Акад. наук по историко-филол. отд., 1897. Т.I, 4. Бартольдтың "Урта Азияға фәнни мәҡсүт менән сәфәренең хисабы" тигән мәҡәләһе.

[3] Мәҫ., ул 20-се биттә "уба" кәлимәһе, 21-се биттә "ҡыс" ("ҡасаҡ") һәм "абышҡа" кәлимәләренең мәғәнәләрен белмәй, хәлбуки был һүҙҙәр авторҙың ҡулындағы Будагов һәм Радлов словарында ла бар.

[4] Мишәрҙәрҙең кантондары Ырымбур менән Һарытау губерналарында булған.

[5] Был башҡорттар электән үк башҡа башҡорттарҙан айырылыбыраҡ ситтә ҡалғандар. Улар хәҙерге Уральск ҡалаһынан түбәнерәк казактар араһында күсеп йөрөй торғас, бер ваҡыт улар менән килешмәйенсә, Һарытау губернаһына күскәндәр. Улар Быҙаулыҡ өйәҙендәге һеңрән башҡорттары менән бергә 9 кантон булып торҙолар. Улар 1753 йылда барыһы 762 йән булған. Һуңғы заманда улар Уральск һәм Һарытау яғынан хәҙерге Һамар губернаһында Урал өлкәһе сигендә Кәмәлек һәм Ырғыҙ буйҙарында Йәмәләй һәм Күзәбай исемле ике волос булып ултыралар һәм Һамар губернаһы Николай (Пугачев) өйәҙенә ҡарайҙар. Башҡорт ревкомының рәйесе иптәш Харис Йомағолов шул һеңрән башҡорттарынан. Ул Быҙаулыҡ өйәҙенең Люйюм волосында тыуған. Хәҙерге хөкүмәт ағзаһы Яхъя Салихов та уларҙан сыҡҡан.

[6] Йәш тарихсыбыҙ З.Вәлиди йәнәптәренең Башҡортостанда булыуы мөнсәбәте менән.

Әхмәтзәки Вәлиди

## БАШҠОРТТАРҘЫҢ БОРОНҒО ҒӘСКӘРҘӘРЕ ХАҠЫНДА

Башҡорттарҙың ысын армия булып хеҙмәт итеүе 1798 йылдан башлана. Ләкин башҡорттар борон-борондан уҡ ғәскәри халыҡ булғанлыҡтан, Рәсәй хөкүмәте ҡулына инеү менән үҙ ихтыярҙары менән ғәскәри хеҙмәткә барған. Башҡорт ғәскәре хаҡында беренсе хәбәр 1608 йылда күренә. 1676 йыл бер мең тирәһе башҡорт Ҡырым һуғышына һәм төрлө ваҡыттарҙа поляктарға ҡаршы барғандар. Был хеҙмәттәрҙең барыһына ла теләгән кешеләр барған, йәғни ихтыярлы эш булған. 1754 йылдың 14 мартынан башлап Рәсәй хөкүмәте башҡорттарҙан кәрәк саҡта ғәскәр алырға әмер сығарған һәм шул ваҡыттан башлап 1797 йылға тиклем линия хеҙмәтенә (йәғни дәүләт сиктәрендәге крепостарҙағы хеҙмәткә) барғандар. 1755 йыл хеҙмәттә 1969 кеше булған. 1754 йылға ҡәҙәр хеҙмәттәре өсөн жалование алмағандар. Тик ҡылған эштәренә ҡарап наградаға ғына алғандар, әммә 1854 йылдан 1898 йылға хеҙмәт итеүселәргә жалование, фураж һәм провиант бирелгән. Башҡорттарҙың 1898 йылға тиклемге ғәскәри хеҙмәтен беренсе дәүер тип әйтергә була. Ул саҡта башҡорттар һәммә ғәскәр тәртибе эштәрендә үҙе теләгән рәүештә булған, Рәсәйҙең

регуляр армияһы кеүек ғөмүми ҡанундарға ҡарамаған. Хеҙмәткә теләп йәки хөкүмәт әмере буйынса барыусыларҙың барыһы ла үҙҙәре теләгән кешене баш итеп һайлап, үҙҙәренсә эш иткәндәр.

1798 йылдан башлап 1863 йылдың 14 майына тиклем башҡорттар ярым регуляр (иррегуляр) ғәскәрлек хеҙмәтенә мәжбүри рәүештә индерелгәндәр. Был хеҙмәт хәҙерге казактарҙың хеҙмәте кеүек булған. Башҡорттар менән бергә күрше йәшәгән мишәрҙәр ҙә был хеҙмәткә йәлеп ителгән. 1798 йылда башҡорттарҙан 4 513 кеше, мишәрҙәрҙән 1 300 кеше хеҙмәт итергә тейеш булған. 17 йәштән 45 йәшкә саҡлы кешеләр һәммә хеҙмәттә хисапланғандар, тик эшкә ярамаған ҡарттар ғына хеҙмәттән ҡотолғандар, барыһы дүрт өйгә бер һалдат тура килгән; хеҙмәт өсөн айына бер һум түләү алғандар, ләкин барлыҡ кейем, ат, эйәр-өпсөн, аҙыҡ – барыһы ла үҙ елкәләренә йөкмәтелгән. Шулай ҙа походҡа киткән саҡта хеҙмәт иткән урындарынан йөҙ саҡрым киткәс, аттарына бесән, үҙҙәренә тамаҡ бирелгән.

Һәр полктың тыуы булған. Кейемдәре: аҡ яға, күк буҫтауҙан сәкмән, ҡыҙыл лампаслы күк салбар. Баштарында осло аҡ кейеҙ башлыҡ булған, сите бөгөлөп өҫкә күтәрелгән, маңлайынан һәм артынан йырыҡлы; ҡайыш, билбау һәм күк портупея быуғандар, патрон ҡурйындары елкәнән уң яҡ ҡултыҡ аҫтына аҫылған, итектәре йылҡы тиреһенән булған. Ҡоралдары мылтыҡ, һәр кешенең ике револьвер, хәнйәр, һөңгө, ҡылыс, уҡ, йәйә үтмәҫкә һарайта кейгәндәр. Ҡорал, кейемдәре бик яҡшы, ләкин ауыр булған. Башҡорт ғәскәре бигерәк тә ат өҫтөндә оҫта йөрөүе, ҡылыс менән маһир эш ҡылыуы, уҡ-мылтыҡтан мәргән атыуы, һуғыш ҡырында бер-береһен дошманға бирмәүе, берҙәм, батыр һәм ғәййәр булыуы менән шөһрәт алған.

**Ғәскәр заманында илдең төҙөлөшө: кантондар.** Башҡорттар 11 кантон, мишәрҙәр 5 кантон булған. Казак кантондары өҫтөнән ғәскәри идара һәм атамандары булған, әммә башҡорттарҙа, мишәрҙәрҙә былай түгел, сөнки Рәсәй хөкүмәте башҡорттарҙың барыһын бер ергә йыя торған мәхкәмә яһауҙан ҡурҡҡан, уларҙы бик ныҡ быуып тотҡан. Шундай уҡ һуғыш сафындағы башҡорт ғәскәрҙәренә рустарҙағы кеүек бригада, дивизиялар булып бергә йыйылырға рөхсәт ителмәй. Һәр полк үҙ башына төрлө яҡҡа ҡуйылған. 1802 йыл башҡорт ғәскәрҙәренең һаны 5519 кеше булған. Бөтә ғәскәрҙәр ҙә тик мәмләкәттең сиктәрен һаҡлау (линия) хеҙмәтендә ҡулланылған. 1790 йылдан башлап башҡорт ерендәге типтәрҙәр ҙә хеҙмәткә алынғандар. Ләкин уларҙың үҙ исемдәре менән полктары булмаған, улар барыһы ике полк булған. Шунан артыҡ алынмаған һәм Өфө казак полкы тип аталғандар. Офицерҙары Дон казактарынан булған һәм Ырымбур линия начальнигына буйһонғандар. Был ике полк типтәрҙәрҙең үҙҙәренән йыйылған аҡсаға тотолған. 1802 йыл типтәр полктарында 1030 кеше була.

Башҡорттарға килгәндә, уларҙың етәкселәре электән үк үҙҙәренән булып килгән өсөн, Рәсәй хөкүмәте был ғәҙәтте боҙа алмаған. Башҡорттарҙан командирҙарҙы ҡуйғандар. Командирҙар казак ғәскәрҙәре кеүек йөҙ башы (сотник), хорунжий, есаул тигән исемдәр менән йөрөгәндәр. 1811 йылдан башҡорт ғәскәрҙәре сит дәүләттәр менән һуғышҡа ебәрелә башлағандар. 1811 йылда сит илдә хеҙмәт итеү өсөн ике полк ебәрелгән, 1812 йыл француз һуғышына башҡорттарҙан егерме полк төҙөлә һәм улар 1813–1814 йылдарҙа Парижға Наполеонға ҡаршы барғандар. Париж ҡалаһына башлап барып инеүселәр ҙә башҡорттар булған. Был һуғышта башҡорттар ғәжәп күп батырлыҡ күрһәткән. Ләкин француз һуғышы бөткәс, рустар башҡорт полктарын йәнә кәметкән. Мохтаж сағында башҡортҡа күп вәғәҙәләр биреп, кеше төҫлө итеп ҡарай, әммә мохтажлыҡ үткәс тә бөйөргә таянып башҡортҡа илтифат итмәү, уны йәберләү, ҡыҫыу рустарҙың ғәҙәте булған. 1822 йыл Ырымбур хәрби губернаторы башҡорттан 15 полк, мишәрҙәрҙән 3 полк яһайыҡ тип проект индерһә лә, ул ғәмәлгә ашмай, башҡорттарҙан улай күп полктар төҙөмәйенсә хеҙмәткә ҡуйырға булғандар. 1828–1829 йыл төрөк һуғышы башланғас, башҡорт полктарын йәнә күбәйтеп үҫтерергә булғандар, ләкин унда ла ни бары ике полк ҡына ебәргәндәр, башҡаларын линия хеҙмәтендә тотҡандар. 1830 йылдарҙа башҡорт ғәскәрен бөтөрөү уйына килгәндәр. Башҡорттарҙың ғәскәр булып тороуы Рәсәй өсөн хәүефле тигән уйҙы тотҡандар. Ырымбур губернаторы Сухожилин менән Перовский шул фекерҙе ҡеүәтләп, ул саҡтағы батшаға ғариза биргәндәр һәм 1835 йыл ике типтәр полкы бөрәүгә ҡалдырылған һәм беренсе Ырымбур казак полкы тип аталған, 1844 йыл Өфө полкы тип кенә аталған, ләкин 1845 йылда уны ла бөтөргәндәр. Башҡорт ғәскәрҙәрен шулай итеп әкренләп кәметергә булғандар. Барыһын бер юлы бөтөрһәк, башҡорттар ҡуҙғалыр тигәндәр. Ул саҡта Башҡортостанда рус аҙ, башҡорт күп булғас, был хәүеф бигерәк тә ҡеүәтле булған. 1825 йыл башҡорттар һәм мишәрҙәр 345493 йән, 1835 йыл башҡорттар менән мишәрҙәр (232000) типтәрҙәр менән 333000 йән ине. Рустар Ырымбур, Өфө яҡтарында барыһы 72000 генә ине. Башҡорт ғәскәрен кәметеү, унын урынына рус ғәскәрен күбәйтеү, уны ҡеүәтләп Сухожилин 1836 йылда дүрт мәддәле проект индерҙе: 1) биш мишәр кантонынан[4] бер полк ҡына яһау; 2) 9, 2, 5-се кантондар кеүек казактарға сиктәш башҡорт кантондарын һәм 4 кандондың бер өлөшөн генә ғәскәр рәүешендә ҡалдырыу; 3) 4, 6, 5 кантондарҙы Ырымбурға ҡаратыу, әммә үҙ ихтиярҙары менән Һарытау яғына күсеп киткән 9 кантон башҡорттарын[5] Урал казак ғәскәренә ҡаратыу; 4) башҡа башҡорттарҙың һәммәһен дә ғәскәрлектән сығарып, әкренләп ҡаҙна крәҫтиәндәре хәленә төшөрөргә кәрәк. Ырымбур губернаторы Эссен рәйеслегендә махсус комиссия төҙөп, проектты тикшереп, ҡабул иттеләр һәм уны үткәреү өсөн комиссия ошо

сараларҙы ҡабул итте: 1) Башҡорттарҙы алдап, йыуатып тотоу, уларҙың ғәскәрҙәре бөтөрөлмәгән кеүек күрһәтеү өсөн уларға башындағы командиры рус генералы булған хәрби идара асыу (Ҡарауанһарай һалып, башҡорт мәхкәмәһен шунда яһаныулар); 2) Башҡорттарҙы почта хеҙмәтен йөрөтөү өсөн ҡулланыу; 3) Кантондарҙы әкренләп хеҙмәттән сығарыу, эште улар ҡулынан алып өйәҙҙәргә биреү; 4) Яндарына рустарҙы ултыртырға мөмкин булһын өсөн башҡорттарға ер һатырға ирек биреү; 5) Кантондарҙы волосҡа бүлеү һәм волостарҙы башта йорт исеме менән йөрөтөү; 6) Дүрт уҫал башҡорт полкын ситтә тотоу; 7) Башҡорттарҙың башында булған түрә һәм башлыҡтарын әкренләп бөтөрөү; 8) Башҡорттарҙы алдау өсөн аҙлап алтын, көмөш миҙалдар, аҡса, бүләктәр һәм аҙыраҡ пенсиялар биреү; 9) Төрлө яҡшы хеҙмәттәр менән кантондарҙы урындарынан алыу.

Был эштәрҙе сер итеп тоторға булһалар ҙа, сер булып ҡала алманы, 1834 йыл башҡорттар, беҙҙе рустар крәҫтиән итеп ҡалдыра икән тип, фетнә күтәрҙе, ләкин фетнә ҙур көс менән баҫтырылды, һуғыш хәленә барып етмәне. Халыҡ араһында рустар суҡындыра икән тип, рустарҙың иген һалыу өсөн орлоҡ һаҡларға мәгәзәй һалырға ҡушыуын да, Перовскийҙың ҡушыуы буйынса иген үҫтертеүгә тырышыуын да бер хәйлә тип ҡарап ғауғаланды. Ләкин рустар быға ҡараманы, үҙенең көсөнә таянып комиссияның ҡарарҙарын үткәрә башланы. Ғәскәр утыҙ процентҡа тиклем кәметелде, башҡорт кантондары “служебный” һәм “не служебный” тигән ике бүлеккә бүленде. Һуңғыларҙан ғәскәр алмай башланылар. 1836 йылдың 30 майында, Башҡорт-мишәр ғәскәре идараһының ваҡытлы штаты тәғәйенләнеп, башҡорт-мишәр мәхкәмәһе асылды, был мәхкәмә башында тороусы кеше башҡорт ғәскәренең командующие тип аталып, дивизия начальнигы хоҡуғында ине. Унын канцелярияһы, адъютанттары төҙөлдө, кантон начальнигы һәм ярҙамсыһы өҫтөнә попечительдәр тәғәйенләнде, улар штатлы офицерҙар рәтенән сығып, кантон начальниктарын һәм йорт старшиналарын тикшереп тора ине. Тағы кантондарҙа суд эштәрен тикшереп тороуҙа башҡорттарға ярҙам өсөн тип стряпчиҙар ҡуйылды. 1840 йыл Башҡорт-мишәр идараһы тағы киң штат менән тәғәйенләнде. Был мәхкәмә башҡорт эшен махсус ҡарап тороу, башҡортто әсирлеккә ҡулға алыу, тәртиплерәк юлға һалыу өсөн ҡоролған эш ине. Шул рәүешле башҡорт ғәскәре бөтөрөлөү юлына кергән булһа ла һаман тиҙ бөтөрөлмәй әкренләп кенә бөтөрөлдө. Ҡалғандары хеҙмәт итергә йөрөнө. 1839 йыл айырым башҡорт сотнялары Хива һуғышына барҙылар. Аҡмәсет һуғышына (башҡорт араһында Һыр походы тип мәшһүр) барҙылар. Был ваҡыттарҙа башҡорт ғәскәренең башлығы Перовский ине. 1853 йылдан башлап 1856 йылға саҡлы ике башҡорт полкы Петербург янына фин ҡултығында ҡарауыл хеҙмәтендә торҙо. Һәм шул уҡ йылдарҙа

Ҡырымда Севостополь һуғыштары булып, Рәсәй хәлдәре йәнә ауырайып киткәс, йәнә башҡорттарҙың ғәскәрҙәрен күбәйтә башланылар. Севостополь һуғыштарында башҡорттар төрөктәргә ҡаршы һуғыштылар. Бында биш йөҙ кешелек дүрт башҡорт полкы ҡатнашты. Ләкин бынан шул һуғыш саҡтарында башҡорт өсөн хәл ҡылына: 1) Шул һуғыштарҙа башҡорттар төрөктәргә ҡаршы ихласлыҡ менән һуғыштылар. Ҡырымдағы нуғайҙар рус серҙәрен төрөктәргә әйтеп, төрөктәргә юл күрһәтеп, рустарҙы Ҡырымдан ҡыуалай башланылар. Рустар башҡорттарҙың да шундай эштәр эшләйәсәгенән шөпһәләнде, уларҙың ғәскәрен тотоу Рәсәй өсөн ысынлап та хәүефле икән тигән уйға ҡалды; 2) Ул ваҡыттарҙа Төркөстан тарафтары Рәсәй ҡулына кереп, Рәсәйҙең шәреҡ тарафында мосолман типтәрҙәр күбәйеп киткәс, мосолманы күп ҡырғыҙ, Төркөстанға сиктәш, Башҡортостанда мосолман-башҡорт ғәскәре тотоу хөкүмәт өсөн бик хәүефле күренә; 3) Шул ваҡытта батша булған Александр II, ғөмүмән, инородецтарға ҡаршы бик яман сәйәсәт башланы. 1855 йыл мишәрҙәрҙең ғәскәре бөтөнләй бөтөрөлдө һәм мәхкәмә лә Башҡорт ғәскәре идараһы тип аталып ҡалды. Шунан 1863 йылдың 14 майында икенсе Александр батша башҡорт ғәскәрен бөтөнләй бөтөрҙө һәм башҡорттарҙы крәҫтиән хәленә ҡалдырып, идара итеү тураһында «Башҡорттар хаҡында положение» тигән махсус закон сығарҙы. Көнбайыш яҡтағы кантондар бөтөрөлдө. 1865 йылдың 2 июлендәге закон буйынса көнсығыш Ырымбур яҡтарындағы кантондар ҙа бөтөрөлөп башҡорттар тышҡы эштәр министрлығына ҡарап, крәҫтиән хәлендә ҡалды. Башҡорттарҙың "армия заманы" тигәне шунда бөттө. Бынан һуң да башҡорттарҙан 1882 йылға саҡлы Ырымбурҙа бер башҡорт полкы яһап тотто. Ләкин был полк элекке рус хөкүмәтенә оҡшаған синыф булған дворяндарҙың балаларынан ғына йыйылды, уға иғтибар булманы. Башҡорт ул ваҡыттарҙағы һуғыштары, күрһәткән һөнәрҙәре менән французлар тарафынан «төнъяҡтағы һуғыш аллаһы» («северные амуры») исемен алды.

Был заман башҡорттарҙың иң бәхетле көндәре түгел, 1737 йылда башҡорттарҙың ҡоролтайҙары (йыйындары) бөтөрөлгәндән һуңғы дәүерҙәре, иң ауыр, хурлыҡҡа төшөү ваҡыттарылыр. Башҡорттарҙың бәхетле сәғәттәре 1737 йылдан элекке үҙ башына мөхтәриәт менән торған ваҡытта, нуғай, күсемдәр менән үткәргән заманда булғандыр. Ләкин шулай булһа ла армия замандарының тәүге осоро Рәсәй ҡулы аҫтына ингән заман эсендә башҡорттарҙың донъя милләттәре менән ҡатнашып, ғәскәри тәрбиә алып, мәғрифәтле Европа ғилемен ала башлаған егеттәре, докторҙары күбәйеп, күҙе асыла башлаған көндәрелер. Ул замандың ҡалдыҡтарынан башҡорт ауыҙындағы "Перовский", "Һыр" ("Һырдарья"), "Армия", "Эскадрон", "Салковский", "Ҡаһым түрә", "Йософ майор" һәм төрлө

кантон көйҙәре тигән көйҙәр һаман халыҡтың йөрәгендә һаҡлана, Ҡарауанһарайҙың (башҡорт ғәскәре идараһы) бинаһы, Эйек буйындағы Әпсәләм ауылындағы казарма һәм мастерской бизналары, Стәрле өйәҙендәге Һуҡайлы буйында "Башкирский конский запас" урындары беҙҙең халыҡтың рус ҡулында үткәргән ауыр көндәре араһында нисек булһа ла яҡтыраҡ көндәренең ғәләмәттәре тип хәтерҙә торалар.

## БАШҠОРТТАРҘЫҢ КӘМЕҮЕНЕҢ СӘБӘБЕ НИҘӘ?

Көнсығышта урынлашҡан тауҙарында был көнгәсә йәшәп килгән башҡорттар үҙҙәренең ябайлыҡтары, йомартлыҡтары һәм батырлыҡтары менән башҡа халыҡтарҙан айырылғандары кеүек, йәнле активлыҡта, дәрт һәм ғәйрәттә лә күрше ҡәүемдәрҙең бик күбеһенән алда инеләр. Ватан мөхәббәте, бер-береһенә өлфәт араларына тамам ерләшеп, үҙ-ара хыянат, үлтереш, талашты күңелдәренә лә килтермәйҙәр ине. Мәрхәмәт, шәфҡәт һәм бер береһенә ярҙам итеү, ғәфү итә һәм тыңлай белеү шикелле кешелек йәмғиәтендә беренсе урынды тотҡан маҡтаулы сифаттар, башҡорттарҙың тәбиғи сифаттары кеүек әүерелгәндәр ине. Бөйөк Урал тауҙарының шиғри күренештәре эсендә тәбиғәттең киң һәм бөтмәҫ ниғмәттәренән тик үҙҙәре генә файҙаланып, йәнле-ҡыҙыҡлы хаят, дәртле-ялҡынлы бер тормош эсендә ғүмерҙәрен кисергән киң күкрәкле башҡорттарҙың заманында ярайһы ғына ғалим һәм белгестәр, әҙип һәм шағирҙар етешкәне кеүек, саф алдына сығып, батырҙарса һуғышҡан ҡаһармандары ла булып үтте. Аллаһы тәғәлә тарафынан һибә ителгән иркенлектән теләгәндәренсә файҙаланып, донъяның ожмахи булған киң Урал тауҙарының йәмле баҡсаларында гүзәл һәм борғоланып, иркәләнеп ағып ятҡан шишмәләре буйҙарында, бал ҡортондай наҙланып, күсеп-күсеп йөрөгән был хоҙай бәндәләре заманында ҡәүемдәрҙең, бәлки, иң бәхетлеһе булғандарҙыр[6]... Бер береһе өҫтөнә сыҡҡан күп һанлы тауҙарҙан тәшкил ителгән, туп-тура күккә табан юғары олғашҡан Урал тауҙары... Шул күренеште тәшкил иткән йәмле тәбиғәттең тәьҫире аҫтында башҡорттар һис нәмәгә илтифат итмәйенсә, ғәмһеҙ-ҡайғыһыҙ күңелле тормоштоң ләззәтле ҡосағында рәхәт-рәхәт йәшәй бирҙеләр.

Урал тауҙарының оло, бөйөк таштарында һикерешеп утлап йөрөгән һарыҡ һәм кәзәләре, ҡалын, йыш үҫкән болонлоҡтарға табан иренеп кенә атлап урыш (хайуандар барып ашай торған ер) алған ҙур еленле һыйырҙары, бөтөн туғай һәм ҡырҙарға махсус зиннәт биреп йөрөгән һылыу-һылыу аттары менән өйөр-өйөр йылҡыларынан сыҡҡан һәм ҡалын

урмандар менән бөйөк ҡаяларҙы яңғыратып, әллә ниндәй илаһи моң һәм аһәң биргән тауыштарҙан айырым бер ләззәт алып, ғорурланып йөрөгән башҡорттар, донъяла бынан да артыҡ бер хаят, йәмле бер тормош бар, тип ышанмайҙар ҙа ине. Киң тәбиғәт эсендә һис нәмәгә буйһонмай, тамам үҙ теләктәре һәм үҙ ихтыярҙары менән генә йөрөргә ғәҙәтләнгән башҡорттарҙың бынан тыш башҡа тормош эҙләмәүҙәре лә тәбиғи ине... Баштараҡ башҡорттарҙың хәйлә һәм мәкер белмәйсә бер ҡатлы, аҡ күңелле булыуҙары асылда шул тәбиғәт биргән емештәрҙән булған бер емеш ине. Шул хәл һәм рәүеш аҫтында өҫтәрендәге йәнле хаяттың, ҡыҙыҡлы тормоштоң тиҙ үҙгәрәсәген улар аңлай алманылар. Көнбайыштан дәһшәтле рәүештә ағып килгән тышҡы тәьҫир ләззәтле тәбиғәт эсендә иҫергән башҡорттарҙың күңелдәренә лә инеп сыҡманы... Сәхрәүи күсәбәлектә йәшәгән һәм һандары 2-3 миллиондан да юғары ашмаған кескенә һәм ултыраҡ тормошта булмаған башҡорт ҡәүеме түгел, мәҙәниәт һәм мәғрифәтте ҡулдарына алып, заманында донъяны “дер” һелкеткән, көстәре һәм асыуҙары алдында бөтөн көс һәм ҡотто саждә иттергән, ҙур-ҙур милләттәрҙе лә ҡом бураны кеүек өйөрөп һуғып, тарихта исемдәрен генә ҡалдырып, тәбиғәттең ҡурҡыныслы фәжиғәләре, дәһшәтле трагедиялары яҙылған ине.

## II

Ер шарында йәшәгән әҙәм балалары тормош һәм әхүәлен сирек быуат эсендә генә әллә нисә төрлө һүрәткә алмаштырған яуыз тәҡдир-тәбиғәттең икенсе йәшерен ҡатлауы иғтибарһыҙ ятҡан башҡорттарҙы ла иҫкәртмәҫтән генә килеп баҫты. Кинәт кенә ағып килеп сыҡҡан тышҡы тәьҫир үҙенең ҡаты, көслө ҡулы менән нык итеп уларҙы тотто. Гәрсә улар тәңренең киң тәбиғәтенең үҙҙәренә биргән ирек һәм хөрриәте аҫтында йәшәүҙе теләгәнлектәрен белдерергә тырышып йолҡоноп ҡараһалар ҙа көслө ағыулы үткен тырнағы ысҡынырға юл бирмәне. Ана шул тышҡы тәьҫир кергәндән башлап башҡорттарҙың тормош һәм әхүәлдәре икенсе төҫкә керә... Уларҙа йәмле, изге тормош ҡутарыла... Аҡ күңелдәре керләнә... Саф выждандары таплана башлай. Киң далала утлап йөрөгән һәм хаҡһыҙ ризыҡ ташыған хайуандарын ҡулдарынан ысҡындырғас Башҡортостанды фәҡирлек һәм меҫкенлек ҡаплай. «Тамаҡ тамуҡҡа төшөрә» тигәндәй, ҡулда һөнәр йәки башҡа берәр тормош-көнкүреште тәьмин итерҙәй ҡотолоу юлы булмағанлыҡтан башҡорттарҙың әхлаҡтары боҙола. Был әхлаҡһыҙлык уларҙың бик күптәренең баштарына еткәне шикелле, фәҡирлек, меҫкенлек тә араларына ҡотло рәүештә хәкимлыҡ

итә. Һимеҙ ит, бал, май кеүек туҡлыҡлы аҙыҡтарға өйрәнгән башҡорттарҙы тормош һөтһөҙ сәй, көлгә күмеп бешерелгән арпа икмәгенә ҡалдырғас, катарға дусар булып ауырыған береһе үлә тора. Киң сәхрәлә саф һауа менән тәрбиәләнгән ғаиләләр тығыҙ һауалы, тар һәм кескенә өйгә бикләнгәс, чахотка һәм ауырыуҙар менән ахирәткә күсәләр. Был өйҙәр һуңғы сиктә кескенә булыуҙары менән бер рәттән тәҙрәләренең шаҡмағы ярты аршындан артыҡ түгел. Уға ла быяла урынына ҡарындыҡ ҡаплап, ҡарындыҡты ҡалын уҡ ағастарҙан яһалған таяуҙар (рамалар) менән тотторғанлыҡтан, ул кескенә тишектән күпме генә яҡтылыҡ инеүе мөмкин. Етмәһә, тағын ул кескенә тәҙрәләрҙең һандары ла 2–3-тән уҙмай. Бының өҫтөнә өй эсендә түгелгән һыуҙары, стеналағы еүешлекте һәм шул уҡ кескенә өйҙөң эсенә кертелгән хайуан балаларын ҡушһаҡ, хаят өсөн артыҡ зарарлы бер урын икәнен кем танымаҫ? Саф һауаның кәрәклеге хаят өсөн беренсе урында тора. Тәүлектә 2–3 мәртәбә генә ашарға мохтаж булған әҙәм балаһы саф һауаны бер минутта ғына 16–20 мәртәбәгә яҡын һуларға мәжбүр була. Бейеклеге 2 аршын менән 2 аршын ярым араһында, оҙонлоғо һәм арҡырыһы 6–8 аршындар араһында булған кескенә йортта 8–10 кешенән торған бер башҡорт ғаилә йәшәй. Өй эсендә сама менән һәр кешегә бер кубический сажин һауа кәрәк булғанлыҡтан был кескенә йорттоң эсенә алған һауаһы 8–10 кешелек ғаилә тәшкил иткән бер йәмәғәткә етешмәйәсәгенә шөбһә юҡ.

Иң түбән дәрәжәле үҫемлектән башлап иң юғары урындағы бер хайуанғаса үҙенең хаяты өсөн яҡтыға мохтаж икәне быға ҡәҙәре иҫбат ителгән хәҡиҡәттәрҙең береһе икәне һәр кемгә мәғлүм. Хатта үләндең һауалағы углекислый газды япраҡтары ярҙамында һулап углеродты һабаҡтарына тараҡҡандан һуң кислородты кире сығарыуы ла яҡтының тәьҫире аҫтында барлыҡҡа килә. Үлән өсөн шул дәрәжәлә кәрәк булған яҡтының әҙәм балаларының хаяты өсөн йәнә артығыраҡ кәрәк икәнен һөйләп торорға ла хәжәт юҡ. Заманыбыҙҙа күп кешеләрҙең яҡты менән дауаланып, тамам сәләмәтләнеп китеүҙәре, яҡты өйҙәрҙә чахотка микробтарының үрсей алмай һәләк булыуҙары беҙҙең күҙебеҙҙә яҡтының ҡәҙерен йәнә бер ҡат арттыра. Хаятыбыҙ өсөн беренсе дәрәжәлә әһәмиәтле булған был тәңре ниғмәтенән (яҡтынан) башҡорттар мәхрүмдәр. Уларҙың ҡарындыҡ ҡаплаған һәм унын да байтаҡ ерен рама менән сырмап бөткән байтаҡ тәҙрә кеүек кескенә тишектәрҙән күпме генә яҡтылыҡ керә алыр? Хәҙерге көндә бөтөн башҡорт ғаиләләренең күҙ ауырыуына дусар булып яҡты донъяны күрә алмауҙары, тейешле ҡәҙәре яҡтының булмауынан килгән афәттән башҡа бер нәмә лә түгел. Башҡа әҙәм балалары төҫлө иркен, яҡты, таҙа өйҙәрҙә тороу насип булһа, һан йәһәтенән был рәүештә үк кәмемәгән булырҙар ине. Ләкин...

Ҡыш көндәрендә йәтешле кейем булмағанлыҡтан башҡорттар һалҡында ла бигерәк ҡыҙғаныс хәлдә булалар. Аҙбар таҙалаған йәки ауылдан шаҡтай йыраҡлыҡтағы йылғанан һыу алырға барған ҡатын-ҡыҙҙарҙы күрһәк, өҫтөндә ҡытаттан тегелгән (мамыҡһыҙ) йоҡа еләндән башҡа бер нәмә булмай. Уларҙың 10 градус һалҡында ла, 30–35 градус һалҡында ла кейгән кейемдәре шул. «Ҡулым... аяғым...сәңгеп бара» тип 6–7 йәшле ир баланың башына өҙгәләнә-өҙгәләнә ҡулын ышҡыған ҡатын-ҡыҙҙарҙы, ҡыш көндәрендә башҡорт өйөнә кергән һәр кемдең күреүе мөмкин. Кейәүгә сыҡҡан ҡатын-ҡыҙҙар бөтөн тәндәрен һыуыҡ алдырып һәр төрлө ауырыуҙарға һабышалар. Аҙаҡта мин: «Башҡорттарҙы һан йәһәтенән йылдан йыл кәметә барған нәмәләр: чахотка, катар, ревматизм, паралич, тиф... кеүек ҡурҡыныслы ауырыуҙар булып тышҡы тәьҫирҙең килтереп сығарған нәтижәләре тиһем килә. Быға тиклем сифилис, шанкр, бобон, триппер... кеүек бысраҡ ауырыуҙарҙы уларҙың кәмеүҙәренә сәбәп итеп күрһәтһәләр ҙә, былар башҡорттарҙың өҫтөнә ырғытылған ялғандар икәнендә шөбһә юҡ. Танышҡан инсаф кешеләр раҫлаясағына иманмын. Был ялғандар хаҡында яҙыуҙы киләсәккә ҡалдырып торҙом».

*Шура:* Был мәҡәләлә әҙәбиәт һөйөүселәр өсөн аҙыҡ булһа ла, тарихсылар һәм йәмғиәт белгестәре өсөн аҙыҡ күп түгел. “Башҡорттарҙың кәмеүҙәренә сәбәп нимә”, – тип башланған мәҡәләлә яңғыҙ шул темаға һүҙ һөйләү тейешле булһа кәрәк. Йәшәү рәүешен үҙгәртеү, киң далаларҙа йөрөү, һуңында кескенә ауылдарға бикләнеп ҡалыу һәр бер ҡәүемдең башынан үтеп киткән һәм үтеп китеп тора торған нәмәләрҙән. “Заманды, донъяны үҙенә эйәртә алмаһаң, үҙең заманға, донъяға эйәреү” мәғәнәһендә мәшһүр һүҙ бар. Һәр бер ҡәүем, һәр бер ҡәбилә ошо һүҙҙәргә күрә ғәмәл итеп үҙҙәрен кәмеүҙән, юҡҡа сығыуҙан ҡотҡарырға тейеш булған хәлдә башҡорттар ни өсөн урталыҡта тороп ҡалдылар? Ошо һорауға яуап бирергә кәрәк. Юҡһа «башҡорттарҙың бөтөүҙәренә чахотка сәбәп булды» тигән һүҙ менән был хәлде тәҡдиргә бәйләү араһында күп айырма юҡтыр. Әгәр ҙә чахотка башлана ҡалһа, башҡорттарҙы ла, башҡаларҙы ла ҡырыуы мәғлүм эш. Донъяның иң шәп урмандары үҙ ҡулдарында булған башҡорттарҙың кескенә өйҙәрҙә урынлашырға мәжбүрлектәре булмаһа кәрәк. Йән башына ярым десятина булыр булмаҫ ерҙәре булған, Малмыж, Мамадыш өйәҙҙәрендәге халыҡтар үҙ һарыҡтарының йөндәренән үҙҙәре тула әҙерләп, өҫ-баштарын бөтөнәйтеп торғандарында башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының бер ҡат ҡытат елән менән һыу ташыуҙарын нисек аҡлап булһын? Хәлбуки, башҡорттарҙа был көндә лә йән башына ун биш десятина ер бар тип әйтәләр. Һәр хәлдә башҡорттарҙың кәмеүҙәренең

сәбәбен тикшерергә яраһа, уны башҡа йүнәлештә тикшерергә кәрәк. Чахотка шикелле нәмәләр башҡорттарҙың кәмеүҙәренә сәбәп булыуҙан бигерәк башҡорттарҙың кәмеүҙәренә сәбәп булған нәмәнең нәтижәһелерҙер.

*Уҡытыусы Хәбибулла Ғәбитов. Иркутск.*
*("Шура" журналының 1913 йылғы 24-се номеры)*

## "ТӨРКӨСТАН ТАРИХЫ" КӘРӘК

Тарих бик әһәмиәтле һәм файҙалы нәмә. Тарихтың файҙаларының бәғзеһе ошолор ки, бер милләттең ҡайҙа, ҡайһы юл менән алға киткәнен уҡып, ғибрәт алып йәки бер милләттең ни сәбәптәрҙән артта ҡалып, ахырҙа юҡ булып киткәнен белеп, бынан файҙа алыу мөмкин. Шуның өсөн беҙҙең үҙ телебеҙҙә Төркөстанда үткән бабаларыбыҙҙың тормошо, сәйәси хәлдәре хаҡында "Төркөстан тарихы" булғанда, уны күҙ алдыбыҙға килтереп, боронғо ҡаһарман бабаларыбыҙҙың ниндәй юл менән алдынғы һәм мәҙәни дәүергә кереп һәм ни сәбәптән һуңынан юҡ булып киткәндәрен уҡып, өйрәнеп, байтаҡ ғибрәт алыр инек. Ошондай хәҙерге хәлебеҙҙе бабалырыбыҙ дәүерендәге хәлдәр менән бер аҙ сағыштырғанда үҙебеҙҙе алға китмәгән тип хис итеп, йөҙҙәребеҙ ҡыҙарыр ине. Беҙ, төркөстанлылар, һаман мәрхүм бабаларыбыҙ әхүәленән һәм Төркөстандағы тарихи ваҡиғаларҙан ғафил һәм хәбәрһеҙбеҙ. Сөнки әлегә Төркөстан тарихы хаҡында яңыса тикшеренеп яҙылған, тәртипле һәм ҡулланышлы мөкәммәл бер әҫәр барлыҡҡа килгәне юҡ. Дөрөҫө, бындай тарих яҙыусы кеше төрки улдары араһынан һаман майҙанға сыҡҡаны юҡ, был иһә төрки балалары араһында дауам итеүсе, ысын ул булмауына дәлилдер. Был һүҙҙәрҙән тарихһыҙ булыуыбыҙ аңлашылмаһын. Беҙҙең тарихыбыҙ бар.

Боронғо быуаттарҙа Төркөстан һәм төркиҙәрҙең хәл-әхүәлдәре хаҡында төрки, фарсы һәм ғәрәп телдәрендә байтаҡ китаптар яҙылған, ул китаптарҙан рус һәм башҡа европалылар файҙаланған һәм файҙалана. Ләкин улар төрлө телдәрҙә яҙылған. Был тарихи әҫәрҙәрҙе беҙ, төркөстанлылар, ҡулланып, яңы фекерҙәр һәм тикшеренеүҙәр менән үҙ телебеҙҙә әҙерләнгән бер әҫәр барлыҡҡа килтергәнебеҙ юҡ. Бәлки, беҙҙең ундай тарихи китаптарҙың аҙ ғынаһынан хәбәребеҙ булмайынса, ҡайһы берҙәрен белһәк тә, уларҙың баҫылыуына һәм нәшеренә әһәмиәт бирмәйбеҙ. Сөнки беҙҙең халыҡтар бындай китаптарға ҡарағанда хөрәфәти ҡисса, хикәйә һәм ғишҡи ғәзәл китаптарынан матди файҙа эҙләп, шундай әфсәнәүи һәм асылһыҙ китаптарҙы баҫтыра һәм нәшер итә. Шуның өсөн көндән-көн

мөһим тарихи китаптарыбыҙ күҙҙән төшөп, иҫтән сығып китә, быный ғәйебе, гонаһы Төркөстандағы мәнфәғәт һөйөүсе китапсылар өҫтөнә төшһә кәрәк. Сөнки һуңғы йылдарҙа китапсылар тарафынан төрлө хөрәфәти китап һәм рисәләләр нәшер ителеп тороуы асыҡ күренә һәм һәр кемгә мәғлүм. Әгәр ҙә мөхтәрәм нәшриәтселәребеҙ һәм китапсыларыбыҙ бынан һуң әхлаҡ боҙоусы ғишҡи ғәзәлдәр һәм саф иғтиҡадтарҙы зәһәрләндереүсе хөрәфәти әфсәнә китаптары урынына төрлө тарихи, әхлаҡи һәм әҙәби рисәлә һәм китаптар нәшер итеүгә тырышһалар, был бик хәйерле эштәре әүәлге гонаһтарының йөҙөн ябыр.

"Сада-и Төркөстан" журналына: "Милли тарихыбыҙҙы кем яҙыр?" – тигән һорау биргәндәр ине. Беҙҙең фекеребеҙсә, бындай тарихты яҙыу бигерәк тә ҡыйын эш булып, быны башҡарыу беҙҙең ҡулыбыҙҙан килмәй торғанға оҡшай. Шуның өсөн был хеҙмәтте Төркөстан тарихы менән яҡындан таныша башлаған йәш тарихсыбыҙ мөхтәрәм Әхмәтзәки Вәлиди әфәнденең ҡәләменән өмөт итәбеҙ.

*Мәхмүтхужа Бехбуди.*
*"Айна". 1914. №38. 898–900-се бб.*

## Ғ.С. ҒӨБӘЙҘУЛЛИНДЫҢ "ТӨРК-ТАТАР ХАЛЫҠТАРЫНЫҢ ТАРИХИ ӘҘӘБИӘТЕНЕҢ ҮҪЕШЕ" ИСЕМЛЕ СЫҒЫШЫНАН ӨҘӨК

Ул ваҡытта үҙ алдына тарихты өйрәнгән тарихсы Зәки Вәлиди бик етди тарихи хеҙмәттәр менән сығыштар яһаны. 1912 йылда уның "Төрк вә татар тарихы" исемле тәүге китабы баҫылды. Вәлидиҙең был китабы Рәсәй ғалимдарының ғына түгел, сит ил төрки ғалимдарының иғтибарын да йәлеп итте. Йософ Аҡсура "Төрк йорто"нда Вәлидиҙең был хеҙмәтен тикшереүгә ҙур мәҡәлә бағышлап баҫтыра һәм уны "тәүге ғөмүми төрки халыҡтарының тарихы" тип атай. Был китап, инештән үк асыҡ аңлашылыуынса, Нәжип Ғасим тарафынан ҡыҫҡартып баҫтырған Леон Каендың әҫәренең ҙур йоғонтоһо аҫтында яҙылған. Шуның өсөн осорҙарға бүлеү принцибы һуңғының көслө тәьҫире аҫтында ҡалған. Ләкин бер аҙ айырма бар: әгәр Л.Каендың һәм Н.Ғасимдың хеҙмәттәрендә ғөмүми төрки тарихын системалы тәртиптә бирергә тырышылһа, Вәлидиҙең әҫәре татар тарихына ҙур эйелеш менән яҙылған. Бына шуның өсөн ул төрк-татар тарихын шундай дәүерҙәргә бүлә: төркиҙәр боронғо заманда; төркиҙәр һәм ислам; тәхет монгол идараһы аҫтында; Алтын Урҙа;

болғарҙар татар яулап алыуынан һуң һәм Ҡазан ханлығы. Ошонон менән беренсе том тамамлана; икенсеһе сыҡмаған. Китаптың ҡыҫҡаса эстәлегенән күренеүенсә, Вәлидиҙең хеҙмәте саф сәйәси тарих буйынса яҙылған. Сәйәси һәм дини факторға автор ҙур әһәмиәт бирә. Бында иһә ул ваҡытта социология мәктәбенең һәм авторҙың дөйөм әҙерлегенең юҡлығын күрә алабыҙ (Мәҫәлән, Ҡазан ханлығының 1552 йылға тиклем үҙаллылығы ҡазанлыларҙың ҙур батырлығына һәм динилегенә бәйле булыуына автор тулыһынса ышана). Әммә Мәржәниҙән һуң төньяҡ төрки-татар донъяһы Вәлидигә тиклем сығанаҡтарҙы тәнҡит күҙлегенән ҡарау ысулын, рус тарихсыларының хеҙмәтен һәм шулай уҡ Европа тарихсыларының әҫәрҙәренең русса тәржемәләрен ҡулланған бер тарихсы ла булманы. Вәлиди, һылтанмаларҙа һәм инештә Европа һәм рус тарихсыларына оҡшатып, тикшерелгән мәсьәлә буйынса әҙәбиәт бирә. Был иһә күптәргә тыуған халҡының тарихы менән шөғөлләнергә мөмкинселек бирҙе, төрки телендәге тарихи әҙәбиәттең үҫешенә этәргес көс булды.

Шул уҡ ваҡытта Вәлиди төрки халыҡтар тарихының, бигерәк тә Урта Азия төркиҙәрҙең айырым мәсьәләләрен тикшереү менән шөғөлләнә. Тәүҙә М.М. Хвостов кеүек боронғо тарих белгестәрҙең ҡатнашлығында Ҡазан университеты эргәһендәге Тарих һәм археология йәмғиәтенең, һуңынан Рәсәй фәндәр академияһының ярҙамы был тарихты үҙаллы өйрәнгән башҡорт тарихсыһының үҫешенә ҙур файҙа бирҙе. Мин уның Урта Азия командировкаларынан һуң барлыҡҡа килгән төрки тарихы буйынса сығанаҡтарҙы өйрәнеүгә һәм эҙләүгә бағышланған, уның тарафынан "Ҡотаҙғу белек"тең яңы варианты табылыуы һәм яңыраҡ ҡына Мешхедта ул тапҡан Ибн-Фадлан сәйәхәтнамәһенең өҙөгөнә бағышланған матур хеҙмәттәренә ҡағылып тормайым, сөнки улар һәр кемгә яҡшы мәғлүм. Мин уның татар телендәге төрк-татар тарихына ҡараған башҡа хеҙмәттәре тураһында әйтеп үтергә кәрәк тип иҫәпләйем. Хәҙергә уның ҡасыуына тиклемге бөтә мәҡәләләрен ҡарап үтеү мөмкин түгел. Шуның өсөн ҡайһы бер мөһимерәк әҫәрҙәре хаҡында бер нисә һүҙ әйтеп үтәм. Һис шикһеҙ, автор тарафынан Көнсығыш Төркөстан төркиҙәренең тарихы буйынса бик ҡиммәтле материал бирелгән һәм был мәсьәләгә ҡараған сығанаҡ һәм әҙәбиәтен тәрән белеүен күрһәткән Мәржәниҙең "Борхан әл-хауаҡин"ын тәнҡит күҙлегенән тикшереүе бик ҡыҙыҡлы. Шулай уҡ аҙ билдәле төрки шағиры тураһында бик мөһим материал бирелгән Ә.Вәлидиҙең "Лотфи һәм уның диуаны" тигән бәләкәй генә брошюраһы ҡиммәтле әҫәр була. Уның XVII быуаттағы бола йылдарында татарҙарҙың ҡатнашыу тарихы буйынса брошюраһы Мәржәни һәм Фәхретдиновтан һуң төньяҡ төркиҙәрҙең рус йәки Мәскәү дәүеренә бағышланған тәүге популяр әҫәре, беренсе тәжрибә булараҡ мөһим. Шулай уҡ "Шура"

журналында баҫылған “Хәлфиндәр” мәҡәләһе бигерәк ҡыҙыҡлы. Унда ул татар тарихсыларынан тәүгеләрҙән булып боронғо быуаттар тарихынан тарих фәнендә бик аҙ өйрәнелгән яңы тарихҡа күсә.

*Беренсе Бөтә Союз тюркология съезы*
*1926 йылдың 26 феврале – 5 марты (стенографик отчет)*
*Баҡы, 1926. 47–48-се бб.*

## УН БЕРЕНСЕ НОМЕРЛЫ ИСЕМЛЕК

Өфө губернаһынан Учредительный Собраниеға ҡуйылған Башҡортостан тупраҡлы милли мөхтәриәтселәренең 11-се һанлы исемлеге. Был исемлеккә түбәндәге кешеләр инә:

1. Әхмәтзәки Вәлиди – мәшһүр ғалим, мосолманса һәм русса әҫәрҙәр ижад иткән, Стәрле өйәҙенән.

2. Шәриф Әхмәтйән улы Манатов – Петроградта һәм Швейцарияла белем алған ғалим, сәйәси вә ижтимағи эшмәкәр, хәҙер Башҡорт Мәркәз Шураһының рәйесе, Силәбе өйәҙенән.

3. Ғүмәр Мөхәмәтғәли улы Ҡыуатов, ғәскәри баш доктор, Ҡазанда уҡыған, Орск өйәҙенән.

4. Фәтих Әхмәҙуллин – зыялы, һалдат, мөхәррир, Өфө өйәҙенән.

5. Ғәли Шәмиғолов – Силәбе крәҫтиән Советы рәйесе, Стәрле өйәҙенән.

6. Шакирйән Ҡылысбаев – өйәҙ земство рәйесе, Златоуст өйәҙенән.

7. Йыһанша Ғәбдүшев – “Ғәлиә” мәҙрәсәһендә рус теле уҡытыусыһы.

8. Мансур Халиҡов – Стәрле өйәҙенән имам вә мөҙәрис.

Был кешеләр 27 августа Өфөлә уҙғарылған Бөтә Башҡорт ҡоролтайы тарафынан раҫландылар, йөрәгендә башҡортлоҡ ҡаны һыуынмаған, Башҡортостанға ерле милли мөхтәриәт алам тигән ил ағалары. Бөйөк башҡорт вәкилдәре бер иттифаҡ булып күрһәткән кандидаттарға, йәғни 11-се һанлы исемлеккә тауыш биреү – һәр бер башҡорттоң бурысы. Биш губерна башҡорттарының Мәркәз Шураһы, бөтөн Өфө губернаһы башҡорттарының тик шул 11-се һанлы исемлеккә генә тауыш биреүен талап итә. Тупраҡлы милли мөхтәриәт кенә Башҡортостанда бөтә мосолмандарҙы сәғәҙәткә ирештерә алыр. “Ирек бөттө – динең бөттө”. Башҡорттар менән бер булып, дин вә милләтебеҙҙе һаҡлайбыҙ тигән татар ҡәрҙәштәребеҙ ҙә тик 11-се исемлеккә генә тауыш бирергә тейеш.

Бөтә Рәсәйҙә дөйөм социализация булып, бер башҡорт янына йәнә 32 рус ултыртылырға тейеш булғанда, башҡортто шул һәләкәттән тик ерле

мөхтәриәт кенә ҡотолдора алыр. Барлыҡ башҡорттар һәм башҡортто харап итмәйек, улар менән бер булып, ерле мөхтәриәт алып, был яҡта һәм шулай уҡ Ҡазан, Иҙелдә баяр ерҙәрен тик үҙ мосолманыбыҙға ғына ҡалдырайыҡ тигән кешеләр тик 11-се исемлеккә генә тауыш бирергә тейеш.

Башҡорттар һәм барлыҡ мосолмандар, иҫке залим хөкүмәт тарафынан йөкмәтелгән ауыр һалымдарҙан ҡотолайыҡ тигән кешеләр тик 11-се исемлеккә генә тауыш бирерҙәр. Дин, мәктәп, мәҙрәсә эштәрен еребеҙ менән бергә үҙ ҡулыбыҙға алабыҙ тигән кешеләргә тик 11-се исемлеккә тауыш бирергә кәрәк. Дин һәм ер, ер һәм мәктәп – башҡорттоң уйы, фекере шул. Шуға ҡушылған барлыҡ мосолман тик 11-се исемлеккә тауыш бирергә тейеш. Һуғыш тиҙерәк бөтһөн һәм үҙ ғәскәребеҙ үҙ еребеҙҙә генә булһын тигән кешеләр, Башҡортостан мөхтәриәте яҡлылар 11-се һанлы исемлеккә тауыш бирергә тейеш.

*Башҡорт Мәркәз Шураһы, Ырымбур губернаһы.*

## МӘХМӘТ ГЕРМЕЗДЫҢ “МУСА ЯРУЛЛА БИГИЕВ” ИСЕМЛЕ КИТАБЫНАН ӨҘӨК

Зәки Вәлиди “Билги” журналында баҫылған «Ибн Халдун ҡараштары буйынса мосолман хөкүмәттәренең киләсәге» мәҡәләһендә Һижриҙың II–III быуаттарында ҡабул ителгән мосолман хоҡуғын (фиҡһты) Көнбайыш дәүләттәр хоҡуҡтары менән сағыштырған һәм шулай итеп Көнбайыш хоҡуғын уңайһыҙландырырға теләгән, ҡайһы бер закондарҙан баш тартҡанда фиҡһ китаптары урынына Европа закондарына мөрәжәғәт итеүҙән ояған Муса Яруллланы шелтәләй. Муса Яруллланың быңдай ҡыланыуына ҡаршы Зәки Вәлиди: “Уңыштарҙы йыйыу һәм канал ҡаҙыу кеүек хеҙмәт һәм тәжрибә талап иткән мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн аят һәм хәдистәрҙә яуап эҙләүҙең һөҙөмтәләрен тарих асыҡ күрһәтте. Тормош мәсьәлә тыуҙырғанда, күктән ниндәй әмерҙәр булған йәки буласаҡ тип көтөү файҙаһыҙ”. Зәки Вәлиди фекеренсә, Муса Яруллланың быңдай фекерҙәре һәм уйланыуҙары уҡылыуға ла лайыҡ түгел. Был ваҡытты бушҡа үткәреү була. Зәки Вәлиди был мәҡәләһендә, башҡа эштәренән айырмалы рәүештә, Муса Яруллланы “бөйөк остаз” тип атай һәм: “Беҙ һеҙҙән тағы ла ғәмәли әйберҙәр көтәбеҙ. Бөгөнгө көндә исламдың әҙәп һәм яҙа ҡағиҙә системаһын үҙгәртергә тырышыу файҙаһыҙ һәм буш эш. Һеҙҙең маҡсатығыҙ – киләсәк быуындар өсөн “Хәҙрәти Ғайсаның күтәрелеүе”, “Ҡираат”, “Тәжуид”, “Оҙон көндәрҙә ураҙа”, “Хәҙрәти Хызыр”, “Мәхди”

кеүек темаларҙы яҡтыртыуҙы дауам итеү", – тип кәңәш итә. Асылда иһә Зәки Вәлиди Муса Ярулланың иген игеү, канал ҡаҙыу кеүек эштәрҙе хәл итеү өсөн аяттарҙа һәм хәдистәрҙә эҙләмәгәнен яҡшы белгән. Һығымтаны эшләргә уҡыусыларҙың үҙҙәренә ҡалдырабыҙ һәм Муса Ярулла нимә теләгәнен асыҡлауға күсәбеҙ.

*Görmez Mehmet, Musa Carullah Bigief*
*Ankara, 1994. S.113–114*
*(Төрөксәнән Әхәт Сәлиховтың тәржемәһе)*

## ХАТТАР

### Әхмәтзәки Вәлидиҙең академик В.В.Бартольдҡа яҙған хаттары

### I

Өфө, Пушкин урамы, 105
23/II. 1916

Хөрмәтле Василий Владимирович!

Минең ҡарап еткермәүем арҡаһында Низамиҙың "Хамса"һы йәки Залеман тарафынан "Хәйҙәрнамә" тип аталған 2468 номерлы (йәки Вәлидов тупламаһының 4 номерлыһы) ҡульяҙманың тәүгеһе менән икенсеһенең уртаҡлығы булмауы тураһында хәбәр иттем, шикелле. Ул шәһит тарафынан түгел, ә сөнни тарафынан төҙөлгән (мәҫәлән, ҡарағыҙ: 11-се биттең арты...) Мөхәммәт (пәйғәмбәрҙең) биографияһы.

Билдәһеҙ автор хатта үҙенең тахаллустарын ҡулланмай, тик маани зарап йәки маани наваи кеүек дөйөм һүҙҙәр менән генә сикләнә (мәҫәлән, 28б, 32а, 42б, 63б). Әгәр минең (баҫылырға йөрөгән) отчетымда был ҡульяҙма телгә алынһа (телгә алынмай шикелле), "Хамса-и Низами" урынына "билдәһеҙ авторҙың шиғыры менән (мөтәҡәрип) яҙылған Мөхәммәттең биографияһы" тип атауығыҙҙы үтенәм.

Һуңынан отчетымдың аҙағында (хәҙерге ваҡытта булмаған) Бохара китапханалары тураһында һөйләгәндә, мин, пагинацияһын һәм баҫылған йылын күрһәтмәйенсә, "Сәйах Һинди" китабына һылтанам, хәҙер был китап миндә бар, уның тулы исеме "Бәйәнат сәйах Һинди", Ғәбдерәүфтең әҫәре. 1313 йылда Истанбулда баҫылған минең һылтанмам 25-се биткә ҡарай.

1913 йылда был китаптың А.Н. Кондратьев тарафынан эшләнгән русса тәржемәһе ("Рассказ индийского путешественника") Мәхмүтхужа Бехбуди тарафынан бастырылды. Мин һылтанмаларҙы ошо тәржемә һәм оригинал буйынса эшләнем, әгәр һуң булмаһа, был өстәмәне индереүегеҙҙе үтенәм.

Петербургтан ҡайтҡас, мин Троицкиға (Ырымбур губернаһы) барып килдем. Һуңынан ауырып, ике аҙнанан артыҡ урындан торманым, шуның өсөн юғарыла әйтелгәндәрҙе ваҡытында хәбәр итә алманым. Хәҙер мин, Аллаға шөкөр, һауыҡтым, бәлки, минең отчетым баҫманан сығып киләләр инде.

Үҙемдең шәхси үтенесем буйынса Һеҙҙән хеҙмәттәрегеҙҙе мәҙрәсә китапханаһына ебәреүегеҙҙе һорайым. Үҙемдә булған "З(аписки) В(осточного) О(тделения)"ны һеҙҙең хеҙмәттәрегеҙҙең айырым баҫмаларын мәҙрәсәгә тапшырҙым, китапханала XII–XXIII томдарҙың оттисктары ғына юҡ.

Мәҙрәсә исеменән хеҙмәттәрегеҙҙе (оттисктарҙы ла, айырым баҫылғандарҙы ла) мөмкин тиклем тулыраҡ ебәреүегеҙҙе үтенәм.

Бынан тыш Һеҙ минең өсөн "Записки Восточного Отделения"ның XII һәм XXIII томдарын алып бирә алмаҫһығыҙмы икән һәм үҙегеҙҙең баҫмаларығыҙҙы киләсәктә лә ебәрә алаһығыҙмы?

Төрөктәр тураһында һораштым, үткән көҙ әсир офицерҙар араһында Төркиәнең бик хөрмәтле кешеләре булған, ләкин уларҙың яҙмышы тураһында бында бер нәмә лә белмәйҙәр. Улар хәҙер Рәсәйҙә һис ҡалмаған, ҡасып бөткәндәр тип хәбәр итте миңә бер себер татары. Хатта, Ихсан паша ла юҡ тиҙәр. Ошо сәбәптән булһа кәрәк, Себерҙә һәм бында, Өфөлә, ҡайһы бер татарҙарҙы тентенеләр һәм ҡулға алғыланылар.

Петербургта саҡта уҡ мин һеҙҙең немецсә мәҡәләләрегеҙҙе һорарға теләгәйнем. Уларҙың тик икәүһе генә миндә бар: 1) "Die altturk. Inschr. U die arab. Quellen"; 2) "Mitth. d. Sem. Oriental. Sprachen" да баҫылған мәҡәлә, 1901 йылғы, башҡа юҡ.

Бәлки Һеҙ "Enzyklop. Des Islam"дан да оттисктар алғанһығыҙҙыр. Был мәҡәләләрҙе мин үҙем өсөн һорайым.

Мәҙрәсә китапханаһы өсөн китаптарҙы һәм оттисктарҙы ошо адрес буйынса ебәрә алаһығыҙ: Өфө, "Ғосманиә" мәҙрәсәһе. Канцелярияға.

*Әхмәтзәки Вәлиди*
*ПФА РАН. Ф. 68. Оп. 2. Д.38. Л. 23-24.*

II

Хөрмәтле Василий Владимирович!

Революция мине Һеҙҙән бик күп ваҡытҡа айырҙы. Һәм тик бөгөн генә Һеҙгә сәләмемде ебәрергә мөмкинселегем булды. Һеҙгә хат менән башҡорт Сәғәҙәиевты ебәрәм, үҙегеҙҙең һаулығығыҙ, шулай уҡ А.Н.Самойловичтың һәм И.Крачковскийҙың һаулығы тураһында миңә хәбәр итеүегеҙҙе үтенәм.

Һеҙҙең "Олуғбәк"егеҙ баҫмаһы сыҡҡан тип ишеттем. Уны һәм 1917 йылдың 27 февраленән һуң баҫылған Һеҙҙең бөтә хеҙмәттәрегеҙҙе иптәш Сәғәҙиев аша ебәреүегеҙҙе үтенәм.

Рәсәй һәм ғөмүми тарих буйынса урындарҙы үҙгәртергә кәрәк тигән мәсьәләне рус тарих дәреслектәрендә, төрк-татарҙар һәм кешелек тарихында көнсығыштың роле тураһында һөйләгән үҙәк совет газеталарында күтәреүегеҙҙе үтенәм. Һеҙ бит батша режимы ваҡытында ла Европа тарихы донъя тарихы түгелдер тип күп тапҡыр яҙғайнығыҙ.

Мин Көнбайыш тарихы яңыса яҡтыртылған дәреслектәрҙе күрҙем, ләкин унда Көнсығышҡа ҡарата элек булған система һаҡланған.

*Ә. Вәлидов*
*9/VI. 1919.*

Конвертына ҡәләм менән: "Һеҙ тағы ниндәй (яңы) китаптар яҙҙығыҙ?" – тип өҫтәлгән.

### Әхмәтзәки Вәлидиҙең Истанбул университеты Әҙәбиәт факультеты деканатына яҙған хаты

Әҙәбиәт факультеты деканатына

Хөрмәтле әфәнде!

1909 йылдың июнендә мин Ҡазанда юғары уҡытыусылар мәктәбе "Ҡасимиә"не тамамланым. Алған таныҡлығым революция ваҡытында юғалды. Бынан тыш, Рәсәйҙән ҡасҡанда тотолоуҙан ҡурҡып, яныбыҙҙа таныҡлыҡ түгел, кем икәнлегебеҙҙе таныҡлаған ҡағыҙ киҫәге лә тота алмай

инек. Хәҙерге Рәсәйҙә бөтә милли төрки урта һәм юғары мәктәптәр ябылды һәм улар урынына совет-рус мәктәптәре асылды, "Касимиә" лә башҡа милли мәктәптәр кеүек йәшәүҙән туҡтаны. Сәйәси эмигрант булғаным өсөн, ул мәктәптән йәки Рәсәйҙең һәр төрлө башҡа учреждениеларынан ниндәй булһа ла рәсми таныҡлыҡ йәки раҫлау ала алмайым. Быға ҡарамаҫтан, минең күрһәтелгән йылда "Касимиә"не тамамлауым тураһында шаһит булырлыҡ хөрмәтле кешеләр бар. Улар иҫәбенән мин Закир Ҡадири һәм Абдулла Баттал әфәнделәрҙең Анҡараның икенсе нотариаль конторраһында 23 августа биргән раҫлауҙарымды ҡушымтала бирәм. Минең телгә алынған мәктәпте тамамлауымды раҫлай алырлыҡ икенсе документ булып 1911 йылда Ҡазанда нәшер ителгән минең "Төрк вә татар тарихы" исемле хеҙмәтем була ала. Был хеҙмәтте мәктәпте тамамлау алдынан бер тәнҡиткә яуап итеп яҙған һәм 1912 йылда "Иҙел" газетаһында баҫылған мәҡәләм, шулай уҡ Ҡазан университеты профессор Катанов "Инородческое обозрение" йыйынтығында нәшер иткән мәҡәләһе раҫлай.

Ҡасимиә мәктәбенә дүрт йыллыҡ башланғыс белеме булған балалар ҡабул ителә ине. Уҡыу ваҡыты 12 йыл. Төркиәнең урта мәктәптәр программаһына тура килгән тәүге 8 йыллыҡ уҡыуҙы тамамлағандар башланғыс һәм урта баҫҡыстың уҡытыусылары була ине. Ҡалған 4 йыллыҡ юғары баҫҡысты тамамлағандар урта мәктәп уҡытыусылары була ине. Урта кластарҙа математика (арифметика, геометрия, алгебра), химия, физика, Ҡөрьән тәфсире, фиҡһ, ғәрәп һәм рус телдәре, төрки әҙәбиәте һәм төрки тарихы, ғөмүми тарих, география, уҡытыу һәм тәрбиә ысулы, рәсем дәрестәре уҡытылды. Юғары кластарҙа рус теле, ғәрәп әҙәбиәте, төрки тарихы, төрки әҙәбиәте, Ҡөрьән һәм фиҡһ, педагогика, логика, психология, уҡытыу ысулы өйрәнелде. Төрки әҙәбиәте һәм төрки тарихы ниндәй кимәлдә уҡытылғанын күрһәткән иң мөһим документ булып, шул мәктәптә эшләгән ваҡытта яҙылған "Төрки һәм татар тарихы" исемле китабым хеҙмәт итә ала. Рус телен белеүемдең кимәлен шул мәктәптә башҡарылған һәм Ырымбурҙа донъя күргән Ашмариндың "Татар әҙәбиәте хаҡында" исемле хеҙмәтенең тәржемәһе күрһәтә. Был хеҙмәттәрҙең нөсхәләре Төркиәт институтында бар.

Хөрмәтле әфәндем, һеҙҙән минең белемемде юғары тип ҡабул итеүегеҙҙе һәм тейешлесә итеп факультетта регистрациялауығыҙҙы үтенәм.

Төрки тарихы уҡытыусыһы Вәлиди, 1931 йылдың 1 сентябрь.

*(Ә.Вәлидовтың шәхси архивынан.*
*Баҫмаға ғалимдың ҡыҙы профессор,*
*доктор Иҫәнбикә Туған тарафынан бирелде.*
*Төрөксәнән Ә.Сәлихов тәржемәһе).*

Әхмәтзәки Вәлиди

# БӨРЙӘН БАШҠОРТТАРЫ АРАҺЫНДА

## I

Ағиҙелдең Стәрлетамаҡ тураһындағы ағымының уң тарафында ҡымыҙ эсеп ятҡан башҡорт ауылы Урал тауҙарының ауыҙында ине. Оло юл буйында ултырған был ауылдың халҡы күп ваҡыттан бирле рус һәм татарҙар кеүек мәҙәниәтендә үҙҙәренә ҡарағанда алданыраҡ ҡәүемдәр менән ныҡ ҡатышҡанлыҡтан башҡортлоҡтарын саф көйөнсә һаҡлап килә алмағандар, эштән сығып боҙолғандар ғына. Тел, ғөрөф һәм ғәҙәттәрендә юғары ике күрше ҡәүемдәрҙең тәьҫире күренеп тора. Бында зыян да юҡ кеүек, әммә уларҙың эске һәм тышҡы мәҙәниәттәренә (әхлаҡ һәм йәшәйештәренә) тәьҫирҙәре быларҙы бөгөн тамам аяныс хәлгә килтергән; башҡорттар иркен күсмә тормош ләззәттәрен онотмағандар, уҡыу-яҙыуҙың юҡлығы, сиктән сыҡҡан ялҡаулыҡ тулыһынса боронғоса, әммә кешеләр менән мөғәмәләлә, тормошта көс ҡулланыусы булырға йоҡҡан, ике йөҙләнә, хыянат итә беләләр һәм матурыраҡ кейем кейергә, тәтәй арбалар тоторға, баҙарҙарын да көтмәйенсә эсеп иҫерек хәлдә йөрөргә яраталар. Бына ошо хәлдәр менән был башҡорттар боронғо һөйкөмлө ябайлыҡтарынан, иркен тормоштарынан айырылып, кеше алдында мөхәббәтһеҙ, боҙоҡ, ғәҙәттән тыш ярлы бәндәләр булып ҡалғандар. Быларҙың ауылдарынан тамам үлем еҫе килеп тора һәм араларына килгән кешенең дә дәртен һүндерә, рухын төшөрә. Был ауылда торғаныбыҙҙа мин ысындан ялҡауландым һәм гел йоҡлаусан булдым. Быға студент иптәшем аптырай ине. Мин дә уға был ғәләмдә башҡа бер төрлө эш итергә мөмкин булмағанын һөйләп биреп, йәнә тағы йоҡлай инем.

Ауыл Урал тауҙарының ауыҙында тигән инем. Беҙҙең ауылдың ҡояш байышы яғында сиге беҙгә мәғлүм булмаған сәхрә ялан китә. Ҡояш сығышы яғында тағы ла шундай уҡ осһоҙ-ҡырыйһыҙ тигән кеүек бейек таулыҡ, ташлыҡ, ҡара урман башлана. Урал тауҙарының уң яҡ сиктәре. Бында урмандар яҡшы уҡ йоҡарған, әммә һыуҙар, ҡаҙ таштар матур күренештәргә бай. Беҙ бында ун биш саҡрым эскәрәк кереп йөрөштөрҙөк, эскә кергән һайын яҡшырғандай була. Ҡымыҙ эсергә килеүсе халыҡ араһында күңел күтәрерлек күңелле кешеләр булыуға ҡарамайынса, беҙҙең ошо ауылдан киткебеҙҙе килтереп, теге матур тауҙар, эстәрендә тәбиғирәк, сафыраҡ башҡорттары булғанын күрһәтеп, беҙҙе тарта инеләр.

Ахырҙа аттар ялланыҡ та эйәрләп менеп киттек. Ҡайһы ергә барып етәрҙе, нисә көн йөрөүҙе билдәләмәнек. Шулай ҙа көндәр яҡшы булып, башҡорттар араһында күҙ ҡыҙыҡтырырлыҡ нәмәләр табылһа, Уралды аша сығырбыҙ һәм ун биш көнләп ҡалырбыҙ тип уйлағайныҡ.

Торған ауылдан утыҙ-ҡырҡ саҡрым эскә кергәс тә «бөрйән» башҡорттары араһында булдыҡ. «Ялтыран» исемле ҙур йәйләүҙә ике (Оло һәм Кесе) «Кәпәс» һәм «Ҡолғона» ауылдары, йәғни өс ауыл халҡы бергә йәйләйҙәр. Был «Ялтыран» уларҙың яҙғы йәйләүҙәре. Бесән еткәс, улар бынан төрлө йәйләүҙәргә таралышалар.

Бөрйәндәр бөгөн Орск өйәҙендә дүрт волость. Улар Үҫәргән башҡорттарынан ҡала иң күп һанлы ырыу[1]. Небольсин үҙенең «Ырымбур һәм Әстрәхан тарафына сәйәхәтемдең хисабы» тигән әҫәрендә (Вестник Имп. Рус. Георг. общ. за 1852 г., часть 4) «Башҡорт халҡының сәсәге – үҫәргән, түнгәүер, бөрйән халыҡтарылыр. Былар араһында иң сафы бөрйәндәрҙер», – тигән.

Хәҡиҡәттән, башҡорттар менән яҡын танышлыҡ күрһәтә ки, бөрйәндәр көн-күреш, тел һәм башҡа хосустар буйынса башҡорттарҙың иң саф булғандарын тәшкил итәләр. Әле беҙ булған был ауылдар мәғишәт тарафынан ҡыҫылып, икенсенән, күрше башҡорт һәм татарҙар тәьҫиренә бирелә төшөп, бер аҙ үҙгәргәндәр. Тәбиғәт һәм әхлаҡ боҙолоуы, ярлылыҡ былар араһына ла килеп еткән. Был ерҙә бынан ете йылдар элгәре тиклем булған инем, шул көндән бирле быларҙың үҙҙәрендә, тормоштарында һәм ултырған ер һәм урмандарында күп үҙгәрештәр булған. Боронғо саф тәбиғәтле, алдау-нитеү белмәй торған тоғро, баһадир башҡорттар инде ҡарт кешеләр булып, башҡорттоң ябыҡ урманы араһында ултырған боронғо ҙур-ҙур ҡарағай (нарат) ағастары кеүек аҙайып ҡалғандар. Мал аҙайған, элек ун биш ҡолонло бейә бәйләгән башҡорттар ике-өс бейә бәйләйҙәр, ҡайһыларында ул да юҡ. Элекке таҙа, һәйбәт ҡымыҙ урынына яртыһы йәки өстән ике өлөшө һыу булған бейә айраны эсәләр. Халыҡты алдында торған тормошҡа әҙерлектәре булмау иҙә. Былар рәтле бер тормошҡа кергәнсе, йә бөтөнләй бөтөп өлгөрөрҙәр, йәки ҡалһалар ҙа аҙ ҡалырҙар. Кәпәс, Ямаш, Бикташ ауылдары 1858 йылғы унынсы ревизия ваҡытынан бирле һис артмағандар, был көн бөтөнләй кәмейҙәр. Урындағы чиновник быны асыҡ хисаптар менән күрһәтте.

Беҙ торған ауылыбыҙҙан йөҙ егерме саҡрым ҡәҙәре эскә керҙек, көнкүреш, тормош көтөү эштәрендә алға барған һис бер башҡорт ауылы юҡ. Бөтә өсөнсө бөрйән волосында русса һәм мосолманса бер мәктәп, ауырыуҙар өсөн бер больница юҡ. Ауырыуҙар шул көйө тыныс ҡына үлә, доктор-фәлән килмәй. Бөтөн волосҡа рәтле бер мулла юҡ. Булғандары сиктән тыш наҙан һәм халыҡ ҡашында бер ҙә иғтибарҙары юҡ. Бөтә

волоста бер газета алынмай. Халыктың иктисади хәлен йүнәтер өсөн төҙөлгән йәмғиәттәр был урындарҙы бөтөнләй белмәйҙәрҙер ҙә. Бөтә дәүләттәрен юҡ хаҡҡа урыҫ кулактарына һатып бөтөрәләр.

«Миндеғол» тигән ауылдан йыраҡ китергә тура килмәне, көндәр бик ямғырлы булды, кире әйләндек. Бәлки, арыраҡ башҡорттарҙың боронғо эске мәҙәниәттәрен яҡшы һаҡлап килгәндәре аҙыраҡ кеүек күренә. Эскә керә биргән һайын башҡорт әҙерәк алдаусан күренә бара. Ләкин беҙ ары китә алманыҡ. Был башҡорттар үҙҙәре лә, уларҙың ҡәүми хосусияттары ла бөтөп бара. Ләкин шуныһы ҡыҙғаныс ки, Русияла этнография ғалимдары бөрйәндәрҙең, бигерәк тә, ошо урман бөрйәндәренең мәғишәт, әхлаҡ, тәбиғәт һәм рухи байлыктарын, музыкаһын, халыҡ әҙәбиәтен өйрәнергә, ҡиәфәт йәһәттән ысындан тикшерергә, тарихи ҡомартҡыларын йыйырға өлгөрә алмағандар, эшләнгәне һис тә ҡәнәғәтләндерерлек түгел.

1899 йыл «Этнографическое обозрение» журналының 43-сө битендә Никольский русса һәм башҡа телдәрҙә башҡорттар хаҡында яҙылған әҫәрҙәрҙең библиографияһын нәшер итте һәм шулай итеп башҡорттар хаҡындағы әҙәбиәтте уҡыуҙы еңеләйтте. Ләкин беҙ бында бөрйән башҡорттары хаҡында бер ҙә рәтле нәмә тапманыҡ, ҡыҙғаныс, башҡорттарҙың иң сафы булған бөрйән һәм уның үҙенсәлеге бөтөп бара. Ә ғалимдар һәм ғилми йәмғиәттәр шуны иғтибарға алмайҙар. Беҙҙең ғалимдар һәм ғилми йәмғиәттәр Себерҙең әллә ҡайһы соҡорҙарындағы, бөтөн халҡы ике меңдән ғибәрәт булған ваҡ таифаләрҙе өйрәнеү юлында байтаҡ ҡына аҡса сарыф итә. Әммә күҙ төбөндәге ошо башҡорттарҙы өйрәнеү хосусында бер нәмә лә эшләмәйҙәр. Беҙҙең үҙебеҙҙә инде бер нәмә лә юҡ тиһәк тә ярай. Тик һуңғы көндәрҙә бер-ике мәҡәлә менән бер китап сығып ҡалды. Һаҙый әфәнде Атласиҙың ошо йылғы 9–10-сы һандарында «Шура»ла мәҡәләләрен баҫтырып, шул уҡ инде ошо йылды «Башҡорт тарихы» менән Ҡазанда «Өмөт» матбағаһында баҫылып сыҡҡан китап һәм «Башҡорттар бөтөрме?» тигән бер кескенә рисаләһен әйтәмен. Тағы мәрхүм Өмөтбаевтың «Ядкәр»е бар икән.

«Башҡорт тарихы» тигән китап үҙе өҫтөн һәм өйрәнеү кеүек яҙылған бер әҫәр булғанлыҡтан теманы бик аҙ ғына аса. Автор Игнатьев менән Гуревичтың 1883 йылғы «Справочная книга Уфимской губернии» тигән китабы, хатта бүлектәренең тәртиптәрен дә рәтләп үҙгәртмәйенсә тәржемә иткән. Тик араға «Мөстәфад әл-әхбәр», «Ҡамус-әл-әғләм» кеүек китаптар һәм Хвольсон, Бүкәйханов кеүектәрҙең әҫәрҙәренән бәғзе һүҙҙәрҙе һәм беҙ мосолмандар, тигән кеүек ғибәрәләр керткеләүенә ҡарап, мөхәррире мулла Мөнир Һаҙыев тип ҡуйған. Мөнир әфәнде башҡорт тарихы менән ижтимағи итеп бик яҡшы итә. Ләкин уға былай бер өҫтөн яҙылған әҫәрҙе тәржемә иткәнсе, арыуыраҡ китаптарҙы ҡулланып, үҙаллы эшләргә кәрәк

ине. Был китапта башҡорттарҙың асылдары хаҡында яҙылған фекерҙәр бик иҫкергән. Бының өҫтөнә китап та тик шул белешмә китаптарында ғына булырға тейешле бер һүрәттә яҙылған. Фәнни бер нәмә лә юҡ. Башҡорттарҙың ырыуҙары һәм уларҙың ҡулға төшкән хәтле шәжәрәләре һәм халыҡ араһындағы хикәйәләре тикшерелергә боронғо Европа һәм ғәрәп тарих, географтарының хәбәрҙәре менән сағыштырып, уларҙың асылдары, этник составтары хаҡында шул ваҡытта ғына бер ҡарарға килергә кәрәк ине. Был китапта иһә ғалимдарҙың һүҙҙәрен күсереү менән эш бөткән. «Башҡорт тарихы» тип яҙылған әҫәрҙе авторҙың (әлбиттә, Мөнир Һади әфәнденең түгел) ҡыҙыҡ булһын өсөн тигән кеүек ихтилалсы Ғабдулла мулланың (1756 йыл) вафаты менән бөтөрөп ҡуйыуы бер ҙә мөғҡүл түгел ине. Был эш Башҡорт тарихына ҡараған бер мәҡәләлә булғанда ғына килешә. Әммә «Башҡорт тарихы» булһа, унда ул ҡәүемдең Рәсәй ҡулына кереүҙән элгәре хәлдәре, мәғлүм булған ҡәҙәре хандары һәм Рәсәй ҡул аҫтына кергәндән һуң хөкүмәттең, мәҫәлән, уларҙың ерҙәргә вә идара хосустарына ҡарап төҙөгән саралары һәм был сараларҙың һәм йәшәйештең ошо һуңғы заманғы башҡортто нисек килтереп сығарыуы хаҡында һөйләргә кәрәк ине. Ошоноң өсөн беҙ Мөнир әфәнденең был хеҙмәте менән генә ҡәнәғәтләнмәйбеҙ. «Башҡорт тарихы» яҙыу кеүек оло эшкә керешкәс, уға тағы бер аҙыраҡ һиммәт сарыф итергә тура килһен тип өмөт итәбеҙ.

Мәшһүр ғалим Киппин 1861 йыл «Европа һәм Рәсәйҙәге инородецтарҙың тарихтарына ҡараған материалдарға тарихи тәртиптә күрһәткес» тип яҙған әҫәрендә башҡорт тарихына ҡараған йылъяҙмаларҙы һәм башҡа урындарҙағы хәбәрҙәрҙе күрһәткән. Юғарыла телгә алынған Никольскийҙың әҫәре бар. Башҡорт фетнәләренә ҡараған әтрафлы мәғлүмәт Фирсовтың 1864 һәм 1866 йылдарҙа «Ученые записки Казан. Ун-та» мәжмуғаһында баҫтырған оло һәм бик ҡәҙерле әҫәрҙәрендә һәм Уральскийҙа тәбиғәт һөйөүселәр йәмғиәте тарафынан сығарылған запискаларҙың XIII жилдендә (1892 йыл) профессор Сомьеның «Башҡорттар хаҡында» тигән әҫәре бар. Бында бигерәк антропологиялары хаҡында тикшеренеүҙәр яҙылған. Бынан тыш Ырымбур тарихына ҡараған төрлө ваҡытта төрлө кешеләр тарафынан яҙылған әҫәрҙәр һәм Ырымбур архив комиссияһы йыйынтыҡтары бар. Рычков, Черемшанов, Вишнецкий, Нибольсин, Галкин вә башҡаларҙың әҫәрҙәре лә файҙа итер ине.

Һаҙый әфәнде Атласов башҡорттарҙың боронғо урындары һәм асылдары хаҡында ғына яҙған. Өмөтбаев башҡорт этнографияһына ҡараған тик бәғзе материалдар ғына биргән «Башҡорттар бөтәләрме?» тигән китабы бер фекерҙән ғибәрәт тиерлек. Ошо рәүешсә беҙҙең башҡорттар һәм уларҙың тарихтары, мәғишәттәре, халыҡ әҙәбиәттәре

хаҡында бер нәмәбеҙ ҙә юҡ тиергә мөмкин. Был, ғөмүмән, башҡорттар хаҡында булды. Әммә беҙҙең алдағы бөрйән башҡорттары хаҡында бер ҙә, исмаһам баяғы тарих китаптарында ғына, «Мөстәфад әл-әхбәр», «Тарих ҡәүме төрки»ҙәрҙә булһын, бер ауыҙ һәм бер кәлимә лә әйтелгән юҡ.

Шулай итеп, бөрйәндәр – башҡорттарҙың саф булғандары – үҙенсәлектәрен тулыһынса юғалтып баралар. Инде Европа кешеләренең, рустарҙың эстәре бошмай икән, беҙ ҙә быға шулай һалҡын ҡан менән генә ҡарап торорбоҙмы быларҙың тормошон, йәшәйешен йүнәтешергә, ярҙамлашырға бер аҙ кешеләребеҙ керешһәләр, был әле бөтмәгән музыка, халыҡ әҙәбиәте, боронғонон ҡалдыҡтарын тикшерерлек, өйрәнерлек кешеләребеҙ ҙә табылыр ине, тип уйлайым.

## II

Бөрйән башҡорттары, тинек. Былар ниндәй халыҡ? Быға яуап бирер өсөн башҡорттарҙың үҙҙәрен белергә кәрәк булыр. Башҡорттарҙың асылдары хаҡында ғалимдар һаман бер фекергә килеп етмәгән. «Башҡорт тарихы» китабында ла бәғзе фекерҙәр һөйләгән Һаҙый Атласи ҙа быларҙың саф төрки булыуҙарына дәғүә итә. Был хаҡта һуңғы заманда иң мәғҡүл булған фекер «башҡорттар ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ һәм Иҙел буйы татарҙарының асылы булған ҡыпсаҡ кеүек ҙур ырыуҙарҙың бәғзе фин ҡәбиләләре менән ҡатнашыуҙан тәшҡил иткән ҡәүем» булыуылыр. 1862 йыл Рычков («Топография Оренбургская» китабында) телгә алған башҡорт воластарынан мең, табын, ҡыпсаҡ, найман, миркет, ҡатай, гәрәй, таҙлар, ҡырғыҙ кеүектәре шөбһәһеҙ төрки ҡәбиләләр. Әммә арҙар, һарайлы, ҡыуаҡан, ыванииш, ҡаршын кеүек воластары фин-уғыр нәҫеленән булһалар кәрәк. Катанов башҡорттарҙы төркиләшкән финдар, ти[2].

Ләкин, минеңсә, быларҙы бер аҙ финдар менән ҡатнашҡаны өсөн фин тәьҫире күргән төркиҙәр тиергә. Сөнки быларҙа финлыҡ ғәйәт аҙ, тәбиғәт һәм әхлаҡтарына ул һис тәьҫир итә алмаған. Бөрйән халҡын Аристов, фин булырға кәрәк, ти[3].

Европа ғалимдары бөрйәндәр хаҡында һис бер тарихи хәбәр килтермәй. Улар хаҡындағы тарихи хәбәрҙәрҙе донъяға сығарыу шәрәфе Морат әфәнде Рәмзигә ҡайта. Ул «Тәлфиҡ әл-әхбәр»енең беренсе томында бөрйәндәр хаҡында ғәрәп авторҙарының V быуаттан башлап яҙған хәбәрҙәрен йыйған. Уларҙың һүҙҙәре буйынса, бөрйәндәр бөгөнгө Хива ханлығы янында Манғышлаҡ тирәһендә торғандар. Ибн Әл-Әсир ҡайҙан алыптыр, быларҙың Нәүширван һуғыштарын зикер итә. Әбү Ғәбит Әл-Бакири хәҙрәте Ғосман хәләфәте ваҡытында сәхәбәләрҙең бөрйәндәр менән

һуғыштары булғанын һөйләй һәм шул ваҡыттағы шағир Әбү Нәхил Әл-Тамими тигән кемсә: «Фәғәдү әхүәле бәйен Рум вә бөржана», тип бөрйәндәрҙе шиғырында иҫкә алған. Бөрйәндәр ул ваҡыт һаман башҡорттар менән бергә йәки башҡорттарҙың бер ҡәбиләһе һүрәтендә булған булырға кәрәк. Сөнки башҡорттар ун алтынсы быуатҡа ҡәҙәр Иртыш менән Арал күле араһының төнъяғында бәжәнәк һәм кимак халыҡтары менән күрше йәшәгәндәр[4].

Һуңынан ҡаҙаҡтарҙың ҡыҫтауы арҡаһында ғына төньяҡҡа хәҙерге урындарына күскәндәр һәм шунда бәғзе фин ҡәбиләләре менән ҡатнашҡандар[5]. Был бөрйәндәр ҙә хәҙерге урындарына шул ваҡытта килгән булһалар кәрәк. Хандары Ҡазан баҫып алғандан һуң Рәсәйгә мөрәжәғәт иткәндәр һәм XVII–XIII быуаттарҙағы башҡорт фетнәләрендә бөрйәндәр иң алдынғы урында булғандар. Шул рәүешсә араларында булған бөрйән халҡы ла пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд ғәләйһиссәләмдең тыуыуынан элгәре үк тарих битенә кереп ҡалған һәм был көнгә ҡәҙәре онотолмай килгән бер ҡәүем. Быларҙың араһында йөрөгәндә лә ҡәҙерен белеп йөрөргә кәрәк әле, тип уйланыҡ.

## III

Беҙ бөрйәндәр араһына фәнни бер маҡсат менән кермәнек. Ошонон өсөн дә йөрөүебеҙ фәнни бер төҫ ала башламаһа ине тип, ишеткән ҡурай, йыр, хикәйәләрҙе һәммәһен дә ҡыҙыҡ өсөн генә тыңлаштырҙыҡ. Иҫке яҙыу фәлән йыйманыҡ. Йыр һәм хикәйәләрҙе яҙып маташманыҡ. Ҡымыҙ эсеп торған ауылыбыҙҙа рәтләп ҡурай уйнай белгән башҡорттарҙы белерҙәр әле тинек һәм юлда барғанда ла ҡурай тауышы ишетелмәҫме тип ҡолаҡ һала-һала барҙыҡ. Ялтыран йәйләүенә барғас, төшкән хужабыҙҙан ул тирәлә ҡурайға оҫта кешеләрҙең исемдәрен яҙып алдыҡ, шул ауылдан бер-ике ҡурайсыны уйнарға саҡырҙыҡ. Зыяитдин һәм Хәйрулла исемдәге егеттәр ине. Ҡурайҙа ауыл араһында йыйылып уйнарға уңайһыҙланалар икән. Ғәҙәттәренсә, кис булғас, йәйләүҙең ситендәге тау башына мендереп ут яҡтылар һәм әкертен генә уйнай башланылар. Беҙ ҙә барҙыҡ. Уйнаусылар зарурһыҙ ғына уйнайҙар. Беҙ боронғо көйҙәрҙе һораныҡ. Уйнаштырҙылар. Ләкин аҙ беләләр икән. Боронғо шағирана тормошо йыраҡлашҡан һайын халыҡ унын йырҙарын да, көйҙәрен дә онота бара, унын урынына йәнә мәғишерәк булған татар таҡмаҡтарын, частушкаларҙы ҡабул итә баралар. Хәҙер башҡорттарҙа ысын инҡилап ваҡыты. Боронғонон ҡалдыҡтары инде уларҙа бик ғәзиз һаналырға тейеш. Оҙаҡ үтмәҫ, ул оҙон моңло көйҙәр кереп ҡалһалар, нота дәфтәрендә генә ҡалырҙар. Уларҙың

урынын алып бөтөрөрҙәр. Был йәш егеттәр беҙгә “Юлтый”, “Ҡаҙаҡ”, “Ишмырҙа”, “Ашҡаҙар”, “Циолковский”, “Карабаев”, “Йософ майор” көйҙәрен уйнанылар. “Перовский”, “Суҡ муйыл”, “Зәһира” тигән көйҙәргә бейенеләр. Икенсе көн икенсе ауылда йәнә шундай уҡ костер янында йыйылып ултырҙыҡ. Бында Бәхтиәр тигән егет туғыҙҙан ун икегә ҡәҙәре “Айыу майор”, “Калматай” кеүек көйҙәрҙе уйнаны һәм береһе яҡшы ғына тенор тауышы менән ҡушылып йырланы. Беҙ был уйнаусыларға егермешәр тин аҡса биргән инек, ахыры быларҙа был аҡса күп күренәләр, тағы күңелләнеп уйнанылар. Беҙгә бер бөрйән: “Шул урындан йөҙ саҡрым ҡәҙәре ерҙә Темәс һәм Күсәй ауылында бер кеше “Мораҙым” тигән көйҙө уйнай”, – тип һөйләне. Мин быны ишетергә бик теләнем. Сөнки ул ғәйәт ҡыҙыҡлы тарихи бер йырҙың көйөләр. Алтын Урҙа ханы Туҡтамыштың вәзире Иҙеүкәй үҙенең балаһы Нуреттин (Мораҙым) менән боҙолошҡан. Ошо хәдисә хаҡында бөтә төнъяҡ төркиҙәрендә әллә ни ҡәҙәре хикәйәләр һәм йырҙар һөйләнелә. Радлов, Потанин, Мелиоранский, Вәлиханов һәм башҡалар был хаҡтағы хикәйә һәм йырҙарҙы яҙып алғандар. Башҡорт араһындағы «Мораҙым» йыры «Йәдкәр»ҙең авторы Өмөтбаев тарафынан яҙып алынып, шул китабында баҫылған. Әммә уның йырын, көйөн башҡорт ауыҙынан, ҡурайҙан ишетеп яҙып алғанда, ул хоҙа тарафынан бирелгән донъя баһалы бер ниғмәт булыр ине. Хоҙа насип итерме шуны ишетергә һәм яҙып алырға? Тик был юлы насип булманы; ямғырҙар ул ергә барып етергә ирек бирмәне. Алланан һорайым, шуны ишетһәм икән, тинем. Сөнки улар беҙҙең төньяҡ урта төркиҙәрен мәңгелек бер тарихи романсылар. Халыҡ уны хәҙер биш йөҙ йылдан бирле һаҡлап килә. Әгәр бөтөп, юғалып китһә, ҙур бәхетһеҙлек булыр. Башҡорт көйҙәрен һәм йырҙарын йыйыуға рус ғалимдары бик аҙ иғтибар иткәндәр. Игнатьев кеүектәр 1870 йылдар тирәһендә Император география йәмғиәттең Ырымбур филиалының йыйынтыҡтарында башҡорт йырҙары баҫтырғандар. Профессор Березиндың төрки хрестоматияһының III томында башҡорт йырҙары баҫылған. Башҡорт көйҙәрен йыйыу хосусында ныҡыраҡ тырышҡан кемсә Рыбаковтыр. Ул башта 1894 йылда “Живая старина” журналының өсөнсө һәм дүртенсе һандарында башҡорт, типтәр, татар йыр вә көйҙәре хаҡында тип, бер әҫәр яҙҙы (ҙур күләмдә, 40 битлек). Бында байтаҡ ҡына типтәр, башҡорт, татар көйҙәренең ноталарын яҙған. Икенсе 1896 йылда Император музыка йәмғиәтенең йыйынтығында ҡурай хаҡында бер әҫәр яҙҙы. 1898 йыл Фәндәр академияһының яҙмаларында һәм айырым һүрәттә “Урал мосолмандарының музыка һәм йырҙары» тигән оло әҫәрендә нәшер иттерҙе. (Был һуңғыһын Академия нәшер иткән). Ул һуңғы әҫәрендә байтаҡ башҡорт көйҙәрен һәм йырҙарын баҫтырған һәм башҡорттарҙың тормоштары хаҡында байтаҡ нәмә яҙған. Ҡурайсыларҙың рәсемдәрен алған. Уның был

яҙыуҙары сәйәхәтенән һуң 1893–1895 йылдарҙа Верхнеуральск өйәҙендә ошо башҡорт музыкаһы йыйыу ниәте менән сыҡты. Бынан башҡа Лейпцигта һәм Петербургта бәғзе бер башҡорт көйҙәренең ноталары нәшер ителде. Ләкин уларҙың баштарына Рыбаковтан алғандарын яҙып ҡуйғандар. Рыбаков Верхнеуральск өйәҙендә Төңгәүер волостары тирәһендә генә йөрөгәне өсөн иң күп, хатта көйҙөң иң саф ерҙәрендә булмаған тиергә мөмкин. Бының өҫтөнә Рыбаков үҙе үк Европа кешеһенең ҡолағы булараҡ башҡорт көйҙәрен тиҙ эйәләшә алмай таный. Башҡорт музыкаһы менән яҡшы таныш булған бер зат: «Рыбаков әҫәрен сүп араһына ырғытырға кәрәк, ул башҡорт көйөн һис аңламаған, һис белмәгән", – тигән ине. Ҡазанда башҡорт көйҙәре тип уйнаған «Һаҡмар» менән "Ашҡаҙар" бында бөтөнләй башҡа. Йәғни башҡорт көйҙәре татар уйынсылары тарафынан да рәтләп өйрәнелмәгән. Ошоноң өсөн был инде башҡорт көйҙәрен башҡорттарҙың үҙҙәренән башҡа халыҡ рәтләп белмәй һәм ул ҡағыҙға яҙылмаған тип әйтергә мөмкин.

Шулай итеп, башҡорттарҙың сағыштырмаса ҡул теймәгән көйө тора. Төньяҡ төркиҙәрҙең эсендә башҡорт халҡы үҙенең музыкаға ғына шәплеге менән айырыла. Ҡырғыҙ, татар һәм башҡаларҙа бындай байлыҡ юҡ[6]. Беҙ үҙебеҙҙең милли музыкабыҙҙы юғалтһаҡ, киләсәгебеҙ өсөн ҙур енәйәт яһаған булырбыҙ. Башҡорт көйҙәрен тыңлап ултырғанда нисек тәьҫир итә алғанлығы хаҡында берәй һүҙ әйтеү ниәтендә түгелме. Ошондай музыкант булмағаным өсөн был көйҙәрҙең музыка ғилеме йәһәтенән әһәмиәте, төрлө музыка араһындағы урыны хаҡында ла бер һүҙ әйтә алмайым. Тик был хаҡта телгә алған Рыбаковтың ғына бәғзе бер һүҙҙәрен күсерһәм, бер аҙ файҙа булыр тип уйлайым. Ул былай тип яҙа:

"Башҡорт йырҙары араһында иң күбеһе бик күтәренке тауышлы баритон булалыр. Тенорҙар тағы күберәк була. Бындай йырсыларҙың тауышы ғәҙәттән тыш балалар тауышына яҡынлаша. "Бас" булған йырсылар бик һирәк. Йырлаған ваҡытта һуңғы нотаны бик оҙон итеп, бик иғтибар менән тауыштарын һелкетеп һуҙалар. Был хосусиәткә бигерәк оҙон йырҙарҙы йырлағанда диҡҡәт итәләр.

Был башҡорттарҙың йырҙарында, көйҙәрендә, мәҫәлән, рус йырҙарында булған кеүек алға барған һәм тәрән хасиәт һәм ҙур лиризм әҫәрҙәре юҡ. Бында йырлаусы бөтөнләй бер ситтә битараф тора. Һәм тәбиғи музыканы тыш яҡтан ғына ҡуҙғатҡан кеүек күренә. Йәғни, ул йырҙарҙың үҙҙәрендә лә, әллә ниндәй тәрән хасиәт күренмәгән кеүек, йырлаусылары ла тәрән хасиәт аҫтында йырламайҙар. Быларҙа әле ныҡлап, ысынлап рухтан сыға торған тауыштар юҡ, йәки булһа ла, беҙ аңлай алмайбыҙ булһа кәрәк.

Башҡорт йырҙары артыҡ шиғриәттәре һәм йәнгә артыҡ үтә торған көйҙәре менән айырыла. Башҡорттарҙың музыкантлыҡ һәм

шағирлыҡтары татарҙар менән сағыштырғыһыҙ ҡабул итмәҫ дәрәжәлә юғарылыр. Уларҙың шағирлыҡтары Уралдың ғәжәйеп тәбиғәтенә артыҡ яҡынлыҡтары сәбәпле булһа кәрәк. Уларҙың һаман тәбиғәттең ысын балалары булыуҙары, әхлаҡ йәһәтенән икенселәр тәьҫиренән боҙолмаған, тирә-яҡ мөхиттәренең киң, иркен булыуы араларына шәхси дошманлыҡтар әле кермәгән таҙа, саф булыуҙары артыҡ дәрәжәлә ябай һәм уйсан булыуҙарына сәбәп булған. Уларҙың әҙәби ҡаттары әле бик таҙа: араларында шағирҙар йырҙар сығарып, шуға махсус көйҙәр сығарыусы һәм шағирлыҡ һәм композиторлыҡ хасиәттәренә малик булған кешеләр бар. Улар ҡурай һәм думбырала уйнайҙар. Ҡурайҙың ваҡ тишектәре ярҙамы менән килеп сыҡҡан тауыштар йомшаҡ һәм ҡурай шул тиклем йәнгә ныҡ тәьҫир итә торған йомшаҡ вә аҡрын ғына тауышлы булыуы менән башҡорт көйҙәре бик артыҡ дәрәжәлә киң һәм матур. Шул матур көйҙәрҙе юғары (нәҙек) тауышлы булған башҡорт йырсыһы аҡрын ғына һуҙып, оҙонайтып ебәрһә, тыңлап ултырыусылар ниһайәтһеҙ бер юғарылыҡта аҡыртын ғына юғалып киткән кеүек булалар. Әммә татар йырҙары иһә тик бер урында ғына тыпырҙап торған йәки бер урынға бәйләп ҡуйылған кеүек торалар. Башҡорт көйҙәренең үҙҙәренә махсус булған бер матурлыҡтары, серҙәре бар. Уларҙа ниндәйҙер бер билдәһеҙ нөктәгә йүнәлеү, ынтылыу һиҙелә. Башҡорт көйҙәрендә башҡа шәреҡ көйҙәрендә булған кеүек юҡ-бар хосусиәттәр сығарып, биҙәкләп маташыу юҡ. Быларҙы ритм (бер тигеҙ ағым) тота. Татар һәм башҡаларҙың йырҙарындағы кеүек шылтыр-мылтырҙары юҡ. Һәм улар Европа көйҙәренең ритмдарынан айырылһа ла бик аҙ айырылалар. Быларҙы ишеткән ваҡытта инсан быларҙың алға барыу менән килеп сыҡҡан һуңғы заман Европа гармонизацияһын уйлай башлай. Һәм ошо йәһәттән уларҙа айырым бер яңылыҡ, бер тәрәҡҡи әҫәре һиҙелә. Быныҡ менән мин был көйҙәрҙә Европа тәьҫире бар тип әйтмәйем. Нисек тә быларҙа бер яңылыҡ бар, тәрәҡҡи бар, тип кенә әйтәмен. Был ҡәүемдең (башҡорттоң) көнкүрештәге алға барыу аҙымын уның шиғри эшмәкәрлеге менән тиңләгән ваҡытта уның беренсе хосуста бик артта ҡалғанлығы, әммә икенсе шағирлыҡ йәһәтенән тиңәлмәҫлек дәрәжәлә алға киткәнлеге күренә. Уның музыкантлығы өҫтөнә араларындағы мәҡәлдәр, мәҫәлдәр, хикәйәләргә бәйлыҡтарын ҡушһаҡ, беҙҙең был дәғүәбеҙ иҫбат ителгән булыр. Бөтә тикшеренеүебеҙҙең нәтижәһе шул ки: был ҡәүем мәғишәт, донъя әһеле булырға ҡарағанда артығыраҡ художник. Ул үҙен ихата ҡылып алған Уралдың тәбиғәтендәге шағирлыҡ менән иҫергән. Ул донъяла, тормошта ҙур эш башҡара ла алмаҫ һәм уға һәләтле лә түгел. Ул һиҙгер һәм һәр ваҡыт уйлаусан шағир"[7].

Музыка бүлегендә киң ҡараштары булған Рыбаков йәнәптәре көйҙәре хаҡында ошо фекерҙе әйтәм. Улар башҡорт музыкаһында яҡшы уҡ ҙур

тәрәккі әҫәре таба. Ләкин ундағы матурлыкты тик бер тәбиғи генә матурлыҡ тип атай һәм асыл көйҙә ҙур лиризм һәм тәрәкҡи иткән хасиәт әҫәре тапмай йәки булһа ла быны "беҙ һиҙеп бөтөрә алмайбыҙҙыр" ти. Рыбаков йәнәптәренең ошо һүҙҙәренән һәр икеһе ихтимал дөрөҫ булһа кәрәк, ләкин һуңғыһы тағы ла дөрөҫөрәк булыр. Башкортта хәсиәттең музыкаларында сағылырлык ысын тәрәкки булмаҫ. Бәлки тышкы мәҙәниәт йәһәтенән түбән булыуы эске бер яктан ҙур тәрәкки итеүенә ирек бирмәйҙер. Ләкин ниһәйәтһеҙ оҙон ғүмерендә үҙенә күрә бер кимәл тапкан булыуы ла шөбһәһеҙҙер. Һуңғы өс-дүрт быуат эсендә башкорт үҙенең иркен матур тормошондағы ләззәтенең янына кайғы һәм хәсрәттәрҙе лә башка төрки кәүемдәрҙә күрелмәгән бер һүрәттә күрҙе. Хасиәттең иң каты хөкөмө аҫтында кисергән ошо быуаттар эсендә "Урал" уларҙы үҙенең матурлығы менән тәрбиәләне. Һәм шағирлыктарын һүндермәй һакларға өлгөрҙө. Тарихтың, Уралдың тәрбиәләре аркаһында башкорт, тышкы культураһының бүтән булыуы сәбәпле, ысындан тәрәкки иткән хасиәткә малик була алмаһа ла, тәбиғи шағирлык, тәбиғи лириклыктың өҫ кимәленә етә алған. Европа мәҙәниәтенә һис мөнәсәбәте булмаған тәбиғи курайҙарының тишектәренән акрын ғына сыккан моңло, тәьҫирле тауыштарҙың серҙәрен, төрки телен, төрки кәүеменең рухи тормошон бер ҙә белмәгән Рыбаков йәнәптәре аңламаһа ла бик хаклы булыр. Йәнәб ғалиҙәре бик белеп таныйҙар.

Рыбаков йәнәптәре был көйҙәрҙе боронғо башкорттарҙа булмаған тигән кеүек бер мәғәнә менән яңылык таба. Европа тәьҫире аркаһында килеп сыккан тиергә оялһа ла, яңылык бар тигәнен калдырмай. Мин иһә быға мөслим булмаҫ инем.

Кытай тарихсыһы Мин Хун һәм Плано Карпини татар хандарының һәм халыктарының музыкаға ни дәрәжәлә бирелгәнлектәре хакында күп хәбәрҙәр яҙғандар. Мин Хун татар халкының мәжлестәре йыр һәм музыканан башка булмаған тип һөйләй[8].

Бату хан янына килгән көнбайыш Европа илселәре лә быны хикәйә итәләр. 960-сы йылда Урумчи тирәһендә тороусы уйғырҙарға килгән кытай илсеһе Ван-Ян уйғырҙарҙың музыка һәм йырын бик кеүәтле булғанлығы хакында хикәйә итә. Уйын мәжлестәре яһайҙар, ғади мәжлестәрендә лә һәр вакыт музыка була; быларҙа мандолина һәм 20 кыллы гитаралары бар, ти[9].

Иакинф тәржемә иткән кытай тарихтары төркиҙәрҙең һундар, тукюлар дәүерендә музыка бик кеүәтле булғанын һөйләй. Урта Азияла уйғыр ханы ғәҙер хан, сығатай ханы Туклык хан, Тимер бабаларынан Бабыр Солтан, Әбү Сәғиттәр һәм Ғалишир Навои, Панаи кеүектәр музыкаға бик оҫта булыуҙары менән мәшһүр булдылар. Бабыр менән

Алиширҙың музыка һәм прасодия фәненә ҡараған әҫәрҙәре булған. Мәшһүр "Ҡотаҙғу белек" һәм уға оҡшатылып яҙылған "Мәхбүб-әл-ҡәлеб" китаптарында уйын һәм музыка хеҙмәттәре һаналған. Шәйбани хан үҙенең бик яҡшы музыканты Ғәлләм Шадины Ҡазан ханы Мөхәммәт Әмингә бүләк иткән. Хандар һәм вәзирҙәр янында һәм башҡа халыҡ араһында, һуң заманда муллалар фекере ҡеүәт тапмаҫлыҡтан элгәре, шул дәрәжәлә мәшһүр һәм ҡеүәтле булған ки, уны һанап торорға өлгөрөп булмаҫ. Боронғо заманда музыканың беҙҙең халыҡҡа шул дәрәжәлә таралған булыуы төрки араһында ошо көн музыка йәһәтенән ҡәрҙәшлек булыуға һәм араларынан, мәҫәлән, башҡорттар кеүек яҡшы шартта булғандарында уның яҡшы тәрәҡҡи иткән бер һүрәтен һаҡлап алып килеүенә сәбәп булған. А.Д.Руднев 1910 йыл шәрҡиәтсе Потаниндың етмеш йыллыҡ юбилейына төҙөлгән йыйынтыҡта «Монгол ҡәбиләләренең көйҙәре» тип, бер әҫәр нәшер итте. Ҡаҙаҡ һәм һарт төркиҙәренең көйҙәре Готовитский һәм Пфеннингтар, ғосманлы төркиҙәренең көйҙәре (1903 йыл "Труды по востоковедению"ның III томы) Миллер тарафынан нәшер ителгәнен әйткән инем. География йәмғиәтенең этнография бүлегенең яҙмаларында 1890-сы йыл (XVII том, 1-се бүлек) Подносов тарансы көйҙәрен нәшер итте. Йәнә шул уҡ Подносов 1890-сы йыл ғазан археология йәмғиәте мәжмуғаһында (XIII том, 1–6-сы бүлектәр) шундай уҡ тарансы көйҙәрен нәшер итте. В.Мушков йәнәптәре шул уҡ ғазан тарих йәмғиәте йыйынтығының XI, XII, XIV, XVII томдарында «Материалы для характеристики музыкального творчества инородцев Волжско-Камского края» тип, татар, башҡорт, фин көйҙәрен баҫтырҙы. Бынан башҡа Себериә, кавказ, Ҡырым татар көйҙәре лә төрлө ерҙәрҙә аҙыраҡ баҫылғыланы. Бына ошо йыйынтыҡтарҙағы көйҙәрҙе бер-береһе менән сағыштырып ҡараған, ентекләгән ваҡытта араларындағы ҡәрҙәшлек ап-асыҡ күренеп тора. Ғәҙәттән тыш киң интервал: секста, шпетим, нондарҙы ҡулланыу, традицияларға ҡарамайынса, звукорядтарҙы бик киң итеү, ете ҡатлы йырҙарҙың күплеге бөтә был көйҙәр араһында аҙмы-күпме уртаҡ бер һүрәттә бар. Музыка йәһәтенән һарттар, татарҙар байтаҡ түбән һаналалар. Шуның менән бергә Рәсәйҙәге татарҙар араһында Шәрҡи Төркөстан һарттарының көйҙәре бар[10].

Төрки ҡәбиләләр һис бер урында музыканы назыри белмәйҙәр. Быларҙың араһында музыка, көй берлектәренең булыуы мотлаҡ рух берлеге, традиция арҡаһында ғына килә алған. Бөтә тарихтарынан ағып килгән һәм милли хосусияттары менән айырылған музыка быларҙың йөрәктәренә III–IV быуат эсендә эҙен юғалтмаҫлыҡ дәрәжәлә ныҡ урынлашҡан. Ошонон өсөн дә беҙ башҡорт музыкаһындағы көстө Рыбаков йәнәптәре кеүек яңы бер эш тип ҡарамайынса, төрки милләтенең

тамырынан килгән милли гармония, көйҙәренең музыканы һаҡларға һәләттәре булған башҡорттар араһында барлыҡҡа килгән тип кенә ҡарайбыҙ. Академияның Ф.Корш йәнәптәре З.В.О.И.Р.А.О. йыйынтығының IX томында (1909) "Төрк халыҡтарының иҫке милли көйҙәре" тип яҙған ҡиммәтле әҫәрендә был әллә ни ҡәҙәре төрки ҡәбиләләренең һәммәһенең дә йырҙары ритм йәһәтенән бер туған булғанлыҡтарын иҫбат итте. Был да беҙҙең дәғүәбеҙгә дәлил булырға ярай.

Төрки ҡәбиләләр (әлбиттә, Иран вә ғәрәптәр тәьҫирендә булған көньяҡ төркиҙәр – ғосманлылар, Иран төркиҙәре түгел, көнсығыш һәм урта төркиҙәр) араһында ни ҡәҙәре көйҙәр булһа, һис быларҙың барыһының да асылы бер һәм былар кеүек бер бөтөндө тәшкил итәләр. Әгәр беҙҙең арабыҙҙа ысын композиторҙар һәм ошо ҡул теймәгән йәки бик аҙ ғына ҡул тейгән көйҙәрҙе йыйып бер эштәр эшләй башлаһалар, беҙҙә башҡа халыҡтар алдында маҡтанырға ярарлыҡ бер милли музыка килеп сығыр ине. Ике мең ҡәҙәре йылдарҙан бирле дауам итеп килгән милли төрки музыкаһы аяҡҡа баҫһа, ул үҙенең ҡаты ҡулы менән беҙҙе икенсе милләттәрҙең мәғнәүи тәьҫирҙәренә кереп китеүҙән тотоп торор ине.

Июлдең 13 көнө ине. Юғары Ямаш ауылында ҡурай тыңланыҡ. Ҡурайсы башҡорт Бәхтиәр әллә ни ҡәҙәре башҡорттар араһында костер алдында ултырып уйнаны. Уйнауы һәр ни ҡәҙәре бик шәп булмаһа ла, ярарлыҡ ине. Сәғәт 12-ләрҙә ҡайтып яттыҡ. Башыма Рыбаковтың әйткән һүҙҙәре һәм быңдай байтаҡ күп заттарҙың «беҙ мәҙәни кешеләр» тип ғорурланып ҡына беҙҙең өҫкә хөкөм яһаған ваҡыттарында яңылышыуҙары, бөтә ҡәбиләләрҙең көйҙәре нисек бер ергә йыйыла алғандары килделәр, йоҡларға ирек бирмәнеләр. Иптәшемдең рәхәтләнеп ғырылдап, мине ҡыҙыҡтырып, йоҡлап киткән ерендә мине ни ҡәҙәре уйҙар борсоғанын күрһәтер өсөн был урында юғары һүҙҙәрҙе яҙҙым. Волостың старшинаһы һәм башҡа чиновниктар менән бергә инек. Халыҡтың күп кенә йыйылған урынында старшинаға әйттем: «Һин старшина, ишан хәҙрәттәре кеүек халыҡҡа дин ҡушҡан вә диндарлыҡ тарафың менән генә күренергә теләйһең, боронғо кантондар кеүек ҡурайсыларҙы артыңдан эйәртеп гөрләтеп йөрөһәң ярамаҫ инеме?» – тинем. Юҡ, беҙгә ул кантондар кеүек булырға тура килмәй шул, тине. Исемдәрен яҙып алған мәшһүр ҡурайсыларҙан Ғиссам тигәнен осраттыҡ. Ҡурай уйнауын һораныҡ. Тәүбә иткән тинеләр. Үҙе лә: «Мин инде ҡурайымды һындырып ташланым», – тине, уйнаманы. Мин старшинаға ла, Ғиссам ағайға ла эсемдән көйҙөм, асыуландым. Ләкин йәнә бер һүҙ ҙә әйтмәнем; сөнки муллаларҙың музыкаға ҡаршы тәғлимәте менән ағыуланған был кешеләргә әйтеп аңлатып булырлыҡ хәл юҡ.

Ун өсөнсө быуат аҙағында татар хандары янына сәйәхәт иткән Европа сәйәхәтселәренән береһе ул ваҡыттағы бабайҙарҙы ошо һүҙҙәр менән

тәғриф итә: «Был халыҡ кәйеф-сафа мәжлестәрендә илаша, әммә һуғыш майҙандарында көлөшә торған халыҡ. Улар (төрки-татарҙар) үҙҙәренең башлыҡтарына бөтөнләй күҙ йомоп эйәрәләр. Һалҡынлыҡ һәм аслыҡ былар өсөн бер нәмә лә түгел. Һуғыш урындарында ғәҙәттән тыш ғәйрәтле, ҡыйыулыҡ урындарында түҙемдәр. Тыныслыҡ, рәхәт тигән нәмәләрҙе белгеләре лә килмәй. Ашау өсөн, кейем-һалымда тәклифтәре бер ҙә юҡ. Үҙ араларында бик берҙәм, барыһының күңеле берәү генәлер икән тип уйлайһың; һис ҡысҡырышмаҫтар, һуғышмаҫтар. Әммә дошман өсөн шәфҡәт тигән нәмәне белмәйҙәр. Шул дәрәжәлә ки, йөклө ҡатындарҙың ҡорһағынан хатта балаһын ярып алалар. Әммә биттәрендә ҡыҙғаныс әҫәре лә күренмәй...»

Бөрйән башҡорттары араһында сәйәхәттең ошо урыны хәтергә килде. Мин ул боронғо тәбиғәттең быларҙа бик әҙ әҫәрҙәре ҡалғанын белә инем. Башҡорт фетнәләренең туҡтағанына инде йөҙ илле йылдар булып китте. Һуғыш һәм һуғышсанлыҡ хаҡында боронғо йырҙар тарих биттәрендә генә ҡалалар. Иң һуңғы һөнәр күрһәтеүҙәре Наполеон һуғышында булды. Һуңғы һуғыштар инде боронғолағы кеүек айырым полк һүрәтен тотмағанлыҡтан, уларҙың һөнәрҙәрен күрһәтмәйҙәр. Башҡорт, рус, татар ғәскәрҙәре бергә булғас, айырым хөкөм сығарып булмай. Күрше ҡәүемдәрҙең тәьҫире уларҙың эске культураларына зыян иткәнен һөйләп үткәрҙек. Боронғо иттифаҡ ҡалмаған. Башҡорттарҙың кескенә ауылдарында ла халыҡ бер фекергә, бер ҡарарға килә алмай йөрөйҙәр. Күп ауылдар сабын өсөн ҡалдырылған яландарҙы сәләмәт ала алмайҙар, иғтибар итмәйҙәр, ашау-эсеү, кейем хосустарында тәклифһеҙлектәре, тормошоноң ни ҡәҙәре ауыр, уңайһыҙ булыуына бер ҙә иғтибар итмәй, зарланмай торған булыуҙарын сәйәхтең һүҙҙәрен иҫкә төшөрә.

Волостың старшинаһы беҙҙе ҡунаҡҡа саҡырҙы. Унда барғансы юлда ике-өс ауылда туҡтаныҡ. Волостың бөтә мәэмүрҙәре бергә инеләр. Башҡорттар чиновниктары килерен ишетеп торған һәм тәкә һуйып әҙерләнеп көткән була инеләр. Старшиналар менән бергә беҙ ҙә береһе артынан береһенә тәкә ашарға йөрөнөк. Бында старшина-губернатор полицмейстер урынына. Халыҡтың ихтирамы бик ҙур, хатта үҙҙәренең покорностарын күрһәтеүгә түбәнлек дәрәжәһенә етәләр.

Беҙ, төрки халҡы, ғәскәр булып тыуҙыҡ, ғәскәр булып үҫтек, ғәскәр булып ғүмер итәбеҙ. Ғәскәрлек дисциплинаһы беҙҙең ҡаныбыҙға, итебеҙгә һеңеп бөткән. Беҙҙең бөтә тарихыбыҙ был йәһәттән бер һалдаттың тарихылыр. Беҙҙең тарихыбыҙҙы ошо йәһәттән иң оҫта итеп тасуир иткән зат Леон Каэн булыр. Ул үҙенең беҙҙең тарихыбыҙға ҡараған әҫәрҙәрендә бик күп тарихи факттарҙы теҙеп алып китә лә шуларҙың сәбәптәрен эҙләй һәм, ниһәйәт, иң күберәк төркиҙәрҙең ғәскәрлегенән килгән тип бөтөрөп

ҡуя. Беҙҙең был ғәскәрлегебеҙ бөгөн бер нәмәгә лә ярамаҫ булып ҡалды. Инде беҙ унан яфа ғына сигәбеҙ. Беҙ һәр эштә үҙебеҙгә юлбашсы көтәбеҙ. Ғаяз әфәнде: "Беҙҙә егермеләп кеше бер ергә йыйылырға кеше юҡ бит, тип әйтәләр ҙә торалар», – ти ине. Һәм шулай, беҙҙә йөҙ кеше йыйылһа ла, бер башлығы булмаһа, бер эш башҡара алмайҙар. Беҙ һәр эштә бер башыраҡ, тәьҫирлерәк кешегә ҡарап эш башҡарабыҙ. Беҙҙең халыҡ боронғо заманда башлыҡтарының христиан диненә кереүе менән христиан, мосолман булыуына ҡарап, мосолман була ине. Кирәйәт ханлығының хандарына ҡарап, христиан булыуҙары, Бағдад янында ун мең сатыр төркиҙең бейҙәренә ҡарап мосолман булыуҙары был йөмләнәндер. Башҡорт, нуғай, ҡаҙаҡ хандары Рәсәй ҡулы аҫтына бирелделәр. Сөнки Ҡазан, Әстрәхан, Себер хандары быны ҡабул иткәндәр ине. Үҙҙәренең милләтенән назирҙары ла фәҡәт ғәскәрилек күҙе менән генә булғаны өсөн төрөктәрҙең икенсе милләт тәьҫиренә бирелеп китеүҙәре йәки бөтөнләй милләт алмаштырыуҙары бик еңел була ине. Һуңғы заманда беҙҙең ижтимағи, әҙәби эштәребеҙ өҫтөнән фәлсәфәүирәк итеп ҡарап торғанда, шул боронғоноң тәьҫире асыҡ күренеп тора. Мәсьәләләргә нигеҙле итеп ҡарай алмау, һәр эштә кешегә ҡарап эш ҡылыу, әлбиттә, шул иҫке тарихи ғәскәрилектең эҙҙәре инде.

"Миндеғол" ауылы. Беҙ бында волость правлениеһының өйөндә. Ул матур ғына булмаһа ла, ҙур ғына, ике көн булдыҡ. Туҡтауһыҙ ямғыр яуҙы. Ағиҙелдең буйында бик матур күренешле тауҙар араһында ултырған бер ауылдың етешлеге менән файҙалана алманыҡ. 17 июль ине, киттек. Был ауылдан ун биш саҡрым алыҫлыҡта "Мәсем" тигән бейек тауға менергә, шунан тирә-яҡты ҡарарға булдыҡ. Шул 15 саҡрым беҙгә тотош көйө тау булды. Менә-менә йөҙәп бөттөк. Минең ат насарыраҡ ине, йонсой төштө. Тауҙың башына менеп еттек, йәйләүҙәге башҡорттар менән тауҙың иң бейек ерендәге ташына менергә киттек. Башҡорт ағайҙарының аттары бик таҙа, һимеҙ, йөрөргә бик шәп, өпсөндәре (сбруйҙары) бик яҡшы – күн эйәр, күн мендәр, көмөшлө өҙәңгеләр. Тауҙың иң өҫтөндә ултырған ҙур йәйләүҙән оҙон ялан һуҙылып китә, үлән бик шәп үҫкән. "Быны сабаһығыҙмы?" – тинек. «Юҡ», – тинеләр. Ни ҡәҙәре күп яҡшы үҫкән үләндәр шул көйө ултырып ҡалалар. "Әйҙә", – тип ҡысҡырҙылар. Беҙ ҙә арттарынан киттек. Сабыша инек. Ат өҫтөндәге башҡорт ағайҙар аттары, эйәрҙәре менән бергә яратылған тотош бер нәмә һүрәтен алдылар. Һәм оҫта үткән сабышыуҙары менән боронғо төрки-татар ғәскәренең һөжүмдәрен иҫкә төшөрҙөләр. Ташҡа килеп еттек. Яланғас оло ҡая. Аттарҙы төбөнә бәйләнек тә үрмәләп менеп киттек. Тирә-яҡты ҡараныҡ. Көн бик асыҡ түгел ине. Бик йыраҡ ерҙәр асыҡ күренмәй, ләкин офоҡ сикһеҙ киң. Ҡояш сығышы тарафында йөҙ егерме саҡрым

алыҫлыҡта “Ирәндек” тауҙары тинеләр. Улар күренә. Башҡа йәһәттәрҙә тағы шундай тауҙар. Был тау – Мәсем, Уралдың был тирәһендә иң бейек ере тинеләр. Ҡулыбыҙҙа Урал географияһы тураһында бер нәмә лә юҡ ине. Бейеклеге ни ҡәҙәре икәнен белмәнек. Ҡарап торҙоҡ. Менгән кешеләр исемдәрен-ниҙәрен яҙып ҡалдырыр өсөн бағана ҡаҙағандар, беҙ ҙә бында яҙҙыҡ. Беҙ таштан төшкәндә, тауға болот килеп етте. Болот булһа, бында томан булып, донъя ҡаплана ла китә. Юл менән йәйләүгә саҡ барып еттек. Алағуян тамағы йәйләүе. Бындағы бөрйәндәр икенсе йәйләүгә күсеү мәсьәләһе менән шөғөлләнәләр. Мулла Ғабдрахман ағайға төштөк. Һаман томан, бер нәмә лә күренмәй. Сәй эсергә ултырған урында янымыҙға бер ағай килде. Хужабыҙ менән Стерлетамаҡтан мәрхүм Ҡарый Бәҙрәтдиндең ошо йәйләүгә таштарҙы ҡарарға ни ваҡыт килгәнен һөйләштеләр. Килгән кеше “Барыһ” йылында ине тинеләр. Шунын менән һүҙ бөттө. Ул заманды һағынып һөйләп ҡуйҙылар. Барыһ йылы - барыҫ, юлбарыҫ, тимәктер. Был 1902 йыл йәки 1890 йыл булһа кәрәк. Бындағы кешеләрҙә әле йылды боронғо тәртип менән хисаплау бар икән. Урыны килгәс, шуны ла әйтеп китәйек. Мөғәллим Хәсән Ғәли әфәнде 1912 йылғы «Шура» номерында “Көндәр, айҙар, йылдар исемдәре” тип мәҡәләләр яҙған ине. Бында ул төрки халҡында тарих тәртиптәрен яҙған һәм йыл, ай исемдәрен һөйләгән. Хәсән Ғәли әфәнде мәҡәләләрендә беҙ байтаҡ ҡыҙыҡлы, ләкин беҙ белгән ваҡиғаларға хилаф фекерҙәр, һүҙҙәр табабыҙ. Унын шуныһы ғәжәп, ул яҙыуҙарында һис бер ваҡыт сығанаҡтарын күрһәтмәй, шикһеҙ үҙенең тырышлығы менән табылған, беленгән нәмәләрҙең нәмәләр икәнен дә әйтмәй. Уҡыусы бөтөнләй аптырап тора ла ҡала, быларға ышанырғамы, юҡмы? Ошо йылдың башындамы икән “Шура”ла ул зат “Төркиҙәрҙә заң һәм яһаҡтар” тип бер мәҡәлә яҙҙы. Бында ул төрки телендә ғөрөф-ғәҙәт мәғәнәһендә булған “заң”ды бер ҡанун нәмә кеүек әйтеп күрһәтә. Беҙ, төркиҙәргә ҡарап, заң һәм яһаҡтар нисек булғаны хаҡында иң һуңғы хаслы тәфтиштәрҙән беләбеҙ. Быларҙың береһе профессор Березин 61-се йылда “Труды Вост. Отд. И.Р.А. общ.”нын VIII томында “Внутреннее устройство улуса Джучиева” исеме менән баҫтырған яҡшы тәхҡиҡәтле мәғлүмәт бирҙе. А.Ай.Бурманд йәнәптәре 1904 йыл Ҡазан тарих йәмғиәте йыйынтығының егерменсе томында “Степное законодательство древних времен” тип мөһим әҫәр баҫтырҙы һәм 1907 йыл З.В.О.И.Р.А.О. йыйынтығында Сынғыҙҙың Ҡытайҙағы ейәне, Ҡубилай хандан ҡалған уложениенан Сынғыҙҙың яһағы табылып, бер бик мөһим әҫәр баҫылды. Яһаҡ һәм төрки халҡының низамдары хаҡында сыҡҡан барлыҡ төплө әҫәрҙәр шулай. Хәсән Ғәли әфәнденең яҙғандары бындағы ғилми тикшеренеүҙәрҙең һис береһенә лә тура килмәй. “Заң” тигән бер ҡанундың барлығын ҡайһы ерҙән алған икән? Хәсән Ғәли

әфәнде бындағы дәғүәләрен иҫбат итһә лә яҡшы булыр ине. Ошондой йылдың айҙары һәм тарих тәртибе хосусындағы фекерҙәре лә шулай. Профессор Катанов үҙенең әҫәрҙәрендә (мәҫәлән, “Записки геогр. общ. по отд. этногр.” 1819. Т. XVII әҫәрендә) төрки телдәрендәге ун ике ҡояш айҙары хаҡында, академик Шефер 1857 йыл Академия “Melanges Russes” журналында төрки халыҡтарындағы ун өс ай хаҡында яҙғандыр. Бының өҫтөнә Катанов йәнәптәре шәхси һөйләшеүебеҙҙә был хаҡта йәнә мәғлүмәт бирҙе. Быларҙан алған мәғлүмәтебеҙ Хәсән Ғәли әфәнде фекерҙәренә бер ҙә тура килмәй. Көн исемдәре хаҡында Хәсән Ғәли әфәнденең мәғлүмәте бик һай. Шаршамбы көнөнөң исемен белмәгәнен үҙе үк таный. Айҙар тураһындағы фекерҙәр ҙә шундай уҡ. Хәсән Ғәли әфәнде хәҙерге матбуғатта бик ҡыҙыҡ булған шул фекерҙәрҙе ҡайҙан алған йәки тапҡан булһа, нисек тапҡан икәнен бәйән итһә, яҡшы булыр ине.

Татар араһында йылды әүәл боронғо ун ике исем менән һанау инде онотолоп ҡулланыуҙан сыҡҡан буғай. Булған ҡәҙәре лә китап тирәһендә генә ҡалған кеүек күренә. Әммә башҡорт һәм типтәрҙәр араһында был әле һаман ҡулланыуҙан сығып бөтмәгән һәм ҡайһы ағайҙар был йылдарҙы миләди хисапҡа ҡайтарып әйтә белмәйҙәр. Был хәл ҡаҙаҡ араһында тағы ҡеүәтлерәк, тип уйлаймын.

Мәсем тауы һәм йәйләүҙәрҙән беҙ, ямғырлы көн ине, 17 июлдә киттек.

Аңлатма: Юғарылағы яҙыуҙарымда бәғзе бер китаптарҙың баҫылған йыл йәки том һәм бүлек номерҙарын күрһәтеүҙә яңылышҡандарым да булғандыр. Ҡымыҙ ерендә китапһыҙ урында булыуымды иғтибар итеп, уҡыусыларҙың кисереүҙәрен үтенәм.

*(«Шура» журналы. 1913 йыл. № 19–22).*

---

[1] Юл ыңғайында шуны әйтеп китәйек: төрки телендә «р» хәрефе менән башланған һүҙ юҡ. Шуның өсөн төрки һүҙе булған «ыруғ» һүҙен «руғ» тип яҙыу хата.

[2] Уның Бәләбәй өйәҙенә 1867 йылғы сәйәхәтенең отчетын ҡарағыҙ.

[3] Этнический состав тюркских племен. СПб., 1867. С.132.

[4] Фәндәр академияһының Тарих һәм тел бүлегенең запискаларын (1897 йыл. 1-се том, 109-сы б.), Һаҙый Атласи быйылғы “Шура”ның 9–10-сы һандарында башҡорттарҙың хатта Ибн Фаҙлан ваҡыттарында (һижри IV быуат баштарында) уҡ ошо урындарында булыуҙарын һөйләгән. Ләкин Гардизиҙың “Зәйн әл-әхбәр” исемле һижри 442 йылда яҙған әҫәре уға мәғлүм булмаған һәм

ул бәжәнәк халҡының ҡайҙа тороуы хаҡында яңылышҡан. Ошонон өсөн ул көньяҡ-көнсығышҡа һуҙылырға тейеш булған урынды 20 мәрхәлә төньяҡҡа һуҙған.

[5] "Живая старина", 1896. Вып. III–IV һәм «Мөстафад әл-әхбәр», I т. 102-се б.

[6] М.М.Готовицкий һәм Пфеннингтарҙың ҡырғыҙ һәм һарт йыр һәм көйҙәре хаҡында «Этнографическое обозрение» журналының 1889 йылғы 3-сө китабында яҙған мәҡәләләрен һәм Миллерҙың 1903 йылда Мәскәүҙә нәшер ителгән ғосманлы төрөктәренең көйҙәрен ҡарағыҙ.

[7] "Живая старина", 1894. Вып. III–IV. С.354–364.

[8] Труды Восточного отд. Имп. Рус. Арх. Общ. СПб., 1856. Т. IV. Бында Васильевтың Урта Азия тарихына ҡараған ҡытайсанан тәржемә иткән әҫәренең һәм Кулибаевтың монгол-татарҙарҙың ғәҙәттәре тураһында яҙған әҫәренең музыка бүлектәрен ҡарағыҙ.

[9] В.Григорьев. Восточный Туркестан. СПб., 1863. Т.II. С.267–270.

[10] "Этнографическое обозрение", 1899. Книга 3-я. С.91.

# Йөкмәткеһе

*Беренсе бүлек*

Ә.ВӘЛИДИЗЕҢ ҒИЛМИ ЭШМӘКӘРЛЕГЕНЕҢ БАШЛАНҒЫС ОСОРО ҺӘМ ДОНЪЯҒА ҠАРАШЫНЫҢ ҮҪЕҮЕНДӘ РӘСӘЙ ШӘРҠИӘТСЕЛӘРЕ ӘҺӘМИӘТЕ ........ 17

Эшмәкәрлегенең башланғыс осоро ........ 17
Ә.Вәлиди мосолман ғалимдары тураһында ........ 26
Ә.Вәлидизең ғилми эшмәкәрлегендә Рәсәй шәрҡиәтселәренең әһәмиәте ........ 36

*Икенсе бүлек*

Ә.ВӘЛИДИ – ТӨРКИ ХАЛЫҠТАРЫНЫҢ ТАРИХЫН ӨЙРӘНЕҮСЕ ........ 58

"Төрк вә татар тарихы" һәм уның әһәмиәте ........ 58
Башҡорттарҙың тарихы һәм этнографияһы буйынса хеҙмәттәр ........ 69
Урта Азия халыҡтарының рухи мираҫын өйрәнеү ........ 87

ЙОМҒАҠЛАУ ........ 118

Сығанаҡтар һәм әҙәбиәт ........ 121

ҠУШЫМТА ........ 132



[redacted]

Научное издание

**Ахат Салихов**

# НАУЧНАЯ ДЕЯТЕЛЬНОСТЬ АХМЕТЗАКИ ВАЛИДИ В РОССИИ

Компьютерный набор и редактирование: А.Г .Салихов
Художник: М.Л. Ахмадуллин

Подписано в печать 15.12.2005 г.
Формат 60x84 1/16 Бумага типографская.
Гарнитура «Таймс».
Усл.печ.л. 10,3. Уч.-изд.л. 10,7.
Тираж 500 экз. Заказ № 012.

Издательство «Нефтегазовое дело»,
450055, г. Уфа, Пр. Октября, 144/3, оф. 418.
Тел.: (3472) 31-39-49.
E-mail: orient@ufacom.ru

Подготовлено и отпечатано в издательстве ООО «Восточная печать»,
450080, г. Уфа, ул. Менделеева, 195/2
Тел.: (3472) 74-11-08

بسم الله الرحمن الرحيم